# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ

# 9







Р. Зәйнетдинов, Г. Калитов. «Ер рухы» триптихының 2-се өлөшө.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ 9

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Б28

## Шартлы тамғалар

— һүҙлек эше
— әҙәби-теоретик төшөнсә
— тасуири уҡығыҙ
— ятлағыҙ
— парлашып йәки төркөмдә эшләгеҙ
— иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ
— өҫтәмә уҡыу өсөн
— проект эше
— ижади эш
— дөрөҫ уҡығыҙ
— тел материалына аңлатма
— өйҙә ололар ярҙамында эш
— тәржемә итегеҙ

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте** : уҡытыу рус телендә алып
Б28 барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [авт.-төҙ.: В. И. Хажин, Ә. Х. Вилданов, Ф. Ә. Аҡҡужина, М. И. Ҡарабаев]. – Өфө : Китап, 2017. – 268 бит.

ISBN 978-5-295-06741-9

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП – 086/17**

**ISBN 978-5-295-06741-9**

© Хажин В. И., Вилданов Ә. Х.,
Аҡҡужина Ф. Ә., Ҡарабаев М. И., 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан
«Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# ТЕРЕ ШИШМӘЛӘР

*Рәми Ғарипов*

## ТЕЛ

Тыңлап таңға ҡалған тел,
Йәнгә рәхәт һалған тел,
Яулап-ҡурсап ҡалған тел,
Ҡан-йәш түгеп алған тел.

Күреп ирек емеше,
Киреп бәхет өлөшө,
Һаҡлар һине һәр кеше,
Яҡлар һине һәр кеше.

Телһеҙ инек – тел алдыҡ,
Илһеҙ инек – ил алдыҡ,
Һинең менән тәйән беҙ
Яҡты таңға ҡуҙғалдыҡ,
Үткәнгә үрт, ҡуҙ һалдыҡ...

* * *

Үткәнгә үрт һалмағыҙ,
Тик үрелеп ҡарағыҙ,
Яҡын булыр арағыҙ...
Йөрәктәге ярабыҙ
Уңалып та бөтмәгән,
Тағы ярып барабыҙ...
Бөтә даһи һөйләшерлек,
Бөтә ғашиҡ серләшерлек,
Тыңлап һүҙен көнләшерлек,
Аңлашырлыҡ уртаҡ тел

Бөтә телдә табылыр.
Телде телдәр хушһынмаһа,
Артылмаҫлыҡ тау булыр,
Булмаҫ дуҫлыҡ, дау булыр,
Дау артынан яу булыр.

* * *

Көслөк менән тел булмаҫ,
Үслек менән ил булмаҫ,
Көс үҙенә көс табыр,
Үс үҙенә үс табыр.
Ҡыҙыл ҡандар түгелгән,
Күп ҡорбандар бирелгән
Ошо ғәзиз тел өсөн.
Бар донъяны байҡап сыҡ,
Юҡһылын да табырһың,
Дуҫыңды ла табырһың,
Дошманға ла барырһың...
Йөрөй-йөрөй арырһың,
Илең һағынып янырһың...

1. *Таңға ҡалыу, йәнгә рәхәт һалыу, үткәнгә үрт һалыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
2. Шағир туған телен тыңлап таңға ҡала. Ул тел йәнгә рәхәт һала, ти ул. Һеҙ үҙегеҙҙең туған телегеҙ тураһында шулай тип әйтә алаһығыҙмы? Бының өсөн нимә кәрәк?
3. 3-сө строфаның тәүге ике юлына иғтибар итегеҙ. Әңгәмәләшегеҙ.
4. 2-се, 3-сө бүлексәләрҙең фекеренә иғтибар итегеҙ. Шағир ниндәй уртаҡ тел тураһында һүҙ алып бара? Ул нимә тураһында иҫкәртә?
5. Р. Ғариповтың «Туған тел» шиғырын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Ике шиғырҙы сағыштырып, уларға һалынған фекерҙең уртаҡ яҡтарын табығыҙ.
6. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ. Тәүге 3 строфаны ятлағыҙ.

## Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау

Башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә бөтәһе 33 өн бар. Шуларҙың 24-е – тартынҡы өн, ә 9-ы – һуҙынҡылар. Тартынҡылар яңғырау, һаңғырау, талғын өндәргә бүленә. Был бүленеш, тартынҡы өн яһалғанда, тауыштың булыуына, булмауына һәм күпме булыуына бәйле.

Яңғырауҙар – *б, г, ғ, д, ҙ, ж, з, һ* – барлығы 8.

Һаңғырауҙар – *п, к, ҡ, т, ҫ, ш, с, х, ф* – барлығы 9.

Талғындар – *й, л, м, н, ң, р, у* – барлығы 7.

Яңғырау өндәренең бөтәһенең дә һаңғырау парҙары бар, һәм уларҙың хәрефтәре алфавиттың тәүге өлөшөндә (*һ* өнөнән башҡа) урын алған. Һаңғырауҙарҙың ике ирен менән әйтә торған *ф* өнөнөң генә яңғырау пары юҡ.

Рус телендә лә өндәрҙең быңдай бүленеше бар: звонкие, глухие, сонорные согласные звуки. Тик бында тағы ла йомшаҡ һәм ҡаты (мягкие и твёрдые) тартынҡылар бар. Башҡорт телендә тартынҡыларҙың ҡалынлығы, нәҙеклеге билдәләнмәй, уның урынына һуҙынҡылар ҡалынға һәм нәҙеккә бүленә: ҡалындар – *а, о, у, ы;* нәҙектәр – *ә, ө, э(е), и, ү.*

Башҡорт теленең законы буйынса, һүҙҙә йә ҡалын һуҙынҡы ғына була, йә нәҙеге генә: *балалар, буранда, былтырғы; киләләр, йөрөйҙәр, күңелле.*

Бындай күренеш **сингармонизм** тип атала.

**1-се күнегеү.** Үрҙә бирелгән информацияға ҡарата һорауҙар төҙөгөҙ.

**2-се күнегеү.** «Тел» шиғырынан ҡалын һуҙынҡылар һәм нәҙек һуҙынҡылары булған 4-әр һүҙ яҙып алығыҙ.

**3-сө күнегеү.** Һорауҙарға һәм эштәргә яуап бирегеҙ.

1. Башҡорт һүҙҙәренең башында ниндәй тартынҡылар килә алмай?
2. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һанағыҙ.
3. Башҡорт телендә һуҙынҡыларҙы ни өсөн ҡалындарға һәм нәҙектәргә бүләләр?
4. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар менән генә айырылған бер нисә пар һүҙ яҙығыҙ. Тартынҡыларҙа үҙгәреш булдымы?

### Өндәргә фонетик анализ яһау тәртибе

1. Һуҙынҡы өн, тартынҡы өн.
2. Һуҙынҡы: ҡалын, нәҙек.
3. Тартынҡы: яңғырау, һаңғырау, талғын.

*Баязит Бикбай*

## ТЕРЕ ШИШМӘЛӘР

*(өҙөк)*

Иртәгеһен көн нимә менән үткәндер – хәтеремдә ҡалмаған. Ололар кемгәлер ҡунаҡҡа киттеләр шикелле. Кем белә, бәлки, ул саҡта дан тотҡан Ҡасим йәки Саҙрый бай трактирҙарының береһенәлер... Кискә табан беҙ, малайҙар, урамда уйнап йөрөй инек, ҡапыл: «Пожар! Пожар!» – тигән тауыш ҡупты. Сиркәү ҡағалар. Халыҡ ҡайҙалыр йүгерешә. Беҙ ҙә шул халыҡ ағымына ҡушылып киттек. Буталыш, ығы-зығы башланды. Бергә килгән малайҙар әллә ҡайҙа булды, ә нисек кире ҡайтырға белмәйем. Ярай әле йондоҙло бер сиркәү хәтерҙә ҡалған. Төшкән фатирыбыҙ шуның тирәһендәрәк ине. Уны «йондоҙло сиркәү» тип башына тәре урынына ниндәйҙер йондоҙ ҡуйған өсөн түгел, ә күк төҫтәге көмбәҙенә ялтыр ҡалай йондоҙҙар беркетеп биҙәгәнгә күрә әйтәләр икән. Мин шулай сиркәү яғына ыңғайланым. Күпме йөрөгәнмендер – белмәйем. Көтмәгәндә атайымдар осраны. Улар мине эҙләп сыҡҡандар икән. Ҡыҙыҡ: әгәр улар осрамаһа, мин, бәләкәс малай, ҡала урамында аҙашҡан ауыл көсөгө һымаҡ, юғалып ҡалмаҫ инемме икән?..

Ҡайтҡас, әлбиттә, был дыуамаллығым өсөн бер аҙ эләкте. Ярай әле, малай кеше аҙашмай ул, тип, Базу бабай яҡлашты. Мин йондоҙло сиркәү тураһында әйткәс, ул: «Молодец! Ярай әле үргә ҡарағанһың, ә ҡапҡа төбөндә ятҡан ҡара һыйырҙы төҫмөрләп китмәгәнһең», – тип, мине алдына ултыртып һөйҙө лә шундай бер көләмәс һөйләп ташланы. Имеш, минең кеүек бер бәләкәй малай атаһы менән ҡалаға килгән. Урамдарҙы ла, кешеләрҙе лә белмәй. Ә ҡала бик серле, мауыҡтырғыс тойола быға. Атаһы баҙарға күмер һатырға киткәс, малай ҡаланы күреп килергә булған, ти. Ҡапҡанан сыҡҡан саҡта, ҡояшҡа ҡабырғаһын ҡыҙҙырып ятҡан ҙур ҡара һыйырҙы күргән дә: «Әһә, ошо һыйыр ятҡан урынға әйләнеп ҡайтырмын», – тип самалап киткән. Байтаҡ ҡына йөрөгәс, кире ҡайтырға була был малай. Ҡара һыйыр ятҡан ҡапҡа төбөн эҙләп, ары һуғыла, бире һуғыла, ә һыйыр бер ҡайҙа ла юҡ. Малай үҙҙәре төшкән фатир янынан әллә нисә тапҡыр үтеп киткән, ә өйҙө танымай икән. Шулай көнө буйы ҡаңғырып йөрөгән ул. Теге ҡара һыйыр, ҡыҙынып бөтөп, кире көртәгә ингән дә киткән икән. Асығып, илап бөткән малайҙы атаһы, баҙарҙан ҡайтҡас ҡына, был бәләнән ҡотҡарған, ти.

Ололар уның һөйләгәненә көлөштөләр. Мин эстән генә шатландым: тимәк, мин, теге малай һымаҡ, бөтөнләй үк төшөп ҡалғандарҙан түгел икән әле. Мин, ысынлап та, шаҡтай отҡор малай булып үҫеп килә инем шикелле. Беҙ әсәйем менән Деловка ауылында йәшәгән олатайымдарға, әсәйемдең атаһы Сәләхи Әмирхановтарға аҙна һайын тиерлек бара торғайныҡ. Унда мин күрше рус малайы Толя менән туйғансы уйнайым. Күрәһең, ошо аралашыу һәм олатайымдың тырышып «Азбука» уҡытыуҙары телемде асҡандыр – мин аҙыраҡ урыҫса һупалай инем инде. Хәҙер уйлауымса, ошо тел ярҙамы менән дә фатирҙы тапҡан булыр инем, бәлки. Тел диңгеҙ кистерә. Урыҫса әйтһәң, Киевҡа ла еткерә бит. Күп йылдар үткәс, Толя тураһында:

*Толя, Анатолий...*
*Балалыҡ дуҫым ҡайҙа?*
*Ул өйрәткән ине өс һүҙ:*
.....................................

тип шиғыр яҙасағымды мин башыма ла килтермәй инем...

1. *Төшөп ҡалғандарҙан түгел* тип кемгә әйтәләр? Уның мәғәнәһе нимәлә? Һеҙ үҙегеҙҙе шулар иҫәбенә индерә алаһығыҙмы? Ғөмүмән, төшөп ҡалмаҫ өсөн (нимәнән?) ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк?
2. Бөтөнләй сит мөхиттә, ят кешеләр араһында уларҙың телен бөтөнләй белмәгән кешенең кисерештәрен күҙ алдына килтерергә тырышығыҙ. Үҙегеҙҙе әлегә бәләкәй малай урынына ҡуйып ҡарағыҙ. Күп тел белеүҙең әһәмиәте тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ.
3. Телевидениела «Башҡорт телен өйрәнәм» тапшырыуын алып барыусы рус егете Вячеслав Черневты күргәнегеҙ барҙыр. Ул 8 телдә иркен һөйләшә, 30-лап телдә аңлаша ала. Һеҙҙеңсә, шулай күп тел белеү өсөн нимә кәрәк? Үҙегеҙҙе уның урынына ҡуйып ҡарағыҙ ҙа һеҙгә ниндәй мөмкинлектәр асыласағын күҙ алдына килтерегеҙ.
4. Б. Бикбайҙың «Рус теле» шиғырын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

## РИФ МИФТАХОВ

*(1939)*

Риф Фәйзрахман улы Мифтахов 1939 йылдың 17 сентябрендә Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуған. Күренекле шағир һәм прозаик. «Фатихаңды бир, әсәй»,

«Сабый сәңгелдәге янында», «Һалдат васыяттары», «Ағиҙел» поэмалары, лирик, сатирик, юмористик шиғырҙары, «Күҙ йәштәре» повесы киң билдәле. Ундан артыҡ китабы донъя күргән.

Салауат Юлаев ордены кавалеры.

## МИРАҪ

*Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ*
*ҡәҙерле булыр.*

Тыуғанымдан киткәнемә тиклем –
Ғүмер буйы йыйған милкемде,
Улым, ҡыҙым, һеҙгә ҡалдырамын
Иң ҙур мираҫ – туған телемде.
Ул миңә лә әсәй-атайымдың
Иң берҙән-бер ғәзиз мираҫы.
Ул да һеҙгә ғүмер буйы ерҙә
Һулар һауа кеүек булһасы.
Мең йыл буйы халыҡ аҡылының
Мең тылсымын йыйған хазина,
Юҡ, һатылмай, сөнки мөмкин түгел
Баһа ҡуйыу уның хаҡына.
Күкрәк һөтө, бишек йыры менән
Ингән дә ул йәнде имләгән.
Юҡҡамы ни кеше туған телен
Тыуған иле менән тиңләгән!
Ратҡанда – бал-май булып тамған,
Нәфрәттәрҙә – уҡтай ҡаҙалған.
Быуаттарҙың гөлө һәм көлөнән –
Халыҡ яҙмышынан яралған…
Халҡым барҙа туған телем булыр,
Тик һеҙ уға ғәмһеҙ булмағыҙ.
Яҙыҡ булыр әгәр үҙегеҙҙе
Аманаттан өҫтөн ҡуйһағыҙ…
Олатайҙарҙан, әсәйемдән алған,
Ғүмер буйы йыйған милкемде,
Улым, ҡыҙым, һеҙгә ҡалдырамын
Бөйөк мираҫ – туған телемде.

1. Шиғырҙың тәүге юлына иғтибар итегеҙ. Шағир бында ниндәй «китеү» тураһында һүҙ алып бара? Атай-әсәйҙәрегеҙҙән һорағыҙ: ни өсөн кешеләр бындай осраҡта нәҡ ошо һүҙҙе ҡуллана, ә ошо мәғәнәне биреүсе һүҙҙең үҙен ҡулланыуҙан тыйылалар икән?
Ошо *«китеү»* һүҙенең синонимдарын табып яҙығыҙ һәм уларҙың ниндәй кешегә ҡарата әйтелгәнен асыҡлағыҙ. Миҫалдар:
*Үлде –*
*Дөмөктө –*
*Сәсрәне –*
*Яҡты донъя менән хушлашты –*
...
2. Улына, ҡыҙына ҡалдырған туған телен шағир иң ҙур мираҫ тип атай. Һеҙҙеңсә нисек: ошондай мираҫтан мәхрүм ҡалған, йәғни туған телһеҙ кешеләр ҙә буламы? Туған телде әсә теле, тиҙәр. Әсәй бирәү генә була. Ә туған тел? Фекер алышығыҙ.
3. Шағир улына, ҡыҙына (йәштәргә) ниндәй аманат әйтә? Тексттан миҫалдар килтерегеҙ.
4. Тел тураһында рус, татар шағирҙарының әҫәрҙәрен иҫкә төшөрөгөҙ. Шағирҙарҙың телгә мөнәсәбәтендә уртаҡ яҡтарҙы табығыҙ.

*Таңһылыу Ҡарамышева*

## ҺҮҘ

Бер ауыҙ һүҙ: йылы, иркә...
Йәнгә туңған боҙҙо ҡай саҡ
Иретергә шул да етә.
Бер ауыҙ һүҙ: һалҡын, тупаҫ...
Сәскәләге һөйөнөстө
Ҡырау төҫлө һуға тоташ.
Һүҙ дауалай, һүҙ таҙалай.
Һүҙ яралай, һүҙ язалай.
Һүҙ ағарта, һүҙ ҡаралай.
Күңелдәргә һүҙ һыя алмай –
Телдән оса тыйыла алмай,
Ниҙәр генә ул ҡыла алмай!
Нисек кенә һүҙ ҡыланмай:
Батырлана, йә ҡыя алмай,
Тәүфиҡлана, йә оялмай.
Яуызлана, изгеләнә,

Ойоп китә, һиҙгерләнә,
Даулай, яулай йә теләнә…
Һүҙ – хис-аҡыл, ул – мөхәббәт.
Һүҙ – илһам ул. Ул – мәрхәмәт.
Һүҙ – илаһи! Һүҙ – мөһабәт!
Һәм һүҙ – хөкөм: ҡәһәр, ҡарғыш.
Һүҙ – тормош ул: хәтәр алыш!
Һүҙ – ул үҙе тере яҙмыш.

**1.** Шиғырҙы тасуири итеп уҡып сығығыҙ. Унда «Йылы һүҙ – йән аҙығы» тигән мәҡәлдең мәғәнәһенә тап килгән юлдарҙы табығыҙ.

**2.** 3-сө строфаны иғтибар менән уҡығыҙ. Ундағы һәр һөйләмдең мәғәнәһен аңлатығыҙ, миҫалдар килтерегеҙ.

**3.** Һүҙ, һүҙҙе белеп һөйләү тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр табығыҙ, уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Үҙегеҙҙең тормош тәжрибәһенән сығып, ололарҙан һорап, миҫалдар килтерегеҙ.

**4.** Әнүр Вахитовтың «Һүҙ хаҡында баллада» әҫәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Әҫәр геройының, ауыл халҡының яҙмышында урынһыҙ әйтелгән һүҙҙең ниндәй фажиғәгә килтергәнен һөйләгеҙ.

**5.** Текстан һүҙҙең бөтә мөмкинлектәрен табып, яҙып алығыҙ, уларҙың һәр береһенә үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы белдерергә тырышығыҙ. Кешеләрҙең донъяға, төрлө ваҡиғаларға ҡараштарын, бер-береһенә мөнәсәбәттәрен, хис-тойғоларын белдергән телмәрҙән башҡа уның был үҙенсәлектәре асыламы? «Һүҙҙең көсө» тигән темаға фекер алышығыҙ.

**6.** Шиғырҙы ятлағыҙ.

**4-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

Һыя алмай, тыйыла алмай, ҡыла алмай, ҡыя алмай, бара алмай, һөйләшә алмай.

Тәүге һүҙ һуҙынҡыға бөтһә, ә икенсеһе һуҙынҡыға башланһа, һәм был ике һүҙ паузаһыҙ әйтелһә, бер һуҙынҡы ҡыҫҡара: ике ауыл (и-ка-уыл), яңы ауыл (я-ңа-уыл), егерме ике (йе-гер-ми-ке).

**5-се күнегеү.** Ағас исемдәрен рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ҡайын, ҡарағай, ҡыҙыл шыршы, (ҡара) шыршы, ҡарағас, имән, муйыл, мышар (миләш), уҫаҡ, йүкә, тал, ерек, ҡарама, саған.

## ИҘЕЛ ХӘЛИМОВ

*(1959)*

Иҙел Хәмит улы Хәлимов 1959 йылдың 7 июлендә Ейәнсура районы Байыш ауылында тыуған. Шағир, ҡурайсы, композитор. «Аҡ ҡауырһын», «Дан һиңә, Салауатым!», «Һөйөү көсө», «Яҙмыш йөгө» исемле шиғыр һәм йыр китаптарының авторы. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

## ТӨНГӨ МОҢ

Төнгө вокзал.
Унда сиған улы
Моңло итеп йырлап ебәрҙе...
Йоҡомһорап торған уй-хистәрем
Ошо моң артынан эйәрҙе.
Ете ят ерҙәрҙә ят әҙәмдәр
Ятһыныр, тип тормай, тартынмай,
Бала йырлай, йырлай үҙ телендә...
Күңелкәйҙәремде моң сорнай.
Күпме бала тыуған ҡалаһында,
Мәктәбендә, тыуған илендә,
Моңло итеп йырҙар йырлау түгел,
Һөйләшә алмай туған телендә –
Ата-әсәһенең өйөндә!
Ишетмәй ул бишек көйөн дә!
Шуға ят ерҙәрҙә, ятһынмайса,
Йыр йырлаған сиған балаһын,
Иң ҡәҙерле бер туғаным күреп,
Ҡосаҡлап уҡ килде алаһым!

1. Шиғырҙа һүрәтләнгән ситуацияны күҙ алдына килтерегеҙ. Сиған балаһының, һис тартынмайынса, ят кешеләр алдында үҙ телендә йырлауын һеҙ нисек баһалайһығыҙ? Үҙегеҙҙе уның урынына ҡуйып ҡарағыҙ. Башҡорт (татар, сыуаш, мари) балаһы төнгө вокзалда үҙ телендә йырлар инеме икән? Әңгәмәләшегеҙ.
2. Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» әҫәрен класта ҡысҡырып уҡығыҙ. Шағирҙар күтәргән проблеманың асылын асыҡлағыҙ. Фекер алышығыҙ.

## КЕНДЕГЕМДЕ КИҪКӘН ЕР

*Риф Мифтахов*

### КҮРҘЕМ ҺИНЕ

Юлдарыңдан күпме атламаным,
Күктәреңә күпме баҡманым –
Өр-яңыса күрҙем ер-һыуыңды,
Өр-яңыса ҡояш ҡалҡҡанын.
Нисә тапҡыр Ағиҙелгә төштөм:
Һоҡландырҙы тәүләп күргәндәй.
Ирәндеккә баҫһам – ирәйҙе йән,
Күк толпарҙа күккә менгәндәй.
Мәсетленең һөттәй ҡайындары,
Инйәрҙәге шәмдәй шыршылар,
Алыҫ китһәм, һағын, тигән төҫлө,
Күҙ алдымда баҫып торҙолар.
Ишембайға ҡайтһам, яҡташтарҙың
Һәр ҡарашы йәмгә булды,
Илеш ерендәге башаҡ шауы
Ҡурай моңо һымаҡ тойолдо.
Белореттың ҡорос сыңдарында,
Хәйбулланың дала йәмендә,
Бөрйәндәге тауҙар ҡосағында
Тәтешленең шишмә тәмендә
Күрҙем һине, Башҡортостан – илем!
Ҡайҙа ғына аяҡ баҫһам да,
Бәхет йыры булып сыңлайһың һин
Ай батҡанда, ҡояш ҡалҡҡанда…

**1.** Таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлап китегеҙ.
**2.** Тәүге строфаға иғтибар итегеҙ. Шағир *юлдарында атламаным (барманым), күктәреңә баҡманым (ҡараманым)*, ти. Ә үҙе *күрҙем*, ти. Эш нимәлә? Аңлатығыҙ.

3. Шағир Башҡортостан төбәктәренең һәр береһенең үҙенсәлекле, уларға ғына хас яҡтарын телгә ала. Һеҙ үҙегеҙҙең төбәккә (районға, мәҫәлән) хас, уны башҡа яҡтарҙан айырып торған ниндәй үҙенсәлектәрҙе билдәләр инегеҙ?
4. Шағир Башҡортостандың образын үҙенсә тыуҙырған, үҙенсә күргән. Һеҙ уны нисек тасуирлар инегеҙ? «Башҡортостан» (исеме бүтән булырға ла мөмкин) тигән шиғыр, нәҫер йәки кескәй хикәйә яҙығыҙ. Яҙмаларығыҙҙы бер-берегеҙгә уҡып, фекер алышығыҙ.
5. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Баҫым

Башҡорт телендә баҫым күп осраҡта һүҙҙең һуңғы ижегенә төшә. Һүҙ баҫымының шундай үҙенсәлеге бар: ул һуҙынҡының сифатын (артикуляцияһын) үҙгәртмәй, баҫым төшкән һуҙынҡы көслөрәк һәм һуҙыбыраҡ ҡына әйтелә. Бер нисә осраҡта баҫым һүҙҙең алдағы ижектәренә лә төшә ала. Тағы ла, башҡорт телендәге һүҙ баҫымының экспрессив мәғәнәһе лә бар. Әйтеү маҡсатына ярашлы, баҫым үҙенең ғәҙәттәге урынын үҙгәртә ала.
Ҡарағыҙ: 1. *Ҡа́йтма* – ғәҙәттәге урын;
*ҡайтма-а́* – үтенеү, ялбарыу.
2. *Берә́ү килә, егермé кеше* – ғәҙәттәге урын.
*Бéрәү, и́кәү, ө́сәү,... é гер ме* – һанағанда баҫым тәүге ижеккә күсә.

**6-сы күнегеү.** Миҫалдарҙы уҡығыҙ. Бирелгән һүҙҙәрҙә баҫым һуңғы ижеккә ҡуйылмай. Үҙегеҙ ҡағиҙә сығарығыҙ.

Атламаным, баҡманым (юҡлыҡ ялғауы), өр-яңыса, минеңсә (рәүеш), һөттәй, шәмдәй (сифат), һағын, көтөгөҙ (бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары), ләкин, сөнки, хатта (теркәүес), нисә, ҡасан, ҡайҙа (һорау алмаштары).

**7-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙең баҫымына иғтибар итегеҙ. Үҙегеҙ шундай дүртәр миҫал яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| уҡыма́ | уҡыма́ҫ |
| һөйләмә́ | һөйләмәҫһе́ң |
| теләмә́ | теләмәҫтә́н |
| туйманы́ | туйма́ҫ |

*Кәүсәриә Шафиҡова*

## ТЫУҒАН ЯҠ

Ҡосағында күреп туймаҫ
Сәскәләр үҫә икән,
Йырың кеүек, елдәрең дә
Йыуатып иҫә икән,
Гүзәлдәрҙән, әй, гүзәл яҡ –
Тыуған яҡ.
Ҡояш нурын тулҡын итеп,
Аҡ болот йөҙә икән.
Һинән йыраҡ йәшәүҙәре
Үҙәкте өҙә икән,
Гүзәлдәрҙән, әй, гүзәл яҡ –
Тыуған яҡ.
Шишмәләрҙең ағышы ла,
Тәме лә бүтән икән.
Әй, белмәнем, сәскә кеүек
Ғүмеркәй һиндә икән.
Гүзәлдәрҙән, әй, гүзәл яҡ –
Тыуған яҡ.

1. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ. Интонацияға иғтибар итегеҙ, «Күрҙем һине» шиғыры менән сағыштырығыҙ. Айырма күрәһегеҙме? Эш нимәлә?
2. *Үҙәкте өҙә икән* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһен асыҡлағыҙ. Бында *үҙәк* һүҙе нимәне белдерә? Ошондай уҡ мәғәнә белдереүсе һүҙбәйләнештәр табығыҙ.
3. Нәжибә Эминеваның «Тыуған ер» шиғырын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Шағирәнең тыуған төйәгенә мөнәсәбәте тураһында һөйләгеҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, ул нимә тип атала? Һеҙҙә шул тойғо бармы? Әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. «Тыуған яҡтың ҡәҙере ҡасан беленә?» тигән темаға фекер алышығыҙ.

*Ибраһим Абдуллин*

## ҮҘ ЯҒЫМА ҠАЙТҺАМ...

Үҙ яғыма ҡайтһам, ергә ятып
Тыңлар инем үлән үҫкәнен,
Тыңлар инем салғы тауыштарын,
Киске йылы елдәр иҫкәнен.

Үҙ яғыма ҡайтһам, ергә ятып
Эсер инем шишмә һыуҙарын,
Тыңлар инем ҡыҙҙар йырлағанын,
Егеттәрҙең ҡурай моңдарын.

1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Унда сағылған хис-тойғоларҙы аңларға, аңлатырға тырышығыҙ. Автор тыуған яҡты һағыныу хистәрен нисек белдергән?
2. Йырҙың тексы И. Абдуллиндың «Айһылыуҙың айлы кистәре» драмаһынан алынды. Драмала ул ҡайһы геройҙың исеменән йырлана? Әҫәр менән танышып, һөйләшеү ойоштороғоҙ.
3. Йырҙың тексын ятлағыҙ.
4. Йырҙың Илфаҡ Смаков башҡарыуында фонояҙмаһы бар, шуға эйәреп, үҙегеҙ ҙә йырларға өйрәнегеҙ.
5. Йырҙың музыкаһын популяр композитор Рим Хәсәнов яҙған, уның тураһында белгәндәрегеҙҙе файҙаланып, ата-әсәләрегеҙҙән һорап, «Рим Хәсәнов йырҙары» тигән темаға һөйләшеү үткәрегеҙ, белгән йырҙарығыҙҙы йырлап ишеттерегеҙ. Мәғлүмәттәрҙе «Беҙҙең йырҙар» йыйынтығынан алырға мөмкин.

*Хәсән Туфан*

## ҠЫР ҠАҘҘАРЫ

Ямғырҙарҙа, яуындарҙа,
Дауылдарҙа-елдәрҙә
Ҡыр ҡаҙҙары ҡаңғылдаша
Мин белмәгән телдәрҙә.
    Ҡыр ҡаҙҙары ҡаңғылдаша,
    Йырлашалармы икән ни?
    Тыуған илдәр ҡала бит, тип
    Илашалармы икән ни?
Беҙҙең дә бит шулар һымаҡ
Киткән саҡтар бар ине,
Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, илем йыраҡ,
Тигән саҡтар бар ине.
    Ҡыр ҡаҙҙары ҡаңғылдаша,
    Һау бул, яҡташ, тиҙәрҙер.
    Әллә ҡайтыр, әллә ҡайтмаҫ
    Беҙҙең баштар, тиҙәрҙер.

Ҡаҙҙар кеүек осаһылар,
Китәһеләр юҡ минең,
Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, илем йыраҡ,
Тиәһеләр юҡ минең.
Ҡаңғылдашып болоттарҙа
Мин белмәгән телдәрҙә,
Ҡыр ҡаҙҙары китеп бара
Мин күрмәгән илдәргә.

1. Йырҙың тексын иғтибар менән, тасуири уҡығыҙ. Тыуған төйәккә һөйөү, уның менән айырылышыуҙың ҡыйынлығы нисек сағылдырыла? Текстан миҫалдар килтерегеҙ.
2. 2-се, 3-сө куплеттарға (3-сө, 5-се строфаларға) иғтибар итегеҙ, авторҙың үҙе тураһында уларҙан ниндәй мәғлүмәт алып була?
3. Ғалимдарҙың фекеренсә, кешегә йәшәү өсөн иң ҡулай, идеаль мөхит – уның тыуып үҫкән төбәгендә, йәғни бәләкәстән һыуын эсеп, һауаһын һулап, ризығы менән туҡланып үҫкән ерҙә икән. Ләкин тыуған төйәктән бер ҙә сыҡмай йәшәп буламы? Тыуған төйәктең ҡәҙере ҡасан беленә? Алдағы ике әҫәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, фекер алышығыҙ.
4. «Минең тыуған төйәгем» тигән белешмә (шиғыр, хикәйә, нәҫер) төҙөгөҙ, унда үҙегеҙҙең эскерһеҙ мөнәсәбәтегеҙҙе, ихлас ҡарашығыҙҙы белдерергә тырышығыҙ.
5. Хәсән Туфан – күренекле татар шағиры. Уның тураһында ата-әсәләрегеҙ, ололар, уҡытыусы ярҙамында, китаптарҙан ҡарап белешмә төҙөгөҙ.
6. Йырҙың көйөн татар композиторы Марс Макаров яҙған. Йырҙың фонояҙмаһын тыңлағыҙ, ҡушылып йырлап өйрәнегеҙ.

Тартынҡы өнгә бөткән һүҙ артынан килгән икенсе һүҙ һуҙынҡыға башланһа, уларҙы өҙмәй әйткәндә (уҡығанда), шул һүҙҙәрҙең ижек сиктәре үҙгәрә: *ауыл эргәһендә (а-уы-лер-гә-һен-дә), ишек алдында (и-ше-гал-дын-да).*

**8-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

Тыңлар инем, елдәр иҫкәнен, эсер инем, ер әйләнә, һәр саҡ әҙер, тыуған илдәр, йырлашалармы икән ни.

**9-сы күнегеү.** «Ҡыр ҡаҙҙары» шиғырының һуңғы строфаһын, «Үҙ яғыма ҡайтһам» шиғырын сәсмә стилдә әйтегеҙ.

*Зәки Вәлиди Туған*

## ТЫУҒАН ТӨЙӘГЕМДӘ

*(«Хәтирәләр» китабы буйынса)*

Иртә яҙ менән мәҙрәсәнән ауылға мал ҡарарға ҡайта инем. Сөнки әҙерләнгән бесән март баштарында бөтә, йыла ағасының ботаҡтарын, урмандан ҡырҡып алып ҡайтып, малға ашата торғайныҡ. Ҡар ирегәнгә тиклем үк, малды ҡарҙан асылған ерҙәргә ҡыуып килтереп утлата инек. Үҙебеҙ ҙә яңы асылған ерҙәрҙә сыҡҡан һарына һәм ҡайһы бер башҡа тамырҙарҙы йыйып, бешереп ашай торғайныҡ. Тәбиғәт ҡосағында мал көтөп, яңғыҙ йөрөүҙе мәҙрәсәлә булыуға ҡарағанда өҫтөнөрәк күрә инем.

Апрелдең беренсе яртыһында татар ауылдарында сиратлап ойошторолған һабан туйына, май аҙаҡтарында башҡорт ауылдарына йыйын байрамдарына һыбай барып, ҡайһы саҡ аттарыбыҙ менән бәйгелә ярышып, ҙурҙарҙың көрәшен ҡарап, бәләкәйҙәрҙең көрәшендә үҙем дә ҡатнашып, йөрөп ҡайта торғайным. Апрель аҙаҡтарында бал ҡорттары менән мәшғүл булдыҡ. Йөҙҙән ашыу умартанан торған баҡсабыҙ ауылыбыҙҙан дүрт саҡрым алыҫлыҡта, иҫке йәйләү һәм зыярат булған еребеҙҙә урынлашҡайны. Унда аласыҡ һәм ҡышын умарталар һаҡлау өсөн ыҙма бар ине. Шулай уҡ бейек ағастарҙың өҫкө ботаҡтары араһында урынлаштырылған, бал ҡорто күстәрен эйәләтеү өсөн, ҡарағай ағастарына соҡоп эшләнгән солоҡ умарталарыбыҙ ҙа булды. Улар йөҙ саҡрымға тиклем алыҫлыҡта төрлө ерҙә, төрлө тарафта урынлашҡайны. Апрелдә боронғо ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған был солоҡтарҙың, ҡырағай бал ҡорто ҡунһын өсөн, эсен таҙартып, балауыҙ ҡуйыла. Быларҙы мин ҡустым Нурмөхәмәт һәм Ибраһим Ҡасҡынбай исемле дуҫым менән бергә эшләй торғайным. Беҙҙеке кеүек, Ибраһимдарҙың солоҡтары ла күп ине.

Был осорҙа йылҡыларыбыҙҙы, күп булыу сәбәпле (дүрт ҡырағай өйөрҙән тора ине), йәйләүҙә тота торғайныҡ. Ерҙәребеҙ һәм көтөүлектәребеҙ рус хөкүмәте тарафынан ҡаҙнаға тартып алынғанлыҡтан, беҙҙекеләр йәйләү тормошон күптән ташлағайны. Хан йәйләүе һәм Ҡарлы бүлек тауында йәйләү аласыҡтары ҡалғайны әле. Малдарыбыҙ йәйләү тормошонан әле булһа ла ваз кисмәгән. Улар апрель баштарында уҡ, беҙҙән рөхсәт-фәлән һорап тормаҫтан, Мәсем һәм Аҡбейек

йәйләүҙәренә китә һәм унда көҙгә тиклем ҡала торғайны. Иҫке йәйләүҙәребеҙ Ибраһим Ҡасҡынбайҙарҙың Алағуян тигән ауылының ере ине.

Ауылыбыҙҙағы мишәр күскенселәренең ер эшкәртеше һәм донъя көтөшө, беҙҙеке менән сағыштырғанда, күпкә төҙөгөрәк булды. Күп иген игерҙәр, йәшелсә үҫтерерҙәр, йыл әйләнәһенә өйҙә торған малдарын ҡышын башы ябылған, аҙбар тип йөрөтөлгән һарайҙарҙа аҫрарҙар һәм уңышын һатып көн күрерҙәр ине. Беҙҙең ике ырыуҙың иген игеүе бер нисә «итәк» тары сәсеүҙән ғибәрәт булһа, малыбыҙ иһә ҡышын кәртәләнгән асыҡ майҙанда, яҙын, ауылға яҡынламай, тауҙарҙа ҡалды. Был йәһәттән, беҙ иген сәсеү, һарай төҙөү өсөн ваҡыт сарыф итмәй инек. Малыбыҙ яҙын тауҙа саҡта, ғаиләбеҙҙә иң күп ваҡыт йылҡы көтөүсе кеше мин булдым. Иген эшен яратмай инем, мал өсөн бесән сабыу минең өсөн бер зауыҡ булһа, ураҡ менән иген урыу, эйелеп йөрөп эшләү бер ғазап ине. Шуға күрә унда йөрөмәй торғайным. Бар эшебеҙ урманда була ине. Утыҙ саҡрым да борондан ырыуыбыҙҙыҡы булған, әммә ҡаҙнаға алынған Айғырүлгән тигән ерҙән беҙгә ҡаҙна йыл һайын бер аҙ урман бирер ине. Ағас киҫеп, ауылға һәм баҙар булған урындарға алып барып, айырыуса йүкә ағасының ҡабығын һыуға һалып серетеп, һалабаш яһап һата инек.

Был эштәр бөткәс, бесән ваҡыты еткәнгә тиклем, мин, йәнә мал артынан Аҡбейек тарафтарына йәйләүгә китеп, мал ҡарап, уларға тоҙ биреп, ҡатындар әҙерләгән ҡымыҙҙы эсеп, башҡа кешеләргә ҡымыҙ эсергә ҡунаҡҡа барып, йәйләүҙәге уйындарҙа ҡатнашыр инем. Июндә, Тәкә заманы тигән һарыҡ һуя торған ваҡыт килеп еткәнсе, атайым, ҡайһы берҙә әсәйем менән икәүләп, килерҙәр, малдарыбыҙҙы баҡҡан ғаиләләрҙә торорҙар ине. Был ваҡыт умартасылыҡта биләм ҡарау тип аталған эш иң мауыҡтырғыс эш һанала. Буш солоҡтарға ҡорт күстәренең килеп урынлашыу-урынлашмауын, йәиһә ҡырағай бал ҡорто күстәренең яңы айырылғандарының был умарталарҙы ни дәрәжәлә ҡабул итеү-итмәүен ат өҫтөндә ултырған килеш кенә күҙәтеүҙән тора. Беҙҙең милкебеҙ иҫәпләнгән солоҡ ағастары тауҙарҙа йәки үҙәндә булғанлыҡтан, көнөнә һыбай килеш иң күбе утыҙ-ҡырҡ саҡрым юл үтеп, ун-ун биш умартаны тикшерергә мөмкин. Йылына ни бары ун биш көн дауам иткән биләм ҡарауға мин дуҫым Ибраһим Ҡасҡынбай менән бергә сыға торғайным.

1. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
2. Текстан урмансылыҡҡа, малсылыҡҡа, ҡортсолоҡҡа ҡағылышлы терминдарҙы күсереп алығыҙ, улар араһында архаизмдар, неологизмдар, варваризмдар бармы-юҡмы икәнлеген асыҡлағыҙ.
3. *Мәғлүм булыу, ваз кисеү, сарыф итеү, мал бағыу, биләм ҡарау* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
4. Текста ҡайһы осор тормошо тасуирлана? Унда борондан килгән күсмә тормош ҡалдыҡтары нимәлә күренә?
5. Ауыл халҡының йәшәйешен күсеп килгән мишәрҙәрҙең хужалыҡ итеү үҙенсәлектәре менән сағыштырығыҙ. Фекер алышығыҙ.

Ике һүҙҙе өҙмәй әйткәндә, һүҙ аҙағында йә һүҙ башындағы һаңғырау *[к]*, *[ҡ]*, *[п]* өндәре һуҙынҡылар уратылышында һәм *р* тартынҡыһы янында яңғырау *[г]*, *[ғ]*, *[в]* өндәренә сиратлаша.

**10-сы күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

Туп ала (ту-в̊а-ла), китап уҡый (ки-та-в̊у-ҡый), ике бала (и-ке-в̊а-ла), йылға буйы (йыл-ға-в̊у-йы).

Килеп алды, барып инде, ҡолаҡ ауырта, ҡармаҡ алды, көрәк эҙләне, күлдәк үтекләй, тимер көрәк, ике ҡалаҡ, ҡара күлдәк, ала ҡуян.

Ҡыр ҡаҙы (яҙыла) – ҡыр-ға-ҙы (әйтелә); күк Ирәндек – күги-рән-дек; көтөп алдым – кө-тө-в̊ал-дым.

*Мөслим Әбсәләмов*

## ЙОМАҒУЖА ТИРӘКТӘРЕ

...Был хәл һуғыш башланыр йылдың йәй башында булды. Беҙ, бер төркөм малайҙар, Таштур башында ат булып сабышып уйнап йөрөй инек. Ел-ямғырҙан ашалып, емерелеп-таралып ятҡан таштар араһында Йомағужа олатай йөрөй. Һәр бер ташты, сүкеше менән һуҡҡылап, һыйпаштырғылап ҡарай, ҡайһы берҙәрен ҡарышлап үлсәп тә ҡуя. Беҙгә етә ҡалды: «Әллә алтын эҙләйме икән?» – Бәхәсләшә-бәхәсләшә, уйынды ла онотоп, уны күҙәтергә тотондоҡ.

– Бына быныһы, балалар, ярарлыҡ. Тап мин эҙләгәне, – тине лә, беҙгә ҡарап, тешһеҙ ауыҙын өңрәйтеп йылмайҙы.

Йылы һүҙ сыҡҡас, беҙ уны уратып та алдыҡ, һорауҙар ҙа яуҙыра башланыҡ:

– Уны, олатай, нишләтәһең? Нигеҙ һалаһыңмы әллә?

– Баш осома ҡуям, уландар, баш осома.

– Һе, таш яҫтанаһыңмы? – Шаярталыр, тип, беҙ көлөшкән булдыҡ. – Яҫтыҡ йомшағыраҡ була ла инде, олатай!

– Йомшаҡлығын йомшаҡ инде ул, дөрөҫ әйтәһегеҙ. Тик унда яҫтыҡ-юрған апармайҙар бит әле, балалар...

Уның кинәйәһен беҙ, һыу мейеләр, һаман төшөнмәнек. Шуға булһа кәрәк, бөтөнләй етди тауыш менән өҫтәп ҡуйҙы:

– Теге донъяға китергә йыйынам, уландар, теге донъяға!

«Теге донъя»ны беҙ өләсәйҙәрҙән ишеткән бар ине. Шулай ҙа һин дә мин үҙе теләп, үлемгә әҙерләнеп йөрөү башыбыҙға һыймай. Йүгереп ҡайтып, әсәйҙәргә һөйләйбеҙ:

– Йомағужа ҡарт үлергә йөрөй!

– Тәүбә, тиген!

– Ысын! Ант-мант, биллаһи-виллаһи, бер табаҡ ҡан эсәм, ике табаҡ тоҙ ялайым!.

...Үлмәҫ борон үҙенә ҡәбер ташы әҙерләү беҙгә ғәжәп тә, мәрәкә лә тойолдо. Шуға, уйыныбыҙҙы ташлап, Йомағужа ҡартҡа эйәреп барҙыҡ. Бер нисә көн буйына ҡасау менән матурлап таш соҡоғанын шым ғына күҙәтеп ултырҙыҡ. Тик уның нимә яҙғаны беҙҙең өсөн сер булып ҡалды. Сөнки ул Ҡөрьәнсә яҙа ине...

Унан һуң инде күп йылдар үтте. Үткәндәр барыһы ла онотолдо һымаҡ. Ә йөрәккә уйылған эҙҙәр юҡ-юҡта әрнетеп иҫкә төшә икән. Ир ҡорона ултырғас, ғәмһеҙ балалыҡ йылдары үткән яҡ тартты бит. Әлеге ауылға, Яҡупҡа, йәнә килеп сыҡтым.

Ҡайһылай үҙгәрткән уны мәрхәмәтһеҙ йылдар! Таныш та һымаҡ, ят та шикелле. Ә шулай ҙа, боронғо яҡын дуҫтың өйҙәрен, берәүҙән дә һорамай, тоҫмаллап килеп таптым. Терпе сәсле, ҡыҫыҡ күҙле, сандыр кәүҙәле малай ялан аяҡ йүгереп килеп сығыр төҫлө ине. Ә ҡаршымда бағаналай оҙон, әммә ҡупшы буй-һынлы дәү ир баҫып тора.

– Зиннәт, һинме был, әллә?.. – тим, икеләнеп.

– Эйе, мин. Ә үҙегеҙ кем булаһығыҙ?

Бер-беребеҙҙе танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙекме икән ни?

Сырамытҡас, башҡорттарға хас булмаһа ла, ҡыҫып ҡосаҡлап, арҡанан тупылдатып һөйҙө.

– Үәт әй, үәт әй! Тағы осрашыр көн дә бар икән...

Беҙ төн уртаһынаса гәпләшеп ултырҙыҡ.

– Йомағужа исемле ҡарт була торғайны беҙ бала саҡта, һин шуны иҫләйһеңме? – тип һорай ҡуйҙым.

– Иҫләй, тиһеңме? Нимә, һин уны мәрхүм кеше һымаҡ итеп ҡарайһың? Ул һаман иҫәнсе.

– Иҫән?! Китсе әле! Һуң бит ул бынан егерме-утыҙ йыл элек үк үлергә йыйынып йөрөй ине лә... Иртәгә барып сығайыҡ янына, әләйһә.

– Миңә таң менән эшкә шул, – тине Зиннәт.

Иртә менән Йомағужа ҡартҡа үҙем киттем. Хәтһеҙ күп йылдарҙың ел-дауылын кисереп, хужаның үҙе шикелле кеүек үк ҡартайған, туҙған өй. Уның мөйөшөндә әлеге таш һөйәлеп тора. Теге ваҡыт ҡарттың унда нимә соҡоп яҙғанын уҡый алмаһаҡ та, хәҙер мин, университет тамамлаған мөғәллим, унда шундай һүҙҙәрҙе уҡыным:

«Йомағужа Хәйрулла уғлы

Вафат 19 ... йылда ... йәшендә».

Тупһала, йәйге сыуаҡта ҡыҙынып, олатай үҙе ултыра. Мин әллә ҡайҙан ҡулымды һуҙып, уға табан киләм. Ләкин ҡарт бер терелек ишараты ла күрһәтмәй, ҡыбырламай, таш һын һымаҡ шаҡ ҡатып, тик ултыра бирҙе.

– Әссәләмәғәләйкүм, олатай, – тим. Яуап юҡ.

Мине күрепме, тауышымды ишетепме, еңел генә баҫып, өйҙән бер әбей килеп сыҡты. Олатайҙың ҡарсығылыр.

– Һаумы, инәй. Олатай әллә ойоп киткән инде, бер ҙә яуап ҡайтармайсы...

– Ҡысҡырыбыраҡ һөйлә, балам, ҡолаҡҡа ҡатыланып ҡалды ул... Һуҡырайып та ҡуйҙы. Бәлә яңғыҙ йөрөмәй бит.

– Ә?! – Ҡарт тертләгәндәй итте.

Мин үҙем менән таныштырҙым. Әлеге таш тураһында һораным.

– Ә-ә-ә, улым, ул ташты әйтәһеңме? Теүәл етмеш йәш тулғайны миңә шул йылда. Шөйлә бәҫһеҙ булмаһам да, ҡәҙерле саҡта тыныс ҡына донъя ҡуйырға йыйынып бөткәйнем инде. Был донъяла ҡалғандарға иҫтәлек булыр тип, ағас та ултырттым. Ана (ул кәртә артына табан эйәк ҡағып күрһәтте). – Тик мин уның ишараһы ҡайһыһына төбәлгәнен айыра алманым, сөнки унда тирәктәр – эреһе лә, вағы ла – һанһыҙ күп ине. – Тик изге ниәтемә ирешергә яҙманы. Нимес шаҡшылары илгә яу астылар ҙа бланды боҙҙолар. Үҙең беләһең, эшкә ашҡан көллө ир-ат китеп бөттө. Боронғо

сәсәндәр әйтмешләй, «ирҙәрҙе ер итеп, ерҙәрҙе хур итеп, бисәләрҙе тол итеп, балаларҙы ҡол итеп», илеңә яу килгән саҡта, нисек итеп үлеп ятмаҡ кәрәк. Ҡалайтаһың, бер килке бисә-сәсә менән күмхужды тотоп торҙоҡ инде.

– Күм-хуж! (Ысын, ул саҡта ололар колхозды шулай ти торғайнылар бит әле: «күмәк хужалыҡ».) Иҫләйем, олатай, иҫләйем. Мин, бала булһам да, барыһын да күрҙем... Олатай, тимәк, һин хәҙер йөҙгә етеп бараһың, эйеме? Күңелеңә ауыр алма инде, туйҙырманымы һуң?

– Нимә туйҙырманымы?

– Оҙаҡ йәшәп туйып китмәнеңме, тим?! – Ҡысҡырып өндәштем.

– Ә-ә-ә... – Кеткелдәп көлөп ҡуйҙы. – Мең йыл йәшәгән Лоҡман Хәкимдән, теге донъяға барғас, фәрештәләр һораған икән: «Йә, Хәким, ун быуат ғүмер һөрөп, яҡты донъянан туйҙыңмы инде?», теге: «Бер самауыр сәй эскән миҡдары ла булманы», – тип яуап биргән, ти.

– Улай булғас, һин дә, олатай, бер сынаяҡ сәй эсеп тә өлгөрә алманым, тиерһең инде тегендә, ә?

Йәнә кеткелдәп ҡуйҙы.

– Эй, улым, кемгә яуап бирәһең унда! Барыһы ла буш һүҙ бит ул. Бер ҡолас соҡор эсендә ниндәй донъя булһын, ти.

– Эйе, олатай, һин бөтөнләй дәһриҙәрсә фекер йөрөтәһең. Беҙ ҙә шулай Алла юҡ, тип барабыҙ бит. Ошо донъяла ғына йәшәү бар... Өйҙө ҡалай матур урынға һалғанһығыҙ. Ожмахың да кәрәкмәй. Кәртә артынан ғына йылға аға, юрый ултыртҡан тиерһең, тирәләп бынау тирәктәр, талдар...

– Тирәктәр... – Тәрән уфтанып бышылданы ҡарт. Бик тәрәндән, йөрәгенең иң төбөнән сыҡты был уфылдау. – Уны кеше ҡулдары ултыртҡан шул, улым. Әммә ләкин бер ҙә юрамал түгел. Изге тирәктәр улар, белә-белһәң. Һәр ҡайһыһында тотош бер ғүмерҙең яҙмышы шаулап ултыра булыр... Әйҙә әле минең арттан.

«Минең арттан» тигәненә йылмайып ҡуйҙым. Әллә...

Был ни хәл?! Һуҡыр ҡартым, таяғы менән ҡапшанмай ҙа, туп-тура иң йыуан тирәк төбөнә барып, шып туҡтаны.

– Бына быныһы – иң тәүге ағасым. Анау инәйеңде оҙатып алып ҡайтҡас ултыртҡайным. Етмеш йыл! Шул саҡ башҡа уй килгәйне: шулайтып берәй нәмәгә гел ултырта барғанда: Һәм, китте-китте... Бынауһын, мәҫәлән, үҙем некрут булған йылда, ә мынауһын япун һуғышына китер алдынан... –

Оҫта экскурсовод һымаҡ, бер тирәктән икенсеһе тәңгәленә күсеп, кәкре таяғы менән уға ҡарап бер һелтәй ҙә талғын ғына һөйләүен белә.

Ағастар тарихы ғынамы һуң был! Юҡ-юҡ, был бит кешеләр тарихы, тормош, көрәш тарихы! Бабай ғүмерен тәшкил иткән йылдар үҙҙәре шаулап ултыра икән был ерҙә. Бына ун дүртенсе йылғы һуғышта һәләк булған баш балаһының иҫтәлеген һаҡлап ултыра береһе. Егерменсе йылдарҙағы аслыҡ һәм ваба. Утыҙынсы йылғы колхозлашыу дәүерендәге фажиғә ҡорбаны ла бар. Бөйөк Ватан һуғышы ла. Һәм бөтәһенән бәләкәйерәк тирәк – Туғыҙынсы май!.. Бынына ғаиләнең дә иң һуңғы ағзаһы – кинйәләре иҫтәлегенә ултыртылған. Бер боролош та, бер дәүер ҙә был йортто ситләп үтмәгән. Ата-әсә йөрәгенә юйылмаҫ яра, ә ихатаға тирәк өҫтәп, тейешле ҡорбанын алып китә торған. Тимәк, бында кешеләр тарихы ғына түгел, кешелек тарихы йәдкәрҙәре шаулап ултыра ла баһа!.. Әҙәм балаһы бирешмәһә бирешмәй икән: шунса ҡайғы-хәсрәт был икәүҙе бөкһә бөккән, әммә һындыра ла, йыға ла алмаған. Бабай, бер аҙ ултырғандан һуң, дауам итте:

– Ана, күрәһеңме, һәр ҡайһыһының төбөндә күпме йәш үҫенте. Былай-алай ҡалҡып киләләрме, ҡолонсаҡҡайҙарым!

Ысынлап та, мин, күҙле букән, шуны ла абайламағанмын. «Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе – ботаҡ тишеге» тип, минең ишеләргә әйткәндәрҙер инде, моғайын.

– Уларын мин ултыртманым. Үҫерҙәр! Берәй төрлө ҡаза килеп сығып ҡына һәләк итеп ҡуймаһа, ағастар, кеше һымаҡ, бер-береһе менән һуғышмайҙар бит. Әҙәм балаһы ғына аҡылланған һайын оторо иҫәрләнә бара әллә?

Ул, нимәгәлер ишаралап, билдәһеҙлеккә табан ҡул һелтәне. Шул ҡәһәрле һуғышҡалыр, күрәһең. Шул саҡ һанһыҙ күп һәм тәрән йыйырсыҡтарҙың бер нисәүһе буйлап көмөш тамсылар тәгәрәне лә, уларҙа ҡояш нурҙары ялтырап китте. Кем белә, былар, бәлки, ҡояш сағылышы ла түгелдер, ә йөҙ йыл буйына тынғы белмәй дөрләп янған йөрәктең, ҡартайған күкрәккә һыймай, тышҡа бәреп сыҡҡан осҡондарылыр.

– Ана, ҡояш Таштур түбәһенә барып ятты. Нишләп был әбей һаман ығыша икән? Бер самауыр ҡайнатырлыҡ ҡына гәпләштек түгелме?

Йоҡаҡ ҡына божралар пәрҙәһендә үтә күренеп, ҙур ҡыҙыл ҡояш, ысынлап та, тау башында ята ине.

Һуҡыр! Ҡайҙан һиҙә һуң ул был ҡәҙәре?!

– Олатай, күҙең әҙерәк күрәме әллә? – тип һораным аптырап.

– Юҡ, тома һуҡырмын, балам. Нишләп улайтып һорайһың?

– Һуң бит, күҙле кешенән дә былайыраҡ күргән һымаҡһың.

– Шуны ла күрә алмағас, ни хәжәтемә бер быуат ерҙә йәшәргә, ә?

Йомшаҡ ҡына һөйләнә-һөйләнә, инәй килеп сыҡты.

– Йә, Хоҙай... Һаман туҡтамағанмы? Был бер тотонһа, мөкиббән китә торған. Хәбәренең осо ла, башы ла булмаҫ уның. Етмеш йыл шулайтып маҙама тейеп бөттө бит ул. Самауырҙы нисәмә өҫтәнем, әйтәгүр, кешене һаман сәйгә әвинмәйсе. Белдекһеҙ шул... Әллә алъяп та китте инде, байғошом.

– Олатай, инәйем ҡыҙа башланы.

– Нимә тип?

– Һаман сәй эсергә инмәй, тип.

– Әй, улым, ҡыҙмай ул. Шул мөжөлдәп йөрөүе – бар бөтмөш миңә иркәләнеүе уның. Инәйеңдең холҡон мин уның үҙенән дә артыҡ белеп бөткәнмен. Күпме бергә йәшәйбеҙ бит.

Өйгә табан ыңғайланыҡ. Ул тағы туҡтаны.

– Әй, улым, онота яҙғанмын. Гәпте боҙоп, бая бәхәсләшкем килмәгәйне. Һеҙ Алла юҡ тиһегеҙ ҙә ул. Юҡ, тип өҙә һуғып ҡына ла әйтеп булмай. Ул, бәлкем, алла ла түгелдер. Мәгәр бер ҡөҙрәтле көс бар булыр. Бөтә донъяны төҙөк, тәртипле тотоп килеүсе көс. Шундай баш булмай, әҙәмдәргә хут бирһәң... Барын тырым-тырағай туҙҙырып бөтөрҙәр ине.

Ҡара-ҡара! Донъя тураһында үҙенә бер төр фәлсәфәсе лә баһа! Философтар Көнбайыш Европа менән Көнсығыш Азияла ғына тыумай икән.

...Яҡупҡа яңынан юл төшкәс, зыяратҡа барып, мәрхүм олатайҙың ҡәбер кәртәһенә түшемде терәп, бик оҙаҡ уйланып торҙом. Әлеге таныш ташҡа ҡарап, бөтә үткәндәремде баштан кисерҙем. Ундағы һуңғы һандар ғына ап-асыҡ – күптән түгел яҙылғандар. Ҡалғандары, зыяратҡа килмәҫ борон уҡ, уңып бөткәндәр.

Ана, Һаҡмарҙың бер ҡултығына һыйынған ихатала кескәй генә иҫкергән өйҙө эреле-ваҡлы тирәктәр уратып алған. «Йомағужа тирәктәре» тип йөрөтә уларҙы ауыл халҡы. Әлеге Таштур итәгенә етеп, байырға яҡынлашҡан ҡояштың һүрән нурҙары уларҙың алһыу һары япраҡтарында сағыла. Кем белә, улар, бәлки, шул тирәктәргә йәшәү биргән изге кешенең мәңге һүнмәҫ йөрәк саткыһылыр.

1. Хикәйәне иғтибар менән уҡып сығығыҙ.
2. Аңлашылмаған һүҙҙәр осраһа, мәғәнәләрен асыҡлап китегеҙ.
3. Йомағужа ҡарттың телмәрендәге рус һүҙҙәренең әйтелешенә иғтибар итегеҙ. Һүҙҙәрҙең шулай үҙгәреше ҡарттың наҙанлығынан киләме, әллә уның икенсе сәбәбе бармы?
4. *Ҡолаҡҡа ҡатыланыу, маҙаға тейеү, тыуған яҡ тартты* һүҙбәйләнештәренең һәм һөйләмдәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ, шул уҡ мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән әйтегеҙ.
5. Ниндәй һүҙ ул *йылы һүҙ*? Т. Ҡарамышеваның «Һүҙ» шиғырын иҫкә төшөрөгөҙ. Үҙегеҙ яратҡан кешегеҙгә әйтә торған һүҙҙәрҙе теҙеп яҙығыҙ.
6. *Күҙле бүкән, һыу мейе* тип кемгә әйтәләр, ни өсөн? Һеҙ үҙегеҙгә шулай тип әйтеүҙәрен теләр инегеҙме?
7. Хикәйәлә балаларҙың ат булып сабышып уйнауҙары телгә алына. Бәләкәй саҡта һеҙ шулай уйнай торғайнығыҙмы? Бала сағығыҙҙа уйнаған уйындарығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, уларҙың исемлеген төҙөгөҙ, бер уйын тураһында белешмә төҙөгөҙ.
8. Һүҙҙәренең дөрөҫлөгөн раҫлар өсөн, балалар ант итәләр, текстан шул урынды табып уҡығыҙ. Һеҙ үҙегеҙ шулай ант итә инегеҙме?
9. Ниндәй яҙыу ул *Ҡөрьәнсә яҙыу?* Һеҙҙең ундай яҙыуҙы күргәнегеҙ бармы? Уның ниндәй яҙыу икәнлеген аңлатығыҙ. «Ҡөрьәнсә»нән башҡа тағы ниндәй яҙыуҙар бар һәм улар менән кемдәр файҙалана? Фекер алышығыҙ.
10. Ниндәй ваҡыт ул – *ир ҡорона ултырыу мәле*. Һеҙ әле ир ҡорона ултырғанһығыҙмы, ҡасан ултырасаҡһығыҙ? Әңгәмәләшегеҙ.
11. Һуңғы абзацтың тәүге һөйләменә иғтибар итегеҙ. Унда *Һаҡмарҙың бер ҡултығы* тигән һүҙ бар. Кешенең тағы ниндәй тән ағзаларының исемдәрен йылғаға ҡарата ҡулланалар? Тапҡандарығыҙҙы яҙып ҡуйығыҙ, ни өсөн ҡулланылғанын аңлатығыҙ. Рус телендә улар нисек атала?

*Динис Бүләков*

## БАРБОС

Һунарсы Яубаҫар ағай бер бүре балаһын терелəй тотоп алып ҡайтҡаны бирле, ауыл малайҙарына мәрәкә табылды. Көнөтөнө шул бүре балаһы янынан китмәнеләр, бүре балаһы ла тәүҙә тештәрен ыржайта ла тора торғайны, ауылда йәшәп, бөтөнләй ҡулға эйәләште.

Яубаҫар ағайға ла был хәл оҡшап ҡалды. Яңыраҡ ҡына уның Барбос исемле этен айыу талап үлтергәйне. Ара-тирә

кешеләрҙә йүнле көсөк тә күренмәгәс, ошо бүре балаһын тәрбиәләп ҡарарға булды. Уға элекке этенең исемен ҡушты. Уны тәрбиәләүгә бөтә тырышлығын һалды. Итте бик күрһәтмәне.

Ләкин күршеләргә был һис тә оҡшаманы, ике арала ыҙғыш ҡупты. Улар Барбосты атырға даулаштылар, ләкин Яубаҫар ағай бирешмәне:

– Һеҙгә бер зыяны ла булмаҫ, өйрәнеп етте инде ул, – тине. Шулай ҙа уны сынйыр менән бәйләп ҡуйырға тура килде: алда тағы ни булырын кем белә.

Шулай көн артынан көн үтеп, ҡыш урталары ла етте. Ҡыштың оҙон һалҡын төндәрендә Барбостың һуҙып-һуҙып олоған тауыштары ла ишетелә башланы, күрәһең, урмандың ҡараңғы һуҡмаҡтарын, иптәштәрен һағына торғандыр инде.

Яубаҫар ағай уны йәлләп тә ҡуйҙы, бер-ике рәт хатта урманға ебәрергә лә йыйынғайны, ләкин Барбостың барыбер кире әйләнеп ҡайтасағын белеп, кире уйланы. Ә бер көндө күрше Сабира апай көйәнтәһен күтәреп килеп инде.

– Шул Барбосыңды, Яубаҫар күрше, атаһыңмы, юҡмы? Шуның арҡаһында йәмһеҙләшеп тә бөттөк бит инде... – тип башланы ул һүҙен, яйлап ҡына. Ләкин артабан ҡыҙҙы: – Төндә ишек алдына сығыр хәл юҡ, имәнес олоған тауышын ишетһәң, йөрәгең «жыу» итеп ҡала.

– Һин ҡыҙма әле, Сабира күрше, зыянһыҙ бит ул, – тип яуапланы Яубаҫар ағай.

– Зыянһыҙ, имеш. Бер көн көпә-көндөҙ анауы ҙур туҡал кәзәмә ҡаҙыҡ кеүек теш тәрен ыржайтып торасы.

– Кәзәң баҡсаға ағас кимерергә төшкәндер шул, күрше...

– Төшһә, тешен ыржайтырға тигәнме ни? Тора-бара ул нәмәң кешегә лә ташлана башлар... Вәт шул, Яубаҫар күрше, бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай, тиҙәр. Йә үҙең атаһың ул нәмәнде, йә, силсәүиткә барып, кешенән аттырам. – Сабира апай туҙынып сығып китте.

Шул көндән алып Яубаҫар ағайҙың башына ҡайғы төштө. Сығып, Барбосы янына барһа, тегеһе күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡарай ҙа тора. Нисек шуны атаһың инде? Яубаҫар ағай, күңеле тулышып, кире өйөнә инеп китә.

Бер көндө шулай, һунарға барып, дүрт ҡуян алып ҡайтты. Икеһенә патрон да әрәм итеп торманы – Барбос елкәләренән эләктереп алып килде. Шундай этте ҡайҙан табаһың?

Күрше-күлән менән ыҙғыш, бәлки, яйлап-яйлап бөткән дә булыр ине, тик бер көндө көтөлмәгән хәл килеп сыҡты.

Сабира апайҙың әлеге туҡал кәзәһе Яубаҫар ағайҙың алма баҡсаһына төшкән. Барбос, сынйырынан ысҡынып китеп, тегене тамаҡлап ташлаған.

Хәҙер инде ыҙғыш түгел, дауыл ҡубырға тейеш ине. Ни эшләһен инде Яубаҫар ағай, Сабира апайға бер һарығын индереп бирҙе. Икенсе көндө үк Барбос менән эште бөтөрөргә булды. Атырға йәлләне. Аҙаштырһам, арыуыраҡ булыр, йөрәгем дә һыҡрамаҫ, тип уйланы ул. Саңғыларын кейеп мылтығын алды ла, Барбосты сынйырынан тотоп, Сейәлетауға менеп китте. Ләкин нисә генә ҡалдырып китһә лә, Барбос уны «һә» тигәнсе таба ла ҡуя.

Шулай Барбосты аҙаштыра алмай ыҙаланып йөрөй торғас, кис булды. Күпте күргән һунарсы ауыр хәлдә ҡалды. Ахырҙа, аптырап ҡайтыу юлына төштө.

Ҡараңғыла килгәндәге саңғы эҙҙәрен табыу ҡыйын ине. Тау түбәненә шыуып төшөүе лә ҡурҡыныс: берәй ағасҡа бәрелеүең бар.

Шул ваҡыт йәнәшә барған Барбос ҡапыл һиҫкәнде, йөндәрен ҡабартты, ә күҙҙәре йәшкелт ут булып тоҡанып китте. Тештәрен ыржайтып, ырылдап ебәрҙе.

Яубаҫар ағай тирә-яғына күҙ ташланы – уларҙы пар-пар йәшкелт уттар уратып алғайны. Яубаҫар ағай мылтығын алып өлгөргәнсе, йәшкелт уттар уларҙың өҫтәренә ябырылды. Барбос Яубаҫар ағайға ташланған беренсе бүрене күкрәге менән бәреп йыҡты ла ҡайһы ерендер умырып өҙөп тә алды. Икенсеһенә ташланды, өсөнсөһөнә... Үлемесле алыш ҡыҙҙы. Бына, Яубаҫар ағайҙы бөтөнләй онотоп, дүрт бүре бер юлы Барбосҡа йәбеште. Барбос уларға ҡарағанда кәүҙәгә ҙурыраҡ ине, тиҙ генә бирешергә теләмәне.

Шунда Яубаҫар ағай атып ебәрҙе. Ҡан ҡойош нисек тиҙ башланһа, шулай тиҙ бөттө. Ике бүре ятып ҡалды, икәүһе ҡасып өлгөрҙө.

Яубаҫар ағай Барбос эргәһенә килде. Бүреләр уны бик ныҡ талағайнылар. Ул ҡыҙғаныс ыңғыраша, урынынан тора алмай. Яубаҫар ағай тунын Барбос өҫтөнә япты.

Бер аҙҙан һуң ыңғырашыу ишетелмәҫ булды.

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ: яңы һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. *Ҡулға эйәләшеү, йәмһеҙләшеп бөтөү, күңел тулышыу, тамаҡлап ташлау* һүҙбәйләнештәренең, *Күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡарай; Күҙҙәре тоҡанып китте; Күҙ ташланы* һөйләмдәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

3. Хикәйәнең йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән тасуири итеп һөйләп өйрәнегеҙ.
4. Хикәйәнең йөкмәткеһе буйынса изложение яҙығыҙ.
5. Динис Бүләковтың быға тиклем өйрәнгән әҫәрҙәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, улар буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.

**11-се күнегеү.** Башҡорттар эттәргә түбәндәге ҡушаматтарҙы биргән.

Ҡашҡар, Дүрткүҙ, Еҙтырнаҡ, Ҡарағолаҡ, Аҡтырнаҡ, Ҡытмыр, Аҡтүш, Алабай, Муйнаҡ, Алғыр, Бурҙай.

Атай-әсәйҙәрегеҙҙән һорашып, башҡортса эт исемдәре өҫтәп яҙығыҙ.

**12-се күнегеү.** Рәми Ғариповтың түбәндә килтерелгән шиғыры ярты быуат элек яҙылған. Шағирҙы ниндәй уйҙар борсой? Ул нимәгә өмөт тота? Шағирҙың ошо ҡыҫҡа ғына шиғырына яуап итеп, уға хат (инша) яҙығыҙ.

Туған телем тыуған еремдә
Яңғыраһа мәңге, йыр булып,
Һис үкенмәҫ инем гүремдә
Ятҡанда ла, ҡара ер булып.

## Әҙәби төрҙәр тураһында төшөнсә

Әҙәби әҫәрҙәр ысынбарлыҡты төрлөсә сағылдыра. Шуға ҡарап, уларҙы борон-борондан өс төркөмгә бүлеп йөрөткәндәр – эпос, лирика һәм драма. Эпик, йәғни эпосҡа ҡараған әҫәрҙәрҙә тормош герой яҙмышына бәйле ваҡиғаларҙы хикәйәләү (тасуирлау) аша бирелә. Лирик, йәғни лирикаға ҡараған әҫәрҙәрҙә тормош геройҙың хис-тойғолары, кисерештәре аша һүрәтләнә. Ә драматик, йәғни драма төрөнә ҡараған әҫәрҙәрҙә тормош герой яҙмышына бәйле ваҡиғаларҙы тамашасыға күрһәтеү аша сағылдырыла.

Эпик һәм лирик әҫәрҙәр – уҡыу өсөн, ә драматик әҫәрҙәр ваҡиғаларҙы сәхнәлә артистар башҡарыуында тамаша ҡылыу өсөн яҙыла.

Хәҙерге әҙәбиәт ғилемендә был әҙәби төрҙәрҙе проза (эпос урынына), поэзия (лирика урынына) һәм драматургия (драма урынына) тип йөрөтәләр. Сөнки хәҙерге әҙәбиәттә эпиклыҡ күбеһенсә прозаға, лириклыҡ поэтик әҫәрҙәргә хас. Ә драматургия иһә сәхнә өсөн яҙылған әҫәрҙәрҙең дөйөм атамаһы булараҡ ҡабул ителгән.

# ТӨЙӘК БУЛҒАН ТЫУҒАН ЕР...

*Фәрзәнә Аҡбулатова*

## ТӘБИҒӘТ БЕҘҘЕҢ ЯРҘАМҒА МОХТАЖ

1872 йылда АҠШ-тың Небраска штаты секретары Дэкордэн Мортон 22 апрелде тирә-яҡты йәшелләндереүгә бағышларға тәҡдим итә. Халыҡҡа был тәҡдим оҡшап ҡала, һәм тәүге көндә үк 1 миллиондан артыҡ ағас ултыртыла. Был көн шунан һуң **Ағас көнө** булараҡ билдәлелек ала. Йөҙ йылдан һуң, 1970 йылда, АҠШ-тың Висконсин штатының сенаторы тәҡдиме менән Ағас көнө **Ер көнө** тип үҙгәртелә. Шул йылда уҡ Ер көнөн үткәреүҙә 20 миллиондан артыҡ кеше ҡатнаша. Ә 1990 йылда был хәрәкәт халыҡ-ара ваҡиғаға әйләнә. Хәҙер был байрамда йыл һайын 141 илдә 200 миллиондан артыҡ кеше ҡатнаша. Был көндә экологик өмәләр үткәрелә, йылғалар, күлдәр, урмандар сүп-сарҙан таҙартыла, ағастар ултыртыла. Хәҙер Бөтә донъя ер көнө булараҡ билдәлелек алған был байрам Рәсәйҙә 1990 йылдан бирле үткәрелә.

**1.** Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ, унда күтәрелгән проблемалар тураһында һөйләшегеҙ. Ауылдарҙа, ҡалаларҙа, урмандарҙа, йылға, күл буйҙарында үҙегеҙ күргән экологик хәл тураһында һөйләшеү үткәрегеҙ.

**2.** Тәбиғәтте һаҡлау буйынса донъя кимәлендә күрелгән саралар тураһында һөйләшегеҙ. Бөтә донъя Ер көнө, Бөтә донъя һыу ресурстары көнө ҡасан үткәрелә, уларҙың маҡсаты нимәлә? Тәбиғәтте һаҡлау буйынса эштәр ошо ике көндә генә эшләнергә тейешме? Фекер алышығыҙ.

**3.** Телетапшырыуҙарҙа сүплектәр (свалки), көнкүреш ҡалдыҡтарын (твердые бытовые отходы) утилизациялау, сәнәғәт (промышленность) предприятиеларының йылғаларҙы бысратыуы тураһында йыш күрһәтәләр. Һеҙҙең ошо мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек? Кешелек үҙенең сүп-сарына батмаһын, саф

һауа һулаһын, таҙа һыу эсһен, экологик йәһәттән таҙа аҙыҡ ашаһын өсөн нимә эшләргә кәрәк? Әңгәмә үткәрегеҙ.

4. Күп кенә яҡтарҙа, мәҫәлән, Дүртөйлө, Илеш райондарында урмандағы ҡырмыҫҡа иләүҙәрен кәртәләп алғандар. Ни өсөн икән?

5. Яҙ ваҡытында тирә-яҡты таҙартыу буйынса субботниктар (өмәләр) үткәрелә. Һеҙҙең унда ҡатнашҡанығыҙ бармы? Мөмкинлек табып, үҙегеҙ шундай өмә үткәрегеҙ.

6. Ерҙәге тереклектең төп йәшәү сығанағы – һыу һәм һауа. Һыуһыҙ кеше бер аҙнанан артыҡ тора алмай, ә һауаһыҙ бер нисә минуттан үлә. Ер йөҙөндәге эсәр һыуҙың биштән бер өлөшө (20%) Байкал күлендә тупланған. Йылғаларыбыҙ ҙа бихисап кеүек. Әммә йылғаларҙы бысратыу дауам итә, хатта күп кенә шишмәләрҙең дә һыуҙары эсергә яраҡһыҙға әйләнә бара. Ғалимдарҙың иҫәпләүенсә, бер ҡосаҡ утынды яндырған ваҡытта, бер кешегә йыл буйына һуларлыҡ кислород сарыф ителә. Ә беҙҙә йыл һайын тиҫтәләрсә мең гектар урман яна. Әле һулаған һауабыҙҙың 21 процентын кислород тәшкил итә. Әлек ул күберәк булған, тимәк, кәмей бара. Һәм быға беҙ үҙебеҙ булышлыҡ итәбеҙ.
«Һыу, һауа – йәшәү сығанағы» тигән темаға мәктәп кимәлендә ентекле һөйләшеү үткәрегеҙ, фото (видеояҙма), һүрәт, иншалар конкурсы ойоштороғоҙ, һөйләшеүгә бөтә уҡытыусыларҙы, абруйлы ҡарттарҙы, муниципалитет етәкселәрен саҡырығыҙ.

*Айһылыу Ғарифуллина*

## ГӨРЛӘҮЕК

Гөлдөр-гөлдөр... иллә бытый
Гөрләүек,
Көлдөр-көлдөр, яҙға көлөп
Инәйек;
Сылтыр-сылтыр йылға ҡалай
Моңлана,
Боҙ күлдәген атып бәреп
Ҡылана;
Йылтыр-йылтыр нур йомғағы –
Күләүек,
Яҙ ҡояшын ул бейетә
Кинәнеп;
Шаптыр-шоптор ҡабалана
Шарлауыҡ,

Һыуҙар ташып, ярҙамлаша
Яҙға ныҡ;
Мөлдөр-мөлдөр тамсы илай
Ҡыйыҡта,
Һәр миҙгелдең сиге барын
Тойоп та;
Тимгел-тимгел яҙғы ерем
Йәшәрә –
Йәш бөрөләр күҙен аса
Йәшәргә.

1. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Парлы һүҙҙәрҙең ҡулланылышына иғтибар итегеҙ, яҙғы тәбиғәттең тулы картинаһын тыуҙырыуҙа уларҙың ролен билдәләгеҙ.

*Зөһрә Алтынбаева*

## БАЛАН

Ауыл осонда – сәскәле ялан,
Ялан ситендә үҫә бер балан.
Яҙҙарын балан шау сәскә ата,
Әйтерһең, уға ап-аҡ ҡар ята.

Йылы елдәр, сыуаҡ иртәләр
Балан сәскәһен наҙлап иркәләй.

Көҙҙәрен балан – ялан йәмдәре,
Үҙәкте генә өҙә тәмдәре.
Балан сәскәһен яҙын үҙ иткәс,
Татыйһың тәмен уның көҙ еткәс.

Әсе шул, әсе балан емеше,
Ҡушылған төҫлө уға күҙ йәше.

1. *Үҙәкте өҙә, үҙәк өҙөлә* һүҙбәйләнеше менән һеҙ таныш. Ул төрлө осраҡта төрлө нәмәгә ҡарата әйтелә. Был осраҡта *балан емешенең* тәме шағирәнең *үҙәген өҙә*. Тағы нимәләр кешенең үҙәген өҙә икән – миҫалдар килтерегеҙ, үҙегеҙҙең үҙәкте өҙгән берәй нәмәне (хәлде, ваҡиғаны, күренеште) иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

2. Аңлатығыҙ: ни өсөн гөлдәр, үләндәр, ағастар япраҡты *яра*, ә сәскәне *ата*?
3. Хатаны төҙәтеп, башҡортсаға дөрөҫ тәржемә яһағыҙ: *Масло месяц не трогай дерево цветок стреляет.*
4. Шиғырҙы иғтибар менән, тасуири итеп уҡығыҙ. Уның *йыр тексы* икәнлеген күрһәтеп тороусы билдәләрҙе табығыҙ.
5. Шиғырға Ғәзиз Дәүләтбирҙин тигән композитор көй яҙған. Йырҙың фонояҙмаһын тыңлағыҙ, ҡушылып йырлағыҙ. Оҡшаһа, тексты ятлап алығыҙ – кәрәге тейер.

## Морфология.

### Һүҙ төркөмдәренең бүленешен ҡабатлау




Башҡорт телендә үҙ аллы алты һүҙ төркөмө бар. Рус телендә лә үҙ аллы һүҙ төркөмдәре алтау.

**13-сө күнегеү.** «Балан» шиғырынан һәр һүҙ төркөмөнә берәр һүҙ яҙып алығыҙ. Һүҙ төркөмдәренең билдәләмәләрен иҫкә төшөрөгөҙ.

**14-се күнегеү.** Бирелгән хәрефтәр араһына ҡалған хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

1. А, . . Л.
2. Ш, . . Я.

**15-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Уның йөкмәткеһенә ярашлы, һорауҙар төҙөгөҙ. Текст йөкмәткеһенә үҙегеҙниҙәр өҫтәр инегеҙ?

### Бысала (меңьяпраҡ)

Был үләнде һәр бер кеше беләлер, моғайын. Ул урман аҡландарында, туғайҙарҙа, далаларҙа, урман, юл ситтәрендә, тау биттәрендә үҫә. Бысала – күп йыллыҡ үлән. Уның сәскәһе аҡ, алһыу төҫтә. Бысаланың сәскәһен һәм өҫкө өлөшөндәге япраҡтарын йыялар. Ә уларҙа инде кеше организмы өсөн файҙалы витаминдар, матдәләр ҙә күп, ауырыу тыуҙырыусы бактерияларҙы юҡҡа сығарыусы элементтар ҙа етерлек. Бысала июль айынан сентябргәсә сәскә ата. Уны ошо ваҡыттарҙа йыялар ҙа инде.

## ЭКОЛОГИЯ

1993 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль ассамблеяһы 22 мартты **Бөтә донъя һыу ресурстары көнө** тип иғлан итә. Уның маҡсаттары:

– халыҡты эсәр һыу менән тәьмин итеүҙә ярҙам итеү;

– һыу ятҡылыҡтарын һаҡлауҙың мөһимлеген пропагандалау;

– Бөтә донъя һыу ресурстары көнөн билдәләүгә хөкүмәттәрҙе, төрлө ойошмаларҙы йәлеп итеү.

Эйе, һыуҙың иң мөһим йәшәү сығанаҡтарының береһе икәнлеген беҙ һәр ваҡыт иҫебеҙҙә тоторға бурыслыбыҙ. Һыуһыҙ, ғөмүмән, Ер йөҙөндә бер ниндәй ҙә тереклектең булыуы мөмкин түгел. Быны беҙгә ата-бабаларыбыҙ меңәр йылдар элек үк иҫкәртә килгән. Халыҡ ижадында «тереһыу», «йәншишмә» кеүек изге һүҙҙәр үҙәктә тора: халыҡтың йәшәү-йәшәмәү мәсьәләһе уларҙың булыу-булмауына туранан-тура бәйләп аңлатыла, әкиәттәрҙә, эпостарҙа батыр ҡаһарманлығы аша тасуирлана. Күп дәүерҙәр ата-бабаларыбыҙ ошо аманатҡа тоғролоҡ һаҡлаған.

Эсәр һыуҙы, йылға-күлдәрҙе һаҡлау мәсьәләһе хәҙерге заманда бигерәк тә ҡырҡыу тора. Был турала күп һүҙ һөйләргә, яҙырға, сығыштар яһарға мөмкин, әммә аныҡ ҡына практик эш күрһәтмәй тороп, уны хәл итеп булмаясаҡ. Һыуға, тәбиғәткә, тимәк, – үҙебеҙгә, үҙебеҙҙең киләсәгебеҙгә тик аныҡ эш менән генә ярҙам итә алабыҙ.

*Дамир Шәрәфетдинов*

## ЙЫЛҒА БАҒЫРЫ

Бала саҡта мин Константин Паустовскийҙың «Ручьи, где плещется форель» тигән хикәйәһен уҡып, был балыҡты бик күргем килгәйне. Ул саҡта форелдең беҙҙең яҡта ла йәшәгән бағыр балығы икәнен белмәй инем. Аҙаҡтан иһә Көньяҡ Уралдың терегөмөштәй таҙа һәм һалҡын, йүгерек йылғасыҡтарында уны үҙемә лә тотҡоларға тура килде. Тап шундай йылғалар бағырҙың төйәге булып тора ла инде. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундай һыуҙар беҙҙә бөтөнләй ҡалмағанлыҡтан, бағыр ҙа юҡҡа сыҡты.

Бағырҙы (рустар уны **пеструшка** тип тә атай) **йылға** һәм **күл бағырына** бүлеп йөрөтәләр. Әммә был бүленеш бик шартлы, сөнки улар эттең ике тоҡомо һымаҡ ҡына. Күл бағыры ыуылдырыҡ сәсергә йылғаларға үрләй ҙә шунда тороп ҡала.

Бағырҙы беҙҙең яҡтарҙың иң матур балығы тиергә мөмкин. Ул йәйғорҙоң төрлө төҫтәре менән уйнай, тәне буйлап төрлө төҫтәге төртөктәр һибелгән. Төҫө, йәшәгән еренә һәм йыл миҙгеленә ҡарап, төрлөсә үҙгәрә.

Йылға бағыры ҙур булмай – 20–30 сантиметр самаһы ғына. Шулай ҙа, уңайлы шарттар булғанда, был балыҡ бер метрҙан да артыҡ үҫеп китергә һәләтле. Рәсәйҙә, мәҫәлән, 9 килограмлыҡ бағыр тотолоуы теркәлгән, ә АҠШ-та (унда бағырҙың йәйғор төҫөндәге төрө йәшәй) рекорд 19 килограмға еткән. Күҙ алдығыҙға килтерә алаһығыҙмы: кескәй генә йылғаларыбыҙҙа ла берәр метрлыҡ балыҡтар тулап ятһын әле!.. Ана шундай йылғалар тураһында яҙған да инде Паустовский үҙенең әҫәрендә. Тимәк, булғандыр...

Бағыр көҙөн ыуылдыраҡ сәсә, башҡа ваҡыттарҙа һалҡын һыуҙарҙың кислородҡа бай ятыуҙарында (ҡумырыҡтарҙа) йәшәй. Күбеһенсә һыу бөжәктәре, ваҡ балыҡ менән туҡлана.

Саф һыулы йылға-күлдәребеҙҙең бер биҙәге булып йәшәһен һәм үрсеһен тиһәк, был балыҡты һәр яҡлап һаҡлауҙы ойоштороорға кәрәк.

1. Мәҡәләлә һүҙ барған балыҡ тураһында һеҙ нимәләр беләһегеҙ? Уны күргәнегеҙ бармы? Был балыҡ тураһында белешмә төҙөгөҙ.
2. Мәҡәләнең авторы, бағыр беҙҙә хәҙер юҡҡа сыҡҡан, ти. Был бик үк дөрөҫ түгел: тау йылғаларында уны һирәкләп осра-

тырға мөмкин. Ләкин ул, бәрҙе (хариус), ҡыҙыл балыҡ (таймень) кеүек, Ҡыҙыл китапҡа индерелгән – уларҙы тоторға ярамай. Үҙегеҙҙең тирәләге йылғаларҙа, күлдәрҙә йәшәгән балыҡтарҙың исемлеген төҙөгөҙ, һүрәттәрен төшөрөгөҙ, һәр балыҡҡа характеристика бирегеҙ, бөтәгеҙҙең эштәрен берләштереп, «Беҙҙең яҡ балыҡтары» тигән альбом төҙөгөҙ.

**3.** Ололарҙан һорап, улар заманында беҙҙең йылғаларҙа балыҡтар нисек булғанлығын белегеҙ. Балыҡ запасының кәмеүенә, ҡайһы бер балыҡтарҙың бөтөнләй юҡҡа сығыуына килтергән сәбәптәрҙе тикшерегеҙ:
– урмандарҙы күпләп ҡырҡыу;
– иген баҫыуҙарын ашлау;
– һыуһаҡлағыстар төҙөү;
– заводтарҙың һыуҙы бысратыуы;
– кешеләрҙең йылғаларға сүп-сар ташлауы;
– браконьерҙар.
Ошоларҙың һәр береһенә ентекле яуап бирегеҙ.

**4.** Балыҡ тотоуҙың ысулдарын беләһегеҙме? Һәр ысулға аңлатма бирегеҙ:
– ҡармаҡлап тотоу;
– мәскәүләп тотоу;
– һалдау (һандау) менән төртөп тотоу;
– йылым (бредень) менән һөҙөү;
– ау (сеть) ҡороп тотоу;
– нәрәтә (нерето) йәки мурҙа (морда) менән тотоу;
– шартлатып тотоу.

*Флүр Ғазин*

## «ҠЫРАУ ТЕЙҺЕН ӘЙҘӘ...»

Май айының йәмле бер кисе. Тышта иҫ киткес саф һауа. Ошо һауаға муйыл сәскәһенең тәмле еҫе лә ҡушылып, һауаны һулап туйғыһыҙ итә. Кистең яйлап һыуыта башлауы ғына мине хафаға һалды: муйылдарға ҡырау тейеп ҡуймаһа ярар ине.

Күп йәшәгән, күпте күргән күршем Хафиз бабайға инәм. Ул да баҡсаһында йөрөй икән – моғайын, муйыл сәскәһенең еҫенә ләззәтләнәлер.

– Ҡырау төшөрмө икән инде? – тим, хафаланып.

– Төшһөн әйҙә, – тип һалды был.

Мин уға, был нимә һөйләй икән, тип, аптырап ҡарайым. Ләкин уның етди йөҙөндә бер ниндәй ҙә шаярыу-фәлән күренмәй.

– Эйе, эйе, ҡырау төшһөн әйҙә, – тип ҡабатлай был. – Исмаһам, ауыл тирәһендәге муйылдар һындырылмай, ҡырҡылмай, имен ҡалыр.

Бәй, бабай дөрөҫтө һөйләй бит!

Ысынлап та, яҙ еттеме – муйыл ағасына көн бөтә. Матур итеп сәскә атып ултырған муйылдың ботаҡтарын һындырып, өйҙәренә алып ҡайталар ҙа бер-ике көндән, сәскәләрҙең хуш еҫе бөткәс, ҡыйлыҡҡа сығарып ташлайҙар. Ә инде муйылдың емештәре өлгөрһә, уның хәле бигерәк аянысҡа әйләнә – кешеләр, емештәрҙе ағаста көйөнсә йыймай, ботаҡтарын һындыра, хатта тотош ағасы менән ауҙарып ҡуя.

Был вәхшилек, әлбиттә, эҙһеҙ ҡалмай. Муйыллыҡтар ҡороп, юҡҡа сыға бара. Хәҙер ауыл тирәһендә муйыл ағасын табырмын тимә.

Муйыл ағасының тамырҙары оҙон, ныҡ. Шуның менән ул йылғаларҙың ярҙарын емерелеүҙән һаҡлай. Муйыллыҡтар ҡороғас, йылға буйҙарының йәме китә, ярҙар емерелә, йылғалар һайыға. Ә бәләкәй йылғалар ҡышҡы һалҡындарҙа төбөнә тиклем туңалар. Тимәк, унда балыҡтарға ла йәшәү мөмкинлеге ҡалмай.

– Муйылдарға ҡырау тейһен әйҙә. – Мин дә күршемдең фекеренә ҡушылам.

1. Ниндәй була ул – *иҫ киткес саф һауа?* Һеҙ уны һулағанығыҙ бармы? Ул ҡайҙа һәм ҡасан була? Һулаған һауабыҙ шулай булһын өсөн нимә эшләргә кәрәк?
2. Һеҙҙең муйыл (черёмуха) ағасын күргәнегеҙ, әлбиттә, барҙыр. Ә уның сәскәһен өҙгәнегеҙ, емешен йыйғанығыҙ бармы? Нисек йыйғанығыҙ һәм нисек йыйырға кәрәклеге тураһында һөйләгеҙ.
3. Әсәйҙәрегеҙҙән һорап, муйыл емешенән эшләнгән аҙыҡтар тураһында белешмә төҙөгөҙ.
4. Муйыл ағасына тулы характеристика биргән белешмә төҙөп яҙығыҙ.
5. Һеҙ Хафиз бабайҙың: «Ҡырау тейһен әйҙә…» – тигән һүҙҙәренә ҡушылаһығыҙмы?
6. Муйылға арналған шиғырҙар, йырҙар байтаҡ – бер нисәһен табып уҡығыҙ.

**16-сы күнегеү.** Бирелгән исемдәргә ниндәй сифаттар ҡуйып була?

Ҡояш, ат, ағас, япраҡ, тамыр.

Өлгө: *Көҙ – йылы, ямғырлы, былтырғы...*

**17-се күнегеү.** Рус телендә һәм башҡорт телендә исемдәрҙең килеш менән үҙгәрешен күрһәтегеҙ. Ниндәй айырмалар бар?

| Родительный падеж | Эйәлек килеш |
|---|---|
| стол**а** | өҫтәлд**ең** |
| рек**и** | йылға**ның** |
| пол**я** | ялан**дың** |
| матер**и** | әсәй**ҙең** |
| столов**ой** | ашхана**ның** |
| рабоч**его** | эше**нең** |
| деревь**ев** | ағастар**ҙың** |
| улиц | урамдар**ҙың** |
| мяч**ей** | туптар**ҙың** |

Башҡорт телендә исемдәрҙең килеш ялғауҙары стандарт формала була. Ялғауҙарҙың фонетик төрҙәре генә була. Ә рус телендә склонение күп төрлө.

*Мостай Кәрим*

## АЙЫУ МАЖАРАҺЫ

Арҡыры аяҡ айыуҙың бик күп мажаралары тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр.

Умарталыҡҡа урлашырға килгәс, бал ҡорттары сағыуҙан ҡасып барғанда ул ҡоҙоҡҡа ла йығылып төшкән. Шул саҡта билен имгәтеп, әле лә арт һанын күтәрә алмай йонсой. Үҙе лә ибәтәйһеҙ инде.

Хәйләкәр төлкөнөң һүҙенә ышанып, балыҡ тотам тип, мәкегә ҡойроғон да тығып ултырған ул. Уның был кәсебе ни менән бөткәнен бөтә кеше белә: төн уҙғансы, ҡойроҡ боҙға йәбешеп туңған. Ә иртән һыу алырға төшкән килендәр айыуҙы көйәнтәләр менән туҡмарға тотонғандар. Айыу ҡасып ҡотолған, ә ҡойроғо өҙөлөп ҡалған. Шунан бирле ул сонтор ҡойроҡ менән йөрөп ята. Үҙе лә бер ҡатлы шул. Хәйләкәр төлкөгә ышанмаҫҡа кәрәк ине лә бит.

Ә быйыл йәй айыу, йөрөй торғас, саҡ-саҡ ҡына өс аяҡҡа тороп ҡалманы. Ағас аяҡ яһатып алырға тура килә ине шул үҙенә. Юғиһә, бынау тиклем кәүҙәне өс аяҡ ҡына йөрөтә алыр инеме ни? Был мажара ла үҙенең ғәмһеҙлеге арҡаһында булды инде.

...Ағиҙелдең һеңлеһе тип йөрөтөлгән Ҡариҙел исемле йылғаны ишетеп тә, бәлки, күреп тә белеүселәр барҙыр. Урал итәгенең ҡаялы бейек тауҙары, ҡалын урмандары, сәскәле үҙәндәре буйлап ағып төшә лә Ҡариҙел Ағиҙелгә килеп ҡушыла. Ағиҙел – Камаға, Кама Волгаға ҡоя. Уйлап ҡараһаң, иҫең дә китерлек бит: беҙҙең Ҡариҙелдең һыуы Каспий диңгеҙенә тиклем барып етә. Махачкала малайҙары, Каспийҙа һыу ингәндә, Ҡариҙелде, моғайын, иҫтәренә лә төшөрмәйҙер әле. Ә бит улар сумып-сумып уйнаған һыуҙа Ҡариҙелдең дә тамсылары бар. Һөйләй китһәң, хәбәр күп инде ул. Ҡариҙелдән кәмәгә ултыр ҙа биш диңгеҙҙең теләһә ҡайһыһына ҡарап сыҡ та кит! Хуш күрһәң, бөтә донъяны урап ҡайт. Юл асыҡ. Рәхим ит!

Бына ниндәй дан йылға бит беҙҙең Ҡариҙел! Шуға ла инде яҙ һайын Каспийҙың төрлө-төрлө балыҡтары беҙҙең һыуға ыуылдырыҡ сәсергә менәләр. Йәмле ерҙең ҡайҙа икәнен беләләр улар, йылтыр күҙҙәр! Шул балыҡтар араһында Ҡырпа исемле ғәләмәт ҙурҙары, кәмә буйлыҡтары ла була. Ҡунаҡ булып ҡына килгәнгә күрә лә, ул балыҡтарҙы беҙҙә тотмайҙар. Әҙәп һаҡлайҙар. Тик ҡунаҡтар үҙҙәре генә ҡайһы ваҡыт әҙәпте боҙоп ташлайҙар. Анау Ҡырпа тигәне арала үтә ҡомһоҙ бер балыҡ инде.

Ә айыу шул Ҡырпаның ниндәйлеген әле быйыл йәй генә ныҡлап төшөндө. Был турала һөйләп үткәндә лә ярай.

Яр буйында баландар сәскә атҡан, тауҙар һәм туғайҙар хуш еҫ бөркөп торған, урмандарҙы яңғыратып ҡоштар һайраған бер саҡ ине. Таңда сутылдаған һандуғас тауышына уянған ҡарт айыу, төш еткәнсе кирелеп-һуҙылып, ҙур саған күләгәһендә ятты. Әллә үҙенең ялҡаулығын еңә алманы, әллә үләндәр еҫенән иҫереп, йәйге моңдарға таң ҡалып, рәхәтләнеп ауналы. Айыуҙың күңелендә ни барын ҡайҙан белеп бөтәһең инде.

Ҡояш түбә өҫтөнә күтәрелгәс, ул тағы бер аҙ кирелде лә урынынан торҙо. Йылтырап ятҡан Ҡариҙелде япраҡтар селтәре аша күреп алғас: «Битте-күҙҙе йыуып менергә кәрәк әле», – тигән уйға килде. Лап-лоп баҫып, ашыҡмай ғына яр ситенә төштө. Башта, эҫе ҡом өҫтөнә ултырып, бер талай тирә-яҡты күҙәтеп торҙо. Һыу өҫтө тып-тын. Һирәк-һаяҡ ваҡ балыҡтар ғына һикерешеп уйнай. Яҡын-тирәлә айыуҙы ҡурҡытырҙай йән эйәһе күренмәй.

Һыу түбәнендә, бынан бер саҡрым самаһы ерҙә, ҙур төҙөлөш бара. Унда туҡтауһыҙ машиналар шаулай, ҡырмыҫҡа иләүендәге кеүек кешеләр ҡайнаша. Ләкин уларҙың айыуҙа эштәре

юҡ. Айыу ҙа иртә яҙҙан бирле уларға күнегеп бөттө инде. Дөрөҫ, тәүҙә бер аҙ бошонобораҡ йөрөнө-йөрөүен, хатта башҡа берәй тауға күсеп китергә лә елкенгеләп ҡуйҙы. Ләкин был ниәтенән тиҙ кире ҡайтты. Ни тиһәң дә, тыуған ер бит! Төҙөлөш барған яҡтағы шау-шыуға ла эйәләшеп үк китте. Шуға ла айыу әле лә ул яҡҡа бер генә боролоп ҡараны.

Ҡояшта ултыра торғас, айыуға эҫе булып китте. Ул, һыуҙың ситенә генә килеп, тәпәйен тығып ҡараны. Бер аҙ эскәрәк инеп һыу эсте, битен йыуҙы.

Унан һуң ҡомайылға ултырып алды ла алғы тәпәйе менән һыу сәсрәтеп уйнарға кереште. Һуҡҡан һайын төрлө төҫтәге тамсылар уның күҙ алдында йымылдашып һикерештеләр. Был уйын айыуға бик оҡшаны. Ул бөтөнләй мауығып китте. Бара торғас, ике тәпәйе менән бер юлы һуғырға тотондо. Тамсылар уның һайын бейегерәк сәсрәнеләр. Айыу, еүеш моронон күккә сөйөп, уларҙың йымылдашып төшкәнен ҡарап рәхәтләнде.

Уйын иң ҡыҙған бер мәлдә, бәләкәйерәк кәмә оҙонлоғо Ҡырпа балыҡ һыу ярып килеп сыҡты ла айыуҙың алғы уң тәпәйенән эләктереп алды. Билдәле, айыу, уйынға алданып, уның килгәнен һиҙмәй ҡалды. Ул ҡуҙғалғылағансы, Ҡырпа тәпәйҙе бөтөнләй үк йотоп ебәрҙе. Бына бер заман китте алыш! Ҡырпа айыуҙы һыу эсенә һөйрәй. Һөйрәй алмай. Айыу балыҡты ярға сығармаҡсы итә. Ләкин хәлдән килмәй. Башта ул бәләнән тауыш-тынһыҙ ғына ҡотолмаҡсы ине лә оҙаҡ сыҙай алманы, үкерергә тотондо. Тартыш ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. Айыу үкерә, Ҡырпа үрле-ҡырлы һикерә. Тәпәйҙе бик ысҡындырыр ине лә бит, хәҙер ул үҙе ысҡынмай, тештәр ебәрмәй. Икеһенең дә хәл шәптән түгел ине. Шулай ҙа айыу, үкерә-үкерә булһа ла, Ҡырпаны бер аҙ ярға яҡынлаштырҙы. Ләкин балыҡ та тиҙ генә бирешергә теләмәне. Ай-һай, үҙе лә сая икән.

Әгәр төҙөлөштәге эшселәр айыу үкергәнде ишетмәһәләр, нимә менән бөтөр ине икән был алыш? Ҡайһыһы еңер ине икән быларҙың? Хатта әйтеүе лә ауыр.

Айыу менән Ҡырпа тартышҡан арала, ҙур тракторға ултырып, ҡомло яр буйлап кешеләр килеп етте. Кемдер берәү мылтыҡ та күтәреп алған. Кеше һәр нәмәнең хәйләһен уйлап таба бит. Улар, нисектер рәтен табып, һуғыш суҡмарҙарының икеһен дә сынйырлап алдылар ҙа трактор менән ҡоро ергә һөйрәтеп сығарҙылар. Ҡырпаны, уҫал ниәт менән һуғыш башлағаны өсөн, шунда уҡ атып үлтерҙеләр һәм, самосвалға

һалып, балыҡ заводына ебәрҙеләр. Айыуҙы, сынйырлап, тракторға таҡтылар. Ул башта тулап ҡараны ла, аҙаҡ аҡһаҡлап-аҡһаҡлап булһа ла атлай бирҙе. «Эштең яманыраҡ бөтөүе лә мөмкин ине бит әле», – тип уйланы ахыры, башҡаса тыпырсынмаҫ булды.

Бер аҙнанан һуң, айыуҙың имгәнгән аяғы төҙәлә биргәс, уны Өфөгә зверинецҡа оҙаттылар. Шулай итеп, ул ҡалала йәшәүсе булып китте. Уға «Балыҡсы» тигән яңы исем ҡуштылар. Зверинецҡа килгән малайҙар йыш ҡына:

– Сәпәкәй ит әле, Балыҡсы! – тиҙәр уға. Ә теге тартыштан һуң кәкрәйеп ҡалған тәпәйен күрһәтә лә башын ғына сайҡап ҡуя:

– Ниңә инде шул бер балыҡ башын сәйнәйһегеҙ, егеттәр? – ти ахыры.

Ҡала Балыҡсыға оҡшаны булһа кәрәк. Күңеле уның һәр ваҡыт күтәренке күренә. Тик ҡояшлы ямғыр яуғанда һәм танауына балыҡ еҫе килеп бәрелгәндә генә, бер аҙ эсе бошоп китә. Уға ла күнегер әле. Айыу бит ул.

1. Хикәйәне тасуири уҡығыҙ, йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.
2. Автор айыуҙы *бер ҡатлы,* ти. Нимә ул – *бер ҡатлылыҡ*? Ике, өс һәм, ғөмүмән, ҡатлы-ҡатлы ла булып буламы? Антонимын табығыҙ.
3. *Иҫ китеү, таң ҡалыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. *Үрле-ҡырлы һикереүҙе* нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Һикереүҙең тағы ниндәй төрҙәре бар?
5. Ҡариҙелдән, кәмәгә ултырып, биш диңгеҙҙең teләһә ҡайһыһына сығып китеп була, ти автор. Ниндәй диңгеҙҙәрҙе күҙ уңында тота ул? Уларға алып барған һыу юлын табығыҙ (картанан).
6. Ҡырпа (белуга) балығы тураһында ишеткәнегеҙ бар инеме? Ниндәй балыҡ ул? Беҙҙең йылғаларҙа әле йәшәйме? Уның тураһында белешмә төҙөгөҙ.
7. Нимә ул – *бер балыҡ башын сәйнәү*? Һәйбәт ғәҙәтме ул? Һеҙ үҙегеҙгә шулай тип әйткәндәрен теләр инегеҙме?

**18-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Ниндәй һығымта яһарһығыҙ?

| | | | |
|---|---|---|---|
| боҙҙоң | ҡағыҙҙың | мөгөҙҙөң | һүҙҙең |
| боҙҙо | ҡағыҙҙы | мөгөҙҙө | һүҙҙе |
| боҙҙа | ҡағыҙҙа | мөгөҙҙә | һүҙҙә |
| боҙҙан | ҡағыҙҙан | мөгөҙҙән | һүҙҙән |

**19-сы күнегеү.** Аҙналағы көн исемдәрен башҡортса яҙығыҙ.

**20-се күнегеү.** Үҙегеҙҙән алыҫта йәшәгән туғандарығыҙға барыу юлын аңлайышлы итеп яҙығыҙ.

Башҡорт телендә бөтә исемдәр ҙә тип әйтерлек күплек ялғауын ҡабул итә ала. Күплек ялғауы бөтә осраҡта ла күплекте белдермәй. Мәҫәлән, «Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, буйында һандуғастар һайрай муйылда», «Ай, Силәбеләрҙә беҙ яттыҡ...», «Йөрәккәйҙәрем янып барғанға...» *(Халыҡ йырҙарынан)* Был һүҙҙәрҙәге күплек ялғауы уларға биҙәк бирер өсөн ҡулланыла.

**21-се күнегеү.** Ауыл, ҡала, район исемдәренә күплек ялғауы ҡушығыҙ. Ялғау ҡушылған һүҙҙәр ниндәй мәғәнә белдерәләр?

Өфө, Белорет, Баймаҡ, Әбйәлил, Инйәр, Борай, Илеш, Учалы, Толбазы, Мәләүез.

Күплек ялғауы ҡушылған был һүҙҙәрҙе ниндәй хәреф менән яҙырға кәрәк?

**22-се күнегеү.** Хикәйәнең һуңғы абзацын рус теленә тәржемә итегеҙ.

*Хәмзә Ҡашҡаров*

## ӘБДЕЛХАЛИҠ ОЛАТАЙ ХӘЙЛӘҺЕ

Мин иҫ белә башлаған саҡта уҡ, Әбделхалиҡ олатайҙы «солоҡсо» тип йөрөтәләр ине. Беҙҙән юл аша ғына урынлашҡан ике ауылда – Исҡужа һәм Ҡашҡарҙа унан башҡа солоҡ умартаһы тотоусы, урманда солоҡта бал ҡорттары үрсетеүсе булманы.

Исҡужа ауылының үрге осонда, ауылдан 500–600 метр самаһы ерҙә, Йылайыр йылғаһының аръяғында, өс ҡарағас үҫеп ултыра ине. Уларҙың һәр береһенең йыуанлығы өс кеше ҡоласы тиклем. Ә осонда, 20–25 метр самаһы бейеклектә, хатта унан да бейегерәк булғандыр, соҡоп эшләнгән солоҡ умартаһы бар. Олатай унда бал ҡорттары үрсетте. 80 йәштәр самаһында ла солоҡ ағасына менеп, ҡорттарын ҡарап-тәрбиәләп, солоҡ балы ала торғайны. Урманда уның башҡа солоҡ умарталары ла күп ине.

Беҙ, йәштәр, 80 йәшлек кешенең, парадтағы һалдаттар һымаҡ, егеттәрсә сос, матур итеп атлап йөрөүенә ҡыҙығып та, һоҡланып та ҡарап ҡала торғайныҡ.

Көндәрҙең береһендә, 1960 йылдарҙа булһа кәрәк, минән, урманға барып, үҙенә ярҙам итеүемде һораны. Мин ат егеп килдем. Умарта ҡарай торған барлыҡ нәмәләрен һәм ике метрҙан аҙ ғына оҙонораҡ, әрсеп таҙартылған, бер башына ике тишек тишелгән, унан үткәреп, арҡан тағып бәйләнгән, диаметры 30 сантиметр самаһы ҡайын түмәрҙе тейәтте, һәм беҙ урманға юлландыҡ. Ауылдан ике саҡрымдай ерҙә йылға буйындағы бер ҡарағай-солоҡ умартаһы янына килеп туҡтаныҡ. Барлыҡ нәмәләрен арбанан алғас, бал ҡорттары саҡмаһын өсөн, атты ситкә алып киттек. Әгәр алты-ете ҡорт саҡһа, аттың үлеүе мөмкин икән.

Ҡарағай янына килгәс, олатай: «Яуыз, салыш аяҡ, мәлғүн, йыртҡыс, – тип әрләшеп алды. – Бына, улым, ҡара әле тырнаҡ эҙҙәрен. Айыу, солоҡҡа менеп, бал ҡорттарын туҙҙырып, балына мас булған. Бына, ҡапҡастары ята (солоҡтоң соҡоған урынын яба торған таҡтаны «ҡапҡас» тип атайҙар)».

Олатай ҡайыштың бер осон биленә, икенсе осон, ҡарағайҙы уратып, биленә икенсе яҡтан тағып, 10 метр самаһы бейеклектәге солоҡҡа етеҙ генә менеп китте. Мин уға, арҡан-бауға бәйләп, кәрәкле нәмәләрен биреп торҙом. Солоҡтоң соҡоп тишелгән урынын ҡаплап, рәтләп бөтөргәс, мин уға ҡайын түмәргә тағылған бауҙы бирҙем. Юғарылағы ботаҡ аша арҡанды үткәреп, ерҙән тартып, ауыр ғына ҡайын түмәрен үргә күтәрҙем. Олатай түмәрҙең бауын ҡапҡасты ҡаплап торорлоҡ итеп өҫкө ботаҡҡа бәйләне лә төштө. Унан миңә, айыу ҡабат килһә, түмәр уны осора һуғып төшөрәсәк, тип аңлатты. Түмәр айыуға ҡапҡасты асырға ҡамасаулай. Түмәрҙе ситкә этһә, түмәр кире килә, нығыраҡ этһә, кире килеп, айыуға нығыраҡ эләктерә. Айыу түмәрҙе ни тиклем нығыраҡ этһә, ул айыуға шул тиклем нығыраҡ эләктерә һәм ахыр сиктә айыуҙы осора һуға. Осоп төшөп кәрәген алғас, айыу солоҡҡа ҡабат менмәй. Китә ул был тирәнән.

Беҙ икенсе солоҡ янына барҙыҡ. Әбделхалиҡ олатай кеткелдәп, рәхәтләнеп көләргә тотондо. «Бына, күрәһеңме, салыш аяҡтың кәрәген алып ҡолап төшкән, аунап ятҡан урыны», – тип, йығылған, тапалған үләндәргә күрһәтте. Өҫтә, умартаның алдында, ботаҡҡа тағып бәйләнгән түмәр аҫылынып тора.

– Ҡарағайҙы уратып осло ағастар ҡаҡһаң, шуларға ҡолап төшөп, ҡаҙалыр ҙа үлер ине.

– Юҡ, улым, улай ярамай. Айыу, йыртҡыс булһа ла, бик аҡыллы хайуан, кешеләргә зыяны теймәй тип әйтерлек. Былай ҙа аҙ улар. Уларҙы һаҡларға кәрәк. Айыуһыҙ урман – урман булмай инде ул, – тине олатай.

1. *Мас булған, кәрәген алған* һөйләмдәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Шул уҡ мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән әйтеп бирегеҙ.
2. Әбделхалиҡ олатай (бабай) айыуҙы *салыш* аяҡ тип әрләй. Айыуҙың тағы ниндәй ҡушаматтарын ишеткәнегеҙ бар? Ғөмүмән, ниндәй януар ул айыу? Уның тураһында белешмә төҙөгөҙ.
3. Ололарҙан һорап, солоҡ умартаһын эшләү һәм тәрбиәләү өсөн ниндәй ҡорамалдар ҡулланылғанын асыҡлағыҙ, исемдәрен яҙып алып, мөмкин булғандарының һүрәтен төшөрөгөҙ.
4. Солоҡ балы бик юғары баһалана, уның бер килограмы меңдәрсә һум тора – ни өсөн шулай икәнлеген асыҡлап, «Солоҡ балы» тигән белешмә төҙөгөҙ.
5. Хикәйәгә ҡыҫҡаса аннотация төҙөп яҙығыҙ.

*Варис Ғүмәров*

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫНДА ДАРЫУ ҮҪЕМЛЕКТӘРЕ

Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үҫемлектәрен файҙаланыу тарих төпкөлөнә барып тоташа. Шифалы үҫемлектәрҙе йыйыу, ҡулланыу формаһы дауалауҙың маҡсатына ҡарап билдәләнгән. Май айында һәм июнь башында, йәғни сәскә атыу осоронда, үҫемлектәр айырыуса шифалы була, тип иҫәпләнгән. Үҫемлекте яңы ғына йыйылған, йәғни сей килеш тә, киптереп тә ҡулланғандар. Киптереү өсөн шифалы үҫемлекте шәлкем итеп бәйләп, ҡояш төшмәгән, күләгә булған, ҡоро һәм үтәләй ел өрөп торған ергә элгәндәр. Дарыу өсөн бер йәки бер нисә үҫемлекте ҡушып әҙерләгәндәр.

**Мәтрүшкәнән** (душица) әҙерләнгән төнәтмә (отвар): бер ус үләнде ҡәҙимге сәй кеүек итеп бешергәндәр һәм, үҙен генә йәки һөт ҡушып, йоҡо алдынан йылы килеш 1–2 стакан эскәндәр. Тағы ла бер **рецепт**: бер ус мәтрүшкә һәм бер ус гөлйемеш (шиповник) сәскәһен бер литр һыуҙа сәй кеүек итеп бешереп эскәндәр.

Байтаҡ үҫемлек нервы-психик ауырыуҙарҙы дауалағанда ҡулланылған. Мәҫәлән, баш ауыртыуҙан, баш әйләнеүҙән, ҡолаҡ шаулауынан төнәтмә рәүешендә мәтрүшкә, һары мәтрүшкә (зверобой), пәйғәмбәр тырнағы (ноготки, календула), бысала (меңъяпраҡ, тысячелистник), ҡыҙыл көртмәле япрағын

(листья брусники), мышар емешен (плоды рябины красной), бесәй үләне (валериана) тамырын сәйгә ҡушып бешереп файҙаланылған. Шул уҡ маҡсатта киптереп онталған (төйөлгән) аҡһырғаҡ (чемерица) тамырын еҫкәгәндәр.

**Йоҡоһоҙлоҡ** менән интеккәндә, төнгә ҡаршы мәтрүшкәнән, һары мәтрүшкәнән һәм томбойоҡ тамырынан (корни лилии водяной) әҙерләнгән төнәтмә эскәндәр. **Ныҡ тулҡынланып китеүҙе** (перевозбуждение), **психик ярһыуҙы** (истерика) баҫыу өсөн бесәй үләненең тамыры, мәтрүшкә, йүкә сәскәһе (цветы липы), хәҙрәт үләненең япрағы (листья коровяка метельчатого), айыу көпшәһенең тамыры һәм япраҡтары (корни и листья дягиля лекарственного) ҡушып яһалған төнәтмәне эсергәндәр. Башҡортостандың ҡайһы бер төбәктәрендә, мәҫәлән, Бөрйән, Белорет яҡтарында, халыҡ медицинаһы белгестәре һөйләүенсә, бәғәнәш япрағынан (воронец колосовидный, листья) эшләнгән төнәтмә менән **эскеселәрҙе** дауалағандар.

**Физик хәлһеҙлек, ныҡ ябығыу** (дистрофия) күҙәтелгәндә, яҡшы ашатыу менән бер рәттән, андыҙ тамырынан (корни девясила высокого) әҙерләнгән дауа биргәндәр. Ошо уҡ маҡсатта гөлйемеш (шиповник) һәм ҡара һарына тамырынан (корни папоротника мужского) әҙерләнгән дауа ҡулланылған. Ҡан аҙайғанда (малокровие) туҡланыу рационында кишер менән ҡыҙыл сөгөлдөрҙө күберәк булдырырға тырышҡандар, гөлйемеш тамырының төнәтмәһен эскәндәр. **Көн** (йәки **эҫе**) **һуҡҡанда** (солнечный удар) барлыҡҡа килгән **хәлһеҙлекте** бөтөрөү өсөн, мүк еләге (клюква), ҡара ҡарағат (черная смородина), миләш (мышар), ҡурай еләге (малина) ҡушып яһалған сәй эсергә кәңәш иткәндәр.

**Зәңгенән** (цинга) һауығыу ниәтендә ужымдың йәш үләнен (молодые побеги озимых) ашағандар.

Күп кенә шифалы үҫемлектәр **йөрәк ауырыуҙарынан** ҡулланылған. Йөрәк ауыртыуын, йөрәк тулауын (йыш тибеүен) баҫыу өсөн, һәм, ғөмүмән, **йөрәк сирҙәренән** мәтрүшкә, һары умырзая (горицвет весенний), ынйы сәскәһе (ландыш), әрем (полынь), гөлйемеш (япрағы, емеше), бәғәнәш емеше, ҡурай еләге, балан (калина), ҡара бөрлөгән (ежевика), энәлек, йәки ҡамыраш (боярышник), ҡыҙыл көртмәле емештәре, бесәй үләне тамыры, артыш еләге йәки ылыҫы (плоды или хвоя можжевельника) ҡушып әҙерләнгән төнәтмә ҡабул иткәндәр.

Артыш шулай уҡ халыҡ санитарияһында ла киң ҡулланылған.

Башҡорт халыҡ медицинаһында, **тын юлдары, үпкә ауырыуҙарының** төп сәбәбе һыуыҡ тейеүҙә тип иҫәпләнгән. Шуға ла был осраҡта тирләткес (потогонный) сараларҙы иң эффектлы дауа, тип һанағандар. **Тымау тейһә** (насморк), **сөскөрөү** (чихание), **йүткереү** (кашель) йонсотҡанда, **тамаҡ ауыртҡанда** (боль в горле), **тауыш бөткәндә** (потеря голоса, ларингит), **үпкә шешкәндә** (воспаление легких) тирләткес дауаларға ҙур иғтибар бирелгән. Был осраҡта ҡара һәм ҡыҙыл ҡарағат (красная смородина) емеше һәм япрағы, ҡурай еләге, ҡыр сейәһе (дикая вишня), ер еләге, мүк еләге, йүкә сәскәһе, бесәй ҡойроғо (шалфей), ҡыҙыл борос ҡуҙағы (стручок красного перца) төнәтмәһен эҫе килеш эсергәндәр. Тирләү өсөн балды ла киң файҙаланғандар – уны йә эскәндәр, йә күкрәк тәңгәлен ыуғандар.

Тирләү өсөн ябай ғына ингаляция ла эшләгәндәр: эҫе һыуға кейәү үләне (тимьян, или чабрец башкирский) йәки мәтрүшкә һалғандар һәм бөркәнеп (баштан аша ябынып) үлән һыуынан килгән быуҙы (парҙы) һулағандар. Бүтән төрлө ауырыуҙар менән ауырығанда ла, температура күтәрелеп китһә, тирләткес дауаларҙы киң файҙаланғандар.

**Хроник үпкә ауырыуҙарынан** (шул иҫәптән – туберкулеҙдан да), нигеҙҙә, андыҙ ҡулланылған. **Ашҡаҙан-эсәк юлы** зарарланғанда, файҙаланылған үҫемлектәрҙең һаны ла байтаҡ. **Ауыҙ эсе шешкәндә,** имән ҡайыры (кора дуба), әҫпе еләге (плоды бересклета) төнәтмәһе менән ауыҙ сайҡатҡандар, әҫпе еләге ашағандар. **Ауыҙҙан еҫ килгәндә,** һағыҙ, ҡәнәфер (гвоздика) сәйнәгәндәр. Һағыҙ ылыҫлы ағастар сайырынан йәки ҡайын туҙынан әҙерләнгән. Теш һыҙлауҙы баҫыу өсөн, балтырған (борщевик), пәйғәмбәр сәскәһе тамырын, һуған сәйнәргә йәки һыҙлаған теш өҫтөнә тәмәке онтағы, ағас сайыры һалырға кәңәш иткәндәр. Теш үтә ныҡ һыҙлағанда, тилебәрән (лебеда) орлоғон көйҙөрөп, шул төтөндө уртлағандар. Тилебәрән урынына киндер (тарма), ҡара зирә (дурман обыкновенный) орлоғон да файҙаланғандар. Боронғолар һөйләүенсә, ошолай ыҫлап дауалағанда, ҡайһы саҡта серек тештән «ваҡ ҡорттар» төшә, имеш. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был күренеш хаҡында урта быуаттарҙа йәшәгән атаҡлы врач-ғалим Әбүғәли Сина (Авиценна) (980–1034) ла яҙып ҡалдырған.

**Ашау теләген** (аппетитты) уятыу өсөн, әрем һәм юл япрағы (подорожник) төнәтмәһен эсергә кәңәш иткәндәр. Кеше оҙаҡ ваҡыт **ашҡаҙан ауырыуы** менән яфаланғанда, андыҙ тамырынан әҙерләнгән дауа ҡулланылған. **Эс киткәндә,** муйыл (черемуха), ҡара ҡарағат, ҡара көртмәле (черника), ҡыр сейәһен ашатҡандар йәки был емештәрҙең төнәтмәһен эсергәндәр. Ошо уҡ маҡсатта һары мәтрүшкә, ирәүән (горец змеиный), тумыртҡабаш (клевер красный), эре кесерткән (крапива двудомная), ҡуҙғалаҡ (щавель) тамыры ҡайнатмаһы ҡулланылған, ҡурылған борсаҡ, шөкәрә (сухари) ашағандар. Кесе йәштәге балаларға ҡара ҡарағат төнәтмәһен генә эсергәндәр.

**Эс ҡатҡанда,** эт муйылы (крушина ломкая) һалынған сәй әҙерләгәндәр. Эс күпкәндә (метеоризм) томбойоҡ тамырынан әҙерләнгән дауа эскәндәр. **Һары ауырыуынан** (желтуха) дауалау өсөн ҡайын сәйе (чага), көнбағыш сәскәһе, бүре еләге (волчьи ягоды), һары мәтрүшкә, һарына (лилия кудреватая) тамыры, лимон кеүек һары төҫтәге үҫемлектәрҙең төнәтмәһе файҙаланылған.

**Эсәктәрҙәге паразит селәүсендәрҙе** (гельминттарҙы) ҡыуыу өсөн, әрем (полынь), аҡ йәки асы әрем (полынь горькая), уҫаҡ ҡайыры (кора осины) төнәтмәһе эскәндәр. Әрем вабаға (чума) ҡаршы ла ҡулланылған.

Күп кенә үҫемлектәр ярҙамында **бәүел-енес ағзаларының сирҙәрен** дауалағандар. Мәҫәлән, бала төнөн (йоҡлағанда) **бәүел (һейҙек) тотмау** (энурез) менән яфаланһа, артыш емешенең йәки ылыҫының төнәтмәһен эсергәндәр. **Бәүел килмәгәндә,** йәғни һейә алмай йонсоғанда ла, ошолай дауалағандар. **Аҡ килеү** (молочница) булғанда, ҡатын-ҡыҙҙарға тумыртҡабаш төнәтмәһен эсергә кәңәш иткәндәр.

Ҡайһы бер үҫемлектәр **тире ауырыуҙарын** дауалағанда ҡулланылған. **Экзема** (тимерәү) сабыртмаһын селек (карагана, чилига) һуты менән сылатып дауалағандар. Селек һуты алыр өсөн, сей селек сыбығын утта еңелсә ҡыҙҙырғандар, һөҙөмтәлә, сыбыҡтан һут ағып сыҡҡан. Экзема сәбертмәһен тилебәрән (лебеда), ҡара зирә, киндер (конопля) орлоғон көйҙөргәндә сыҡҡан төтөнгә лә тотҡандар. Ҡамасау үләне (василистник желтый), нумия (заячья капуста) тамыры, тилебәрән орлоғо, әсе ҡаҡы (свербига восточная) һәм ҡайын дегетенән экземаға ҡаршы май (мазь) ҙа эшләгәндәр. Экземаға ҡаршы шулай уҡ ерек (ольха серая) һәм йәбешкәк ерек (ольха клейкая) төнәтмәһе, балан, ҡайын еләгенең һутын да һөрткәндәр. **Тәңкәле**

**тимерәүҙе** (псориаз) һәм **ҡоро тимерәүҙе** (невродерматит) дауалағанда, быларҙан тыш, алоэ һуты һөртөп дауалау ҙа булған. **Кесерткән биҙгәге** (крапивница) йонсотҡанда, бешекләнгән эре кесерткән менән сабынғандар. Шулай уҡ ҡырмауыҡ йәки һырлан (липучка обыкновенная) үләненең төнәтмәһе менән сылатыу билдәле. **Тәндең ҡысытыуын** баҫыу өсөн уны имән ҡайыры, ат ҡуҙғалағы, аҡһырғаҡ йәки аҫҡырғаҡ төнәтмәһе менән ыуғандар. **Ала ауырыу** (витилиго) таптарын бөтөрөү өсөн башлы һуған һуты менән сылатҡандар. **Сөйәлде** һөтлөкәй (молочай), сөйәл үләне (чистотел) һуты йәки имән ҡайыры төнәтмәһе менән эшкәрткәндәр. **Тәндәге яман шешкә** һабын үләне (мыльнянка лекарственная) төнәтмәһен һөрткәндәр.

**Баштың ҡауаҡлауын** бөтөрөү өсөн, уны ҡайын япрағы төнәтмәһе менән йыуғандар, ә сәс үҫеүҙе яҡшыртыу ниәтендә мәтрүшкә, имән ҡайыры, ағас өҫтөндә үҫкән бәшмәк орлоғо, сөрөк (древесная труха) һипкәндәр.

**Ыйыҡтан** (гнойная опухоль – скрофулодерма) һауығыу өсөн, лауыр (ҡылауыр) үләне (купена многоцветная) төнәтмәһен эскәндәр, ә уның япраҡтарын тиренең зарарланған еренә япҡандар. Ыйыҡты шулай уҡ тилебәрән, ҡара зирә, киндер орлоғон көйҙөргәндәге төтөн менән ыҫлағандар. **Сиҡандар** йыш сығып, уларҙан ҡотолоу оҙаҡҡа һуҙылһа, ҡомалаҡ, лауыр үләне төнәтмәһен эскәндәр, сиҡан өлгөрөп, тиҙерәк һытылһын өсөн, уға юл япрағы, әсе ҡамыр япҡандар.

**Таҙҙы** (парша), **ҡысынманы** (чесотка), **ҡырҡылсаны** (стригущий лишай) дауалау өсөн, аҡһырғаҡ тамыры төнәтмәһен һөрткәндәр. Ошо маҡсатта киптереп онталған әсе ҡаҡы тамырын, дегеттән яһалған шифалы майҙы ҡулланғандар.

Халыҡ медицинаһында көлдө лә киң файҙаланғандар. Уҫаҡ, ҡарағас көлө бигерәк тә шифалы, тип иҫәпләнгән. Көл менән ҡысынма булғанда ыуынғандар. Эренле яраны, эренле-ҡутырлы тире ауырыуҙарын дауалау өсөн, көл ҡатыштырып дауа майы әҙерләгәндәр. Көл һелтеһе (щелочь из золы) бигерәк тә йыш ҡулланылған. Һелтене түбәндәгесә яһағандар: 1–2 кг көлдө бер биҙрә ҡайнар һыуға һалып бутағандар. 1–2 сәғәт үтеүгә, һелте өлгөргән. Ул ҡысытыуҙы (зуд) баҫыу, ҡысытманы һәм башҡа ҡайһы бер тире ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланылған. Баш ҡысытҡанда, ҡауаҡлағанда ла, һелте менән йыуғандар. Һелте сәсте һәм баштың тиреһен бик һәйбәт таҙартҡан, сәстең ҡойолоуы, баштың ҡысытыуы кәмегән.

1. *Дарыу – аяҡ аҫтында,* ти халыҡ. Ысынлап та, беҙҙә нисәмә меӊ төрлө үлән үҫә, ә беҙ уларҙыӊ исемдәрен дә белеп бөтмәйбеҙ. Ә уларҙыӊ күбеһе шифалы икән. Үҙегеҙ белгән үләндәрҙеӊ исемдәрен (башҡортса, русса, татарса йәки бүтән берәй телдә) яҙып сығығыҙ, улар тураһында белешмә төҙөгөҙ.
2. Варис Ғүмәров – Башҡортостанда үҫкән дарыу үләндәрен ентекләп өйрәнгән ғалим. Был мәҡәләлә ул бик күп шифалы үҫемлектәр тураһында һөйләй. Һеҙ уларҙыӊ исемдәрен, уларҙан эшләнгән дарыу рецептарын яҙып алығыҙ, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.
3. Атай-әсәйҙәрегеҙҙән, ололарҙан һорап, дарыу үләндәренеӊ исемлеген яҙығыҙ, уларҙан эшләнгән дарыу рецептарын табығыҙ.
4. Текста телгә алынған ауырыуҙарҙыӊ исемлеген төҙөгөҙ, уларҙан дауаланыу (лечение) һәм һаҡланыу (профилактика) саралары тураһында фекер алышығыҙ.
5. Класс менән «Беҙҙеӊ йәшел аптека» тигән альбом булдырығыҙ, унда дарыу үләндәре тураһында тапҡан бөтә материалдарығыҙҙы (һүрәттәр, рецепттар, белешмәләр һ. б.) туплағыҙ, уны даими рәүештә тулыландырығыҙ.
6. Шифалы үҫемлектәр тураһында халыҡ ижады әҫәрҙәрен эҙләгеҙ, тапҡандарығыҙҙы альбомығыҙға теркәп барығыҙ.
7. Халыҡ медицинаһында үҫемлектәрҙән тыш тағы нимәләрҙән дарыуҙар яһайҙар? Ололарҙан һорашып яҙып алығыҙ.
8. Халыҡ медицинаһы менән шөғөлләнгән врачтарҙы кемдәр тиҙәр? Һеҙҙеӊ ауылда (йәки тирә-яҡ ауылдарҙа) ундай врачтар бармы? Булһа, улар менән осрашып, интервью алығыҙ, уларҙыӊ дауалау серҙәренә төшөнөргә тырышығыҙ.
9. Көндәлек тормошта беҙ халыҡ медицинаһы сараларын йыш ҡулланабыҙ. Ул, моғайын, һеҙҙеӊ менән дә булғандыр. Шундай бер хәл тураһында кескәй хикәйә төҙөп яҙығыҙ.

*Рамай Ҡаһир*

## АЛТЫН ТАМЫР

Уралтауҙа үҫә йәйен
Серле үлән – алтын тамыр,
Тамырҙары ергә һеӊгән,
Уны эҙләп кемдәр табыр?

Һары тамыр алыҫтарҙан
Ялтлап тора алтын төҫлө.
Кескәй генә шул үләндеӊ
Беҙҙеӊ яҡта даны көслө.

Уның тамыр төнәтмәһе
Йәнгә-тәнгә көстәр бирә,
Ярһыуҙарҙан биҙгән йөрәк
Сәғәт төҫлө тигеҙ тибә.

Ауыр саҡта һеҙгә, дуҫтар,
Алтын тамыр бүләк итәм,
Көстәр йыйып, тиҙ арала
Һауыҡыуҙы һеҙҙең көтәм.

Уралымда үҫә шулай
Серле үлән – алтын тамыр.
Һаулыҡ һорап табынһағыҙ,
Тамырынан балы тамыр.

1. Шиғырҙа һүҙ барған үҫемлек тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Уны ни өсөн *алтын тамыр* тип атағандар икән? Уның тураһында мәғлүмәттәр табып, «йәшел аптека»ғыҙға теркәп ҡуйығыҙ.
2. Алтын тамыр (Золотой корень) Алтайҙа һәм беҙҙең Уралда бейек тау баштарында тундра (горная тундра) шарттарында үҫә. Уның фәнни исеме (научное название) – Родиола розовая. Беҙҙең Ирәмәл башында үҫкәнен *родиола иремельская* тип йөрөтәләр. Алтын тамыр Ҡыҙыл китапҡа индерелгән, уны йыйырға ярамай. Әммә ҡайһы бер кешеләр, тейешле шарттар булдырып, уны баҡсаларында үҫтерәләр. Алтын тамыр тураһында шиғыр яҙығыҙ.
3. Шиғыр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ, уның етешһеҙлектәрен эҙләгеҙ.

## ҠӘҘИМ АРАЛБАЙ

*(1941)*

Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Әбделғәлим улы Аралбаев 1941 йылдың 1 сентябрендә Хәйбулла районы Таңатар ауылында тыуған. «Утлы кисеүҙәр», «Аҡ тирмә», «Батыр яраһы», «Сапҡын», «Күк бүре», «Ҡойон», «Тарас менән Ҡарас», «Рух яҙыуы», «Таналыҡ тауышы», «Ҡаратау тотҡоно» һ. б. поэмалары, шиғырҙары, робағиҙары киң билдәле. Егермегә яҡын китап авторы.

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## ЯНҒАНТАУ

Өшөп-туңып барған йөрәгемә
Ут алырға килдем, Янғантау,
Янып-ярһып барған йөрәгемә
Ял алырға килдем, Янғантау.
Ҡорғаҡһып та барған күңелемә
Һут алырға килдем, Янғантау,
Бушлыҡ хасил булған күңелемә
Уй һалырға килдем, Янғантау.
Онотолоп бөткән хистәремә
Туй яһарға килдем, Янғантау,
Ҡотһоҙ була барған кистәремә
Ҡот ҡойорға килдем, Янғантау.
Ҡаты елдәр ҡаға арҡабыҙға –
Наҙ татырға килдем, Янғантау,
Һулып барған йәшлек гөлдәремә
Яҙ алырға килдем, Янғантау...

1. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Нимә ул Янғантау? Шағир унда ниңә килгән?
3. Шиғырҙағы йоп (чётные) юлдарға иғтибар итегеҙ, уларға һалынған тура һәм күсмә мәғәнәләрҙе аңлатығыҙ.
4. Ҡ. Аралбаев шиғырҙың һәр икенсе юлында *Янғантау* һүҙен ҡабатлаған. Ниңә икән? Тавтология түгелме ул? Асыҡлағыҙ.
5. Янғантау санаторийы ҡайҙа урынлашҡан? Уның тураһында байтаҡ ҡына шиғри әҫәрҙәр ижад ителгән, эҙләп ҡарағыҙ.
6. Башҡортостанда тағы ниндәй санаторийҙар бар? Улар тураһында китаптар, буклеттар эшләнгән. Мәғлүмәт туплап, «Башҡортостан санаторийҙары» тигән белешмә төҙөгөҙ.
7. Һеҙҙең берәй санаторийҙа (йәйге лагерҙа, ял йортонда, курортта һ. б.) булғанығыҙ бармы? Тәьҫораттарығыҙ менән уртаҡлашығыҙ.

### Әҙәби жанр тураһында төшөнсә

Әҙәби төрҙәрҙе жанрҙарға бүлеп йөрөтәләр. **Жанр** – француз һүҙе, башҡортса төр тигәнде аңлата.

Эпосҡа ҡараған, йәғни **эпик жанрҙар:** хикәйә, повесть, роман, очерк, мәҫәл һ. б.; лирикаға ҡараған, йәғни **лирик**

**жанрҙар:** ода, элегия, сатира һ. б.; драмаға ҡараған, йәғни **драматик әҫәрҙәр:** трагедия, драма, комедия һ. б. Күренеүенсә, жанрҙар бер-береһенән ижад ителеү формаһы (сәсмә, шиғри) һүрәтләү алымдары, композицион төҙөлөштәре, образдар системаһы, күләме менән айырылалар.

Ҡайһы берҙә бер жанрға ҡараған әҫәрҙәрҙе тематик йәһәттән төркөмләп ҡарайҙар. Мәҫәлән, тарихи роман, психологик роман, фантастик роман, детектив роман һ. б. Уларҙы жанр формалары тип атайҙар.

### Хәтер һандығына...

Ат әйләнеп өйөрөн табыр, ир әйләнеп төйәген табыр.

Яу килә тип йортоңдо ташлама.

Халыҡ йорто – Тыуған ил.

Яңғыҙ тирәк йорт булмаҫ, үҫеп ултырһа ла, урман булмаҫ.

Ата-бабам баҡҡан ер – кендек ҡаным аҡҡан ер.

Аҡыллы ир – ил ағаһы, аҡылһыҙ ир – ил бәләһе.

Аҙашһаң, ил менән аҙаш.

Атың барҙа ер таны, атайың барҙа ил таны.

Батша – үҙ илендә генә батша, ғалим – һәр ҡайҙа ла ғалим.

Батыр тыуһа – ил бәхете, ямғыр яуһа – ер бәхете.

Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан сереҢ һаҡла.

Тыуған ерҙең туҙаны ла ҡәҙерле.

Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ.

# ДАНЛЫ ТАРИХ

*Әкрәм Бейеш*

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ТАРИХЫ ҺӘМ АЗАТЛЫҠ КӨРӘШЕ

*(әҫәрҙән өҙөктәр)*

Урал-Волга буйы халыҡтарын христианлаштырыу (суҡындырыу) эшен батша хөкүмәте XVI быуаттың урталарында уҡ башлап ебәргән. XVII быуат аҙаҡтарында иһә был процесты тиҙләтеү өсөн төрлө саралар күрә башлаған. Һөҙөмтәлә сыуаш, мордва, удмурт, мари халыҡтары тулыһынса тиерлек христианлыҡҡа күскән, татарҙарҙың да бер өлөшө суҡындырылған.

Ошо уҡ ваҡытта Башҡортостанда ла христианлыҡты нығытыу, таратыу эше башланып киткән. Ошо маҡсаттан сығып, Сиркәү йыйыны Өфөгә епископ билдәләү тураһында ҡарар сығарған. Әммә 1662–1664 йылдарҙағы башҡорт яуы был ҡарарҙы үтәүгә ҡамасаулаған. 1674 йылда иң юғары сиркәү башлығы (патриарх) Иоаким был эшкә ныҡлап тотонған. Хөкүмәт уға бөтә яҡлап ярҙам иткән. Уның тырышлығы менән 1681 йылда Өфө епархияһы ойошторолған, унда айырым епископ билдәләнгән. Шунан һуң башҡорттарҙы суҡындырырға тырышыу бермә-бер көсәйгән. Тәүҙә был эште алдаштырып, төрлө өҫтөнлөктәр, бүләктәр вәғәҙә итеп башҡарырға булғандар. Ләкин хөкүмәт, ундай юл менән генә уңышҡа ирешә алмаҫын күреп, көсләп суҡындыра башлаған. Шуның менән батша хөкүмәте 1557 йылда, Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылған ваҡытта, үҙ өҫтөнә алған вәғәҙәһен, йәғни башҡорттарҙы «бер ваҡытта ла бүтән дингә көсләмәҫкә» тигән һүҙен, үҙе үк оятһыҙ рәүештә боҙа. Башҡорт ерҙәрен баҫып алыу, төрлөсә йәберләү ҡабаттан ныҡ көсәйгән бер мәлдә рустарҙың көсләп суҡындырырға тотоноуы яңы яу башланыуға сәбәп булған.

1681 йылдың яҙында бөтә даруғаларҙа ла йыйындар үткәрелгән, ҡыҙыу ҡоралланыу башланған. Йәй уртаһында Себер һәм Нуғай даруғаларының ҡораллы төркөмдәре көнбайышҡа юл алған һәм, Ҡазан даруғаһы башҡорттары менән берләшеп, дөйөм һөжүм башлаған. Баш күтәреүселәр, иң абруйлы, иң белемле дини башҡорттарҙың береһе булған Сәйетте башлыҡ итеп, дөйөм етәкселек булдырған.

Берҙәм көрәш 1682 йылдың яҙынан башлана. Баш күтәреүселәр көнбайыш башҡорт ерендәге Зәй, Шишмә, Минзәлә, Һамар ҡалаларына ябырылған. Йәй уртаһында яу бөтә Башҡортостанды солғап алған. Башҡорттар Өфөнө, Көңгөрҙө ҡамаған, Чусовой, Исәт йылғаларында урынлашҡан ҡәлғәләрҙе баҫып алған, башҡорт ерҙәрендәге монастырҙарҙы, сиркәүҙәрҙе, рус ауылдарын үртәгән. Батша хөкүмәте, бөтә тирәяҡтағы ҡала гарнизондарынан йыйып, ҙур ғәскәр туплаған, ләкин ул йылды башҡорт яуына ҡаршы көрәш ойоштора алмаған.

Бик ныҡ көсәйеп киткән яуҙан ҡурҡып, батша хөкүмәте 1682 йылдың 8 июлендә башҡорттарға, яуҙы туҡтатырға өндәп, ярлыҡау вәғәҙә итеп, грамота ебәргән. «Көсләп суҡындырырға тигән указ булманы һәм әле лә юҡ, һеҙ ул хаҡта һис тә шикләнмәгеҙ», тиелгән була грамотала.

Хөкүмәт ебәргән был грамота баш күтәреүселәр араһына тарҡаулыҡ индергән. Башҡорттарҙың бер төркөмө, бөтә дүрт даруға исеменән үтенес ҡағыҙы яҙып, Мәскәүгә ебәргән, ә икенсе төркөмө Сәйет етәкселегендә көрәште дауам иткән. Шул арҡала 1682 йылдың октябрендә хөкүмәт указ сығарырға мәжбүр булған. Был указда, башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙы ҙур ғәйепкә һанап, ундай эшкә сик ҡуйырға һүҙ биргән, башҡорттарҙа ризаһыҙлыҡ уятҡан бөтә нәмәне бөтөрөргә вәғәҙә иткән. Ә үҙе 1683 йылдың мартында Башҡортостанға өҫтәмә ғәскәрҙәр ебәргән, шуның менән хөкүмәт биргән вәғәҙәләрҙең ихласлығына былай ҙа ышанып етмәгән башҡорттарҙың шиген арттырған.

1683 йылдың майында башҡорт хәрәкәте яңынан башланған. Ләкин хәрәкәт элеккесә көсәйә алмаған. Был юлы хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡалмаҡтар ныҡ ярҙам күрһәткән. Ә 1682 йылда улар башҡорт яҡлы булған. Улар Кама аръяғындағы крепостарға һөжүм иткәндә, Минзәлә менән Өфөнө ҡамағанда ҡатнашҡан. 1683 йылдың башында Әстрхан воеводаһы, төрлө нәмә вәғәҙә итеп, ҡалмаҡтарҙы башҡортҡа ҡаршы ҡотортҡан.

Ҡалмаҡ тайшаһы Аюҡа, боланан файҙаланып, башҡортто үҙенә буйһондорорға уйлаған. 40 меңлек ғәскәр менән Башҡортостанға баҫып инеп, ул башҡорт ауылдарын һәм йәйләүҙәрен ҡыйратырға тотонған, халҡын ҡырған, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, бала-сағаларҙы, малдарҙы ҡыуып алып киткән. 1683 йыл йәй буйы бөтә Көнбайыш Башҡортостанды ҡоротҡан, шуның менән башҡорттарҙың һуғышыр көсөн ныҡ ҡаҡшатҡан. Башҡорттар 1683 йылдың йәйендә Өфө эргәһендә тағы бер тапҡыр бик ҡаты һуғышҡан да көрәште туҡтатырға мәжбүр булған.

Башҡорт яуы баҫтырылған. Иң актив ҡатнашыусылары язаланған. Бик күп кеше һуғышта үлгән, ауылдар, йәйләүҙәр юҡҡа сыҡҡан, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар ҡоллоҡҡа ҡыуылған.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе текстан табып, һөйләмдә ҡулланылышына иғтибар итегеҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Текстан дингә ҡағылышлы һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ. Уларҙың ҡайһылары христиан диненә, ҡайһылары – ислам диненә ҡағылышлы икәнлеген әйтегеҙ. Был һүҙҙәрҙе һеҙ элек белә инегеҙме? Улар нимә аңлата?
3. Текста осраған географик атамаларҙы күсереп алығыҙ, уларҙың русса һәм башҡортса яҙылышына иғтибар итегеҙ. Был ҡалаларҙың, ҡәлғәләрҙең, йылғаларҙың ҡайһы тирәлә булыуын билдәләгеҙ һәм, шунан сығып, восстаниеның ҡайһы төбәктә таралыуын күҙәтегеҙ.
4. Восстаниеның сәбәптәре нимәлә?
5. Уның етәксеһе кем? Һеҙ тағы ниндәй яу башлыҡтарының исемдәрен беләһегеҙ?
6. *Суҡыныу, суҡындырыу* һүҙҙәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Ни өсөн башҡорттар суҡындырыуға ҡаршы булған? Батша хөкүмәте ҡайһы халыҡтарҙы суҡындыра алған?
7. Башҡорт тарихы, башҡорт восстаниелары тураһында һеҙҙең ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар? Был турала тағы нимәләр белергә теләр инегеҙ? Үҙегеҙ белгәндәргә таянып, ата-әсәләрегеҙҙән, ололарҙан һорашып, «Башҡорт тарихы» тигән темаға өйҙә белешмә төҙөп яҙығыҙ.
8. Тексты йөкмәткеһен һөйләп сығығыҙ.Үҙегеҙгә оҡшаған бер абзацты изложение итеп яҙығыҙ. Изложениеларығыҙҙы класта уҡығыҙ, иң яҡшы изложениены руссаға тәржемә итегеҙ.

**23-сө күнегеү.** Тексты аҙағынан 2-се һәм 3-сө абзацтарҙан һандарҙы үҙҙәре эйәреп килгән исемдәре менән яҙығыҙ. Датаны белдергән һандарҙың берәүһен генә алығыҙ.

**24-се күнегеү.** Берәй туғанығыҙҙың биографияһын яҙығыҙ.

**25-се күнегеү.** Һандарҙың төркөмсә формаларын яҙығыҙ.

Төп һандар ( количественные числительные); *бер, ...*
Рәт һандары ( порядковые числительные ): *беренсе, ...*
Йыйыу һандары (собирательные числительные ): *берәү, ...*
Бүлем һандары ( разделительные числительные ): *берәр, ...*
Сама һандары (приблизительные числительные): *унлап, ...*
Һандар: *ике, дүрт, һигеҙ, ҡырҡ.*

Бөтә һандарҙан да төркөмсә формаларының барыһын да яһап булдымы?

**26-сы күнегеү.** Бүлем һандары дөрөҫ яһалғанмы?

Өсөшәр, унышар, егермешәр, етмешешәр, йөҙөшәр.

**Һан** менән **сифат**, исем алдында килгәндә, килеш, эйәлек заты, һан менән үҙгәрмәй. Уларҙың был осраҡта төркөмсә ялғауҙары, дәрәжә ялғауҙары ғына була ала. Ә исемдән башҡа ҡулланылған һан менән сифатҡа исемдең бөтә ялғауҙары ла ҡушыла ала. **Ҡушма һандарҙа** ялғау һуңғы һүҙгә генә ҡушыла.

**27-се күнегеү.** Һандарҙың, сифаттарҙың килеш, эйәлек заты, һан үҙгәреүенә һәм үҙгәрмәүенә миҫалдар килтерегеҙ.

Өлгө. *Ун уҡытыусыны – унды икегә бүлергә була.*

Миҫалдарығыҙҙы рус теленә тәржемә итегеҙ. Айырмалары буйынса һығымта яһағыҙ.

## ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ

*(1895–1919)*

Атаҡлы шағир Шәйехзада Мөхәммәтзакир улы Бабичев 1895 йылдың 2 ғинуарында Дүртөйлө районы Әсән ауылында тыуған. «Ҡандала», «Ғазазил», «Китабеннас» («Исемдәр китабы»), «Башҡорт халҡына көйлө хитап» әҫәрҙәре, шиғырҙары, фельетондары киң билдәле. Әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы «Беҙ үҙебеҙ башҡорттар» (1994) китабында тупланған.

## ХАЛҠЫМ ӨСӨН

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламайым данлыҡ өсөн;
Йырлаймын алтын илем өсөн,
Үҙ туған халҡым өсөн.

Саф көмөштәй йырҙарымды
Йырламайым алтын өсөн;
Йырлайым тик саф көмөштәй
Саф йөрәк халҡым өсөн.

Сәскә төҫлө йырҙарымды
Йырламайым зауҡым өсөн;
Йырлайым тик сәскәләй
Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.

Дәртле ҡайнар йырҙарымды
Йырламайым дәртем өсөн;
Йырлайым тик мәңге шат,
Дәртле, көләс халҡым өсөн.

Иламайым мин көндәрем
Һырғаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы, меҫкен,
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.

Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

1. Шиғырҙың тексын иғтибар менән уҡып сығығыҙ, ижектәр һанын, ритмика, рифмалашыу үҙенсәлектәрен ҡарағыҙ.
2. Шағир үҙенең шиғырҙарын *йырҙарым* тип атай. Ни өсөн, аңлатығыҙ.
3. Автор йырҙарын нимәләр менән сағыштыра? Уның шиғырҙары ысынлап та шулаймы? Быға тиклем өйрәнгән һәм электән белгән шиғырҙарын да иҫегеҙгә төшөрөп, ҡуйылған һорауға яуап бирегеҙ.
4. Ш. Бабичҡа эйәреп, үҙегеҙ ҙә ошондай шиғыр яҙып ҡарағыҙ.
5. Шиғырҙы ятлағыҙ.

**28-се күнегеү.** «Халҡым өсөн» шиғырынан сифаттарҙы яҙып алығыҙ.

**29-сы күнегеү.** Йомаҡтарҙы уҡығыҙ. Яуаптарын табығыҙ, сифаттарҙы билдәләгеҙ.

1. Шыйыҡ булһа ла, һыу түгел, аҡ булһа ла, ҡар түгел.
2. Еҙнәм атын менеп булмай,
   еҙ ҡамсыһын тотоп булмай.
3. Бейек-бейек тауҙарҙа,
   икһеҙ-сикһеҙ ҡырҙарҙа
   йүгерә-йөрөй аҡ сәкмән.

Яуаптар: *һарыҡ, һөт, айыу менән йылан.*

**30-сы күнегеү.** Сифат менән имя прилагательное араһында ниндәй айырма һәм оҡшашлыҡ бар? Ҡыҫҡаса ғына яуаптарын яҙығыҙ.

Башҡорт телендә ҡайһы бер исемдәр, икенсе бер исем алдында килеп, сифат мәғәнәһен алалар. Бындай һүҙҙәр күп осраҡта теге йәки был **предметтың ниндәй материалдан** булыуын белдерә: *тимер юл – железная дорога, көмөш еп – серебряная нить, еҙ ҡыңғырау – медный колокольчик.* Бындай сифаттар **шартлы сифаттар** (условные прилагательные) тип атала. Ысынлап та, улар шартлы, шул миҫалдарҙа ғына сифат мәғәнәһен алалар. Рус телендә бындай сифаттарҙы **относительные прилагательные** тип атайҙар, йәғни билдә нимәгәлер мөнәсәбәттә ( в отношении ) белдерелә.

**31-се күнегеү.** Беренсе бағаналағы исемдәрҙе сифат урынында ҡулланып, икенсе бағаналағы тейешле исемдәр менән парлап яҙығыҙ. Һүҙбәйләнештәрҙең өсөһө менән һөйләм төҙөгөҙ.

| | |
|---|---|
| еҙ | юл |
| тимер | ҡалаҡ |
| ағас | күмер |
| таш | сыбыҡ |
| кирбес | ҡомған |
| асфальт | стена |

## БУЛАТ РАФИҠОВ

*(1934–1997)*

Булат Заһрый улы Рафиҡов 1934 йылдың 4 авгусында Мәләүез районы Дәүләтҡол ауылында тыуған. Күренекле прозаик һәм шағир. «Сал ҡылған», «Ҡараһаҡал», «Ахырызаман көткәндә», «Көнгәк», «Эйәрләнгән ат», «Тауҙарҙа ҡар иртә ята», «Үр елдәре», «Ғәрәп», «Тәңреләр һәм төркиҙәр» һ. б. повестар, бик күп хикәйәләр, поэмалар һәм шиғырҙар авторы. Егермеләгән китабы донъя күргән.

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры.

## ҺӨЙӘНТУҘ ФАЖИҒӘҺЕ

*(«Ҡараһаҡал» романы буйынса)*

...Ырымбур экспедицияһы начальнигынан тейешле күрһәтмәләр алып, полковник Алексей Иванович Тевкелев тәүҙә Бөрө ҡәлғәһенә килде, унан Әй буйына йүнәлде. Үҙ командаһынан тыш уны тағы алты рота һалдат, дүрт йөҙ мишәр һыбайлыһы оҙатып бара. Дөрөҫөрәге, алдан разведка яһап, бер юлы төп ғәскәргә һәм туптарға тәрән ҡарҙа юл ярып, мишәрҙәр иң алда бара. Алексей Иванович улар менән татарса ғына һөйләшә, уларҙы үҙенең төп таянысы итеп иҫәпләүен ҡабатлап ҡына тора. Шуға ла тегеләр, керәшендәрҙе яратмаһалар ҙа, полковник өсөн утҡа-һыуға инергә әҙер. Отряд менән бергә барыусы, буласаҡ тарихсы Петр Иванович Рычков быға аптырай, ә Тәфтиләү мырҙа маһайып һөйләнә:

– Тоғро халыҡ! Беләһегеҙме, ҡәҙерле Петр Иванович, Иван Грозный Ҡазанға яу менән барғанда, рус ғәскәрҙәре өсөн кем күперҙәр һалған, кем һаҙлыҡтарға ағас түшәгән? Мишәрҙәр! Бына ошо молодецтарҙың ата-бабалары! Юҡ, дин бер булһа ла, былар һис тә вор башҡорттар түгел инде!

– Улар әле үк башҡорттарҙы – ҡол итеп, үҙҙәрен ҡол биләүселәр итеп ҡарай шикелле. Иртәрәк түгелме? – тип һаҡ ҡына һорап ҡуя Рычков.

– Ниңә? Боласыларҙың аяҡ-ҡулдары иртәгә үк бығауланасаҡ... Бына ошондай егеттәр ярҙамында. Ҡайһы саҡта мин башҡорттарҙы йәлләп тә ҡуям. Сабый кеүек тиҙ ышаналар.

Ҡан-ҡәрҙәшлектә хәйләһеҙҙәр. Беҙҙең туғандарыбыҙ, тип, күпме мишәрҙе, типтәрҙе, сыуашты үҙенә һыйындырҙылар. Ә улар бөгөн беҙҙең менән йәнәш саба. Башҡорттарҙан арендаға алған ерҙәрегеҙ мәңгегә һеҙҙеке булыр, тип кенә әйтеү етте дуҫлыҡтарын емерергә. Бына һиңә туғандар!

– Ишетеүемсә, мишәр менән башҡорт араһында ысынлап дуҫлашыусылар ҙа, хатта ҡоҙалашыусылар ҙа етерлек. Улар инде бер-береһенә ҡылыс күтәрмәҫ! Беҙҙең был молодецтар ҙа бындағы түгел, Ҡазан аръяғынан, буғай?

Мырҙа, Рычковтың һорауын иғтибарһыҙ ҡалдырып, Кирилловты маҡтарға тотоноп китә. Ул белә: Рычков бит Ырымбур экспедицияһының бухгалтеры, секретарлыҡ эштәрен дә башҡара – уның ҡолағына төшкән һүҙҙең ерҙә ятып ҡалмауы бик ихтимал.

– Иван Кирилловичты әйтәм, иллә баш үҙендә! Умница! Башҡорт менән мишәрҙе артабан яҡынлаштырмау сараһын ҡалай дөрөҫ тапҡан! Мишәрҙән ҡатын алған башҡортҡа – штраф. Икенсе тапҡыр шул законды боҙһа – Себергә. Ғүмерлеккә! Шунан ҡоҙалашып ҡараһындар әйҙә!

– Императрица ғали йәнәптәре ундай указға ҡул ҡуймаған бит әле, – тип йылмая Рычков. – Шунан, хәтерем яңылышмаһа, әлеге фекерҙәрҙе Иван Кирилловичҡа һеҙ үҙегеҙ әйттегеҙ, мырҙа!

– Мин үҙемде Иван Кирилловичтан айырып ҡарай алмайым! Алла һаулыҡ бирһен үҙенә!..

Отряд меңдәр, көҙәйҙәр йәшәгән төйәктә, Һөйәнтуҙ ауылында, ялға туҡтаны. Шул кис ауыл ситенә ҡуйылған дозорҙарҙың береһе ҡайҙалыр һыбай барырға сыҡҡан ун өс-ун дүрт йәшлек Үҫмерҙе тотоп алып ҡайтты. Тәүҙә ул, бер атыбыҙ тибендә аҙашып ҡалған, шуны эҙләргә ебәрҙеләр, тип алдашты. Арҡаһына ун ҡамсы тамыҙғас та әле, шул алдағын ҡабатлап маташты, ә инде үксәһен ҡыҙған тимер менән көйҙөрә башлағас, ҡурҡытырға тотондо. Йәнәһе, иртәгә бөтәгеҙҙе лә ҡырып һаласаҡтар, алдан да, арттан да һеҙгә юл бикләнгән... Үҫмерҙән башҡа һүҙ әйттерә алманылар.

– Сығарып ырғытығыҙ был бүре балаһын! Юҡ, юҡ, яланғас килеш аҙбарғамы, мунсағамы ябып ҡуйығыҙ! – тип бойорҙо Тәфтиләү. Шунан ярҙамсыларына өндәште:

– Йә, әфәнделәр, кем нисек уйлай? Мальчишка мөһим мәғлүмәттәр бирҙе, тип иҫәпләйек. Беҙҙе засада көтә. Нисә вор? Ҡайҙа?

– Мин, улар урынында булһам, засаданы яҡындағы тау ҡыҫынтыһына ҡуйыр инем.

– Ворҙар, хатта бер нисә мең булһалар ҙа, беҙҙең туптарға ҡаршы тора алмаясаҡтар. Уҡтан башҡа нимәләре бар тиһең уларҙың!

– Э-э, улай тимәй тор! Разведка кәрәк.

Хәрби кәңәшмә, засаданың ҡайҙа ойошторолғанын, боласыларҙың күпмелеген асыҡламайынса, артабан ҡуҙғалмаҫҡа, ошонда нығытмалар ҡорорға, туптарҙы әҙер хәлдә тоторға, тигән ҡарарға килде. Дозорҙар көсәйтелде, уларға Һөйәнтуҙҙан бер йән эйәһен сығармаҫҡа ҡушылды.

Язаланған үҫмер был ваҡытта аҙбарҙа туңып үлгәйне инде.

Разведкаға биш мишәр, биш һалдат ебәрелгәйне. Төн урталары уҙыуға һалдаттарҙың береһе ҡанға туҙып ҡайтып йығылды. Уның өҙөп-өҙөп әйткәненән шул аңлашылды: мишәрҙәр, һалдаттарҙы ҡылыс менән сапҡылап, боласылар яғына сыҡҡан. Биш һалдаттан береһе генә ҡасып ҡотола алған.

– Бына, һеҙҙең молодецтар, ваше превосходительство! – тип төрттөрҙө Рычков Тәфтиләүгә. Полковник уға, таптың теш ыржайтыр ваҡыт, тигәндәй, аҡайып ҡарап алды ла, бер рота менән мишәрҙәр туҡтаған өйҙәрҙе ҡамап, һаҡта торорға ҡушты. Шым ғына бүтән роталарҙы ла күтәрҙеләр. Бик ваҡытлы булды быныһы, сөнки тиҙҙән ауыл ситендәге дозорҙарҙың шарт та шорт мылтыҡтан атҡаны, тегендә лә, бында ла атлыларҙың һыҙғырып-һөрәнләп сабышҡаны ишетелде. Тәфтиләү мырҙа, русалап-татарсалап һүгенә-һүгенә, эйәргә атланды һәм, атын ҡамсылай-ҡамсылай, тупсылар янына сапты.

– Ребятушки, ныҡ тороғоҙ! Яҡын ебәрмәҫкә! Алла беҙҙең менән! – тип ҡысҡырҙы ул, атын бейетеп. – Ну-ка, картечь менән үҙҙәренә!

Тупсылар, усаҡ яғып, торонбаштарын тоҡандырғайнылар инде. Ал да – көбәктәге тишеккә баҫ ҡына. Әммә өлкән тупсы үҙенекеләргә полковниктың әмерен ҡабатламаны, ә һаҡ ҡына кәңәш итте;

– Аҙ ғына көтә бирергә ине, ваше превосходительство, позицияны асмай торорға! Ворҙар ауылға һөжүм итергә йыйынмай, беҙҙе асыҡ яланға саҡыра һымаҡ. Шуға оҡшаған. Өҫтәүенә, бынау ҡараңғыла…

– Ҡараңғы тиһеңме? Хәҙер яҡтыртабыҙ! – Полковник, бер тупсы ҡулындағы торонбашты тартып алды ла яҡындағы өйгә ҡарай сапты. – Бына ҡалай яҡтыртырға кәрәк донъяны! – тип,

өйҙөң ҡыйығына ут төрттө. – Нимә ҡарап тораһығыҙ, яндырығыҙ тегеләрен! – тип ажғырҙы ул ҡот осорлоҡ тауыш менән.

– Ваше превосходительство, йәлләгеҙ! Улар ҙа бит кеше. Бер гонаһһыҙ ҡатын-ҡыҙ, бала-саға! – Өлкән тупсы шулай өгөтләп маташты, ләкин полковниктың ҡулында пистоль күргәс, үҙе башлап торонбашҡа үрелде. Бер аҙҙан тағы бер нисә өйҙө ялҡын ялманы. Аҙбарҙарҙағы малдар тегеләй-былай сабыша, үкерешә башланы, урам илаша-илаша тегеләй ҙә, былай ҙа йүгерешеүсе ярым яланғас кешеләр менән тулды.

– Улар барыһы ла боласы! Атырға! Сабырға! – тип бойорҙо ярһыуҙан иҫергән Тәфтиләү. – Әйтегеҙ, теге баштан да ут төртһөндәр! Туҙҙырығыҙ ен ояһын! – Шунда ул, ошо әмерен мишәрҙәрҙең шәберәк үтәрен уйлап, улар ҡамауҙа тотолған урынға сапты. – Һеҙҙе һаҡ аҫтына алыуға башҡорттар сәбәпсе, ауыл кешеләре һеҙҙең ҡасырға йыйыныуығыҙ хаҡында ялған хәбәр таратты, – тип ашығып аңлатты ла бөтәһен дә үҙе менән алып китте.

Оҙаҡламай Һөйәнтуҙ ауылы тотош яна ине инде. Урамдарҙа ошо рәхимһеҙ заманда ла һирәк була торған имәнес үлем туйы башланды: мәргән ҡул сөйгән һөңгө әсә менән имсәк сабыйын туң ергә ҡуша ҡаҙаҡланы, өләсәй менән ейәнсәрҙең баштары соҡорға йәнәш тәгәрләне, мушкет көбәгенән осҡан пуля етеҙлектә Хоҙайға ялбара-ялбара йүгереүсе ҡарт-ҡоро менән ярышты... Ҡан эсеп туйған ҡар оялыуҙан ҡыҙара, тетрәнеүҙән боҙға әйләнә бара кеүек ине...

Ауылдағы ғәскәрҙе асыҡ яланда алышырға саҡырып киткән яугирҙар, үҙҙәренә уңайлы ерҙә теҙелеп, байтаҡ көттөләр. Болоттар алһыу төҫкә буялып, атыш, илаш-ҡысҡырыш ҡуйыра башлағас, дошмандың килмәҫе, әле ҡайҙа һәм ни менән шөғөлләнгәне аңлашылды. Яу башлыҡтары, тиҙ генә кәңәшләшеп, ҡоралһыҙ халыҡ менән һуғышыусы ғәскәргә бөтә көс менән ябырылырға ҡарар ҡылды.

Тәфтиләү мырҙа был ваҡытта яу нәфсеһен үҙенсә ҡандыра, иҫән ҡалған өйҙәрҙең береһенә өс-дүрт ҡыҙҙы килтереп, сисендереп, ҡылыс осо менән төртөүҙән теге бахырҙарҙың үрлеҡырлы һикереүен ләззәтләнеп күҙәтә ине. Һөжүм башланыуын ишеткәс, юҡ менән бимазалайһығыҙ, тигән кеүек:

– Ҡаршыларына һөрәнселәр сығарығыҙ! Хәҙер үк кире боролмаһалар, аманатлыҡҡа алынған йөҙ кешене яндырабыҙ, тип иҫкәртһендәр. Тәүҙә яуыздарҙы картечь менән туҡтатһындар! – тип ҡушты.

Ул әйткән аманаттар, әсирлеккә өләшергә тәғәйенләнеп, ысынлап та бер ҙур аҙбарға бикләп ҡуйылғайны. Һөрәнселәрҙең иҫкәртеүе һөжүмгә килеүселәрҙе кире боролорға мәжбүр итте. Улар китеп күҙҙән юғалыуға, әлеге аҙбар өҫтөндә ялҡын телдәре үрмәләне. Тәфтиләү мырҙа ҡыҙҙарҙы ғазаплаған өй унан алдараҡ янып бөттө.

Һөйәнтуҙҙан көл дә күмер генә ҡалды. Иван Петрович Рычков кешелек исеменә хурлыҡ табы төшөргән ошо ваҡиғаны: «...Был ауылда меңгә яҡын кеше, ҡатындары һәм балалары менән, атылды, драгун штыктарынан, тоғро башҡорт һәм мишәр һөңгөләренән үтте; шуның өҫтәүенә, йөҙ ҙә биш кеше бер аҙбарға йыйып яндырылды...Уларҙың яман ҡысҡырышынан һәм мылтыҡ-туптарҙан атыуҙан бик тә ҡурҡыныс, оят тамаша булды», – тип яҙып ҡалдырҙы.

Ҡан еҫенән, кеше ғүмерҙәренә хөкөмдар булыу мөмкинлегенән иҫереп, ҡанығып алған отряд артабан китте. Тәфтиләүҙең юлында осраған һәр ауылда шул уҡ хәл ҡабатланды. Полковниктың ошо походы дауамында илленән ашыу ауыл Һөйәнтуҙҙың яҙмышына тарыны. Себер даруғаһы баш күтәреүселәренең Йософ Арыҡ һәм Төлкөсура Аллағол етәкселек иткән төп көстәре килеп етеп кенә ошо ҡанлы туйға сик ҡуйҙы.

Балыҡсы, Танып волостары өҫтөнән үткән ҡойон янғын осҡондарын, нәфрәт орлоҡтары итеп, алыҫ-алыҫтарға таратты, Башҡорт, ғәҙәттә, ҡыш яу сабырға яратмай, сөнки яланғас урманда йәшенеүе ҡыйын, ҡалын көрт һыбайлыны тиҙлек-йылғырлыҡтан мәхрүм итә. Ә был юлы, селлә уртаһы булыуға ҡарамаҫтан, тотош Башҡортостан яңынан ат эйәрләне, ҡылыслы ҡәмәрен быуҙы. Уралдың аръяғына, төньяҡтан көньяҡҡа яу башлыҡтарын кәңәшкә саҡырып, атсабарҙар елдерҙе. Улар үткән урындарҙа әлеге фекер ҡуйыра барҙы: юҡ, ярамай былай артабан!

Һәм ул, шаңдау һымаҡ, тик ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә, Кириллов менән Румянцев осрашҡан кабинетта ла, хатта алыҫ баш ҡалала ла ҡабатланды, һәр урында Тәфтиләүҙең исеме ерәнеү тойғоһо менән телгә алынды.

– Элекке басурман, үҙенең ысын христиан икәнлеген күрһәтергә тырыша-тырыша, ана шулай йыртҡысҡа әүерелә! – тине Румянцев.

– Үҙ исеменә, булмышына хыянат иткән бәндәнән дә ҡурҡыныс кеше юҡ, – тип һығымта яһаны Бәпәнәй абыз.

– Динен һатҡан – илен дә һатыр, – тип ябай ғына аңлатма бирҙе халыҡ. Тәфтиләүҙе ғәйепләүсе был һүҙҙәр батша сәйәсәтен яҡлаусы күп кенә башҡорт түрәләренә ҡарата ҡаты иҫкәртеү булып яңғыраны.

1. *Утҡа-һыуға инергә әҙер, һүҙҙең ерҙә ятып ҡалмауы, ҡанға туҙыу, теш ыржайтыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен берәр һүҙ менән генә әйтеп бирегеҙ.
2. Ололарҙан һорап, ҡышҡы селләнең, йәйге селләнең ҡайһы осорға тура килеүен асыҡлағыҙ. Ошо селләләргә бәйле тыуған мәҡәл-әйтемдәрҙе табығыҙ.
3. Текста осраған тарихи шәхестәрҙең исемдәрен күсереп алығыҙ. Үҙегеҙ уҡығандарҙы файҙаланып, энциклопедияларҙы, башҡа сығанаҡтарҙы ҡарап, улар тураһында биографик белешмә төҙөгөҙ. Тарихта уларҙың ҡайһыһының ниндәй эҙ ҡалдырғанлығын билдәләгеҙ.
4. Текстан сығып «Ҡараһаҡал» романында ҡайһы осор ваҡиғалары сағылдырылғанын билдәләгеҙ. Башҡорт халҡының быға тиклемге һәм бынан һуңғы замандарҙа азатлыҡ өсөн көрәшенә күҙәтеү яһағыҙ, эрерәк восстаниеларҙы, күренекле яу башлыҡтарын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Был восстаниеларҙың сәбәбен асыҡлағыҙ.
5. Кем ул – Тәфтиләү? Уның ысын исемен асыҡлағыҙ, башҡорт халҡына ҡаршы ҡылған ҡәбәхәтлектәрен барлағыҙ, башҡорттарҙың уға арнап сығарған йырын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
6. Тәфтиләү кеүектәр бүтән замандарҙа булмағанмы? Тарих буйынса белгәндәрегеҙгә таянып, миҫалдар килтерегеҙ.
7. *Отряд меңдәр, көҙәйҙәр йәшәгән төйәккә...* тип башланған абзацты диктант итеп яҙығыҙ.

**32-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Һандарҙы ниндәй юлдар менән яҙып була?

2. *Аҡ* сифатының артыҡлыҡ дәрәжәһе яҙмаһы нисек әйтелә?

3. *Шар, салт, дөм, тома, шыр, япа* ярҙамсы һүҙҙәре ниндәй сифаттарҙан артыҡлыҡ дәрәжәһе формаһы яһайҙар?

4. Ниндәй сифаттарҙың ғына аҙһытыу дәрәжә формаһы була ала?

5. Ғәмәлдәрҙе рус һәм башҡорт телдәрендә уҡығыҙ. Ниндәй айырмалар күрҙегеҙ?

$$687 + 2363 = 3050$$
$$3896 - 1472 = 2424$$

**33-сө күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Был мәҡәлдәрҙең ниндәй уртаҡ билдәләре бар?

Алтмыш аҙым алға атла, алты тапҡыр артыңа ҡара.
Биш мәртәбә уйла, бер мәртәбә эшлә.
Һигеҙ көн ғүмергә туғыҙ көн тырышлыҡ кәрәк.
Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан тый.
Ете ауылда ете туғаның булһын.
Өс таған таймаҫ.
Алтыға алып, бишкә һатмайҙар.
Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрешә килер.
Мең саҡрымлыҡ юл бер ауылдан башлана.
Ауыҙы йомшаҡ ҡолон биш бейәне имә.
Йөҙҙән йүгерек, меңдән толпар сығыр.

## ҒӘЛИМ ХИСАМОВ

*(1949)*

Ғәлим Афзал улы Хисамов 1949 йылдың 25 апрелендә Көйөргәҙе районы Кинйәбай ауылында тыуған. Күренекле прозаик. «Тәфтиләү», «Ун туғыҙынсы», «Ахура Мазда», «Ҡара шишмә», «Өн һәм Һан» һ. б. романдарҙы, повестарҙы һәм хикәйәләрҙе туплаған ун биш китап авторы.

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## АЛДАР МЕНӘН ТӘФТИЛӘҮ

*(«Өн һәм Һан» романы буйынса)*

...Тәфтиләү, йүгерә-атлай килеп, ун ике сатырлы аҡ тирмәнең ишек төбөнә килеп туҡтаны ла һаҡсыларға:

– Тевкелев Алексей Иванович. Батша ғали йәнәптәре саҡыртыуы буйынса килдем, – тине. Шунда торған офицер Тәфтиләүҙе баштан-аяҡ күҙ менән һөҙҙө лә:

– Индерегеҙ, – тип бойорҙо.

Тәфтиләү эскә инде. Тирмә уртаһындағы ҙур булмаған өҫтәл тирәләй бер нисә ир баҫып тора, төптәрәк ултырғыста киң маңлайлы, етек сәстәре һалынып төшкән берәү ултыра. Күлдәк иҙеүе ысҡынған, һул ҡулының бармағында ҙур ҡашлы йөҙөк

ялтырап тора. Тәфтиләү ишек төбөндә тура ҡатты. Кемгә төбәп кенә өндәшергә белмәһә лә, ултырыусыға ҡараш йүнәлтеп:

– Алексей Тевкелев, ғали йәнәптәренең ҡушыуы буйынса килдем, – тине.

Тирмәләгеләр тынып ҡалды. Ултырғыстағы кеше инеүсегә ҡарап ултырғандан һуң:

– Йүнле мыйығың да юҡ, үҙеңде, шәреҡ белгесе, тиҙәр. Нисә йәш һуң һиңә? – тип һораны.

– Егерме ике йәш, ғали йәнәптәре, – тип яуап бирҙе Тәфтиләү. Үҙе «батша шул икән», тип уйлап өлгөрҙө. – Мыйыҡҡа килгәндә, беҙҙең нәҫелдә йүнләп үҫмәй ул.

– Ниндәй нәҫелдән инде һин? Татарҙанмы? – Батшаның күҙ ҡарашы ҡатҡылланды.

– Эйе... – Тәфтиләүҙең башы түбән эйелде.

– Нәҫелеңдән оялаһыңмы? Унан оялыу яҙыҡ – кеше атаәсәһен дә, тыуған ерен дә һайлап ала алмай, – тип шелтәләне.

– Оялмайым. Мин – Сыңғыҙ хандың вариҫы. – Тәфтиләүҙең башы сөйөлөп китте.

– О, о! Бөйөк Сыңғыҙ хан!.. Ә ни эшләп, улай булғас, исемеңде үҙгәртеп йөрөйһөң?

«Бынаһын да белә икән», – тип уйланы Тәфтиләү.

– Ҡотломөхәммәт тип әйтеүе ҡыйын бит рустарға. Шуға Алексей ҡушаматын алдым. Атайҙы рустар элек тә Иван ти торғайны.

– Ҡотло ... мөх ... ә... – Батшаның теле әйләнмәне, ҡулын һелтәне, – дөрөҫ икән, әйтеп булмай... Мосолман Леша, кил әле яҡыныраҡ. Әйт әле, һуғыш башларҙан элек һеҙҙең татарҙар, ғәскәрҙе теҙеп ҡуйып, ике саф алдында ике батырҙы көрәштерәме ни?

– Эйе. Көрәштермәй, ә һуғыштыра. Был йола бик борондан килә. Кәрәк-кәрәкмәгәнгә артыҡ ҡан ҡоймаҫ өсөн уйлап сығарылған ул. Ике яҡтан да батыр сығарып һуғыштыралар ҙа, кемдеке еңә – шул еңелгәндең сардарына һуғышта еңелгән һымаҡ шарттар ҡуя. Шарттар үтәлһә, һуғыш булмай, ҡанҡойошҡа юл ябыла.

– Төрөктәр ҙә, бына, ғәскәр сафы алдында батырҙар һуғышһын, тигән. Һуғыш майҙанын да күрһәткәндәр. Күрәһең, уларҙың батыры әҙер, ә беҙҙеке – юҡ... – Батша шымды, уйланып ултырҙы ла: – Ярар, бар. Ошоларҙы һорашырға тип саҡырғайным мин һине, тылмас, – тине. – Бик йыраҡ китмә, тылмас булараҡ миңә кәрәгең тейеүе бар, Сыңғыҙ вариҫы.

Әммә Тәфтиләү ҡуҙғалманы:

– Ғали йәнәптәре, рөхсәт итегеҙ.

– Тағы ни?

– Төрөк батырына ҡаршы сығыр яугирыбыҙ бар!

– Кем ул? Ҡайҙан беләһең?

– Төрөктәр, боронғо ғәҙәтсә, моғайын, батырҙар һуғыштырырға уйлар тип, беҙҙең яҡтан ҡуйырҙай кешене ҡарап йөрөнөм. Башҡорт ғәскәренең бер сардары, Алдар исемле. Кәүҙәгә лә бик мөһабәт, көсө лә ташып тора, йәштән йыйындарҙа көрәшкән, ҡылыс, һөңгө һуғышына ла оҫта.

– Ҡайҙан беләһең һин уны был тиклем?

– Ҡарап йөрөнөм. Башҡорт менән татар телдәре бик яҡын бит. Араларында йөрөп һөйләштем, батырҙар, көрәшселәр тураһында һораштым. Алдарҙың үҙен дә күрҙем... Бик булдыҡлы яугир.

– Ярар, бар алып кил әле.

Тәфтиләү йылп итеп сығып та китте. Күп тә үтмәне, өлкән һаҡсы ишекте асып өндәште:

– Тевкелев Алексей Алдар тигән берәүҙе алып килгән.

– Индер.

Ишек төбөндә икәү күренде. Яңы килеүсе янында баяғы Тәфтиләү малай кеүек кенә тора ине. Ялпаҡ битле, киң яурынлы бәһлеүән аяҡтарын киреп баҫҡан, ҡояшта, елдә бите ҡара янған, яңы ҡырҙырып сәсе алынған башы ғына үҙенеке түгел кеүек ағарып тора. Батша быға һынамсыл ҡарап ултырҙы.

– Алдар... Нисек була инде был урыҫса? – Тәфтиләүгә текәлде.

– Мастер лжи, – тине теге.

– Шулай уҡмы ни? Кил әле бында, алдау оҫтаһы. Ҡул көрәшен беләһеңме?

– Беләм.

– Һин урыҫса ла һөйләшәһеңме?

– Һөйләшәм.

– Ҡайҙа өйрәндең?

– Урыҫ менән аралашып йәшәйбеҙ бит.

– Әйҙә ултыр, ҡул көрәштерәбеҙ.

– Әйҙә. – Алдар батшаның усына усын терәне лә бармаҡтарын ҡыҫты. Тәфтиләү быға шыбырланы:

– Еңеп ҡуйма. – Әммә бер аҙҙан көсәнеүҙән йөҙө ҡып-ҡыҙыл булған батшаның ҡулы бөгөлөп төштө. Тәфтиләү ыҫылданы:

– Ни эшләнең? Ғәфү үтен.

Алдар уға әйләнеп кенә ҡараны ла өндәшмәне. Батша:

– Көслөһөң икән, – тине. – Мин һине төрөк батырына ҡаршы һуғышҡа сығарам. Еңһәң, данға һәм байлыҡҡа күмермен. Еңелһәң...

– Еңелһәң – үлерһең. – Алдар батшаның һүҙен үҙе тамамлап ҡуйҙы. – Төрөк батыры үҙенә ҡаршы сыҡҡанды тере ҡалдырмай.

– Ярар, бар, әҙерлән.

Төшөндә Алдар Һаҡмар буйын күрҙе. Имеш, ауыл ирҙәре бесән саба. Бил быуарынан үҫкән үлән шул тиклем матур булып сәскәгә күмелгән. Иңкеш, ҡорт, себен-серәкәй гөжләп тора. Кәкүк саҡыра башланы. Әй саҡыра, әй саҡыра, туҡтау белмәй. Шул тиклем оҙонмо икән Алдарҙың ғүмере? Уянып китте Алдар. Баҡһаң, саң ҡағалар икән. Ғәскәрҙе уяталар. Саң ҡағыуын кәкүк саҡырыуы тип ятҡан, имеш...

Шул саҡ Тәфтиләү ҙә килеп етте.

– Әйҙә, һине батша саҡырта.

Пётр батша үҙенә яу менән идара итеү өсөн бейек кенә убаны һайлағайны. Батша, оҙон аяҡтарын һуҙып баҫып, тегеләй-былай йөрөп ята. Сабып килеп туҡтаған ике һыбайлыны күреп туҡтаны. Алдар менән Тәфтиләүҙе танығас, быларҙы саҡырып ҡулын болғаны.

– Хәйерле иртә, ғали йәнәптәре.

Тәфтиләү батшаның алдында тубыҡланды. Алдар ҙа шулай итте.

– Тор, башҡорт, – тине батша. – Минең идара урыны шәпме?

– Бик яҡшы, ғали йәнәптәре, бар тирә-яҡ күренеп тора. Тик алғы һыҙыҡҡа яҡын. Ана тегендә күп итеп тыуҙар ҡаҙаҡларға ҡуш.

– Уныһы нимәгә?

– Алғы һыҙыҡҡа яҡын, тим бит. Ғали йәнәптәрен дошман яғынан уҡ менән алып була. Шуға йыраҡтан батша үҙе күренмәһен өсөн, елберләп торған тыуҙар уны һаҡлар ине, тим.

– Ошо тиклем ергә уҡ еткереп буламы ни, иҫәр?

Алдар бәхәсләшеп торманы. Йәйәһен алып, һаҙаҡтан уҡ сығарып һалды ла:

– Ана, майҙан уртаһындағы әләмде күрәһеңме? Минең уҡ шул ағасҡа ҡаҙаласаҡ.

Батша ла, ярандары ла, ауыҙ ҡыйшайтып көлөп, быны күҙәтергә тотондолар. Йәнәһе, ошо тиклем ерҙән беләк йыуанлыҡ ҡаҙыҡҡа уҡ менән атып тейҙерерһең тейҙермәй ҙә ни. Алдар төҙәп атып ебәрҙе. Уҡ әләмле бағананың ҡап уртаһына барып ҡаҙалды.

– Бына, ғали йәнәптәре. Минең һымаҡ атыусы төрөктә юҡ тип кем әйтә ала? Байраҡтарҙы ҡаҙаҡларға ҡуш, ғали йәнәптәре.

Батша эргәһендәге ярандарына екерҙе:

– Нимә ҡарап тораһығыҙ, йүгерегеҙ! Башығыҙ эшләмәй икән, аяҡтарығыҙ тик тормаһын! – Ярандары һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Батша Алдарға ла дорфа өндәште: – Ә һин анауындараҡ тор, ваҡыты еткәс, майҙанға өндәшерҙәр.

Алдар ҙа, Тәфтиләү ҙә шым ғына ситкә шылды. Ҡыҙыу ҡанлы батшанан йыраҡтараҡ торғаның яҡшы.

Ике тауҙың араһындағы яланға ике яҡтың да ғәскәрҙәре теҙелде, һәр ике яҡ та үҙ байрағын күтәрҙе, һәм ике яҡта ла яу борғоһо яңғыраны. Шул саҡта ике яҡтан һыбайлы ике батыр килеп сыҡты. Төрөк батыры тимер күлдәк кейгән, башында ла тимер башлыҡ, ҡулында һөңгө, һул ҡабырғаһы яғында – кәкре ҡылыс. Батыр, күрәһең, кәүҙәгә бик еллелер: аҫтындағы аты, биле һынырҙай булып, саҡ тора. Алдар кәүҙәгә саҡ ҡына ҡайтыштыр, әммә уның да атына еңел түгел, өҙәңгеһе тубығына етерҙәй булып тора. Алдар үҙе еңел генә күлдәктән, башында таҡыя, уң ҡулында оҙон һөңгө, һул яғында – ҡылыс. Һыбайлыларҙың икеһе лә, аттарын һулаҡайға тартып, бер-береһенән йыраҡлашты һәм кире боролоп туҡтаны. Бына «Ор!» тигән фарман яңғыраны, һәм һыбайлылар ҡара-ҡаршы сабып китте. Аттар яҡынайҙы, бына башҡа-баш тиңләштеләр. Алдар төрөктөң һөңгөһөнөң осо күтәрелгәнде шәйләне. «Был минең күкрәккә тоҫҡай!» – тип уйлап өлгөрҙө һәм, кәүҙәһен ҡапыл һулға эйеп, һөңгө һабын ҡыҫып тотҡан уң ҡулын хәрәкәтһеҙ ҡалдырҙы. Шул саҡ һөңгөнөң осо нимәгәлер төртөлөп, ҡулын шаҡарҙы. Әммә Алдар һөңгөһөн ысҡындырманы. Ул һөңгөһөнөң төрөк батырының эсенә ҡаҙалғанын күрҙе. Хәҙер йә һөңгө, шаҡарылып, уның үҙен эйәрҙән бәреп төшөрә, йә уң ҡулы ысҡынып китә. Алдар һөңгө һабын ике ҡуллап эләктереп алды. Йән-фарман сабып килгән аты, ҡапыл килеп сыҡҡан тотҡарлыҡтан үрәпсеп, яңғыратып кешнәп ебәрҙе. Ә төрөктөң аты, һыбайлы батыр аҫтынан һыпырылып сығып, ары сапты. Төрөк батыры гөрҫ итеп ергә ҡоланы, һөңгө кәүҙәһенә тағы ла

нығыраҡ инде. Алдар шул ыңғайы аттан ырғып төштө лә төрөктөң мөһабәт кәүҙәһенә текәлде – ул ҡыбырламай ине инде, ауыҙынан ҡан һарҡып сыҡты. Алдар ҡылысын ҡынынан һурып алды ла, тимер башлыҡты ысҡындырып та тормай, төрөктөң муйынына һелтәне. Һөңгөһөн һурып алып, ҡылысын ҡынына тыҡты ла киҫелгән башты тотоп күтәрҙе. Бөтә был ҡанлы тамашаны күҙәтеп торған ғәскәр «Ура!» ҡысҡыра. Алдар Пётр батша ултырған убаға саптырып менде лә, атынан төшөп, төрөктөң башын ырғытты.

Пётр ҡысҡырып ебәрҙе:

– Виват, Россия! – Ул Алдарҙы ҡосаҡлап өс ҡат үпте. – Һин уны булдырҙың! Рәсәй ҡоралының ныҡлығын күрһәттең. Килтерегеҙ батырға бүләкте! – Алдарҙың ҡулына көмөш ҡынлы ҡылыс тотторҙо. Үҙе көмөш һауытҡа араҡы ҡойоп алды. – Һинең һаулыҡҡа, беҙҙең еңеүгә! Артабан беҙ уларҙы ҡыйратасаҡбыҙ!.. Ә һиңә батшаның махсус указы булыр.

Был һуғышта төрөктәр ҡыйратылды. Батша ярандары менән өс көн, өс төн байрам итте. Мине онотҡандыр инде был, тип бөткәйне Алдар. Онотмаған – дүртенсе көн тигәндә саҡыртып алды.

...Батша тирмәһе тәмәке төтөнө, араҡы әсеһе, тағы әллә ниндәй ауыр еҫ менән тулған. Иҫерек бәндәләр йөрөй шунда. Пётр батша тәпәшәк кенә өҫтәл янында, берәүһенең елкәһенә ҡулын һалып ултыра:

– Бел, Алексей, бына бер аҙ ғына тын алайыҡ та, Урта Азия аша Һинд океанына тиклем китәсәкбеҙ. Рәсәй ҡоралының көсөн күрһәтәсәкбеҙ әле беҙ ундағы төрөк-мөрөк-ҡырғыҙҙарға. Ә һине Һинд походына тылмас итеп аласаҡмын. Тылмас бит ул, аҡылы булһа, тәржемәсе генә түгел, ҙур дипломат та... Тот, эсәбеҙ...

Шул саҡ батша ишек төбөндәге Алдарҙы күреп ҡалды.

– Ана, беҙҙең янға тағы бер магометан килгән. Батыр ул. Төрөктөң башын ана нисек сапты. «Ҡырт» итеп кенә ҡалды. Ошондай батырҙарҙы, магометан булһа ла, яратам мин. Һинд походында бына ошоноң кеүек батырҙар беҙгә юл ярып барасаҡ. Әйҙә, кил, башҡорт. Бына һиңә батша указы.

– Рәхмәт, ғали йәнәптәре.

– Ни әйткәнмен мин указда, беләһеңме?

– Юҡ әле.

– Унда мин һиңә тархан исеме бирҙем. Балаларыңа ла, балаларыңдың балаларына ла ҡала ул исем.

– Рәхмәт, падишаһыбыҙ. Ләкин минең ундай исемем бар бит инде.

– Ҡайҙан булһын ул һиндә?

– Иҫәнгилде атайымдың вариҫы булараҡ бар. Атайымдың атаһы ла тархан ине.

– Ярар, булһын. Ике исем булыр. Береһе икенсеһенә ҡамасау түгел... Бар, минең хаҡҡа ғибәҙәтеңде үтә. Һин бит эсмәйһең. Ә беҙ Алексей Тевкелев менән эсәбеҙ әле. Беҙҙең еңеү, беҙҙең байрам бит...

Алдар ҡайтып китте. Ғәскәр тубына ғына түгел, Башҡортостанға уҡ ҡайтып китте. Батша указы уға артабан һуғышта ҡатнашыуҙы тыя ине. Батырлыҡ күрһәткән кешеләрҙе һаҡлау йәһәтенән шулай эшләнгәйне.

1. Өҙөктө иғтибар менән уҡып сығығыҙ.
2. Һүҙлек эше башҡарығыҙ, яңы һүҙҙәр осраһа, мәғәнәләрен асыҡлап, русса тәржемә итегеҙ.
3. Насар сифатмы ул *телдең шымалығы*? Был һүҙҙе ниндәй мәғәнәләрҙә кемгә ҡарата ҡулланалар? Миҫалдар килтерегеҙ. Һеҙ үҙегеҙ *шыма телле* булырға теләр инегеҙме?
4. Ниндәй ҡараш ул – һынамсыл ҡараш? Ҡараштың тағы ниндәйҙәре була? Белгәндәрегеҙҙе яҙығыҙ, һәр береһенә аңлатма бирегеҙ.
5. *Ҡыҙыу ҡанлы, кәүҙәгә бик елле, ауыр еҫ, бил быуарынан* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ, русса тәржемә итегеҙ.
6. *Күҙ менән һөҙҙө; Күҙ ҡарашы ҡатҡылланды; Теле әйләнмәне; Бите ҡара янған; Гөрҫ итеп ҡоланы* һөйләмдәрен русса тәржемә итегеҙ.
7. Өҙөктөң йөкмәткеһен матур итеп, интонация менән, яңы һүҙҙәрҙе, үрҙә килтерелгән һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе ҡулланып, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.
8. Өҙөктә ҡайһы осор ваҡиғалары, ниндәй һуғыш тураһында һүҙ барғанын асыҡлағыҙ.
9. Пётр Беренсе батша тураһында ҡескәй генә белешмә төҙөп яҙығыҙ.
10. Алдар батырҙың төрөк батыры менән алышын үҙ һүҙҙәрегеҙ менән тасуирлап яҙығыҙ.

* * *

Алдар менән Тәфтиләүҙең икенсе осрашыуы тәүгеһенән һуң байтаҡ йыл үткәс булды.

Алексей Тевкелев, Анна батшабикәнең әмерен үтәр өсөн, Өфөгә килде.

– Ғали йәнәптәренең бойороғон үтәр өсөн миңә башҡорттар араһынан бик абруйлы, ышанyслы, күрше халыҡтарҙа ла, мәҫәлән, ҡалмаҡта, татарҙа, ҡырғыҙҙа һүҙе үткән кешеләр кәрәк, – тине.

Башлыҡ аптыраны. Башҡорт араһында ундай кеше ҡайҙан булһын?.. Анау Таймаҫ Шаимов ҡына булмаһа? Үҙе тархан, үҙе урыҫ власы ҡушҡанды йүгереп йөрөп үтәй. Ә бына бүтән халыҡта абруйы бармы-юҡмы икәнен белмәй... Тағы кем бар? Ай-һай, юҡтыр.

– Алдарбай нисек?

– Ҡуй, юҡты һөйләмәгеҙ. Үткән болала иң ҙур башлыҡтары шул булды бит...

Тәфтиләү өндәшмәне. Алдарҙың башҡорт ихтилалы башында торғанын белә ине. Әммә бер нисә көндән, Ырымбурға китер алдынан, провинция башлығына әмер бирҙе: «Алдарҙы Ырымбурға минең яныма ебәрегеҙ!»

...Ырымбурҙа Тәфтиләү Алдарҙы тыйнаҡ ҡына йылмайып ҡаршыланы. Алдар уны ҡосаҡлап уҡ алырға иткәйне, теге ҡулын ғына һуҙғас, күрешеү менән генә сикләнде.

– Һине Ҡырым һуғышынан һуң ныҡ үҙгәргән тиҙәр ине, – тине Тәфтиләү.

– Әлләсе...

– Бола башында йөрөгәнһең икән...

– Беҙ теләп күтәрелмәнек. Тамаҡ аҫрау ғына түгел, тын алырға ла ирек ҡалмағайны бит. Иҙелеп йәшәгәнсе, ирек даулағаның артыҡ.

– Эйелгән башты ҡылыс киҫмәй, тиҙәр. Буйһонорға ине.

– Бахыр баштан баҡыр баҡа яҡшыраҡ.

– Пётр батшаға биргән антыңды оноттоңмо?

– Ант итмәнем мин уға. Беҙҙең батша ғали йәнәптәренә, тышҡы һуғыштарҙа ҡатнашасаҡбыҙ, сик эштәрен башҡарасаҡбыҙ, тигән йөкләмәбеҙ генә бар.

– Ант итмәгәс, бола сығарһаң да буламы?

– Бола – ул эске эш, беҙ тышҡы сәйәсәтте үтәйбеҙ.

– Улай икән... Ярар, бер-ике көн ял ит. Мин һине таптырырмын...

Бер нисә көндән, ысынлап та, Алдарҙы эҙләтеп алды Тәфтиләү.

– Мин һине Рәсәйҙән ситтә бик ҙур эш башҡарырға саҡырҙым. Иртәгәнән башлап ылау хәстәрләйбеҙ. Дөйәләргә, аттарға йөк артмаҡлайбыҙ. Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, тирмәләр... Улары инде әҙер. Һеҙҙең егеттәрегеҙгә етәк аттары алырбыҙ...

– Ҡайҙа йыйынабыҙ һуң? Ниндәй эшкә?

– Беҙ бында батшабикәбеҙ Аннаның бик мөһим йомошон үтәп йөрөйбөҙ. Батшабикәбеҙ ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙы, ҡарағалпаҡтарҙы, бәлки, тағын кемдәрҙелер Рәсәйгә ҡушылырға күндерергә итә. Мөмкин булһа, ҡушылыу шарттарын һөйләшергә ебәрҙе. Тик был эште асыҡтан-асыҡ башҡарырға ярамай. Ҡайсаҡтар араһында Рәсәйгә инеүгә ҡаршылар күп. Был турала һүҙ сығарһа, хатта Әбелхәйерҙең үҙен үлтереү менән дә янайҙар. Шуға беҙҙең бында килеүебеҙҙең маҡсаты мөмкин тиклем сер булырға тейеш. Әбелхәйер үҙе лә шулай ти.

– Улай икән...

Кис, ҡуналҡаға туҡтағас, Алдар батыр Тәфтиләүгә шыбырланы:

– Беҙҙең нимәгә килеүҙе яр һалмай дөрөҫ эшләнең. Ҡайсаҡтар Рәсәй илселегенең килерен көтә, тик кем, ҡасан булырын белмәй. Беҙҙең ылауҙы илселектең бер ярсығы тип уйлай.

– Ҡайҙан беләһең?

– Ҡайсаҡтар араһында яҡын кешеләрем бар. Шуларға сапҡын ебәргәйнем.

Тәфтиләүҙең ҡыҫыҡ күҙҙәре шар булды.

– Ҡасан?

– Ырымбурға килгәс тә. Бөгәсә төндә береһе беҙҙе ҡыуып етте.

– Ай-һай!..

Алдар хәйләкәр генә йылмайҙы.

– Әммә, тәксир, һин күргән хәүефһеҙлек сараһы аҙыраҡ. Шуны әйтәйем тигәйнем һиңә.

– Ниңә аҙ?

– Сөнки бөгөн төндә ылауға һөжүм итәсәктәр. Ҡайсаҡтар ылауға һинең баш икәнеңде белә, әммә илсе икәнеңде белмәй. Бөгәсә төнөн һине... үлтерергә уйлайҙар.

– Ни һөйләйһең һин? – Тәфтиләүҙең ҡото осто.

– Ҡурҡма. Беҙ алдан сараһын күреп ҡуйырбыҙ.

– Ҡайһылайтып?

– Һинең тирмәңде төнөн ике һалдат һаҡлай бит. Шуларҙың береһе тышта ултырһын, икенсеһе һинең урынға инеп ятһын. Ә үҙең, ҡараңғы төшөп, күҙ бәйләнгәс, беҙҙең янға кил. Беҙҙең ҡыуышта ҡунырһың.

Йөҙө ап-аҡ булған Тәфтиләүгә ҡарап, Алдар көләмһөрәне:

– Илсегә үлем юҡ. Әммә һинең илсе икәнеңде иғлан итеүсе юҡ бит әле. Шуға беҙҙең кеүек фәҡирҙәр ярҙамына таянырға тура килер.

Тәфтиләү Алдар әйткәндәргә ышанып бөтмәне. Хатта, был һөйләгәндәр уның үҙенең этлеге түгелме икән, тип тә уйланы. Әммә Алдарҙың ҡушҡанын үтәмәй ҙә сараһы юҡ ине.

...Төн уртаһында шарт та шорт мылтыҡ атҡанға, кешеләр ҡысҡырышҡанға уяндылар. Уянды тип, Алдар йоҡламай ҙа ине, Тәфтиләү генә мышнай башлағайны. Алдар ҡыуыштан сыҡты.

– Ни булған?

– Беҙҙекеләр бер ҡайсаҡты эләктергән. Тәфтиләү тирмәһе яғынан далаға йүгерә ине, ти.

– Ни эшләп йөрөгән һуң?

– Әллә инде. Аҙашып килеп сыҡтым, тип әйтә, ти.

– Әйт: бәйләп һалһындар, ебәрмәһендәр.

Мыҡты кәүҙәле ине ҡайсаҡ. Усаҡ янына йығып һалып ҡуйғандар. Иртән тороп, үҙ тирмәһенә киткәйне Тәфтиләү, күп тә үтмәне, һөрәнләп ебәрҙе:

– Алдар! Алдар батыр, бында кил!

Алдар йүгереп барһа, ни күҙе менән күрһен: Тәфтиләү тирмә алдында ҡалтыранып ултыра, янында мылтыҡ тотҡан һалдат ни эшләргә белмәй тапана, белмәйем, мин берәүҙе лә күрмәнем, тип мығырлана.

Алдар тирмәгә күҙ һалды. Эстә муйынынан салынған һалдат ята. Тирмәнең кейеҙе арт яҡтан бысаҡ менән бүҫелгән.

– Ярар, илама, – тип тынысландырҙы Алдар Тәфтиләүҙе. – Иҫән-һауһың бит үҙең. Әлдә тирмәлә йоҡламаның, юҡһа үҙеңде һуялар ине.

– Рәхмәт. Рәхмәт иҫкәрткәнең өсөн. Алып ҡалдың үлемдән...

1. Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ: иғтибар менән уҡып, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән тасуири итеп һөйләргә өйрәнегеҙ.
2. Яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, русса тәржемә итегеҙ.
3. *Тамаҡ аҫрау, ҡул биреү, яр һалыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен асыҡлағыҙ, улар урынына шул уҡ мәғәнәне биргән икенсе һүҙҙәр ҡулланығыҙ.
4. *Һүҙе үткән кеше* тип кемгә әйтәләр? Һеҙҙең арала ундайҙар бармы? Һеҙҙең үҙегеҙҙең һүҙегеҙ үтәме? Һүҙең үтһен өсөн, ниндәй булырға кәрәк? Һүҙе үткән берәй танышығыҙға характеристика бирегеҙ.
5. *Күҙҙәре шар булды; Ҡото осто; Күҙ һалды* һөйләмдәрен дөрөҫ итеп тәржемә итегеҙ.
6. *Илсегә үлем юҡ* әйтеменең мәғәнәһен русса әйтеп бирегеҙ.

7. *Үҙ ягына ауҙарыу, үҙ башынан кискән кеүек* тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ?
8. Өҙөктә ҡайҙа һәм ҡасан барған ваҡиғалар тасуирлана? Һеҙ уны нимәгә ҡарап белдегеҙ?
9. Кем ул Анна батшабикә? Уның тураһында белешмә туплағыҙ.

* * *

Тәфтиләүҙең илселеге Әбелхәйер йортонда айҙан артыҡ ятһа ла, бер ни ҙә сығара алманы. Ни эшләргә белмәй аптыраған Тәфтиләүгә ҡарап, Алдар уны йәлләп ҡуйҙы.

– Тәксир, – тине ул. – Әбелхәйерҙең теләге Рәсәй янында булһа ла, күреп тораһың, ҡулы ҡыҫҡа. Ырыуҙарының яртыһы Рәсәйгә ҡушылыуға ҡаршы. Уныһы ла аңлашыла: кем үҙенең ирекле тормошон үҙ ҡулы менән тотоп бығаулаһын.

– Ә һин Рәсәйҙе бығау тип беләһеңме?

– Нимә һуң ул? Башҡорттар Рәсәйгә нимә хаҡына ҡушылды? Аҫабалыҡ, ер өсөн, сит-яттарҙан уны һаҡлау өсөн. Бөгөн нимәһе бар? Аҫабалыҡты ҡыйратып бөтөп бара. Ерен тартып алып, зауыт һала, килмешәктәрҙе тултыра. Ситтәрҙән һаҡлайһы урынға, ҡалмаҡтарҙы саҡырып туҡмата. Бығау түгелме ни ошо?..

– Болармағыҙ. Шым ғына ултырһағыҙ, ана, татар кеүек, һеҙҙе берәү ҙә аҫмаҫ та, киҫмәҫ тә ине.

– Урыҫ ерҙе таламаһа, бер кем дә болармаҫ ине.

– Һеҙҙә ер күп бит. Һеҙ барыбер сәсмәйһегеҙ, урмайһығыҙ. Йөҙәр йыл буйы ята сиҙәм булып. Ил эсендә батша берәү була, уның һүҙе – ҡайҙа ла һүҙ. Ә һеҙ торған булаһығыҙ ҙа, батша тегеләй, батша былай, тиһегеҙ. Донъя бит үҙгәреп тора, тормош алға бара. Батшаның һүҙе лә – заманына күрә...

– Һүҙендә тора белмәгән батша – батша буламы ни?!

– Йә, ярай. – Тәфтиләүҙең бәхәсләшерлек кәйефе юҡ ине. Алдарҙы асыуландырыу йә үпкәләтеү һис ҡулай түгел уға. – Нимә тәҡдим итәһең һуң? Бая ҡайсаҡ ырыуҙары тураһында нимәлер әйтергә иткәйнең түгелме?

Алдар тынысланды.

– Эйе. Ҡайсаҡтың бөтә ырыуҙарын да бер юлы Рәсәйгә ҡаратыу мөмкин булмаҫ. Хан йыйынында был мәсьәлә ҡуҙғатылмай ҡалмаҫ. Сөнки ил яҙмышы хәл ителә бит. Ул саҡта Әбелхәйер һүҙе аҫҡа ҡаласаҡ... Бында ике юл бар. Беренсе: һиңә һәр ырыу башы менән айырым һөйләшеп, кемгә бүләк,

кемгә вәғәҙә биреп, үҙ яғыңа ауҙарырға кәрәк. Икенсе: ҡайсаҡтарҙың үҙҙәренә ҡаршы яҡтың көсөн ҡулланыр кәрәк. Быныһы – ҡарағалпаҡтар. Ул бахырҙарҙы бер яҡтан уғыҙ, икенсе яҡтан ҡалмаҡ, өсөнсө яҡтан ҡайсаҡ ҡыҫа. Әгәр шуларҙың бөтәһенән дә яҡлайым тиһә, ҡарағалпаҡ Рәсәйгә һыйынасаҡ. Ә уларҙың был яҡҡа боролғанын күрһә, ҡайсаҡ ырыуҙарының да күбеһе уйға ҡаласаҡ.

– Дөрөҫ фекерләйһең, батыр. Мин дә шул уйҙа инем. – Быныһын Тәфтиләү, әлбиттә, шыттырҙы. Шулай уйлаһа, ҡарағалпаҡтар менән күптән бәйләнешкә инер ине. – Ә һин ҡарағалпаҡтарҙы беләһеңме?

– Беләһеңме, тип... Ныҡлап белеп тә бөтмәйем. Бер генә булғайным уларҙа. Әммә ҡарағалпаҡ менән башҡорт борон-борондан дуҫ йәшәне. Ҡыҙ биреп, ҡыҙ алып туғанлашҡан саҡтар ҙа йыш. Бигерәк тә ҡыпсаҡ нәҫелдәре...

– Бик яҡшы. Һин уларға барып ҡайт. Ә мин бында ҡайсаҡтар менән күрешә торайым.

Өс егетен эйәртеп, Алдар иртәгеһенә үк юлға сыҡты. Арал диңгеҙе тирәһендә ҡош-ҡорт аулауҙы һылтау иттеләр.

Ҡарағалпаҡтарҙың хәлен Алдар, үҙ башынан кискән кеүек, дөп-дөрөҫ әйткәйне. Быларҙың килерен ҡарағалпаҡтар көтөп торған булып сыҡты. Уларҙың һүҙе бер булды: Рәсәй беҙҙе ситтәр ҡыҫыуынан ҡотҡарһа, беҙ уға теләп ҡушыласаҡбыҙ.

...Тағы ун көндән Әбелхәйер хан янында ырыуҙар йыйыны үтте. Йыйын күпселек тауыш менән Рәсәй дәүләтенә инергә тигән ҡарар ҡабул итте. Шулай итеп, Әбелхәйер хан Рәсәй эсендәге ҡайсаҡтар ханы булып китте. Ә Тәфтиләү башҡарған эше өсөн бүләктәргә күмелде. Алдар ҙа буш ҡалманы. Ул өсөнсөгә тархан исеме алды, йәнә бер ҡылыслы булды.

Шулай инде: эште кем эшләһә лә, эш бөткәс, хаҡын алыусылар күп була...

* * *

...Алдар тархандың бүрәнәнән һалынған ҙур өйөнөң ишеге шар асылып китте лә оло кәүҙәле берәү кемделер, тунының елкәһенән бөрөп тотҡан көйө, тупһа аша һөйрәкләп индереп иҙәнгә ырғытты.

– Бына, атай. Һин яҡлаған булаһың. Ә ул күрше ауылда, өйҙән өйгә йөрөп, ҡылыс ялтыратырға ҡоторта. Былай ҙа саҡ торған халыҡ һинең анау сыраң кеүек сәсрәп янырға әҙер тора.

– Кем ул? – Алдар ҡараңғы иҙәндә ятҡан кешегә ымланы.

– Кем булһын – Йәмлих. Һинең яратҡан ҡоҙаң. Бер аҙна ғына элек, барыһын да йыйып, ҡоралға тотонаһы булмағыҙ, тип әйттем бит әле. Был да бар ине. Алдар батыр тыйҙы, тип ҡат-ҡат ҡабатланым. Был әллә һаңғырау, әллә һиңмай инде – киреһен эшләй. Әллә юрый шулай ҡылана, белмәҫһең. Үҙең һөйләш.

Алдар байтаҡ ҡарап ултырҙы иҙәндә ятҡан кешегә. Ниһайәт, һораны:

– Йә, ни тиерһең?

Теге тороп ултырҙы, ялтыр башын, битен һыйпаны.

– Һиңә әйтеүе рәхәт, ҡоҙа, – тип башланы ул һүҙен. – Һин – тархан, староста. Һинең ереңде лә, малыңды ла таламайҙар, һалым да һалмайҙар. Ә минең... Минең нимәм ҡалды? Ун баш йылҡым бар ине, хатта утын ташырға бер ҡорсаңғы ла ҡалдырманылар. Һыйыр малынан ике ҡыҫыр тана ҡалды. Киләләр ҙә ҡысҡыралар: «Башкир, коня давай. Не будь скупым, корову давай!» Күрше Хәмиттең балалары менән бисәләрен тейәп алып киттеләр. Әбдрәшит солоҡҡа өс күс ҡундырғайны. Урманда эҙләп йөрөп табып, шуның шуныһын яндырып киттеләр... Әйт, тархан, нимә эшләргә һуң беҙгә? Ҡоралға тотонмағыҙ, тиһең. Ә ни эшләргә? Шыр яланғас ҡалғансы таланып, астан үлгәнсе, бер урыҫты булһа ла һуйып, үсемде ҡандырып үләм мин. Хурлығынан үлде меҫкен, тимәҫтәр, исмаһам.

Алдар, ҡоҙаһын тыңлаған һайын, тештәрен ҡыҫты, ҡулдары үҙҙәренән-үҙҙәре йоҙроҡланды. Һикереп торғоһо, таланған, йәберләнгән башҡортон ҡосаҡлап илағыһы, шунан атҡа менеп, батша биргән ҡылысын, шул уҡ батша ҡуйған бәндәләрҙең башын өҙә-өҙә сабыр өсөн, ҡынынан һурғыһы килде. Әммә тыйылды. Һуғыш юлы, яу юлы илде нығытыр юл түгел икәнде яҡшы белә шул ул. Күп кисте, күп күрҙе, утлы юлдарҙы ла күп буйланы. Дау, яу илде ҡаҡшата ғына шул. Һуңғы дүрт-биш йылда айырыуса бөлгөнлөккә төшөрҙө һуғыш. Элегерәк башҡорт атҡа менеп, һөңгө тағып, батша ҡәлғәләрен яндырып-ҡыйратып алһа, гөбөрнатырының да, бүтәндәренең дә теле сиселә, күңеле йомшара торғайны. Был юлы – юҡ. Күпме ир-егет башын һалды, күпме бисә-сәсә, бала-саға ҡоллоҡҡа ҡыуылды. Талап алынған малдың хисабы юҡ. Күпме ерҙе тартып алдылар, зауыттар һалдылар, килмешәктәрен килтереп тултырҙылар. Батша, моғайын, бындағы

ярандарының ни ҡыланғанын белеп бөтмәйҙер. Боронғо һуғыштарҙың барыһында ла Мәскәү бындағыларҙы аҡылға ултырта, аңдарына ҡайтара торғайны. Юҡ, белмәйҙер батша. Еткерергә кәрәк хәлде батшаға, туҡтатһын ҡан ҡойоуҙы. Һуңғы башҡорттоң башын киҫмәҫтәре борон, сик ҡуйһын был башбаштаҡлыҡҡа.

Алдар тархан, ҡайсаҡтарҙы Рәсәйгә ҡушылырға ярҙам итешеп йөрөп ҡайтҡас, илселек башлығы Тәфтиләүгә Рәсәй батшалығына ҡаршы болала ҡатнашмаҫҡа һүҙ биргәйне. Һуңғы бола ғына инде биш йыл бара. Ҡушылманы Алдар баш күтәреүселәргә. Шул уҡ Тәфтиләү ике йөҙгә яҡын ауылды үртәткән, ә Һөйәнтуҙ (урындағы һөйләшсә – Саянтуз) тигән ауылда йөҙҙән ашыу кешене бер һарайға бикләп, тереләй яндырған. Хатта ошоно ишеткәс тә, ҡылыс тотманы Алдар. Тәфтиләү ҙә һүҙ биргәйне лә... Башҡортто яҡлармын, тигәйне. Киреһен эшләгән, вәхши. Ни эшләргә? Миңә лә ҡылыс ҡайрарғамы инде? Тәфтиләүҙең башын өҙә сапһаң, тынысланыр, бәлки, башҡорт баштары?..

Иртәгәһен иртә менән Алдар уландарын, яҡындарын саҡырып алды.

– Балалар, ағай-эне, мин юлға сығырға булдым. Батша бетеүен, батша ҡылысы менән еләнен, юллыҡ аҡса, ризыҡ һалығыҙ. Ике ярҙамсы, яҡшы аттар әҙерләгеҙ. Тәүҙә Ҡыпсаҡ тарханына һуғылам. Минең уйҙы хуплаһа – бергәләп, хупламаһа, бер үҙем Мәскәүгә юлланам. Башҡорт донъяһында ни барлығын түкмәй-сәсмәй һөйләйем. Кирилын да, Румәнсовын да, Тәфтиләүен дә әйтәм. Батша, моғайын, бындағы хәлдәрҙе белмәйҙер. Белһә, ошо тиклем итеп башҡорт донъяһын туҙҙыртмаҫ ине. Беҙ ҙә бит уның подданныйҙары...

* * *

Алдар тархан юлдаштары менән Һамарға етеп килә ине. Уларҙы утыҙлаған һыбайлы казак уратып алды, «үҙ теләктәре менән» Һамар ҡәлғәһенә алып инделәр. Йылы, яҡты өйгә урынлаштырҙылар. Сәй яһарға ҡайнаған һыу, хатта икмәк тә бар. Тик бер генә нәмә юҡ – азатлыҡ. Алдар ҡысҡырып та, өгөтләп тә ҡараны, бетеүен дә күрһәтте, илсене берәүҙең дә туҡтатырға хоҡуғы юҡлығын ҡабат-ҡабат туҡыны – ишетмәнеләр. Дөрөҫөрәге, йылмайып баш ҡаҡтылар, тик ишекте асманылар. Өсөнсө көн тигәндә Алдарҙы саҡырҙылар.

– Әйҙә, күрше йортҡа. Бөтөн һүҙеңде лә шунда әйтерһең.

Индерҙеләр. Алдар аптырап китте: бүлмәлә күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, хәйләкәр, әммә уҫал йылмайып Тәфтиләү ултыра! Алдарҙы күргәс, урынынан тороп, бер нисә аҙым ҡаршыһына атланы.

– Алдар батыр, ҡайһылай ҡартайып киткәнһең, әллә ҡара сәсең дә ҡалмаған инде.

– Уның ҡарауы, һин үҙгәрмәгәнһең.

– Һаумы-һаумы! Бир ҡулыңды, биш булһын.

– Бирер инем. Тик ҡулыңдан ҡан тама, башҡорт ҡаны...

Алдарҙың ҡулдары үҙҙәренән-үҙҙәре йоҙроҡланды, хатта бармаҡ остары ағарып китте. Әммә Тәфтиләүгә тейеүҙән үҙен тыя алды. Башын сәсрәтә генә һуҡһаң, терелəй яндырылған башҡорттарҙың үсе ҡаныр ине әҙ булһа ла. Тик Алдар дошманын яу яланында ғына дөмбәҫләргә күнеккән шул. Ә былай кеше үлтереү – енәйәт бит. Алдар тештәрен шығырлатты, күҙҙәре зәһәр ут сәсте. Тәфтиләү ҙә быны хәлен һиҙҙе: ярһып китеп, бер һуҡһа, йәнеңде йәһәннәмгә оҙатыр, тип ҡурҡты һәм өҫтәлдә торған ҡыңғырауҙы зыңғырлатты. Шунда уҡ ишектә ике һаҡсы күренде. Алдар тынысланды. Тәфтиләүгә төбәп:

– Әйт әле, Ҡотломөхәммәт, – тине, һуңғы һүҙгә айырыуса баҫым яһап, – башҡорт илендә һиңә ни кәрәк? Үҙеңдең Питереңдә йә Ҡасимыңда тыныс ҡына ятһаң ни була?..

Тәфтиләү һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайҙы. Ирен ситендә мыҫҡыллау һыҙаты сағылып ҡалды.

– Батшаға нимәләр һөйләргә самалайһың инде?

– Батша ғали йәнәптәренә һеҙҙең өҫтән һөйләргә йыйынам. Кириллов та, Неплюев та, һин дә тик башҡорттоң хәлен алыу яғын ғына ҡарайһығыҙ. Һеҙҙең башбаштаҡлыҡҡа батшанан башҡа берәү ҙә сик ҡуя алмаҫҡа оҡшай.

– Ярар, ҡыҙма, тархан. Ғәйеп атта ла, тәртәлә лә бар, тигән кеүек, үҙегеҙ ҙә рустың ҡанын аҙ түкмәнегеҙ бит. Урға (Орск) китеп барған күпме ғәскәрҙе ҡырҙығыҙ...

– Һинең кеүек, беҙ тере кешеләрҙе утта яндырманыҡ...

– Ярар, булғандыр. Минең һиңә тәкдимем бар.

– Ниндәй?

– Һин хәҙер Минзәләгә бар. Унда хөкүмәт кешеләре менән һеҙҙекеләр араһында боланы туҡтатыу тураһында һөйләшеү башлана. Шунда ҡатнашһаң, яҡшы булыр.

– Минзәләгә? Кемдәр була унда?

– Сенат бит махсус кешеләр ҡуйҙы. Шунда улар.

– Юҡ, мин батшаға барам. Халыҡҡа, батшаға барам, тип сығып киттем.

– Сенат комиссияһы менән һөйләшмәй тороп, батша ҡабул итмәйәсәк. Шуны бел: Ҡазан юлында ла, Мәскәү юлында ла урыҫ ғәскәре күп хәҙер. Үҙеңде тотоп зинданға ла бикләп ҡуйыуҙары бар. Һамар янында тоттолар бит, шуның кеүек. Иртәгә иртән Минзәләгә беҙҙекеләр бара, улар һине оҙата барыр.

Ышанды Алдар тархан. Тәфтиләүҙең һүҙенә ышанды. Ышанмаҫлыҡ та түгел ине шул. Бишенсе йыл бара бит инде бола. Күпме ҡан ҡойолдо, ғүмерҙәр өҙөлдө, ауылдар яндырылды, күпме мөлкәт юҡҡа сыҡты. Туҡтатыр кәрәк ине был ҡыйралышты. Тиҙерәк туҡтатыр кәрәк. Алдар батша ғали йәнәптәренә юлға шуның өсөн сыҡты ла инде. Әгәр ҡыйралышҡа Минзәләлә кәртә ҡуйып була икән, ниңә Питерға китеп барырға?

Ризалашты тархан Минзәләгә барырға. Иртә менән оҙатырға Тәфтиләү ҙә килде. Алдар менән ҡосаҡлашып хушлашты, хәйерле юл, оҙон ғүмер теләп ҡалды. Үҙ кешеләренең өлкәненә хат тотторҙо:

– Был хатта һинең кемде оҙата барғанлығың тураһында яҙғанмын. Туҡтатһалар, шуны күрһәтерһең. Ә быныһын, – Тәфтиләү еп киҫәге менән ағас сыбығының һынығын тотторҙо, – берәүгә лә күрһәтмә. Минзәләлә ҡәлғә начальнигына бирерһең.

Минзәләгә ыңғай ғына барып еттеләр. Алдар менән юлдаштарын ҡәлғәгә ингәс тә, аттарынан төшөрөп, бындағы түрә янына индерҙеләр. Уларҙы оҙата килгән һалдат түрәгә Тәфтиләү ебәргән еп менән сыбыҡты тотторҙо. Түрә, аңлашылды тигәнде белдереп, башын ҡаҡты ла ишекте асып ҡысҡырҙы:

– Команда! Ин бында!

Ул арала бүлмәгә ҡоралллы һаҡсылар инеп тулды.

– Ҡулға алығыҙ!

Алдар менән юлдаштарын шунда уҡ ҡулдарын шаҡарып бәйләнеләр ҙә зинданға индереп ташланылар. Шул уҡ төндә таңға табан Алдарҙы сығарып аҫтылар, юлдаштарын иҙеп туҡманылар ҙа ҡәлғәнең тышына ырғыттылар.

– Белеп тороғоҙ: кем дә кем Рәсәй батшаһына ҡаршы ҡул күтәрә, уға дар ағасы әҙер...

Тәфтиләү Минзәләгә ебәргән еп киҫәге менән сыбыҡ – Алдарҙы аҫырға тигән билдә ине. Был турала, әлбиттә, бер нисә кеше генә белде. Алдар батыр, Тәфтиләүҙең таҫма теленә ышанып, мәкер ҡорбаны булды.

1. Өҙөктө уҡып, йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ. Яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. *Баш ҡағыу, сәсрәтә һуғыу, ҡул күтәреү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ, икенсе һүҙҙәр менән алмаштырып ҡарағыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.
3. Ниндәй тел ул *таҫма тел*? Яҡшы сифатмы ул? *Шыма тел* менән сағыштырығыҙ.
4. *Шыттырыу* тип нимәгә әйтәләр? Шыттырырға ятраҡан кешене кем тиҙәр? Һеҙ үҙегеҙ шыттырғанығыҙ бармы?
5. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, өҙөктөң йөкмәткеһен матур итеп һөйләргә өйрәнегеҙ.
6. *Ҡылыс ялтыратырға ҡоторта; Тел сиселә; Күңел йомшара; Мәскәү аҡылға ултырта; Күҙҙәре зәһәр ут сәсте; Йәнеңде йәһәннәмгә оҙатыр тип ҡурҡты* һөйләмдәренең мәғәнәһен асыҡлап, руссаға тәржемә итегеҙ.
7. *Ғәйеп атта ла, тәртәлә лә бар* тип ҡасан, ниндәй осраҡта әйтәләр?
8. Өҙөктә ваҡиғалар ҡайһы осорҙа бара, ниндәй ваҡиғалар тасуирлана?
9. Тәфтиләү тураһындағы йырҙы, «Ҡараһаҡал» романын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
10. Тәфтиләү образына ентекле характеристика төҙөп яҙығыҙ.
11. Алдар батыр образына ентекле характеристика төҙөп яҙығыҙ.
12. Тексҡа ҡыҫҡаса аннотация яҙығыҙ.

### Роман тураһында төшөнсә

Роман – эпик жанрҙар араһында иң күләмлеһе. Ул тормоштағы ҡатмарлы процестарҙы, ҙур, оҙайлы ваҡиғаларҙы сағылдыра. Шуға ла ул геройҙарҙың күплеге менән, уларҙың тормошон төрлө яҡлап, ентекләп күрһәтеүе менән айырылып тора.

Ҡайһы берҙә ваҡиғалар бер роман эсенә генә һыймай, геройҙарҙың да образдары асылып бөтмәй ҡала. Шул ваҡыт был романдың дауамы булараҡ икенсе роман тыуа. Шулай итеп дилогия (ике роман), трилогия (өс роман), тетралогия (дүрт роман) һәм хатта пенталогия (биш роман) барлыҡҡа килеүе мөмкин.

Башҡорт әҙәбиәте романдарға шаҡтай бай. Башҡорт яҙыусыларынан Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Фәрит Иҫәнғолов, Яныбай Хамматов, Әхиәр Хәкимов, Ноғман Мусин, Булат Рафиҡов, Ринат Камал, Гөлнур Яҡупова һ. б. бик күптәр оҫта романсы булараҡ билдәле.

1. Үҙегеҙ белгән (уҡыған) башҡорт романдарының исемлеген төҙөгөҙ, уларҙың нимә тураһында икәнлеген иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
2. Үҙегеҙгә иң оҡшаған берәй романдың йөкмәткеһен иптәштәрегеҙгә һөйләгеҙ. Уларҙы ҡыҙыҡһындырыу өсөн, һеҙ иң тәүҙә нимәләргә иғтибар итер инегеҙ?

**Хәтер һандығына...**

Таштың да тарихы була.

Ат етмәҫ ергә дан етер.

Бер егеттең ҡыйыулығы мең егеткә дан килтерер.

Дандың төбө – хөрмәт, хөрмәт төбө – хеҙмәт.

Данлы егет ил өсөн үлер.

Күл балығы менән данлы, ил халҡы менән данлы.

Батырҙы яу тыуҙыра.

Батырҙан үлем ҡурҡа.

Эт батырға өрөр, ҡурҡаҡты тешләр.

Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер, яу килгәндә, йән бирер.

Күмәк көс тау аҡтарыр, күмәк кеше яу ҡайтарыр.

Халыҡҡа хыянат – Ватанға хыянат.

# РУХИ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

## УРАЛ БАТЫР

*(Эпостан өҙөк)*

Борон-борон-борондан
Кеше-маҙар килмәгән,
Килеп аяҡ баҫмаған,
Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Булған, ти, бер урын.
Унда булған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән
Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ,
Ҡайҙа барһа, уларға
Ул урында юл асыҡ.
Был ҡарт менән был ҡарсыҡ
Ҡайҙан бында килеүен,
Ата-әсә, ер-һыуы
Ҡайҙа тороп ҡалыуын
Үҙҙәре лә онотҡан, ти;
Икәүҙән-икәү шул ерҙә
Башлап ғүмер иткән, ти.
Тора-бара ул икәү
Ике уллы булғандар:
Шүлгән булған олоһо,
Урал булған кесеһе;
Бүтән кеше күрмәйсә,
Тик йәшәгән дүртеһе.
Донъя-маҙар йыймаған,
Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,
Ҡаҙан аҫып, ут яғып,
Улар донъя көтмәгән.
Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,
Үлем барын белмәгән,
Бар нәмәгә үлемде
Үҙем мин, тип һанаған,
Һунарҙа ат менмәгән,
Ҡулға һаҙаҡ тотмаған;
Менәренә – арыҫланды,
Балығына – суртанды,
Ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы,
Ҡан һурырға һөлөктө
Үҙ иштәре яһаған.
Бик борондан булғанмы,
Йәнбирҙе үҙе ҡылғанмы,
Бара-тора шул ерҙә
Йола булып киткәнме,
Йыртҡыс йәнлек тотто иһә,
Йәнлек иркәк булды иһә,
Ирле-бисәле икәүһе
Башын сәйнәп ашаған,
Шүлгән менән Уралға,
Эте менән арыҫланға,
Шоңҡар менән суртанға
Ҡалған яғын ташлаған;
Йыртҡыс йәнлекте тотһа,
Йәнлек орғасы булһа,

Ирле-бисә икәүһе
Йөрәгене һайлаған.
Үлән емшәр йән тотһа,
Ҡара һөлөк ҡаҙаған,
Һөлөгөнән һурҙырып,
Ҡанды һыуһын яһаған.
Бала үҫеп еткәнсе,
Үҙе йәнлек тотҡансы,
Баш-йөрәкте ашауҙан,
Һыуһынға ҡан эсеүҙән
Балаларын тыйғандар,
Һис ярамай, тигәндәр…

Берҙән-бер көн еткәндә,
Ҡарт менән ҡарсыҡ икәү
Ау ауларға киткәндә,
Шүлгән, Урал икәүләп
Торлаҡта аулаҡ ҡалғанда,
Аталары киткән һуң,
Байтаҡ ваҡыт үткән һуң,
Ике бала һөйләшеп,
Ашауҙан һүҙ асҡан да,
Шүлгән уйлап торған да,
Ҡан эсеүҙән атаһы
Ныҡ тыйғанын белһә лә,
Аталары киҫәтеп:
«Ҡан эсмәгеҙ!» – тиһә лә,
Шүлгән, Уралды димләп,
Ошолай тип әйткән, ти:
– Йәнде ҡыйып һунарлау
Ҡомарлы эш булмаһа,
Һыуһағанда ҡан эсеү
Тағы тәмле булмаһа,
Атамдар йоҡо ҡалдырып,
Аяҡ-ҡулын талдырып,
Һәр көн икәү ҡаңғырып,
Беҙҙе өйҙә ҡалдырып,
Йөрөмәҫ ине һунар тип.
Урал, әйҙә, булмаһа,
Ҡабырсаҡты асайыҡ,
Һәр беренән аҙ-аҙлап,
Берәр тамсы эсәйек,
Ҡандың тәмен беләйек.

Урал:

– Атам һүҙен тотамын –
Мин ҡан эсмәй үҫәмен,
Егет булып үҫмәйсә,
Төп йоланы белмәйсә,
Бер ил гиҙеп йөрөмәйсә,
Ысынлап та донъяла
Үлем юғын күрмәйсә,
Ҡулыма суҡмар алып,
Һис бер йәнде һуҡмамын,
Һөлөк һурған ҡанды мин
Ҡабырсаҡтан эсмәмен.

Шүлгән:

– Кешене еңер үлемдең
Бында килеп сыҡмаҫын,
Беҙҙе килеп тапмаҫын
Атам һөйләп бирҙе бит;
– Бары йәнгә беҙ – үлем, –
Тип тағы ла әйтте бит!
Инде ниҙән өркәһең,
Ҡан эсеүҙән ҡурҡаһың? –
Шүлгән һаман үҙ һүҙен
Уға ҡарап ҡуймаған –
Ҡабырсыҡтан аҙ-аҙлап
Ҡанды һемереп эскән, ти,
Атаһына әйтмәҫкә
Уралдан һүҙ алған, ти…

1. Эпостың бында баш өлөшөнән өҙөктәр килтерелде. Тексты тулыһынса уҡып, Урал батыр менән Шүлгәндең артабанғы яҙмышын күҙәтегеҙ. Эпостың тулы йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡтың тормошона характеристика бирегеҙ.

3. Әҫәрҙә ваҡиғалар бик боронғо замандарҙа бара. Был боронғолоҡто беҙ ниндәй билдәләргә ҡарап беләбеҙ?
4. Фонохрестоматиянан эпостан өҙөк тыңлағыҙ, шуға оҡшатып, үҙегеҙ ҙә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
5. Йыл һайын йәй көнө «Урал батыр» эпосын башҡарыу буйынса йәш сәсәндәр конкурсы үткәрелә. Үҙегеҙҙе шул конкурста ҡатнашыуға әҙерләгеҙ.

## Ҡылым

*(ҡабатлау)*

**34-се күнегеү.** Ҡылым белдергән мәғәнәләргә ярашлы һүҙҙәр өҫтәп яҙығыҙ.

Ат хәрәкәте: сабыу, ... .
Игенсенең эше: сәсеү, ... .
Телмәр ҡылымдары: һөйләү, ... .
Тәбиғәттәге процестар: йылыныу, ... .
Кешенең хәле: арыу, ... .

**35-се күнегеү.** Һорауҙарға һәм эштәргә яуап бирегеҙ.

1. Ҡылымдың төп һорауы.
2. Ҡылымдың ике төп формаһын әйтегеҙ.
3. Затлы формаларҙы ниндәй төрҙәргә бүләләр?
4. Затһыҙ формаларҙы һанағыҙ.
5. Затлы һәм затһыҙ формаларҙы бер-береһенән нисек айырырға?

**36-сы күнегеү.** «Урал батыр» эпосында ҡылымдарҙың иң йыш ҡулланылған формаһын билдәләгеҙ. Өҙөктән затлы һәм затһыҙ формаларға унар ҡылым яҙып алығыҙ. Төрҙәрен әйтегеҙ.

### Ҡылымдарға морфологик анализ яһау тәртибе

1. Һүҙ төркөмө.
2. Ҡылым нигеҙе (бойороҡ һөйкәлешенең II зат берлек формаһы менән тап килә).
3. Барлыҡ, юҡлыҡ.
4. Затлы форма, затһыҙ форма.
5. Һөйкәлеш, төркөмсә.
6. Заман (уның формалары), эйәлек заты.
7. Зат, килеш.

8. Һан, килеш.
9. Һөйләм киҫәге.

Өлгө: *Ҡайтҡандар* – ҡылым, ҡайт, барлыҡ затлы ф., хәбәр һ., үткән з., билдәһеҙ һ., III зат, күплек, хәбәр.

*Ҡайтмағанға (ике йыл)* – ҡылым, ҡайт, юҡлыҡ, затһыҙ ф., сифат ҡ., үткән з., төбәү килеш, тултырыусы.

**37-се күнегеү.** «Йософ ҡиссаһы» тексынан хәбәр һөйкәлешенең киләсәк заман формаһына ҡараған (ни эшләр? ни эшләйәсәк?) һәм хәл ҡылым формаһындағы бишәр ҡылым яҙып алығыҙ.

*Ҡол Ғәли*

## ЙОСОФ ҠИССАҺЫ

*(өҙөктәр)*

### Беренсе бүлек

Ғәзиз Йософ тамам ун бер йәштә ине,
Атаһының итәгендә йоҡлар ине,
Йоҡлағанда ғәжәп бер төш күрҙе Йософ,
Мәғәнәһен атаһынан һорар инде:
«Нурлы ҡояш, тулған ай, ун бер йондоҙ
Төшөмдә башын эйҙе миңә төп-төҙ,
Был төшөмдә шулай күрҙем һис бер шикһеҙ,
Йә, атай, шул төшөмдө юра инде...»
Яҡуп шунда юрап бирҙе уның төшөн:
«Булыр, – тине, – бәхетле һәм ҡотло эшең...»

Яҡуп улына, бер саҡ һин үҙең батша булырһың, ун бер ағай-энең һиңә башын эйер, тик был төшөңдө бер кемгә лә һөйләмә, ти. Әммә уларҙың һөйләшеүен Яҡуптың үгәй ҡыҙы Динә тыңлап тора ла Йософтоң ағаларына барып әйтә. Улары, көнләшеп, Йософтан ҡотолорға булалар һәм, аталарынан һорап, Йософто һунарға алып сығалар ҙа сүллектә бер ҡойоға ташлап китәләр. Ҡайтҡас, аталарына, Йософто бүре ашаны, тип ялғанлайҙар. Бына, ҡанлы күлдәге генә ҡалды, тиҙәр.

Сүл буйлап китеп барыусы бер каруан, шул ҡойо янына туҡталып, һыу алырға булһалар, төшөргән силәктәренә йәбешеп, Йософ килеп сыға. Быны ситтән күҙәтеп торған ағалары, беҙҙең ҡолобоҙ ҡасҡайны, был ҡол беҙҙеке, тип, Йософто каруансыларға ҡол итеп һатып ебәрәләр.

Мысырҙа Йософто батша ҡатыны Зөләйха һатып ала.

### Алтынсы бүлек

Ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ ошо һүҙҙе:
Ул Зөләйха – батша балаһы, Таймус ҡыҙы,
Тулған айҙай балҡыр ине уның йөҙө,
Ожмахтағы хур ҡыҙына оҡшар ине.
Зөләйха бер көн ойоп йоҡлар ине,
Шунда Йософ һынын ул төштә күрҙе,
Күреү менән шундуҡ уға ғашиҡ булды –
Илай-илай уянып та китер инде...

Зөләйха Йософто өс тапҡыр төшөндә күрә. Өсөнсө төшөндә ул Йософто Мысыр батшаһы тип күрә. Шунан Мысыр батшаһына кейәүгә сығам тип бик ныҡышҡас, атаһы уны, каруан-каруан байлыҡ тейәп, әхирәт ҡыҙҙарын эйәртеп, Мысыр батшаһына кәләш итеп оҙата. Ләкин Мысырҙа был ваҡытта бөтөнләй икенсе кеше батша була, ә Йософ әле унда килеп етмәгән була.

Каруансылар, Мысырға килеп еткәс, Йософто баҙарҙа маҡтай-маҡтай һаталар:

Өндәүселәр ҡысҡырып иғлан итәләр:
– Был уғылды кем һатып ала? – тинеләр. –
Уның ун төрлө һөнәре бар, – тинеләр, –
Һөнәрҙәрен улар шунда һанар инде:
– Беренсенән – буйы зифа, һылыу үҙе,
Икенсенән – күркле һәм нурлы йөҙө,
Өсөнсөнән – теле бик саф, тоғро һүҙе –
Етмеш ике телде тамам белер инде.
Дүртенсенән – кешелекле һәм шәфҡәтле,
Бишенсенән – Алып батырҙай йөрәкле,
Алтынсынан – бик күптәрҙән ул ҡеүәтле –
Көс-ҡеүәте ҡырҡ ирҙән артыҡ инде...

Йософто күреп, Зөләйха уға һуштан яҙып ғашиҡ була, һәм, бөтә мал-мөлкәтен биреп, уны һатып ала.

### Һигеҙенсе бүлек

Мысыр илендәге бөтә ҡатындар,
Быны ишетеп, үҙ-ара һөйләштеләр,
Ул ҡатындар Зөләйханан көлөштөләр,
Һәр береһе һәр төрлө һүҙ һөйләр инде:
– Зөләйха үҙ ҡолона ғашиҡ булған,
Ҡоло буйһонмаған, ҡыҙ оятҡа ҡалған.

Эштең ниҙә икәнен ире белгән,
Ҡоло артынан йөрөгәнен күргән инде…
Зөләйха был һүҙҙәрҙе ишетеп белде,
Бик ҙур табын әҙерләргә ҡарар ҡылды,
Ҡунаҡ булып дүрт йөҙ ҡатын-ҡыҙ килде,
Барыһы ла түргә менеп ултыра инде.
Зөләйха Йософто матур кейендерҙе,
Үҙ ҡулдары менән уның сәсен үрҙе,
Ҡулына ҙур ҡыҙыл алтын табаҡ бирҙе,
Йософ уны табынға илтәр инде.
Ул ҡатындар теҙелешеп ултырҙылар,
Берәр бысаҡ һәм әфлисун килтерҙеләр.
– Әфлисунды турағыҙ, – тип бойорҙолар,
Тап шул ваҡыт Йософ килеп инер инде.
Йософ ингәс, боролоп ҡаранылар,
Матурлығын күреп уның таң ҡалдылар,
Һәммәһе, күҙен алмай ҡарап уға,
Әфлисун тип бармаҡтарын киҫә инде.
Шулай итеп хайран ҡалып ҡаранылар,
Үҙҙәренең бармаҡтарын туранылар,
Тураүҙарын һис тә генә тойманылар,
Һәммәһе лә шул ҡәҙәре хайран инде.
Зөләйха әйтте:
– Инде үҙегеҙ күрҙегеҙме,
Йөҙөм ниңә һулығанын белдегеҙме,
Бер күреүҙә ҡулығыҙҙы телдегеҙме,
Һушһыҙ булып төштөгөҙмө? – тине инде.
– Мин Йософто күргәнемә ете йылдыр,
Уға булған ғишҡым арта торор,
Мин, бисара, һаман әле түҙә инем,
Сабырлығым һеҙҙекенән артыҡ икән.
Күрҙегеҙме – ауырыу асылы ниҙән,
Был уғландың йөҙө нурлы тыуған көндән,
Буйы зифа, теле татлы тағы унан,
Йөҙөн күргән йәнен фиҙа ҡылыр инде!..

Зөләйха Йософҡа үҙенең мөхәббәтен төрлөсә белдереп ҡарай, тик Йософ уға һис иғтибар итмәй. Зөләйха аптырағас, асыуы килеп, Йософто, нахаҡтан яла яғып, батшаға ошаҡлап, зинданға яптырта. Йософ зинданда ун ике йыл ултыра. Был бәләнән ул батшаның төшөн юрап ҡотола. Төшөндә батша ете һимеҙ һыйырҙы Нил йылғаһының аръяғынан килеп сыҡҡан ете арыҡ һыйыр ашап бөтөргән, имеш, тип күрә. Йософ, ете

йыл туҡлыҡтан һуң ете йыл аслыҡ килер, тип юрай. Батша Йософто вәзир итеп ҡуйғас, Йософ, иген күпләп уңған ете йыл эсендә бик күп аҙыҡ запасы әҙерләтеп, илде ете йылға һуҙылған аслыҡтан ҡотҡарып алып ҡала. Аслыҡтан интеккән ағалары Мысырға килеп иген һатып алалар. Йософ ағаларын таный, ә тегеләре Йософто танымай. Икенсе тапҡыр килгәндәрендә генә Йософ үҙен таныта. Ләкин ул ағаларынан үс алмай, күп итеп иген биреп ебәрә, күлдәген атаһына алып ҡайтып бирергә ҡуша. Шул күлдәк менән битен һыпырыуға, Йософто юғалтыу ҡайғыһынан һуҡырайып ултырған Яҡуптың күҙе асыла. Аҙаҡ Йософ Зөләйхаға өйләнә, бәхетле ғаилә ҡоралар.

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Яңы һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. *Ҡолаҡ һалып тыңлау* нисек була ул? Һеҙҙең шулай ( мәҫәлән, уҡытыусының һөйләгәнен) тыңлағанығыҙ бармы? Тыңлауҙың тағы ниндәй төрҙәре бар?
3. *Төш юрау* тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Төш юрау тураһында китаптар ҙа бар (сонники), шуларҙы файҙаланып, ололарҙан һорап, үҙегеҙ белгәндәрҙе ҡушып, шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. Йософ образына характеристика бирегеҙ.
5. Әҫәрҙең авторы Ҡол Ғәли тураһында мәғлүмәт туплағыҙ.
6. Әҫәрҙең тулы тексы башҡорт телендә 1993 йылда айырым китап булып баҫылып сыҡты, уны табып уҡып сығығыҙ.
7. Академик Ғайса Хөсәйенов «Йософ ҡиссаһы»н яҙма поэзиябыҙҙың шишмә башы тип атаны. Быға аңлатма биреп ҡарағыҙ.

## Башҡорт шәжәрәләре

Күпселек башҡорт шәжәрәләре тарихи документ ҡына түгел, ҡиммәтле әҙәби ҡомартҡы ла булып тора. Уларҙа халыҡ тормошондағы әһәмиәтле ваҡиғалар образлы һәм йәнле тел менән, художестволы әҫәрҙәргә хас һүрәтләү саралары менән тасуирлана, күренекле шәхестәрҙең үҙенсәлекле образдары тыуҙырыла. Текстарҙа йыш ҡына легендалар һәм риүәйәттәр, мәҡәл-әйтемдәр осрай, образлы сағыштырыу, метафора, тура һәм ситләтелгән телмәр, инверсия күренештәре осрай. Был бигерәк тә шиғыр формаһында төҙөлгән шәжәрәләрҙә асыҡ күренә.

Юрматы ырыуы шәжәрәһе беҙгә килеп еткән шәжәрәләр араһында иң боронғоһо һанала.

## ЮРМАТЫ ЫРЫУЫ ШӘЖӘРӘҺЕ

*(ҡыҫҡартып алынды)*

Сыңғыҙ хан заманынан ҡалған хандар мәғлүм булһын.

Асыл юрматыларҙың уландарының Тухал Шәғәли бейҙең ырыуы күп булған өсөн барса халыҡ (уны) «бей» тип әйтәләр. Борон заманда был ерҙә нуғай ине. Зәй, Шишмә тигән ерҙә һәр тарафтан күсеп йөрөйҙәр ине...

Ул заманда Әмәт Хәмәт тигән хандың ҡул аҫтында торҙолар. Ул ваҡытта хан ханды күрә алманы. Бер-береһенә дошман булып, ҡылыс күтәрә башланылар. Ул ваҡытта Жәнибәк менән Аҡһаҡ Тимер хан ине. Улар ваҡытында йортҡа оло бөлгөнлөк булды. Әмәт Хәмәт хандың йорто тарҡалды. Бер аҙ кешеләр менән ҡасып, оло Иҙелдең аръяғына сыҡтылар һәм шунда туҡтанылар... Хан әйтте: «Шәғәли бей, халыҡтар араһында һинән лайыҡлы юҡ, был ер һәм һыу һинеке булһын!» – тине. Шәғәли бей риза булды, һәм Шәдлек тигән һыу буйына йорттар һалдылар...

Күп заман торҙолар. Шәғәли бей донъянан китте. Уны атаһы янына күмделәр. Ғәли Шәйех Дәрүиш бей булды. Йорт имен булды. Шәйех Дәрүиш бей булғас, боронғо ата-бабалар йортона, Зәй, Шишмә буйҙарына күстеләр, һәр тарафтан күсеп йөрөнөләр, яҡшы йәшәнеләр. Бер аҙҙан һуң Шәйех Дәрүиш бей донъянан үтте. Унан һуң бейҙең улы Сәсле Дәрүиш килде, уға бейлеккә мөһөр бирелде. Оло бей булды, яҡшы йәшәнеләр.

Нуғайҙарҙың шундай ғәҙәте бар ине: «бей», «мырҙа» тип баш эйеп йөрөнөләр. Күсә-күсә улар Һаҡмарға, Яйыҡҡа һәм Иҙел буйына еттеләр. Һанһыҙ нуғай ошо ерҙәрҙә торҙолар. Әммә Сәсле Дәрүиш бейҙең ғүмере ахырына етте, улы юҡ ине, яҡын туғандары ла юҡ ине, бер генә ҡыҙы бар ине, ул ҡыҙын үҙ ҡулы аҫтындағы бер нуғайға биргән ине. Ул ҡыҙының ике улы бар ине, береһе Борнаҡ, икенсеһе Йәдкәр исемле ине...

Сәсле Дәрүиш донъянан күсте. Ҡыҙының оло улы Борнаҡ бей булды, Йәдкәр мырҙа булды. Уның ҡәрҙәштәре барсаһы ла мырҙа булды, ырыуы ишле ине. Ул заманда Төкәй хан ине. Төкәйгә мөһөр бирелде. Төкәй мең дә һикһән биш ҡаҙаҡҡа баш булды. Һәр тарафҡа күсеп йөрөнөләр, ғәҙеллек менән донъя көттөләр.

Бер заман йылдар ҡытлыҡ булды. Ҡыш бик оҙаҡ булды, өс йылғаса йылҡы, ҡуй бөттө, игендәр һис үҫмәне, күп халыҡтар дарманһыҙ булдылар, һәм күп халыҡтар ас-яланғас ҡалдылар. «Боронғо ата-бабаларыбыҙ Кубандән ер-һыу тип, һалҡын ер,

һалҡын һыу эҙләп килгәндәр, әммә ҡыш һыуығы көн эҫелегенән яман икән... Беҙгә был ер лайыҡ булмаҫ», – тип, һанһыҙ нуғайҙар күсергә булдылар. Әммә ярлы-ябаға Борнаҡ бейгә килеп әйттеләр: «Яҡшы ваҡытта бергә торҙоҡ. Инде, заман яман булғас, һеҙ беҙҙе ҡайҙа ҡуйып китәһегеҙ, беҙ ҡайҙа барайыҡ?» – тип бик ялбарғас, Борнаҡ бей күсмәҫ булды. Ә энеһе Йәдкәр мырҙа, баш булып, һанһыҙ нуғай менән Кубангә күстеләр. Был туғыҙ йөҙ ҙә илле өстә ине, Аҡ Иҙелдең буйында үрге осо Нөгөш, түбәнге осо Көгөш, шуларҙан сыҡҡан таралма һыуҙары, яландары менән биләп торалар ине. Өс йөҙ нуғай, Йәдкәрҙән ҡалғас, улар ҙа ырыуҙары менән Кубангә күстеләр.

Борнаҡ бей менән ҡалғандар истәк (башҡорт) аталдылар. Ошо нуғайҙарҙан ҡалған буш ерҙәрҙә ғүмер һөрҙөләр. Иҙел буйҙарында һәм урмандарҙа бал ҡорто менән, һыуҙа ҡондоҙ менән, яланда һыуһар, төлкө менән хәрәкәт итеп (шөғөлләнеп), байыҡтылар. Йәнә тарих туғыҙ йөҙ ҙә илле дүрт ине, барса истәк Борнаҡ бейҙең әмере менән торҙолар. Борнаҡ бей вафат булғас, бейлекте Тәтегәскә тапшырҙылар.

Тәтегәс бей булғандан һуң, тарих туғыҙ йөҙ ҙә илле туғыҙҙа, сысҡан йылында, Ҡазан шәһәрен урыҫ алды. Шунан һуң Аҡ бей батша булды. Ул, һәр тарафҡа хат-яҙыуҙар менән илселәр йөрөтөп, тарих туғыҙ йөҙ ҙә алтмыш берҙә хәбәр һалды: «Бер кем дә ҡасмаһын, һәр кем үҙ динендә торһон, үҙ ҡағиҙәһен тотһон», – тип.

Илселәрҙән шуны белгәс, тарих туғыҙ йөҙ ҙә алтмыш берҙә, мин, Тәтегәс бей, башҡа һис тә уй уйларға сара ҡалмағас, өс түбә халыҡтан өс кеше алдым да, Аҙнай баба, Илсекәй Тимер баба, Ҡарамыш баба менән дүртебеҙ, бер аҙ юлдаштар эйәртеп, Ҡазан шәһәренә барып, Аҡ бей батшаға баш һалдыҡ. Ярлыҡаш (килешеү) ҡағыҙҙары алдыҡ... Күсеп киткән нуғайҙарҙан ҡалған ерҙәрҙе үтенеп һорап алдыҡ. Үрге сиге Нөгөш, түбәнге сиге Көгөштөң ике яғына сыҡҡан һыуҙары, яландары, тауҙары менән бирҙе. Яһаҡҡа һыуһар түләргә тип вәғәҙә бирҙек.

Ерҙе беҙ дүрт түбәгә бүлдек. Тәүҙә Ашҡаҙарҙың башынан тамағынаса ике яғынан ҡойған һыуҙары, туғайҙары һәм яландары, Нөгөш тамағынаса ҡойоусы йылғалары менән бер өлөш яһаныҡ. Йәнә Нөгөш тамағынан Иҙелдең ике яғынан сыҡҡан таралма һыуҙары, туғайҙары менән, Тор башы һәм Ҡәләүек башы менән, Ҡырҡбаш ағасынан Торатау итәгенә тиклем бер өлөш яһаныҡ. Йәнә Торатау, Шәкетау һәм Ҡуштау, Эстәрле

тамағынан, Ҡуғанаҡ башынан Өршәктең ике араһындағы аҡҡан һыуҙар башы Аҫауға тиклем арҡа һәм яландары менән бер өлөш яһаныҡ. Йәнә Өршәк, Аҫау тамағынан Бәләкәй бүләккә, Бурһыҡ тауынан һәм Йөрәктауҙан Иҙелдең Ҡара туғай менән Көгөштән Егәндең икегә таралма һыуҙары менән, ағыштары менән Ҡаламан башынан, Тор башынан бер өлөш яһаныҡ.

Шунан һуң дүрт шыбаға һалдыҡ. Тәүге өлөш миңә, Тәтегәскә, сыҡты, икенсе шыбаға Аҙнайға, өсөнсө шыбаға Илсекәй Тимергә, дүртенсе шыбаға Ҡарамышҡа сыҡты. Шул ерҙәрҙе бүлеп, шыбаға һалғандан һуң, һүҙ боҙмаҫҡа, татыулыҡ менән торорға килештек.

Алтмыш икенсе йылға кергәс, Аҡ бей батшанан купис килде. Миңә, Тәтегәскә, староста Аҙнайға, Илсекәй Тимергә һәм Ҡарамышҡа хәбәр итеп, йөҙ һыуһар яһағын йыйып, беҙ уны Мәскәүгә батшаға алып барып түләнек. Ошо еребеҙҙе өләшкәнебеҙҙе яҙып, Мәскәүҙең кенәгәһенә индерҙек. Шул кенәгә буйынса һәр йылда яһаҡ түләнек. Әммә Мәскәүгә илтеп түләү ауыр тип, яһаҡты Ҡазанға түләүҙе үтендек...

Бынан һуң күп ваҡиғалар булып үтте, беҙ ҡартайҙыҡ... Үҙ заманымда уҙған бабаларҙың тарихтары менән үткәнде мин, Баҡый мулланан яҙҙырып, староста Аҙнайға, Илсекәй Тимергә, Ҡарамышҡа тапшырҙым.

Тәтегәс баба тарих туғыҙ йөҙ ҙә етмеш икелә рамаҙан айының һигеҙенсе көнөндә вафат булды...

1. Шәжәрәләр тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: уларҙың төрҙәрен, ниндәй маҡсат менән төҙөлгәндәрен, халыҡтың көндәлек тормошонда, ырыу тарихын билдәләүҙә әһәмиәтен асыҡлағыҙ.
2. Башҡортостандың физик картаһында Юрматы ырыуы ҡайһы төбәктә йәшәгәнлеген, ҡайҙан-ҡайҙа күсеп йөрөгәнлеген билдәләгеҙ.
3. Юрматыларҙың нуғайҙар менән мөнәсәбәте тураһында һөйләгеҙ, Йәдкәр мырҙаның нуғайҙарҙы Кубангә алып китеүе, улар ҡалдырып киткән ерҙәрҙе Борнаҡ бей менән тороп ҡалған истәктәрҙең (башҡорттарҙың) биләүе һ. б.
4. Юрматыларҙың Аҡ батшаға баш һалыуы, Рус дәүләтенә ҡушылыу шарттары тураһында һөйләгеҙ.
5. Башҡортостан картаһында Юрматы ерҙәренең дүрт түбәгә (өләшкә) бүленеше тураһында һөйләгеҙ. Бөгөнгө көндә Юрматы башҡорттарының ҡайһы төбәктәрҙә йәшәгәнен, улар биләгән территорияның үҙәген билдергән мемориалдың ҡайҙа урынлашҡанлығын асыҡлағыҙ.

6. «...Сыскан йылында Ҡазан шәһәрен урыҫ алды», – тиелә шәжәрәлә. Боронғоса, Көнсығыш йыл иҫәбе буйынса, тағы ниндәй «хайуан» йылдары бар, улар нисәү, ниндәй тәртиптә һәм нисек ҡабатланып килә? Йыл исемдәрен тәртибе буйынса яҙып сығығыҙ, үҙегеҙҙең ниндәй йылда тыуғанлығығыҙҙы, быйыл ниндәй йыл икәнлеген билдәләгеҙ.

7. «Тәтегәс бей ... рамаҙан айының һигеҙенсе көнөндә вафат булды...» – тиелә шәжәрәлә. Мосолман календарында тағы ниндәй айҙар бар, улар нисәү, нисәшәр көндән торалар, йыл әйләнәһенә нисек һәм ни өсөн «күсеп йөрөйҙәр»? Был календарь буйынса үҙегеҙҙең ниндәй айҙа тыуғанлығығыҙҙы билдәләгеҙ. Айҙарҙың исемлеген төҙөгөҙ.

8. Үҙегеҙҙең нәҫел шәжәрәһен тулыландырығыҙ. Үҙегеҙҙә йәки һеҙҙең тирә-яҡ ауылдарҙа үткәрелгән шәжәрә байрамын үткәреү тәртибе менән ныҡлап танышығыҙ.

## Синтаксис

*(ҡабатлау)*

1. Синтаксис нимә өйрәнә?

Я у а п: синтаксис һөйләмдә һүҙҙәрҙең бер-береһенә бәйләнеү юлдарын, һөйләм төҙөлөшөн өйрәнә.

2. Башҡорт телендә һүҙҙәр бер-береһенә ниндәй юлдар менән бәйләнә?

Я у а п: ярашыу (согласование), башҡарылыу (управление), йәнәшәлек (примыкание), һөйкәлеү (изафет).

**38-се күнегеү.** Аңлатмаларға ҡарап, бәйләнеш төрҙәрен билдәләгеҙ.

1. Эйәреүсе һүҙ эйәртеүсе һүҙгә килеш формаһында йә бәйләүестәр ярҙамында бәйләнә.
2. Эйә менән хәбәрҙең затта һәм һанда формалары тап килә.
3. Эйәреүсе һүҙ эйәртеүсе һүҙгә йәнәшә ҡуйыу, тезеү юлы менән бәйләнә.
4. Эйәреүсе һүҙ ҙә, эйәртеүсе һүҙ ҙә исемдән килә, эйәреүсе һүҙ йә төп килештә, йә эйәлек килештә була, ә эйәртеүсе һүҙ эйәлек заты ялғауын ала.

«Юрматы ырыуы шәжәрәһе»нең һуңғы биш абзацынан һәр бәйләнеш төрөнә дүртәр миҫал яҙып алығыҙ.

Ө л г ө: Ярашыу – *беҙ булдек, ...*

Башҡарылыу – *миңә сыҡты, ...*
Йәнәшәлек – *бер өлөш, ...*
Һөйкәлеү – *Эстәрле тамағы(нан), ...*

**39-сы күнегеү.** Шәжәрә тексынан йылға һәм тау атамаларын яҙып алығыҙ.

**40-сы күнегеү.** Түбәндәге һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Башҡорт телендәге һәм рус телендәге ярашыу (согласование) бәйләнешенең ниндәй айырмаһы бар?
2. Башҡорт телендәге ниндәй бәйләнеш төрө рус телендә юҡ?

Һүҙҙәрҙең бәйләнеше темаһына үҙегеҙ ҙә һорауҙар төҙөгөҙ.

## БАЙЫҠ СӘСӘНДЕҢ САЛАУАТ БАТЫРҒА ӘЙТКӘНЕ

Күп һыуҙар аҡҡан, күп йылдар үткән... Берҙән-бер көн Байыҡ, мәмерйәнән сығып, Ҡылыстауҙың башына менеп уйланып ултырған да, Юлайға бармаҡсы булып, юлға сыҡҡан. Китеп барғанда, һунарҙа йөрөгән Салауатҡа тап булған. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан. Салауат үҙен танытып, Байыҡтың кемлеген һорағас, Байыҡ былай тигән:

Һөйләһәң, һүҙ оҙайыр,
Тыңлаһаң, һинең тағы ла
Ҡолағың шәмдәй төҙәйер;
Кем булһа ла булайым,
Шуны әйтеп уҙайым:
Ил тигәндең кеме юҡ,
Бейе лә бар был илдең,
Ире лә бар был илдең,
Ике арала йөрөүсе
Теле лә бар был илдең.
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Наҙы ла бар был илдең,
Ҡыҙ алам тип туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең.
Күсе лә бар был илдең,
Көсө лә бар был илдең,
Күсен ситтәр талағас,
Үсе лә бар был илдең.
Илдең ире, тиһеңме,

Таланған күстән айырылған –
Шуларҙың бере, тиһеңме?

Туҡмалып та таҙ ҡалған,
Ҡаны ағып, һаҙ булған,
Яуызды күрһә, ҡарйыған*,
Йөрәгенән матҡыған**,
Асыуҙа ҡайнап сыныҡҡан,
Уралда аунап ереккән,
Ҡанһыраған арыҫландай
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартымын!
Аты юҡҡа – атымын,
Яуызға һаман ятымын.
Торор йорто юйылған,
Балалары һуйылған,
Батырҙары ҡыуылған
Ил сәсәне, ҡартымын.
Атҡа менеп сабырҙай
Юлдаш эҙләп юлыма,
Ҡаяла башаҡ ҡайрашыр
Ҡорҙаш эҙләп ҡонома
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартымын.
Айҙар тигән атым бар.
Ҡулымдан ҡорал һалмаҫҡа
Илгә биргән антым бар!

Салауат тигән исемең
Ишетеп беләм ҡолаҡтан,
Исемеңде ишетеү –
Белеү түгел йөрәктән.
Юлыма тап килгән һуң,
Әйтә торған һүҙем бар!
Уралда үҫкән күп булыр
Батыр юлын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡаяла башаҡ ҡайраған,
Егет булып бары ла
Һылыу ҡыҙын һайлаған –
Бары ла үткән, ҡалмаған.

---

* Ҡарйыған – нәфрәтләнгән.
** Матҡыған – ҡыҫып тотҡан.

Батырын тапҡан ил ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған.

Батырҙар сапҡан – ил тигән,
Хандар сапҡан – ҡол тигән,
Йөҙ егерме ауылды
Ҡыуҙай үртәп көйҙөргән,
Ил өҫтөнә яу ҡылған,
Ил таларға дау һалған,
Илде ҡанға йөҙҙөргән
Тәфтиләүҙә сапҡан – дан тигән.
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,
Ошаҡ тейәп тиктәҫкә,
Олатайың Шәғәле,
Уның улы Аҙналы –
Улар ҙа сапҡан – мал тигән.

Ҡол теләгән ҡол алған,
Мал теләгән мал алған.
Яу теләгән яу һалған –
Бары ла үткән, ҡалмаған.
Хан башын да ер йотҡан,
Тәфтиләүҙе лә ер упҡан,
Шәғәлене лә ҡуймаған –
Уның башына ла ил еткән.
Аҙналыны ла аҙаҡтан
Янаралы эт иткән –
Бары бөткән, ҡалмаған.
Ҡаяға тамған ҡан ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған,
Дошманға бысаҡ ҡайраған
Бөтмәй торған ил ҡалған.

Аҙналының балаһы
Инде Юлай ни көтә?
Яумы көтә, дан көтә?
Атаһы юлын эҙләйме?
Батырҙар юлын күҙләйме?
Өйөнә төбәп барайым,
Йөҙөнә күҙ һалайым,
Йөрәге нисек һуҡҡанын
Тел төбөнән беләйем.

«Батырҙар юлы ереккән,
Саң баҫкан, эҙләп тапманым,
Ҡылысым үтмәҫ, тутыҡкан,
Ҡаяла ҡайраҡ тапманым», –
Тиһә: «Бына – мин! – тиерем. –
Батыр юлын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған
Алдыңа килгән ҡарт, – тиерем. –
Ат өҫтөндә сапҡанда,
Алдыма дошман баҫҡанда,
Елем менән дошманды
Ҡолата килгән ҡарт!» – тиерем.

Байыҡтың һүҙен тыңлағас, Салауат барыһын да аңлаған, һәм ҡартты үҙе менән бергә алып ҡайтып киткән. Юлай менән өсәүһе һөйләшеп, һүҙҙәре үткәндәрҙе саҡырып, кәңәш-төңәш итеп, яу башларға булғандар.

Әммә һуғышта былар еңелгән. Башлыҡтары Пугачёв та, Салауат менән Юлай ҙа – барыһы ла ҡулға алынған. Әлеге Байыҡ ҡарт меҫкенгә тағы ла ҡасҡын булып йөрөргә генә ҡалған. Артынан эҙәрләү төшкәс, кемгә генә барһа ла, барыһы ла быны ҡурсыуҙан ҡурҡҡас, Байыҡ бөтөнләй күҙҙән юғалған. Берәү ҙә күрмәгән, белмәгән – ғәйеп булған.

1. Байыҡ сәсән тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Уның шәхесе, ҡасаныраҡ һәм нисек ғүмер итеүе, беҙгә килеп еткән әҫәрҙәре тураһында хәтерегеҙҙе яңыртығыҙ.
2. *Байыҡ мәмерйәнән килеп сыға,* тип әйтелә текста. Быны нисек аңлатырға? Һуғышта (ниндәй һуғышта?) еңелгәндән һуң, Байыҡ тағы ғәйеп була. Ҡайҙа? Ниңә? Фараз итеп, сәсәндәр яҙмышы тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ.
3. Тексты тасуири итеп, ҡобайыр стилендә уҡып өйрәнегеҙ. Һәр строфаға һалынған мәғәнәне аңлатығыҙ, шунан сығып, сәсәндең Салауатҡа әйтергә теләгән төп фекерен формалаштырығыҙ – ниндәй генә фажиғәләр, аяныслы ваҡиғалар, үлем-ҡырылыштар булһа ла, бөтмәй торған ил ҡалыуы, илдең, халыҡтың, мәңгелеге идеяһы тураһында әңгәмәләшегеҙ.
4. *Ер йотҡан; Ер упҡан; Башына еткән; Эт иткән; төбәп барыу, күҙ һалыу, тел төбө* һөйләм һәм һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен асыҡлағыҙ, уларҙы руссаға тәржемә итегеҙ.
5. Үҙегеҙгә оҡшаған бер өлөштө ятлап, ҡобайыр стилендә һөйләгеҙ.

## Һүҙ һәм һөйләм

Нимә ул һүҙ? Һәм нимә ул һөйләм? Сағыштырайыҡ.

1. 

*Вокзал.*

2. *Вокзал. Перрон. Йәшел вагондар.*

*(Ғ. Сәләм)*

1. Беренсе миҫалда **Вокзал** – һүҙ, ул фекер белдермәй, предметты атай ғына.

2. Икенсе миҫалда **Вокзал** – һөйләм. Уның интонацияһы бар, буласаҡ ваҡиғаларҙың урынын хәбәр итә.

Шулай итеп, һүҙ – предметты, уның эшен, билдәһен, иҫәбен һ. б. белдерә, атай ғына. Һөйләм фекер белдерә, уның интонацияһы бар. Һөйләм күпселек осраҡта бер нисә һүҙҙән тора.

**41-се күнегеү.** «Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне»нән икешәр хәбәр һөйләм, һорау һөйләм, өндәү һөйләм яҙып алығыҙ. Һөйләмдәрегеҙҙе һайлағанда, мәғәнәгә зыян килтермәйенсә, контекст буйынса һүҙҙәр өҫтәргә, ҡыҫҡартырға, үҙгәртергә мөмкин.

## Һөйләм киҫәктәре

Һөйләм киҫәктәре тураһында ниҙәр беләбеҙ?

Һөйләм киҫәктәре баш киҫәктәргә һәм эйәрсән киҫәктәргә бүленә.

Баш киҫәктәр – эйә менән хәбәр. Эйәрсән киҫәктәр – аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр.

Эйә һөйләмдәге эште башҡарыусыны белдерә.

Хәбәр эйәнең эшен, хәлен, уның кем, нимә икәнен белдерә.

Аныҡлаусы һөйләмдә предметты белдереүсе һүҙҙең билдәһен, эйәһен, һанын белдерә.

Тултырыусы һөйләмдәге эште белдереүсе һүҙҙең объектын белдерә.

Хәлдәр һөйләмдәге эштең ниндәй хәлдәрҙә (ваҡыт, урын, шарт, сәбәп һ. б.) булыуын белдерә.

Аныҡлаусы исемгә (йә исем урынында килгән бүтән һүҙгә) эйәрә.

Тултырыусы менән хәлдәр һөйләмдәге ҡылымға эйәрә.

**42-се күнегеү.** Һөйләм, уның киҫәктәре тураһында мөмкин тиклем күберәк һорауҙар төҙөгөҙ.

*Салауат ЮЛАЕВ*

## ЯУ

Заманалар булған элгәре,
Булған илдең батыр улдары.
Баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр,
Бөтә ғаләм белгән уларҙы.

Ғүмер буйы йөрөп яуҙарҙа,
Йыйған улар һанһыҙ дуҫтарҙы,
Еңгән улар бик күп батырҙарҙы,
Ҡырған улар һанһыҙ дошманды.

Ҡурҡмағандар сихырсынан,
Аждаһалай уҫал яуыздан,
Ен-пәрейҙең мәкер-хәйләһенән,
Йылан сәсә торған ағыуҙан.

Рухым күтәрелде минең дә,
Эйәрләнем мин дә атымды.
Дошман сафын тар-мар итергә
Изге яуға уҡтай атылдым.

Мин ҡыйраттым дошман сафтарын,
Өс йөҙ дошман һөжүм иттеләр.
Бик күптәре аяҡ аҫтында
Кәүҙәләрен тупраҡ иттеләр.

Яуыз дошман яуы эсенән
Атым алып сыҡты аҡланға.
Аҡландағы йылға ситендә
Ултырып тәсбих әйтеп Аллаға,
Изге яуға тағы барам мин,
Азатлыҡ һәм шөһрәт табам мин.

1. Салауат Юлаевтың шәхесе, ижады тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, фекер алышығыҙ.
2. С. Юлаев әҫәрҙәренең яҙмышы тураһында нимәләр беләһегеҙ? Ф. Нефёдов, Р. Игнатьев, Р. Ниғмәти, М. Иҙелбаевтарҙың текстологик эшмәкәрлектәре тураһында һөйләгеҙ.
3. *Баш етмәҫлек эштәр* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Шиғырҙың бер нисә строфаһын ятлағыҙ.
5. Салауат Юлаев образын тыуҙырған сәнғәт әҫәрҙәрен барлағыҙ. Әҫәрҙең исемдәрен, авторҙарын асыҡлағыҙ.

**6.** Салауат Юлаев тураһындағы әҙәби әҫәрҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, исемлеген төҙөгөҙ. Уларҙа Салауат образының бирелеше тураһында әңгәмәләшегеҙ.
**7.** Салауат Юлаевтың тормошон, ижадын өйрәнеүгә арналған ғилми хеҙмәттәрҙе асыҡлағыҙ.

## Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр

Йыйнаҡ һөйләм һәм таркау һөйләм тураһында ниҙәр беләбеҙ? Иҫкә төшөрәйек әле.

Баш киҫәктәрҙән, йәғни эйә менән хәбәрҙән генә, торған һөйләм **йыйнаҡ һөйләм** тип атала.

Бындай һөйләмдәр текстарҙа бик һирәк осрай. Мәҫәлән, «Яу» шиғырында бер йыйнаҡ һөйләм дә юҡ.

Эйә менән хәбәрҙән башҡа эйәрсән киҫәктәре лә булған һөйләм **таркау һөйләм** тип атала.

**43-сө күнегеү.** Йыйнаҡ һөйләмдәрҙән торған шиғырҙы уҡығыҙ.

### ТАҢ АШЫРЫУ*

Усаҡ яна. Ай ойоған.
Томан тарала.
Илай ҡурай. Күңел иңрәй.
Һағыш ярала.
Моң һыҙыла. Нурлана төн.
Ҡурайсы уйнай.
Донъя тынған. Шишмә шымған.
Көнләшә турғай.
Баш эйелгән. Ҡаш төйөлгән.
Тыңлаусы өнһөҙ.
Рух уяна. Ай нурлана.
Атылды йондоҙ.
Усаҡ һүнә. Яна офоҡ.
Йондоҙ йылтырай.
Ай ауыша. Ҡояш сыға.
Донъя яҡтыра.

*(Ә. Үтәбай)*

Ошо шиғыр һеҙҙең күҙ алдығыҙға ниндәй картиналар баҫтырҙы? Шул турала фекерҙәрегеҙҙе яҙығыҙ.

---

* Таң ашырыу – төнө буйы йоҡламайынса, таңды ҡаршылау.

*Мифтахетдин Аҡмулла*

## ШИҺАБЕТДИН МӘРЖӘНИ МӘРҪИӘҺЕ

*(өҙөктәр)*

Ҡараңғыла фонарҙы ҡабыҙған ул,
Ҡайнар һөткә һары майҙы тамыҙған ул.
Сәләмәтлек шишмәһенән юлдар асып,
Хәҡиҡәт йылғаларын ағыҙған ул.

Һүҙ ҡуҙғатыр ул, аҫыл ир, кәрәк ерҙән,
Хоҙайым үтә һиҙгер йөрәк биргән.
Инженерҙар һиҙмәгән ерҙән ҡаҙып
Сығарҙы татлы һыуҙы тәрән ерҙән.

Шишмәһе саф, сәйгә һәр кем һыу алғандай,
Хаҡлыҡҡа һыуһағандар ҡыуанғандай.
Уның һыйынан күпме бала һөткә туйып,
Башҡалар булып ҡалды һыу алғандай.

Үтә алмайҙар эҙенән баҫып уның,
Китә алмайҙар юлынан ашып уның.
Хаҡлыҡ нурын һүндерә алмай дошмандары,
Күрә алмайҙар ғаләмгә танылыуын.

Туғандар, һеҙгә үтенәм, сәләм яҙып,
Күҙең һал, Мәржәни – ул «Тимер ҡаҙыҡ».
Ул булмаһа, ҡибла тапмай аҙашырһың,
Ҡараңғыла йүн белмәй, юлдан яҙып.

Кил, зинһар, туғанҡайым, инсафҡа кил,
Ҡеүәтең күпме икән – самаңды бел!
Хәл етһә, уның эшен һеҙ ҙә эшләгеҙ,
Булмаһа, файҙа бирмәҫ таҡылдаҡ тел!

Белгәнгә ниңә эсең көйә һинең?
Эшен күр ғилем-һөнәр эйәһенең.
Һәр фәндең күренекле ирҙәре бар:
Эйәһе серен белә бейәһенең!..

Ул да бер ғалим икән һөйләй торған,
Ғалимдар мәжлесендә майҙан алған,
Теләгенә ҡаршыларҙы һөймәй торған,
Ҡурайы килешкәндә, көйләй торған.

Һәр бәндә күрһәтәлер үҙ байлығын,
Иллә-мәгәр байлыҡтың бар айырмаһы.
Ни бар-юғын белерһегеҙ, кибет асһа:
Һәр кемдә бар хәленә күрә үҙ сауҙаһы.

Иллә-мәгәр Мәржәниҙең эше башҡа,
Йылҡының толпарындай йондоҙ ҡашҡа.
Алыҫтан яҡты нуры балҡып тора,
Гәүһәрҙәй ҡундырылған алтын ташҡа.

Һырҡыуатлы кешеләргә бик килеште,
Булдылар аяҡ-ҡулы һыҙланмаҫтай.
Камил белеме ғаләмгә мәшһүр булды,
Булдылар яманларға алданмаҫтай.

Ҡайһы эше ул ғалимдың таң ҡалмаҫлыҡ?
Ҡайһы һүҙе ул камилдың күҙ һалмаҫлыҡ?
Ауырыуҙар сирҙәренә дауа тапты,
Һуҡырҙар күҙен асты ҡарманмаҫлыҡ.

Дошмандарҙың йөрәктәре һалмаҡланды,
Йөгө унының ауыр булды тарталмаҫтай.
Батырҙарҙың ҡылысынан ҡаяу сыҡты,
Ҡайтанан эшкә кереп ялғанмаҫтай.

Кеше камил була алмай, ҡайнап бешмәй,
Мөхәббәт туҫтағынан шәрбәт эсмәй.
Дошмандар ҡапҡандарын һалып ҡарай –
Турғайҙың тоҙағына ыласын төшмәй!

Һауала ул бер шоңҡар әйләнә осҡан,
Беҙ йөрөйбөҙ ҡарағоштай, эҙләп сысҡан.
Төлкөләр унда сыҙап тора алмайҙар,
Гүйә бер киң соҡорҙан йөрәге осҡан.

Беҙ һаттыҡ муллалыҡтың ҡоро атын,
Беҙҙән артыҡ яулыҡлы дөрөҫ ҡатын.
Күңелебеҙҙе бер һындырып иламабыҙ,
Уйланып ғәрәсәттең вәҡәфатын*.

* Вәҡәфат – туҡталыш, туҡтау урыны.

Оло бер ғалим сыҡһа, яманлайбыҙ,
Мәжлесте ғәйбәт менән тамамлайбыҙ.
Эшебеҙ йә мыҫҡыллау, йә кәмһетеү,
Үҙебеҙҙе һәр ғәйептән аманлайбыҙ.

Яҡшыны һүккән менән аты китмәҫ,
Яман һүҙҙең күңелдән заты китмәҫ;
Саф алтынды, бысраҡҡа буяу менән,
Бысраҡ китер, алтындың заты китмәҫ.

Ҡыйыш уҡ атҡан менән туры китмәҫ,
Күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ;
Ҡоторған эт һауаға ҡарап өргән менән,
Асманда торған яҡты айҙың нуры китмәҫ.

*Мифтахетдин Аҡмулла*

**ИНСАФЛЫҠ**

Арғымаҡ алыҫ йөрөмәҫ, арыған һайын,
Йыуан ағас кәмейҙер, ярған һайын.
Тамағынан ҡыҙғанһаң артҡан нарҙың,
Иңсәһе түбән төшөр барған һайын.

Дана булһаң, файҙа ҡыл үҙ башыңа,
Шунан һуң – ҡашыңдағы юлдашыңа.
Юлы бергә юлдашҡа ҡарамаһаң,
Кәрәк көндә юламаҫ ул ҡашыңа.

Онотма әҙәмлекте булғандан һуң, –
Балҡыйҙыр айҙың нуры тулғандан һуң.
Асыу бысаҡ булғанда, аҡыл – таяҡ,
Кәмейҙер шул таяғың юнғандан һуң.

Ҡунаҡ килһә өйөңә, хөрмәтләп ал,
Күңелен уның ҡалдырма – хаҡтан оял.
Бәлә китеп, ҡунаҡ менән рәхмәт килер –
Риза ҡылып, һәр кемдең рәхмәтен ал...

Һәр кемдән алҡыш алһаң, күп йәшәрһең,
Дәүләт бөтһә, әлбиттә, бер ташарһың.
Әҙәми зат ни ҡылһа ла – үҙе өсөн,
Яманлыҡ ҡылһаң, ахыры бер сәсәрһең.

Был донъяла була алмаҫ мәнһеҙ кеше:
Ни асыҡ, ни йәшерен булыр эше.

Берәүҙең йөгөн берәү тарта алмаҫ,
Үҙ язаһын үҙе тарта һәр бер кеше.

Бер күреүҙә белмәҫһең ирҙең серен,
Мәғрифәт юлында һал күҙҙең ҡырын.
Күпме өгөт әйтһәң дә наҙанға һин,
Фекерләп, ысынға алмаҫ меңдән берен.

Ҡай дана эстә серен һаҡлай бирер,
Ҡай әҙәм һөйгән эшен маҡтай бирер.
Наҙанға күпме нәсихәт ҡылһаң да,
Урлыҡ ҡылып, донъя гиҙеп атлай бирер.

Ҡулыңдағы булғаныңа ҡәнәғәт ҡыл,
Бил һындырып, байҙарҙан һорай күрмә.
Намыҫыңды ҡалдырма, малға ҡарап,
Шөкөрлөктө ташлама, барға ҡарап.
Тәүбә, тәүфиҡ билгеһе – ҡәнәғәтлек,
Ғәмәлһеҙ була күрмә, малға ҡарап.

1. Өҙөктәрҙе иғтибар менән, тасуири уҡығыҙ. Яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлап, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Аҡмулланың шәхесе, ижади эшмәкәрлеге тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, яңы сығанаҡтар менән танышығыҙ.
3. Шағир был әҫәрен мәрҫиә тип атаған. Ниндәй жанр ул – мәрҫиә? Уға хас үҙенсәлектәрҙе асыҡлағыҙ.
4. Әҫәр татар мәғрифәтсеһе Шиһабетдин Мәржәнигә арналған. Уҡытыусы ярҙамында ғилми, әҙәби сығанаҡтарҙы файҙаланып, уның шәхесе, эшмәкәрлеге тураһында белешмә төҙөгөҙ.
5. Шағир Мәржәниҙең образын нисек тасуирлай, уның шәхесенә ҡағылышлы ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланыла?
6. Аҡмулла Мәржәниҙе кемдәрҙән яҡларға тырыша?
7. «Әҙәбиәттә һәм сәнғәттә Аҡмулла образы» тигән темаға һөйләшеү үткәрегеҙ. Ғәзим Шафиҡовтың «Аҡмулла» повесын уҡып, күмәкләп анализ эшләгеҙ.
8. Һуңғы ике строфаны ятлағыҙ.
9. Аҡмуллаға оҡшатып шиғыр яҙып ҡарағыҙ.
10. Аҡмулла тураһында тулыраҡ белешмә төҙөп яҙығыҙ.

**44-се күнегеү.** Аҡмулланың әҫәрҙәренән бер составлы биш һөйләм яҙып алығыҙ. Төрҙәрен билдәләгеҙ.

Өлгө: *Тугандар, һеҙгә үтенәм, сәләм яҙып.* – Билдәле эйәле һөйләм.

## Бер составлы һөйләмдәр

Бер составлы һөйләмдәрҙең ниндәй төрҙәре бар?

1. **Билдәле эйәле һөйләм.** Эйәһе бирелмәгән, ләкин хәбәрҙең формаһына ҡарап эйәнең кем икәне асыҡ беленеп тора: *мин, һин, беҙ, һеҙ.*

2. **Билдәһеҙ эйәле һөйләм.** Эште кемдер башҡарған, ләкин һөйләүсе һәм тыңлаусыға уның кем булыуын белеүҙең бер кәрәге лә юҡ: *Юлға таш түшәгәндәр.*

3. **Дөйөм эйәле һөйләм.** Һөйләмдә хәбәр составы ғына бар, белдергән эш бөтә кешегә лә ҡағыла ала. Бындай һөйләмдәрҙең күпселеге мәҡәлдәргә ҡарай: *Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.*

4. **Эйәһеҙ һөйләм.** Ниндәйҙер эш бар, ләкин уның грамматик эйәһен билдәләп тә булмай, билдәләүҙең кәрәге лә юҡ: *Бөгөн ныҡ арытылған.*

5. **Атама һөйләм.** Бындай һөйләмдәр эйәнән йәки эйә составынан ғына тора: *Ҡышҡы төн.*

Текстың ҡайһы бер һөйләмдәрендә айырым киҫәктәр төшөп ҡалыуы ла мөмкин. Был бигерәк тә диалогтарҙа йыш күҙәтелә. Киҫәге төшөп ҡалған һөйләм **кәм һөйләм** була. Уларҙы бер составлы һөйләмдәр менән бутарға ярамай. Бер составлы һөйләм контексһыҙ ҙа аңлашыла, ә кәм һөйләм контексһыҙ кәрәкле информацияны бирә алмай.

**45-се күнегеү.** Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡ. Аралбаевтың атама һөйләмдәрҙән һәм йыйнаҡ һөйләмдәрҙән генә торған шиғыр юлдарын уҡығыҙ. Һәр өҙөккә йөкмәткеһенә ярашлы исем бирегеҙ.

1. Ул далалар иркенлеге! Ҡырҙарының киңлеге!
Еренең киңлеге менән бер дәүләткә тиңлеге.
Ул күк әрем. Юшан еҫе. Бал ташыған күстәре.
Убаларҙа аҡ ҡылғандар.

2. Ҡышҡы далала ҡояшлы буран.
Үҙе еүешкәк. Үҙе һепертмә.
Үҙе йәбешкәк. Үҙе борҡотма.
Үҙе ҡояшлы. Үҙе болотло.
Ҡояшлы буран, ҡояшлы буран.

3. Иҫ китмәле һиллек. Аҡ төн. Йылға.
Урман. Тауҙар. Урал ғәжәйеп!

**46-сы күнегеү.** Һөйләмдәрҙе һәм уларға бирелгән характеристикаларҙы тап килтерегеҙ.

| | |
|---|---|
| 1. Юлға иртәгә сығырға булдыҡ. | Атама һөйләм. |
| 2. Ни сәсһәң, шуны урырһың. | Кәм һөйләм. |
| 3. Һаман ҡайтманылар әле. | Өндәү һөйләм. |
| 4. Ҡояш сыҡты. | Билдәле эйәле һөйләм. |
| 5. 2016 йыл. Апрель. Ҡояшлы иртә. | Дөйөм эйәле һөйләм. |
| 6. Йәшәһен халыҡтар дуҫлығы! | Йыйнаҡ һөйләм. |

**Хәтер һандығына...**

Сәсәндең һүҙе уртаҡ, егәрленең ҡулы уртаҡ.

Ҡарама ағас йыш булмай, ҡарттар һүҙе буш булмай.

Яҡшы әкиәт ысынға яҡын була.

Мәҡәл әйткән – юл өйрәткән, әйтем әйткән – күңел йыуатҡан.

Аҡылың булһа – аҡылға эйәр, аҡылың булмаһа – мәҡәлгә эйәр.

Бер мәҡәл ике мәғәнә аңлатмай.

Аҡылды аҡсаға һатып алып булмай.

Ике йөҙлө дуҫтан дошман яҡшы.

Татлынан-татлы – яҡшы һүҙ, затлынан-затлы – яҡты йөҙ.

Ил йолаһыҙ булмаҫ.

# ИР-ЕГЕТКӘЙ МЕНӘН АТ БАШЫ

*Сәлмән Ярмуллин*

## БАШҠОРТ АТЫ

Борон башҡорт йәштән атҡа атланған һәм ярты ғүмерен ат өҫтөндә үткәргән. Ғөмүмән, башҡортто аттан айырыу уны аяҡһыҙ итеүгә тиң булған. Башҡортостан Рәсәйгә ҡушылғас, башҡорт ерҙәре күпләп колонизаторҙар ҡулына күсә башлай, көтөүлектәр кәмей. Шул арҡала йылҡы малын күпләп аҫрарға мөмкинлек ҡалмай башлай.

Шулай ҙа башҡорт аттарының ҡырҡа кәмеүе, хатта бөтөү сигенә барып етеүе һуғыштан һуңғы йылдарға тура килә. Ул йылдарҙа Башҡортостанда ситтән килтерелгән тоҡомло йөк һәм сабыш аттарын үрсетеүгә ҙур иғтибар бирелә, ә башҡорт аттары иғтибарҙан ситтә тороп ҡала. Бәхеткә күрә, 1959 йылда профессор Иван Саигиндың тырышлығы менән Баймаҡ районында башҡорт аттарының тәүге тоҡомсолоҡ фермаһы барлыҡҡа килә. 1960 йылдан бында башҡорт аттарын өйрәнеү буйынса фәнни тикшеренеүҙәр үткәрелә башлай. Был тырышлыҡтар бушҡа китмәй. Хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда 159 меңгә яҡын баш йылҡы малы булһа, шуларҙың 20,3 меңе – саф тоҡомло башҡорт аттары. Ә бит 1961 йылда саф башҡорт аттары ни бары 3,8 меңгә генә ҡалған булған.

Ошо тәжрибә хужалығында башҡорт аттарын бөтә яҡлап тикшереп ҡарайҙар һәм уларҙың ғәжәп һәләтле, иҫ киткес сыҙамлы икәнлеген билдәләйҙәр. Һөҙөмтәлә, Башҡортостанда махсус үрсетелгән башҡа тоҡомло йөк аттарынан бөтөн яҡлап та өҫтөн торған башҡорт атының даны бөтә донъяға тарала.

Мәҫәлән, йөк тартыу буйынса башҡорт атының башҡа тоҡомло йөк аттарынан күпкә көслөрәк икәнлеге асыҡлана. Быны белер өсөн, шундай тәжрибә эшләп ҡарайҙар. Бер

туғайҙа юл ситенә күпмелер ара һайын һигеҙәр кило йөк тултырылған тоҡтар һалып сығалар ҙа аттарҙы шул юл буйлап сыбыртҡыламай ғына үҙ яйына ҡыуалар һәм, алға барған һайын, юл ситендәге әлеге тоҡтарҙы арбаға һала баралар. Шул рәүешле аттар йөккә көсө етмәй туҡтағансы барырға тейеш була. Башҡорт аты 4 мең 112 килограмм һалғансы бара, ә башҡа аттар 2 мең 120 килограмда уҡ туҡтай.

Үрсем буйынса ла башҡорт аттары беренселекте бирмәй. Башҡа тоҡомло аттарҙың, мәҫәлән, һәр 100 бейәнән йылына ни бары 38 ҡолон алынһа, башҡорт бейәләренән 86 ҡолон алына. Һөт биреү буйынса ла башҡорт аттарына тиңләшеүсе юҡ. Йәй көнө ике ай ярым ваҡыт эсендә данлыҡлы буденновка тоҡомло бейәләр 318 килограмм һөт бирә, ә башҡорт тоҡомло бейәләр шул уҡ ваҡыт эсендә 580 килограмм һөт һауҙыра.

Башҡорт аты яҡут, төрөкмән, монгол аттары кеүек сыҙамлы, күндәм, тоғро булыуы менән дә айырылып тора. Оҙаҡ ваҡыт башҡорттар менән аралашып йәшәгән батша генералы Чернов, мәҫәлән, былай тип яҙып ҡалдырған: «Йыш ҡына башҡорттар үҙ ерҙәренән үткән төрлө дәрәжәле түрәләрҙең экипаждары янынан бер ниндәй ялһыҙ 6–7 сәғәт буйына 3–4 ҡыуғын ер эйәреп бара ала ине. Ә юлда осраған ҡаршылыҡтарҙы улар бар тип тә белмәйҙәр – йылғаларҙы ат өҫтөндә йөҙөп сығалар, ҡуйы урман араһына барып ингәндә, башҡорттоң ҙур булмаған аты, бөгөлөп-һығылып, ағастар араһынан шундай етеҙ йөрөй, ә текә тауға менеүҙе йәки тауҙан төшөүҙе башҡорт бөтөнләй һанға һуҡмай, башҡа кеше йәйәү үткән ерҙе башҡорт мотлаҡ һыбай үтәсәк. Уның аты ла бының өсөн бөтә талаптарға яуап бирә: еңел кәүҙәле, сыҙамлы, арзан һәм, иң мөһиме – ҡурҡыу белмәй».

Генерал Черновтың башҡорттарҙың 3–4 ҡыуғын ерҙе туҡтамай үтеүенә һоҡланыуы шуға бәйле: бер ҡыуғын ара элек, урынына ҡарап, 20–25 саҡрым булған һәм, шул араны үткәс, түрәнең экипажына егелгән аттарҙы ла, уны оҙатып йөрөүселәрҙекен дә алмаштырыр булғандар. Шуның өсөн дә һәр ҡыуғын һайын махсус аттар тотолған. Сыбар кейемле батша генералдарын ҡыҙыҡ күреп эйәреүсе башҡорттарға уларҙың аҙым һайын ат алмаштырыуы, күрәһең, тағы ла ҡыҙығыраҡ тойолғандыр.

1735–1756 йылдарҙа башҡорт восстаниеларын баҫтырыуҙа ҡатнашҡан генерал Румянцев та башҡорт атының йылғырлыҡ сифаттары тураһында былай тип яҙа: «...Улар артынан

ҡыуыу – ел артынан ҡыуыу менән бер. Беҙҙең аттарға улар артынан етеү ҡайҙа ул!»

Бөйөк Ватан һуғышында Башҡорт атлы дивизияһы сафында һуғышҡан Сабир Ҡадиров үҙенең иҫтәлектәр китабында: «Данлыҡлы дончак нәҫеленән булған аттар тиҙ арала аҡһай, сафтан сыға ине, ә беҙҙең башҡорт аттары түҙҙе, дағалары булмағандары ла бирешмәне. Һуңыраҡ шундай сыҙамлы аттарҙы Монголиянан да килтерҙеләр», – тип яҙҙы.

1964 йылдан башлап, башҡорт аттары халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә ҡатнаша һәм чемпион исемдәрен яулай башлай. Уларҙың һуңғыһы – Баймаҡ тәжрибә хужалығынан Йылғыр исемле ат. Ул чемпион исеменә 1989 йылда лайыҡ булды.

1. Текстан таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, һөйләмдәге мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар менән үҙегеҙ һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ, мәғәнәүи биҙәктәре үҙгәреү-үҙгәрмәүен билдәләгеҙ.
2. Текстан *аҙым һайын ат алмаштырыу* һүҙбәйләнешен табып, һөйләмде тулыһынса уҡып сығығыҙ. Был һүҙбәйләнеш һөйләмдә ниндәй мәғәнәлә ҡулланылған?
3. Һеҙҙең башҡорт атын күргәнегеҙ бармы? Күргәнегеҙ булмаһа, һеҙ уны нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Башҡорт атының бүтән тоҡом аттарынан айырмалы яҡтарын күрһәтегеҙ, һүрәтен төшөрөгөҙ.
4. Башҡорт аттары тураһында һеҙҙең нимәләр ишеткәнегеҙ, уҡығанығыҙ бар ине? Үҙегеҙ электән белгәндәрҙе һәм тексты файҙаланып, «Башҡорт аты» тигән темаға кескәй инша яҙығыҙ.
5. Башҡорт халыҡ ижадында ат образы нисек һынландырыла? Был турала һеҙ ниндәй әкиәттәр, эпостар, риүәйәттәр, йырҙар беләһегеҙ? Был әҫәрҙәрҙең исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.
6. Башҡорт телендә ат (йылҡы) исеменә бәйле мәҡәлдәр, әйтемдәр, фразеологик берәмектәр (ҡанатлы һүҙҙәр) бик күп. Һеҙ уларҙы беләһегеҙме? Иҫегеҙгә төшкәндәрен яҙып ҡуйығыҙ. Кемдеке күберәк булды?
7. Ат (йылҡы) малы тураһында бөтә белгәндәрегеҙҙән сығып, уның халыҡ тормошондағы әһәмиәтен билдәләгеҙ. Киләсәктә башҡорт атын һаҡлау, үрсетеү кәрәкме? Ни өсөн? Быының өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?

## Ҡушма һөйләм синтаксисы

Эйә менән хәбәр һөйләмдең грамматик нигеҙе тип атала. Ябай һөйләмдең грамматик нигеҙе берәү генә. Ә ҡайһы бер һөйләмдәр ике йәки бер нисә грамматик нигеҙле булалар. Бындай һөйләмдәр **ҡушма һөйләм** тип атала.

Ҡушма һөйләмдәрҙең ике төрө була:

1) теҙмә ҡушма һөйләмдәр;
2) эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.

Теҙмә ҡушма һөйләмдәр эсендәге ябай һөйләмдәр бер-береһенә мәғәнә берҙәмлеге менән генә бәйләнәләр. Уларҙың береһенән икенсеһенә һорау биреп булмай, улар бер-береһенә тиң булалар.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең береһе – баш һөйләм, икенсеһе эйәрсән һөйләм тип атала (русса: главное предложение, придаточное предложение). Эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә буйһона, эйәреп, уны асыҡлап килә. Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә ҡарата һорауы була. Эйәрсән һөйләмдең һорауҙары һөйләм киҫәктәренең һорауҙарына тап килә.

Миҫалдар:

1. *Тау араһында үҫкән башҡорт аты таштарҙа таймай, тояҡтары иң текә урындарҙа ла ергә йәбешә кеүек.* – Был теҙмә ҡушма һөйләм. Бында ике һөйләм араһындағы өтөр урынына нөктә ҡуйылһа ла, ҙур үҙгәреш булмаҫ ине.

2. *Башҡортостан Рәсәйгә ҡушылғас, башҡорт ерҙәре колонизаторҙар ҡулына күсә башлай.* – Был эйәртеүле ҡушма һөйләм. Эйәрсән һөйләм (тәүгеһе) ҡасан? һорауына яуап бирә.

**47-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Уға исем бирегеҙ.

Башҡорттар иң текә тауҙарҙан да ат өҫтөндә көйө төшә лә китәләр, һәм беҙ уларҙың был ғәҙәттәренә аптырап та, кинәнеп тә ҡарай инек. Был һыбайлылар тигеҙ ерҙән баралармы ни, тау текәлеге уларға һиҙелмәй ҙә. Башҡорт өсөн тауҙан йәйәү түгел, ә һыбай төшөү хатта ҡулайыраҡ та һымаҡ, сөнки тау араһында үҫкән башҡорт аты таштарҙа таймай. Уның тояҡтары иң текә урындарҙа ла ергә лыпыҡ йәбешә, һәм был аттар текә тау-таштар араһындағы тар ғына һуҡмаҡтар буйлап бер ниндәй ауырлыҡһыҙ төшә лә китәләр. *(XVIII быуат ғалимы Иван Лепёхиндың сәйәхәтнамәһе буйынса.)*

Текстағы ҡушма һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

**48-се күнегеү.** Бармаҡ исемдәрен уҡығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.

Баш бармаҡ, йоп бармаҡ, урта бармаҡ, сығанаҡ бармаҡ, сәтәкәй бармаҡ.

**49-сы күнегеү.** Тексты уҡығыҙ.

### Былар ҡыҙыҡлы

Башҡорт телендә «Уртаҡ эште эт тә еймәҫ» тигән мәҡәл бар. Бөтә һүҙе лә аңлайышлы, тик еймәҫ тигәне генә ҡолаҡҡа ят кеүек. Ысынлап та, бөгөн был һүҙ аңлашылмай, шуға ла уны өҫтәге мәҡәлдә «йыймаҫ» тигән һүҙ менән алмаштыралар ҙа ҡуялар. Ә «ей» һүҙе – «аша» тигән һүҙҙең элекке синонимы. Йәғни, «уртаҡ эште эт тә ашамаҫ» була. *Ей* һүҙенең тамыры *емеш, еләк, ем* һүҙҙәрендә һаҡланып ҡалған.

Текстағы ҡушма һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

*Талха Ғиниәтуллин*

### БУЯН

*(«Башҡорт аты» хикәйәһе буйынса)*

Фәйзулла Йомағужин – кәүҙәгә ҙур түгел, ләкин бик теремек, йылғыр, эшкә талымһыҙ егет. Иптәштәре уны эскерһеҙ, асыҡ күңелле булғаны, ә командирҙар аттарҙы яҡшы ҡарағаны өсөн яратты. Тиҙҙән Фәйзулланы ул хеҙмәт иткән ветеринар лазареттан бер поляк ауылында торған эскадронға* күсерҙеләр. Йомағужин эскадронға Ганс ҡушаматлы ат менән килеп төштө. Ләкин икенсе көн иртән взвод командирының ярҙамсыһы мыйыҡлы сержант Поддубный Фәйзулланы бик арыҡ ҡына бер тай янына алып килде лә:

– Һинең арғымағың бына ошо була, – тип егеткә щётка һәм ҡырғыс тотторҙо. – Ҡара уны, һәйбәтләп таҙарт!

Йомағужиндың асыуы килде. Ул ДВЛ-дан бынамын тигән ат менән килде, ә уға аяғында саҡ баҫып торған бер емтекте, үләкһәне бирәләр.

– Был бит минең ат түгел. Минеке Ганс, – тине Фәйзулла сержантҡа.

---

* Эскадрон – пехоталағы ротаға тиң кавалерия берәмеге. 4–5 взводтан тора.

Сержант уның яурынына ҡулын һалды ла:

– Бына нимә, Йомағужин! Һин Гансыңды онот. Беҙҙең лейтенант Ковшириндың аты юҡ, минеке лә арыҡ ҡына, ғөмүмән, хәҙер беҙҙә шәп аттар юҡ тиерлек, – тине.

Кәйефе төшкән Фәйзулла ябыҡ аттың арҡаһын ҡырғыслай башланы.

Йомағужин атына тағы бер ҡарап алды. Был йән эйәһенең бөтә һөйәктәре беленә, ҙур башын нәҙек муйыны саҡ күтәреп тора, эренле күҙҙәренән йәш аға. Фәйзулла хатта уны әҙерәк йәлләп тә ҡуйҙы.

Ә ат аҙбарының теге башында бағанаға тимер сынйыр менән йөнтәҫ бер атты бәйләп ҡуйғандар. Ул артыҡ бейек түгел, ләкин аяҡтары ныҡ, күкрәк мускулдары уйнап тора, муйыны йыуан, ялдары алабуға һырты һымаҡ тырпайған. Бындай аттар ғәжәп түҙемле була. Йомағужинға бындай аттар яҡшы таныш. Шул башҡорт атын бирһәләр икән уға!

Сержант Поддубный оло кәүҙәле бер һалдатҡа:

– Гусев, Буянды таҙарт! – тип ҡушты.

Сержант киткәс, Гусев Буянды (башҡорт атына шундай ҡушамат биргәндәр икән) әрләй башланы.

– Дөмөкмәй ҙә, исмаһам, ошо ен! – тине ул. – Ат түгел, ә аждаһа. Яҡын барырлыҡ түгел, тешләшә лә тибешә. Ҡайҙан тапҡандар был яуызды?

Гусев, ҡурҡа-ҡурҡа ғына теге ялбыр атҡа табан атланы. Ат шунда уҡ ҡолаҡтарын артҡа һалып йоморайҙы, һорғолт күҙҙәрен аҡайтты. Гусевтың уның арҡаһын щёткаһы менән һыпырыуы булды, Буян, үҙен бәйләгән бағананы дер һелкетеп, һарымһаҡ һымаҡ ап-аҡ тештәре менән һалдаттың яурынынан эләктереп тә алды.

– За-раза! – Гусев аттың ҡорһағына типте лә ситкә һикерҙе.

– Ниңә атҡа тибәһең? – тип ҡысҡырҙы Йомағужин һәм сержант Поддубный янына килде:

– Иптәш сержант, бирегеҙ миңә шул Буянды.

– Мин бер ат бирҙем бит һиңә, таҙарт шуны! Ә Буян – өйрәтелмәгән ат ул, – тине сержант. – Аптыратты инде ул беҙҙе. Нисек ҡотолорға белеп булмай. Икенсе берәй атҡа алмаштырырға уйлайбыҙ әле. Аңланыңмы? Ну, круг-гом!

Йомағужин, башын эйеп кенә үҙенең аламаһы яғына атланы.

Иртәгәһенә һалдаттар Буянды сынйырҙан ысҡындырҙылар ҙа йүгән кейҙерергә маташа башланылар. Йәш ат башын

юғары күтәреп артҡа сигенде, ҡапыл быларҙан ысҡынып, кәртә аша һикерҙе лә сабып сығып китте.

– Ҡасһын әйҙә! Бер кәрәге лә юҡ! – тине сержант. Бер аҙҙан үҙе Йомағужинға ҡапыл ғына: – Бар, тота алһаң, үҙеңдә булыр! – тип ҡуйҙы.

* * *

Буяндың бер ҡасан да хужаһы булманы. Ул яҙ көнө тау йәйләүендә тыуҙы. Инәһе, ялбыр бейә, уны шунда уҡ яларға тотондо. Бер аҙҙан ҡолонҡай хәлһеҙ аяҡтарына баҫты ла имергә эҙләй башланы.

Көньяҡ Уралдың йәшел итәктәрендә бал тәме килеп торған үлән, саф, һалҡын шишмә һыуы тәмен таныны.

Уларҙың өйөрө йыл әйләнәһенә ошо Урал тауҙарында йөрөй. Ярым ҡырағайға әйләнеп бөткән аттар үҙҙәрен үҙҙәре аҫрай. Йәй тәндәренә май үрҙерәләр, ә ҡыш тибендә йөрөйҙәр.

Бына уны тотоп, өйөрөнән айырып, ниндәйҙер ят аттар менән ҡараңғы, тығыҙ вагонға индереп яптылар ҙа ҡайҙалыр алып киттеләр.

Кешегә өйрәнмәгән Буян уларҙың һәр эшенән, һәр ҡағылышынан өркә, тартыша. Уны әрләйҙәр, ҡурҡыталар, ҡысҡыралар, туҡмайҙар. Тик Буян кешеләргә унан нимә кәрәк икәнлеген һис кенә лә аңлай алмай. Үҙен ыҙалатҡан, яфалаған ошо кешеләрҙе күрә алмай башланы. Тотҡондан ҡотолорға ла тағы тыуған Урал итәктәрен бер итеп йөрөргә ине…

Һәм бына ул хәҙер ысҡынды, хәҙер ул ирекТә!

Тәүҙә малҡай бик оҙаҡ сапты. Уның аңлауынса, тауҙары алыҫта түгел, тыуған өйөрө лә ошо тирәлә генә йөрөргә тейеш кеүек… Бына туҡтаны… Башын юғары күтәреп, көҙгө моңһоу яланға, япраҡтары һарғайған ағастарға ҡараны… Һәм һағышлы, рәнйеүле тауышы менән бар көсөнә кешнәп ебәрҙе. Тик уға бер ниндәй ҙә яуап ҡына булманы.

Йомағужин ҡасҡынды кискә генә эҙләп тапты. Ас Буян бер арба янында ундағы бесәнде ашап тора ине. Йомағужин, аттың ялына ҡапыл йәбешеп, өҫтөнә һикереп менеп атланды, сабып барған килеш йүгәнен кейҙерҙе. Фәйзулла, теҙгендәрен ныҡ тартып, атты ямғырҙан һуң батҡаҡҡа әйләнгән, һөрөлгән баҫыуға борҙо. Өҫтөнә бер ҡасан бер кемде лә ултыртмаған Буян аҡ күбеккә батҡансы сапты ла сапты…

Хәҙер Буян Фәйзулланыҡы. Ашатыу, таҙартыу ҙа уның эше. Аты янына егет һәр ваҡыт үҙенә бирелгән шәкәре, икмәге

менән килә. Буян, уны ҡолаҡтарын япҡырып, күҙҙәрен аҡайтып ҡаршылай. Шулай ҙа һуҙылған икмәкте лә, шәкәрҙе лә ашай. Ләкин, башҡа аттар кеүек, томшоғо менән төртөп, ирендәре менән эләктереп алмай, ә эт һымаҡ ҡапыл ҡабып ала. Абайламайыраҡ торһаң, бармаҡтарыңды тешләп өҙмәç, тимә.

Шунан Йомағужин атты бағанаға бәйләй ҙә таҙарта башлай.

– Башланды, – тип көлә Гусев. – Ҡарап торайыҡ әле, кем кемде еңер икән: башҡорт аттымы, ат башҡорттомо.

Арҡаһына щётка тейеү менән, Буян тертләп китә, күгәүен ҡыуғандағы һымаҡ арт тояҡтары менән тибенә. Бағана дер һелкенә, тирә-яғы тапалып бөтә.

Был эштән һуң Йомағужин Буянды һуғарырға алып китә, унан сержант тараҡан һолоно ашата.

Оҙаҡламай Буян хужаһын таный башланы. Был бәләкәй, тыныс ҡына кеше хәҙер уға кәрәк булып китте: һуғара, ашата, ҡысҡырмай, башына һуҡмай, йылы устарынан икмәк, һоло еçе килеп тора. Кеçәһендә һәр саҡ бик тәмле шәкәр, икмәк була.

Йомағужиндың Буянды тиҙерәк өйрәткеһе, уны менеп йөрөгөһө килә. Ләкин Буян һаман эйәрләтмәй. Арҡаһына эйәр һалғанда, ул түҙә, әммә айылын тарттыра башланыңмы, ята ла аунарға тотона.

Шулай байтаҡ мәшәҡәтләнгәндән һуң, Йомағужин атын эйәрләй алды. Һыбай менеп, Буянды ауылдан ситкә алып сыҡты ла оҙаҡ ҡына ҡыуҙы. Шунан плацҡа килтереп төрлө кәртәләр аша һикертеп маташты. Буян канау аша ырғый, тик кәртәгә етһә, һикерергә ҡурҡа, тегеләй-былай борғолана.

* * *

– Беренсе взвод, аттарға!

Приказға ярашлы, беренсе взвод шоссе буйлап шым ғына алға үтергә, немецтарға иçен йыйырға ирек бирмәйенсә, аңғармаçтан һөжүм итергә тейеш.

Кавалеристар аттарын атлатып ҡына баралар. Бына алда ниндәйҙер йорттоң ҡыйығы күренде. Бер аҙ тыңлап торҙолар.

– Аттарҙан төшөргә! Һөжүмгә әҙерләнергә! – Лейтенант Ковширин шым ғына команда бирҙе. Һуғышсылар аттарҙан төштөләр, уларҙы коноводтарға тапшырҙылар. Үҙҙәре юл буйлап алға йүнәлделәр. Теге өйгә яҡынлашҡас, аҙымдарын яйлаттылар. Ниндәй яңғыҙ йорт икән был? Кешеһе бармы, юҡмы?

Ҡапыл теге йорттоң артынан ата башланылар. Һалдаттар ергә ятты. Ләкин коноводтар аттарҙы ышыҡҡа алып китеп өлгөрә алманылар. Пулемёт былар яғына ла пуляларын һипте. Бер нисә ат һәм бер коновод шунда уҡ шоссеға тәгәрәнеләр. Ҡалған аттар өркөшөп, теҙгендәренә баҫа-баҫа, һалдаттар артынан ут сәсеп торған яҡҡа саптылар.

– Аттар ысҡынған! – тип ҡысҡырҙы кемдер.

– Аттарҙы тотоғоҙ! – тип команда бирҙе сержант Поддубный.

Бер нисә һалдат аттарына ҡаршы йүгерҙе. Йомағужин үҙенең Буяныының ергә һөйрәлеп килгән теҙгенен эләктерҙе лә атын юлдан ситкә тартты. Ә башҡа аттар артабан сабып үттеләр һәм пулемет уты аҫтына барып инделәр. Һәм ҡапыл бөтә тирә-яҡ тып-тын ғына булып ҡалды.

– Аттарҙы үлтерҙеләр! – тине Поддубный.

Лейтенант Ковширин Фәйзулла яғына килде.

– Әйҙә, Йомағужин, эскадронға сап, командирға әйт, юлда немецтар аттарҙы үлтерҙеләр. Взвод һуғыш алып бара... Аңлашылдымы?

– Аңлашылды!

Йомағужин айылды тартыбыраҡ ҡуйҙы, эйәренә һикереп менде лә, шоссеға сығып, атын ҡыуҙы. Пулемёт һаман тыҡылдай. Йомағужин арҡаһы менән үлемде тойған һымаҡ.

Ҡапыл эргәлә генә ниҙер шартланы, һәм ниндәйҙер көс Йомағужинды эйәрҙән алып ташланы. Йығылыуҙан бөтә тәне шаңҡыны, күҙ алдында йәшкелт уттар бейене.

Йомағужин, тороп баҫып, бер-ике аҙым атланы. Арҡаһында карабины юҡ. Йығылған урынына кире барып, ҡоралын эҙләргә тотондо. Тапты. Тик карабиндың көбәге ҡайыштың бер осонда, сырпаҡланған приклад икенсе осонда. Йығылғанда һынғандыр, тип уйлағайны, ләкин шартлаусы пуля тейгән булып сыҡты. Бына ниндәй көс уны эйәрҙән бәреп төшөргән икән, бына нимә уны үлемдән һаҡлап ҡалған икән! Тәүҙә ҡыҙыулыҡ менән һиҙмәгәйне, пуляның бер ярсығы уның янбашын яралаған булған.

Ә уға ашығырға кәрәк. Взвод ярҙам көтә, ләкин яралы көйө ул эскадронға тиҙ генә барып етә алмаясаҡ, ә Буян күренмәй.

Оло өйрәтелгән ат, һыбайлыһы йығылғас та, туҡтай. Ә Буян – йәш, ҡыҙыу, өркәк...

Хәҙер Йомағужинға бер кем дә ярҙам итмәйәсәк, уға ҡыйын, әллә нисек булып китте, тирә-яғына ҡараны. Һаман да ҡараңғы әле.

Ҡапыл ул атының шәүләһен күреп ҡалды. Буян!.. Әлеге мәлдә Фәйзулла өсөн ошо ярым ҡырағай башҡорт атынан да ҡәҙерлерәк йән эйәһе донъяла юҡ ине!

Буян аҡрын ғына килде лә, үҙенең йылы томшоғон хужаһының битенә төрттө. Йомағужин теҙгенде тотоп алды, аяғына баҫты һәм менергә уйланы. Ләкин яраланған аяғы, һыныҡ карабин, ауыр кейем һикереп менеп ултырырға мөмкинлек бирмәне. Ул карабинды эйәргә бәйләне, һау аяғы менән өҙәңгегә баҫты һәм яраланған уң аяғын көс-хәл менән арҡыры ташлай алды. Хәҙер алға, тик алға ғына! Фәйзулланың иҫе юғала-юғала яҙа. Бына алда өйҙәр күренде, кешеләр тауышы ишетелде.

– Туҡта! Кем килә?

– Был мин, Йомағужин! – тип ыңғырашты Фәйзулла.

Кемдер юлға йүгереп сыҡты, ярһыған Буяндың теҙгененән тотто.

– Тегендә, шоссела, немецтар... Аттарҙы ҡырҙылар... – тине Йомағужин. – Мин яраландым.

Медсанбатҡа алып барғанда, Йомағужин үҙен тылдағы госпиталгә оҙатырҙар, Буянды ҡабат бер ҡасан да күрә алмам, тип борсолғайны. Ләкин яраһы уның бик ауыр булмай сыҡты, пуля ярсығы һөйәккә теймәгән, ә итенән уны соҡоп алдылар. Бер аҙнанан инде ял итеп алғас, шат кәйефле Фәйзулла эскадронға үҙенең Буяны янына ҡайтып төштө.

1. Хикәйәне иғтибар менән уҡып сығығыҙ, йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән тасуири итеп һөйләү күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Яңы һүҙҙәрҙең, хәрби терминдарҙың, ат тәрбиәләүгә ҡағылышлы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, телмәрегеҙҙә уларҙы ҡулланып һөйләргә өйрәнегеҙ.
3. Кешеләрҙең аттарға мөнәсәбәте тураһында һөйләгеҙ, хикәйәләге эпизодтарға таянығыҙ, үҙегеҙ белгәндәрҙе өҫтәгеҙ.
4. Фәйзулла образына характеристика бирегеҙ. Уны *ат йәнле кеше* тип буламы?
5. «Башҡорт аты» тигән белешмәне лә файҙаланып, Буянға характеристика бирегеҙ.

**50-се күнегеү.** Текстан алынған теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең өлөштәре араһындағы мәғәнәүи бәйләнештәрҙе билдәләгеҙ, һөйләмдәрҙең грамматик нигеҙен табығыҙ.

1. Фәйзулла эскадронға бынамын тигән ат менеп килде, ә уға аяғында саҡ баҫып торған бер емтекте, үләкһәне бирәләр.

2. – Лейтенант Ковшириндың аты юҡ, минеке лә арыҡ ҡына, ғөмүмән, хәҙер беҙҙә шәп аттар юҡ тиерлек. 3. Был йән эйәһенең бөтә һөйәктәре беленә, ҙур башын нәҙек муйыны саҡ күтәреп тора, эренле күҙҙәренән йәш аға. 4. Ул (ат) артыҡ бейек түгел, ләкин аяҡтары ныҡ, күкрәк мускулдары уйнап тора, муйыны йыуан, ялдары алабуға һырты һымаҡ тырпайған. 5. Буян һағышлы, рәнйеүле тауышы менән бар көсөнә кешнәп ебәрҙе, тик уға бер ниндәй ҙә яуап булманы. 6. Ҡапыл эргәлә генә ниҙер шартланы, һәм ниндәйҙер көс Йомағужинды эйәрҙән алып ташланы. 7. Йығылыуҙан бөтә тәне шаңҡыны, күҙ алдында йәшкелт уттар күренде. 8. Бына ниндәй көс уны эйәрҙән бәреп төшөргән икән, бына нимә уны үлемдән һаҡлап ҡалған икән! 9. Взвод ярҙам көтә, ләкин яралы көйө ул эскадронға тиҙ генә барып етә алмаясаҡ, ә Буян күренмәй. 10. Бына алда өйҙәр күренде, кешеләр тауышы ишетелде.

**51-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙең икенсе өлөшө – уң яҡтағы бағанала. Өлөштәрҙе тура килтереп, мәҡәлдәрҙе яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| Ат тешенән билдәле, | ҡамытты атҡа үлсәп алалар. |
| Андыҙлы ерҙә ат үлмәҫ, | ҡоштоң барыһы ла шоңҡар булмаҫ. |
| Асыҡҡан ат ҡулыңды ялай, | әҙәм һөйләшеп танышыр. |
| Атым юҡ аранда (аҙбарҙа), | егет даны үҙ ҡулында. |
| Ат кешнәшеп танышыр, | ятраҡкан ат күҙеңә ҡарай. |
| Ат даны егет ҡулында, | ҡайғым юҡ буранда. |
| Аттың барыһы ла толпар булмаҫ, | атлы ерҙә ир үлмәҫ. |
| Атты ҡамытҡа үлсәп алмайҙар, | егет эшенән билдәле. |

Бер мәҡәлдең йөкмәткеһенә тура килгән хикәйә төҙөгөҙ.

*Рамазан Өмөтбаев*

## ҒИЛМИШӘРИФ

*(«Атлы башҡорт» повесы буйынса)*

Ғилмишәриф госпиталдә байтаҡ ятты. Аяғына һалынған гипсты ҡасан алырҙар, тип зарығып көттө. Ул төндәр буйы Әүхәҙие менән һаташып сыҡты. Йә, атына атланып, тыуған яҡтарында йөрөнө, йә, ҡылыс һелтәп, атакаға ташланды.

Ниндәй генә төш күрһә лә, үҙен һәр саҡ Әүхәҙи өҫтөндә күрҙе. Әүхәҙие лә бит, яраланып полктың ветлечебницаһында тороп ҡалғайны.

Таяҡтарын ташлап, үҙ аяҡтарына баҫҡас та түҙмәне Ғилмишәриф, бер төндө, таныш сестра аша кейемдәрен һоратып алды ла тәҙрәнән сығып ҡасты. Ул фронтҡа ҡасты. Өс аҙнанан һуң, күп ыҙалар сигеп, әллә нисә кордондар аша үтеп, йонсоуҙан үлер сиккә етеп, үҙенең кавалерия полкын эҙләп тапты.

Был 1943 йылдың апрель айында булды. Шунан һуң Ғилмишәриф менән Әүхәҙи Днепрҙы, бер аҙҙан Буг йылғаһын кистеләр. Польшаның Калиш ҡалаһы өсөн барған һуғыштарҙа Әүхәҙиҙең муйынын дошман пуляһы тишеп үтте. Уны күсмә ветлазаретҡа тапшырып, Ғилмишәриф атһыҙ ҡалған кавалеристарҙан төҙөлгән йәйәүле эскадронда йөрөнө. Әүхәҙиҙән күҙ яҙҙырманы, һораша-белешә йөрөнө. Яраһы уңала башлау менән, ветлазарет начальнигының ай-вайына ҡарамай, эскадронға алып ҡайтты. Был ике ауылдаш, утты-һыуҙы кисеп, 1945 йылдың апрель аҙағында Берлиндан көньяҡ-көнбайыштараҡ ятҡан Бранденбург ҡалаһын алыуҙа ҡатнашты. Был улар өсөн һуңғы алыш, оҙон һуғыш юлының һуңғы туҡталышы булды…

Демобилизация көнө килеп еткәс, Ғилмишәриф ни эшләргә лә белмәне: ҡайтыу, әлбиттә, – сикһеҙ ҡыуаныс, әммә Әүхәҙиҙе, бәләкәй сағынан белгән ауылдашын, күпме үлемесле һуғыш юлын бергә үткән йән дуҫын, нисек ташлап китмәк кәрәк! Ул иптәштәре менән кәңәшләшергә булды, тик улар быны көлкөгә һабыштырҙы:

– Һин нимә, Геннадий (рустар уны шулай тип атайҙар ине), әҙерәк яңылыша башланыңмы әллә?

– Аҡылың булһа, лучше берәй мотоцикл алып ҡайт. Ана, ҡасҡан фашистарҙың мотоциклдары өйөлөп ултыра.

– Авдей (Әүхәҙиҙе әйтәләр), әлбиттә – яҡшы ат. Ләкин ул, өйгә ҡайтып етә алмай, астан үләсәк. Бала-сағаңа кейем-һалым, бисәңә күстәнәс алып ҡайт лучше. Уларҙың өҫтө-башы туҙғандыр бит…

Бер йәшерәге хатта:

– Һин бисәлеккә берәй йәш немка алып ҡайт, ауылдаштарың таң ҡалыр, исмаһам…

Икенсе көндө Ғилмишәриф Яуымбаев штабҡа полк командирына китте. Уны яҡшы белгән командир йылы ҡабул

итте. Ҙур тулҡынланыу менән, йомошон һөйләп биргән Ғилмишәрифте эргәһенә ултыртты:

– Тыңла, иптәш Яуымбаев. Бына мин кавалерияла егерме биш йыл хеҙмәт иттем. Төрлөһөн күрергә тура килде. Ҡыҙылармеецтарҙың бисә алып ҡайтҡандарын күргән бар. Демобилизацияланған егеттәрҙең йәшереп шашка алып ҡайтып киткәндәре лә булғыланы. Әммә менеп йөрөгән атын биреп ҡайтарыуҙы һорағанды беренсе тапҡыр күрәм...

Полковник түҙмәне, тороп ишекле-түрле йөрөй башланы. Ғилмишәриф тә тороп баҫты.

– Иптәш полковник! Минең менән өс йыл бергә һуғышып, ике тапҡыр яраланған ат – минең ауылдашым бит. Уны яҡты донъяға күҙен асҡан көнөнән беләм. Ҙурайғас, менеп йөрөнөм. Ауылыбыҙҙың өйөр айғыры булды ул. Шуны нисек сит кешеләр ҡулына ҡалдырып китәйем. Ул бында барыбер бик тиҙ һәләк буласаҡ, сөнки ул минән башҡа бер кемде лә яҡын ебәрмәй...

Полковник икеләнә төштө. Ат йәнле кеше ине ул.

– Да-да-а, – тип һуҙҙы ул, урынына ултырып. – Беләм. Әүхәҙиеңде лә яҡшы беләм... Полктың данлы һуғышсыһы булдың. Һин, моғайын, хаҡлыһыңдыр. Яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алып, һиңә рөхсәт итермен. Беҙҙекеләр әйтмешләй, семь бед – один ответ. Кәрәкле күрһәтмәләр бирермен.

Ғилмишәриф полковникты ҡосаҡлап алырҙай булды. Күҙенән шатлыҡ осҡондары сәселде. Полковник быны үҙе ҡосаҡлап алды:

– Хуш, ысын кавалерист! Намыҫлы хеҙмәт иттең, батыр һуғыштың. Рәхмәт! Ярар, бар, юлға әҙерлән. – Ғилмишәрифтең ҡулын ҡыҫып, ишеккә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Был тиклемен көтмәгән һалдаттың күңеле йомшарып, күҙенә йәш килде.

Яуымбаевтың үҙ аты менән ҡайтып китәсәген эскадронда ишеткәйнеләр инде. Уны күмәкләп юлға әҙерләй башланылар. Уны баштан-аяҡ өр-яңынан кейендерҙеләр. Башына яңы кубанка, аяғына шығырлап торған итек бирҙеләр. Даны бөтә дивизияға таралған тегенсе старшина Гершкович, үҙе үлсәүҙәрен алып, бер көн эсендә яңы мундир тегеп бирҙе.

Складтан, көндәлеккә кейеп йөрөү өсөн дә, өр-яңы обмундирование бирҙеләр. Атын, Әүхәҙиҙе лә, онотманылар: һыртына нағышлап ҡыҙыл йондоҙ төшөрөлгән серге яптылар, өҫтөнә шулай уҡ өр-яңы казак эйәре һалдылар, йүгәнен алыштырҙылар. Ветврач яраларын тикшереп сыҡты, дарыу

тулы аптечка бирҙе. Аттың хатта дағаларын да алмаштырҙылар. Эскадрон командиры, полк командиры исеменән тип, йөҙөнә «С этой боевой шашкой отважный кавалерист Яуымбаев с боями прошел от Сталинграда до Бранденбурга» тип яҙылған ҡылыс тапшырҙы.

Иптәштәренең Ғилмишәрифте атҡа атланған килеш күргеләре килде. Фотоға төштөләр.

– Ну, малай, килештерәһең! – тип күңелле көлөштө һалдаттар. – Ат өҫтөндә ултырыуыңды ҡара!

– Генерал, да и только!

– Ауыл бисәләренең йөрәген яндыраһың инде!..

Кисен Ғилмишәриф өйөнә хат яҙып һалды:

«Ҡәҙерле йәмәғәтем Рәйхана! Оҙаҡламай ҡайтып етермен. Бер үҙем генә түгел, өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, фронттың әсеһен-сөсөһөн бергә татыған йән дуҫым менән. Хәҙергә уның кем икәнлеген әйтмәйем, осрашҡас танышырһығыҙ. Һеҙҙе һағынып, ирең Ғилмишәриф».

* * *

Командирҙың хәстәрлеге менән Ғилмишәрифте тыуған яҡҡа ҡайтыусы күрше кавалерист полкы менән бер эшелонға ултыртып ебәрҙеләр. Егерме көн тигәндә уны Ҡарталы станцияһында төшөрөп ҡалдырҙылар. Артабан тағы ауылдарға һуғыла-һуғыла, аҙна тигәндә тыуған ауылы Яланға килеп етте. Ауылы тапҡырында Ҡыҙыл йылғаһының текә ярында туҡтап, тыуған ауылының тирә-яғындағы таныш яландарҙы, күк Ирәндек һырттарын, Йәнгүҙәй, Күсем таштарын күҙҙән үткәрҙе. Күңеле тулып, һуғыш йылдарында йыш башҡарған яратҡан йырын һуҙып ебәрҙе:

*Алыҫтарҙан, ай, күренә*
*Ирәндеккәй тауҙың аҡ ташы.*
*Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы...*

Ҡапыл йылға аръяғындағы тигеҙлектә утлап йөрөгән аттар күренде. Арып-талып килгән Әүхәҙи, уларҙы күреп, бөтә кәүҙәһе менән һелкенде лә, морон тишектәрен тырпайтып, сыңратып кешнәп ебәрҙе. Был уның сит илдәрҙән алып ҡайтҡан сәләме ине. Йылға аръяғында ла кешнәү ишетелде. Инде Әүхәҙиҙе тотоп торорлоҡ түгел ине. Ғилмишәриф уны

йылғаға табан борҙо. «Эсһен әле шуның һыуын туйғансы. Днепр, Висла, Одер йылғаларында һуғарҙым, әммә үҙебеҙҙең Ҡыҙылдыҡынан да татлыраҡ, шифалыраҡ һыу юҡтыр», – тип һөйләнде ул үҙ алдына.

Шул саҡ ул йылға аръяғында бер ҡыҙ баланы күреп ҡалды. Тулы биҙрәләрен ергә ҡуйған да Ғилмишәрифкә ҡарап ҡатҡан. Ҡарап торҙо-торҙо ла:

– Атаҡ-атаҡ, Ғилмишәриф ағай, һинме ул? – тине, аптырап.

Ғилмишәриф ҡыҙҙы таныманы, шулай ҙа:

– Өҫтөнә баҫтың! – тип һөрәнләне йылға аша. Ҡыҙ көйәнтәһен ырғытты ла тыҡрыҡ буйлап ауылға йүгерҙе. Ихатаға етер-етмәҫтән:

– Рәйхана еңгә! Һөйөнсө! Ғилмишәриф ағайым ҡайтып килә! – тип ҡысҡырҙы. Рәйхана албырғап аш-һыу әҙерләп йөрөгән еренән йүгереп урамға сыҡты:

– Ҡайҙа? Бер үҙеме? Янында бисә-фәлән юҡмы?

– Ниндәй бисә? Һыбай килә ята!

Уғаса булмай, бер көтөү бала-саға эйәртеп, һылтыҡлаған атына атланып, өй алдына Ғилмишәриф үҙе килеп туҡтаны. Артынса уҡ ауылдаштары йыйылып китте, хәл һорашалар, ҡосаҡлашалар, Әүхәҙиҙе лә тикшерәләр.

– Ҡарап-ҡарап торам да, ҡустым, менеп ҡайтҡан атың беҙҙең яҡтың малына оҡшай түгелме? – тип һораны бер ҡарт.

– Бәй, Насирйән ағай, үҙебеҙҙең өйөр айғыры. Танымайһыңмы ни? Һуғыш ғәрәсәтен бергә үтеп, бергә йөрөп ҡайттыҡ бына, насип булғас.

Быны ишетеп, кешеләр бер аҙ телһеҙ ҡалды. Ышанмағандай, йәнә атты уратып ҡарарға тотондолар, ғәжәпләнеп телдәрен сыртлаттылар.

– Ҡара һин әле! Эйтһәң, әҙәм ышанмаҫ әй!

– Әй януар, ниҙәр генә күрмәгәндер инде бының башы! Ауылды танывмы икән? Онотманымы икән?

– Йә һин әле, нисәмә ерҙән ранен булған, меҫкенең.

Халыҡ тиҙ генә таралманы, көтмәгәндә килеп тыуған был мөғжизәгә һаман шаңҡып тора бирҙе…

Өйгә ингәс, Рәйхана иренә ҡарамай ғына:

– Алып ҡайтып килгән йәндәй иптәшеңде әллә берәй ыстансала аҙаштырып ҡалдырҙыңмы? – тип һораны.

Үҙ хатаһын килеп төшкәс тә аңлап алған Ғилмишәриф, ауыҙын йырып, тәҙрә яғына ымланы.

– Ана бит, күрмәйһеңме ни? Һарай ситәнендә бәйле тора! Шул инде минең өс йыл буйы бергә йөрөгән йәндәй дуҫым.

– Эй, Аллам!.. Иптәшем менән ҡайтам, тип яҙған хатыңды уҡығас, төн йоҡоларымдан ҡалдым, хыялыйға әйләнә яҙҙым бит! – тип ирен ҡосаҡлап алды. Ошо мәлдә уларҙан да бәхетле бер кем юҡ ине.

* * *

Иртәгәһен, атын менеп, ҡылысын тағып Ғилмишәриф колхоз идараһына китте. Һуғыштан ҡайтҡан һәр ауылдашы өсөн шатланып бөтә алмаған председатель Ҡаһарманов уны ҡолас йәйеп ҡаршыланы:

– Үәт, исмаһам, һуғышсы, үәт, исмаһам кәүәлерист. – Ҡаһарманов, Ғилмишәрифте ҡосаҡлап, арҡаһынан тупылдатып һөйҙө. – Был рәүешле ҡайтып төшөүеңде көтмәгәйнек… Ҡара һин әле, мынау шпорҙар, мынау ҡылысы!.. Ҡайһылай үҙеңә килешеп тора бит әле! Ә түшеңдәге миҙалдары! – Ҡарт ныҡ тәьҫирләнде, оҙаҡ тынысланa алманы. Ахырҙа өҫтәле артына ултырҙы ла һаҡ ҡына һорай ҡуйҙы:

– Ҡустым, был ҡорамалдарыңды тапшырып, бер аҙ ял иткәс, колхоз эшен башларһың ул?

– Ҡаһарманов ағай, ҡорал бер ҡайҙа ла тапшырылмай – ул миңә бүләк итеп бирелгән. Документы бар, законлы, мисәтле ҡағыҙ менән раҫланған. Ә эшкә килгәндә… Иртәгәнән үк тәғәйенлә берәй эшкә.

Председателдең, быны ишеткәс, йөҙө яҡтырып китте, сөнки күптән түгел, һәр эшсе ҡул алтын бәрәбәре сағында, бер-ике фронтовик, еңел тормош эҙләп, ауылды ташлап сығып киткәйне.

– Һай, афарин икәнһең, – тине ул, ҡыуанысын йәшермәй.

– Ҡаһарманов ағай, мин бит бынамын тигән атҡа атланып ҡайттым…

Ҡарт һүҙҙең айышына төшөнөп етмәне:

– Ниндәй ат? Барып етеңкерәмәй бит әле… – тине аптыраған ҡиәфәттә.

Ғилмишәриф, председателде етәкләп, тәҙрә эргәһенә килтерҙе лә идара ҡоймаһында бәйле торған атҡа бармағы менән төртөп күрһәтте.

– Был ниндәй хайуан? – Председатель оторо аптыраны.

– Ул хайуан түгел, беҙҙең колхоздың өйөр айғыры.

– Китсе әле, былай ҙа ҡаңғырған башты бутама.

Ғилмишәриф ат тарихын баштан-аяҡ аңлатып биргәс, Ҡаһарманов, урынынан тороп, яңынан тәҙрәгә килде. Ҡыуанысынан атылып сыҡҡан бер нисә бөртөк күҙ йәшен һөрттө.

– Былай ярамаҫ, ҡустым. Әллә ҡайҙарҙан ҡайтҡан үҙ атыбыҙ менән күрешмәһәк, бөтөнләй хилаф булыр, – тип йәһәт кенә кейенде лә эргәһенә сыҡты.

– Эй, януар, тыуған ауылыма, үҙ өйөрөмә ҡайттым, тиһең инде, ә? – тип, Әүхәҙиҙең ялдарын һыйпап, муйынынан ҡосаҡлап һөйҙө.

Уғаса булмай, былар янына ауылдаштары йыйыла башланы.

– Бына, күрегеҙ, – тине, уларға ҡарап, күңеле тулышҡан председатель. – Күрегеҙ «Ҡыҙыл Ялан» колхозының ҡаһарманын! Орден-миҙалдарын тотоп ҡарағыҙ! Бына фашистарҙың башын ҡыйған ҡылысын күрегеҙ!.. Ҡана, ҡустым, бир әле, – тип Ғилмишәрифтең ҡылысын һорап алды ла уның йөҙөнә яҙылғандарҙы уҡып ишеттерҙе. – Бына шулай һуғыша беҙҙекеләр! Теләһә ниндәй дошмандың да атаһын таныта беҙҙең егеттәр!

Ҡаһарманов илһамланып, һуғыштан үҙе йөрөп ҡайтҡандай маҡтанып, дәртләнеп һөйләнде...

Шунда бер йәш егет тәҡдим индерҙе:

– Өс көндән Октябрь байрамын үткәрәсәкбеҙ. Ғилмишәриф ағайҙы, атына атландырып, халыҡ алдында бер нисә һүҙ әйтеүен һорайыҡ!..

Әммә Әүхәҙи хужаһы менән байрам тантанаһына сыға алманы. Һуғыш яралары, оҙон-оҙаҡ юл ғазаптары үҙенекен итте. Былай ҙа йонсоған малҡай яралы аяғын ергә терәй алмай башланы. Өс аяҡта ғына тороу үҙе бер ғазапҡа әйләнде, күрәһең. Тора-бара ул Ғилмишәрифте иҙәндә ятҡан көйөнсә генә ҡаршылай башланы. Мөлдөрәп ҡараған йәшкелт күҙҙәренең нуры көндән-көн һүнә барҙы. Ғилмишәриф төрлөсә итеп ҡараһа ла, Әүхәҙи мантыманы. Ҡышҡа табан хәле бөтөнләй мөшкөлләнде, ашауҙан яҙҙы. Район ветлечебницаһынан килгән врач, атты төрлө яҡлап тыңлап ҡараны ла:

– Ике үпкәһенә лә һыуыҡ тейгән. Хәрәкәтһеҙ оҙаҡ тороу арҡаһында йөрәге насарайған. Алғы аяғының сираҡ һөйәгендә, онталған янбаш һөйәгендә – остит, йәғни һөйәк сире башланған. Малҡайҙың ғүмере һанаулы ғына ҡалған. Әгәр итен, тиреһен файҙаланырға ниәтегеҙ булһа, һуйырға рөхсәт итеп китәм, – тине.

Һуңғы һүҙҙәрен ишетеп, ярһыған Ғилмишәриф ветврачты һарайҙан ҡыуып сығарҙы... Яугир атты, ата-бабалар йолаһы

буйынса, яуҙан ҡайтҡан эйәрҙе һалып, сағыл битендә ҡаҙылған ҡәберҙә аяғүрә баҫтырып күмделәр. Баш осона ҡыҙыл йондоҙ, аҫҡараҡ дағаһы, тимерлектә һуғып эшләнгән ҡылыс менән мылтыҡ рәүеше, кавалеристарҙың эмблемаһы ҡағылған бағана ҡуйҙылар. Ҙур шыма ташҡа сүкеп, «Бында Бөйөк Ватан һуғышының яугиры, алған яралары һөҙөмтәһендә тыуған иленә ҡайтып үлгән Әүхәҙи исемле колхоз аты ерләнде. 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған, 1946 йылдың 3 апрелендә вафат булған», тип яҙып ҡуйҙылар.

Көҙ еткәс, Ғилмишәриф атының ҡәбере өҫтөнә ике ҡайын ултыртты. Йыл һайын Еңеү көнөндә ейәндәрен эйәртеп килер, ҡәбергә хуш еҫле ялан сәскәләренән гөлләмәләр һалыр булды. Һуңғы килгәнендә сәстәре ағарған, кәүҙәгә бәләкәсәйеп ҡалған яугир үҙе лә «өс аяҡ»та тора ине...

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ, йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән тасуири итеп һөйләп өйрәнегеҙ. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереп, телмәрегеҙҙә уларҙы ҡулланып һөйләргә тырышығыҙ.
2. *Күҙ яҙҙырмау, көлкөгә һабыштырыу, яңылыша башлау, яҡты донъяға күҙен асҡан көн, йөрәген яндырыу, күҙҙән үткәреү, атаһын танытыу, мөлдөрәп ҡарау* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Русса улар нисек әйтелә?
3. *Утты-һыуҙы кискән; Өҫтө-башы туҙған; Күҙенән шатлыҡ осҡондары сәселде; Ашауҙан яҙҙы* һөйләмдәрен тәүҙә һүҙмә-һүҙ, шунан дөрөҫ итеп руссаға тәржемә итегеҙ.
4. *Барып етеңкерәмәй,* тип ниндәй осраҡта әйтәләр? Һеҙгә лә барып етеңкерәмәй торған осраҡтар буламы? Мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән әйтеп бирегеҙ.
5. Ниндәй мал ул *өйөр айғыры*? Һеҙҙең уны күргәнегеҙ йәки ишеткәнегеҙ бармы? Йылҡы өйөрөндә уның вазифаһы ниндәй? «Өйөр айғыры» тигән белешмә төҙөп яҙығыҙ.
6. *Ат йәнле кеше,* тип кемгә әйтәләр? *Бала йәнле, туған йәнле кеше,* тип тә әйтәләр. Тағы ниндәй йәнле кешеләр була? Был кешенең ыңғай сифатымы, әллә етешһеҙлегеме? Әңгәмәләшегеҙ.
7. *Тел сыртлатыуҙы, ҡолас йәйеп ҡаршылауҙы* күҙ алдына килтерегеҙ. Улар ниндәй ситуацияла була?
8. *Өҫтөнә баҫтың,* тип ниндәй осраҡта әйтәләр?
9. Аттарға, ғәҙәттә, нимәгә ҡарап ҡушамат бирәләр? Үҙегеҙ белгән ат ҡушаматтарын яҙып сығығыҙ. Ғилмишәрифтең атына ни өсөн кеше исемен ҡуштылар икән? Башҡорттарҙа малға кеше исемен ҡушыу ғәҙәте бармы? Әңгәмәләшегеҙ.

**10.** Текстан ҡарап, Ғилмишәрифтең һуғышып йөрөгән ерҙәрен, кискән һыуҙарын, азат итеүҙә ҡатнашҡан ҡалаларын асыҡлағыҙ. Уның яратҡан йырына иғтибар итегеҙ: ниндәй йыр ул? Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, йырлап алығыҙ.

**11.** Повесты тулыһынса уҡыу теләге тыуманымы? Рамазан Өмөтбаевтың тормошо, ижады тураһында мәғлүмәт туплап, белешмә төҙөп яҙығыҙ.

**12.** Өҙөктөң йөкмәткеһе буйынса изложение яҙығыҙ.

## Теҙмә ҡушма һөйләм

Теҙмә ҡушма һөйләмдең өлөштәре бер-береһенә тиң булалар. Улар араһында төрлө мәғәнәүи бәйләнештәр була:

1) бер үк ваҡытта булған хәл-ваҡиғалар;

2) бер-бер артлы булған хәл-ваҡиғалар;

3) бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған хәл-ваҡиғалар;

4) сиратлап була торған, ике йәки бер нисә хәл-ваҡиғаның берәүһенең генә булыуы мөмкин икәнде күрһәткән мәғәнә.

Миҫалдар:

1. *Ғилмишәриф полковникты ҡосаҡлап алырҙай булды, күҙенән шатлыҡ осҡондары сәселде.* – Бер үк ваҡыттағы ваҡиғалар.

2. *Арып-талып килгән Әүхәҙи (ат исеме) морон тишектәрен тырпайтып, сыңратып кешнәп ебәрҙе, йылға аръяғында ла кешнәү ишетелде.* – Бер-бер артлы булған ваҡиғалар.

3. *Ғилмишәриф иптәштәре менән кәңәшләшергә булды, тик улар быны көлкөгә һабыштырҙы. Днепр, Висла, Одер йылғаларында атымды һуғарҙым, әммә үҙебеҙҙең Ҡыҙылдыҡынан да татлыраҡ, шифалыраҡ һыу юҡтыр.* – Ҡаршы ҡуйылған хәл-ваҡиғалар.

4. *Ғилмишәриф төшөндә йә, атына атланып, тыуған яҡтарында йөрөнө, йә ул, ҡылыс һелтәп, атакаға ташланды.* – Сиратлап булған хәл-ваҡиғалар.

**52-се күнегеү.** Ат хәрәкәтен белдергән һүҙҙәрҙе тиҙлеге кәмеү тәртибендә яҙығыҙ.

Тора, юрта, саба, атлай, юрғалай.

**53-сө күнегеү.** Башҡорт халыҡ йырҙарынан алынған теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең грамматик нигеҙен билдәләгеҙ.

1. Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,
   Эйәһе лә белмәҫ, ат белер.
   *(«Тәфтиләү»)*
2. Арҡаларҙа ятып ҡар иремәй,
   Ерҙә ятып алтын серемәй.
   *(«Баяс»)*
3. Диңгеҙ һыуҙары ҡыҙарған,
   Күп ирҙәр башын һала,
   Ирҙәр үлә, башын һала,
   Бөтмәҫ дандары ҡала.
   *(«Порт-Артур»)*
4. Йәйләүҙәре йәмле, ҡымыҙы тәмле,
   Нисәү икән һауған бейәһе?
   *(«Йәйләү»)*
5. Ҡысҡырыр ҙа кәкүк, һайрар былбыл,
   Шул саҡтарҙа нисек түҙерһең?
   *(«Уйыл»)*
6. Ямғырсы ла тауҙың буйҙарында
   Олатай-бабаларыбыҙ йәйләгән,
   Йәш егеттәр йылҡы, әй, әйләгән,
   Йәш килендәр ҡолон да бәйләгән.
   *(«Ямғырсы»)*
7. Ашағанҡай бөтә, кейгән туҙа,
   Татыу йәшәүҙәргә ни етә?
   *(«Татыу йәшәүҙәр»)*

Ҡушма һөйләм өлөштәре араһында ниндәй мәғәнәүи бәйләнештәр бар?

**54-се күнегеү.** Эйәр өлөштәрен, һүрәт төшөрөп, аңлатығыҙ.

Ҡаптал, өҙәңге, ҡойошҡан, айыл, үндек, күмелдерек (түшелдерек), ҡанъяға, эйәр ҡашы.

## ҒӘЛИ ВӘЛИУЛЛИН

*(1951)*

Ғәли Фәйзрахман улы Вәлиуллин 1951 йылдың 25 сентябрендә Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында тыуған. Салауат районының Әлкә ауылындағы Салауат музейының,

Эстониялағы Палдиски ҡалаһындағы (элекке Рогервик ҡәлғәһе) Салауат Юлаев музейҙарының ғилми авторы. Салауат Юлаев һәм уның көрәштәштәренең каторгалағы тормошо тураһындағы документтарҙы ентекле өйрәнгән. Уның был дәреслеккә ингән барлыҡ материалдары ла тарихи документтарға нигеҙләнгән.

## ҠӘЛҒӘ ХУЖАҺЫ ҺӘМ ТОТҠОН

Балтика диңгеҙендәге Рогервик порты ҡәлғәһе коменданты генерал Иосиф (Жозеф) Демарклевскийҙың улы Виктор, Санкт-Петербургта кадет корпусын тамамлағас, хәрби хеҙмәтен Мәскәү гарнизонында дауам итер алдынан Рогервик ҡәлғәһенә, әсәһен, атаһын күреп, ял итергә тип, отпускыға ҡайтты. Бер көндө Виктор, яр буйлап йөрөп киләйем әле, тип Балтика дингеҙе буйына сыҡты. Ярҙан алыҫ булмаған таш карьерында каторжандар ҡул арбаларында, блоктарҙы ылауға тейәү өсөн, бер урынға, складҡа ташыйҙар.

Үҫмер саҡтан каторжандарҙы күреп, улар менән аралашып үҫкән Виктор улар янына ыңғайланы. Әҙер таш блоктарҙы карьер эсенән өҫтәге складҡа ташыр өсөн, каторжандарҙан көн һайын бер нисә төркөм ойошторола. Бөгөн шул төркөмдәрҙең береһендә Юлай Аҙналин да бар. Уларға яҡынлашҡан йәш офицерҙы Юлай шунда уҡ таныны. Йөҙө лә, буйы ла ныҡ үҙгәрмәгән. «Был генерал Демарклевскийҙың улы лаһа», – тине лә үҙ-үҙенә Юлай, арбаһын алға этеп, Викторға ҡаршы атланы. Виктор янынан үтеп барған Юлай: «Господин прапорщик, сапоги с узорами еще не износились?» – тип һораны ла, арбаһын этеп, атлауын дауам итте. Виктор быныдай көтөлмәгән һорауҙан бер аҙ аптырап ҡалды. Үтеп киткән тотҡондоң мыҡты кәүҙәһен ҡарап тороп, Виктор ҙа ҡапыл уны таныны. Был бит уға бер нисә йыл элек ҡуныстары биҙәкле күн итек бүләк иткән башҡорт Юлай, старшина Юлай, ә аҙағыраҡ атаһын, әсәһен, үҙен үлемдән алып ҡалған старшина Юлай Аҙналин.

Йөрөп, өйөнә ҡайтып ингәс, Виктор әсәһенән: «Әсәй, теге ваҡыт миңә старшина Юлай бүләк иткән ҡуныстары биҙәкле итек ҡайҙа әле ул?» – тип һораны.

– Ул өҫтәге бәләкәй бүлмәлә, ниңә һорайһың әле уны?

– Бөгөн карьер янында бер каторжан минән шул итек тураһында һораны. Мин уны аҙаҡ таныным, ул – Юлай. Беҙҙе үлемдән ҡотҡарған Юлай старшина.

– Атайың Юлай старшинаның тотҡондар араһында икәнен белмәйме икән ни? Юлай – беҙҙе үлемдән ҡотҡарыусы. Нисек кенә булмаһын, беҙ ҙә уға мәрхәмәтлелек күрһәтергә бурыслыбыҙ, – тине әсәһе Марина Николаевна.

Аталары хеҙмәтенән ҡайтып, киске ашты ашағандан һуң, Виктор таш карьерында булған хәлде уға һөйләмәксе булды. Әсәһе лә хупланы быны.

– Атай, һин биш йыл элек беҙҙең ғаилә менән булған фажиғәне иҫләйһеңдер бит, – тип һүҙ башланы Виктор.

– Әлбиттә, уны оноторлоҡмо ни? Юлай старшинаға беҙ ғүмерлек бурыслыбыҙ. Тик ниңә был һорауыңды бирәһең әле?

– Атай, мин бөгөн таш карьерында бер каторжанды, беҙҙең ғаиләне үлемдән алып ҡалған Юлай Аҙналинды, осраттым, – тине Виктор.

– Мин, – тине генерал, – әсәбеҙ батшабикә Екатерина Икенсенең приказдарын һәр ваҡыт теүәл үтәнем һәм артабан да үтәйәсәкмен. Йәшерен инструкция буйынса беҙ Пугачёв ихтилалы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе, унда ҡатнашҡан кешеләрҙе, уларҙың исемдәрен, фамилияларын, хатта ҡылған яман эштәрен дә онотоорға тейешбеҙ. Инструкцияға ярашлы, мин ул ихтилалда ҡатнашҡан нисә кеше беҙҙең ҡәлғәгә ебәрелгән, кемдәр улар, ниндәй енәйәт яһағандар – был туралағы мәғлүмәтте бер кемгә лә белдерергә хоҡуғым юҡ.

– Атай, ләкин мин бит Юлай старшинаны таныным. Ул беҙҙең ҡәлғәлә тотҡонда. Уға ниндәйҙер ярҙам күрһәтеп булалыр бит? – тине Виктор.

– Ҡәҙерлем Жозеф! Юлайға ярҙам итеү – беҙҙең бурысыбыҙ, атаһы, – тип улының һүҙҙәрен ҡеүәтләне Марина Николаевна.

– Юлай мине лә бит үлемдән алып ҡалды, – тине генерал. – Мин дә бөгөнгө ғүмерем өсөн уға бурыслымын. Минең дә уның алдында әйткән офицер һүҙем бар бит әле. Был туралағы уйҙар минең йөрәгемдә, күңелемдә күптән борсой. Тик нисек уға ярҙам итергә мөмкин икәнен генә белмәйем. Ә һеҙгә шундай булғанығыҙ өсөн рәхмәт.

Генерал Демарклевский артабанғы көндәрҙә Юлай Аҙналинға ҡағылышлы бөтә документтарҙы алдырып ҡарап сыҡты. Юлайҙың бында улы Салауат менән тотҡонлоҡта икәнен белде. Документтарҙы ентекләп уҡып, уларҙың хыянатсы түгел, ә Пётр III өсөн, дөрөҫлөктө, азатлыҡты табайыҡ, тип ихтилалға ҡушылғандарын аңланы. Ҡасандыр үҙен, ғаиләһен үлемдән йолоп алып ҡалған бөгөнгө каторжандың

хәлен яҡшыртыуҙы, уға ярҙам итеүҙе нисек тормошҡа ашырыу тураһында оҙаҡ уйланып ултырған генерал Юлай менән тәүге осрашыуҙы, ғаиләһе менән бергә кисергән ҙур фажиғәне иҫенә төшөрҙө.

Был бынан биш йыл элек, 1772 йылда, булды. Польша ерендә конфедераттарҙың ихтилалын баҫтырыу һуғышы бара ине. Был һуғышта Ҡолой Балтачев етәкселегендә өс меңлек башҡорт һыбайлылары корпусы ла ҡатнашты. Юлай Аҙналин өс йөҙ кешенән торған команданы етәкләй. Корпус башлығы Ҡолой Балтачевтың ҡушыуы буйынса, һалдаттарҙы аҙыҡ-түлек, аттарҙы фураж менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса Юлай Аҙналин Рогервик ҡәлғәһе коменданты генерал Демарклевскийға бер нисә тапҡыр барҙы. Беренсе тапҡыр барғанында, старшина күстәнәскә башҡорт балы, генералдың атына көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән йүгән, генерал бисәһенә кәзә мамығынан бәйләнгән ап-аҡ ҙур шәл, улы Викторға ҡуныстары биҙәлгән күн итек алып барҙы. Юлайҙың матур итеп һөйләшә белеүенә, уҡымышлы, зирәк, эскерһеҙ булыуына генерал тәүге осрашыуҙа уҡ һоҡланды, башҡорт ғәскәренең һорауҙарын һәр саҡ ҡәнәғәтләндерергә тырышты.

1772 йылдың көҙөндә Юлай старшинаның командаһы Рәсәй – Польша сигендә дозорҙа йөрөнө. Ихтилал һылтауы менән яҡын тирәләрҙә халыҡтың, дәүләттең мөлкәтен талаған юл ҡараҡтары, юлбаҫарҙар ҙа күбәйеп китте.

Ошондай көҙгө көндәрҙең береһендә генерал Демарклевский Ревель (хәҙерге Таллин ҡалаһы) гарнизонындағы бер осрашыуҙан үҙенең ҡәлғәһенә ҡайтырға юл алды.

Ул осрашыуға үҙе менән ике ярҙамсы офицерҙы, ҡатынын, улы Викторҙы ла алғайны. Ике карета ла ҡайтыр юлға сыҡтылар, уларҙы өс ҡоралды һалдат оҙатып бара. Ылау һәлмәк кенә юрттырып Рогервик ҡәлғәһенә яҡыная бара.

Ҡапыл мылтыҡ шартланы, ят телдә һүгенеү һүҙҙәре, аҡырыу тауыштары яңғыраны.

– Туҡта! Әләктегеҙ! Ҡотола алмаҫһығыҙ!

Аңдып йөрөгән юлбаҫарҙар кареталарға һөжүм итте. Һаҡлап барыусы һалдаттар пистолеттарынан берәр тапҡыр атып өлгөрҙөләр, тик тегеләр күберәк булып сыҡты, аттарҙың баштарын шаҡарып тотоп, туҡтатып, дилбегәләрҙе бәйләп тә ҡуйҙылар. Өс һалдат һәм ике офицер ҡылыстары һәм башҡа ҡоралдары менән, генерал ғаиләһе ултырған каретаны һаҡлап, юлбаҫарҙар менән йәнен-тәнен аямай алыша башланылар.

Тап ошо ваҡытта Юлай Аҙналин етәкселегендәге бер төркөм башҡорт һыбайлыһы был тирәлә дозорҙа йөрөй ине. Атыу, ҡысҡырыу тауыштарын ишетеү менән, Юлай егеттәре менән шул яҡҡа сапты. Дозорсылар, хәлде аңлап, шунда уҡ ҡараҡтарҙы тураҡлай башланылар һәм тиҙ арала тар-мар иттеләр. Генералдың ике һалдаты һәләк булды, офицерҙарының еңелсә бысаҡ яралары бар ине. Генералдың үҙенә, ғаиләһенә зыян килмәгән. Демарклевский Юлайҙы ҡосаҡлап үпте, ғаиләһен үлемдән ҡотҡарғаны өсөн рәхмәтен белдерҙе һәм, ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем онотмаясағын әйтеп, офицер һүҙен бирҙе.

Был ваҡиғанан һуң биш йыл үткәс, 1777 йылдың көҙөндә, генерал Демарклевский менән Юлай Аҙналин Рогервик ҡәлғәһендә береһе ҡәлғә хужаһы, ә икенсеһе дәүләт енәйәтсеһе – тотҡон булып осраштылар.

Генерал үҙе ҡасандыр биргән офицер һүҙен онотманы. Тик ул туранан-тура Юлайға ниндәйҙер ташламалар яһай алмай. Инструкциялар бик ҡаты. Шулай ҙа комендант, төрлө юлдарҙы эҙләп, байтаҡ комбинациялар үткәреп, инструкцияларҙы һәм законды боҙмайынса, Юлай Аҙналинды, Салауат Юлаевты һәм Ҡәнзәфәр Усаевты ҡәлғәнең ярҙамсы командаһына тәғәйенләй ала. Ә был командаsuccessful хәле башҡа каторжандарҙыҡынан күпкә яҡшыраҡ. Улар ҡәлғә эсендәге айырым торған ағас йортта йәшәй, ҡулдағы тимер бығауҙарынан азат ителәләр, төрлө-төрлө хужалыҡ эштәрен башҡаралар. Урман ҡырҡыу, аттар ҡарау, утын әҙерләү, йәйен бесән сабыу кеүек эштәр, әлбиттә, таш ҡырҡыу эшенә ҡарағанда күпкә еңеләрәк тә, беҙҙең тотҡондарға таныш та, ғәҙәти ҙә.

1. Тексты ентекләп уҡығыҙ. Ғ. Вәлиуллин унда Юлай Аҙналин яҙмышына ҡағылышлы күп яңы материалдар тапҡан, тексtan шуларҙы табығыҙ.
2. Йөкмәткене матур итеп һөйләргә өйрәнегеҙ. Телмәрегеҙҙе төҙөк, эҙмә-эҙлекле, тасуири итеп ойошторорға тырышығыҙ.
3. Юлай Аҙналин 1772 йылда Польшала ниндәй эш менән йөрөгән? Уның генерал Демарклевский менән осрашыу эпизодын һөйләгеҙ.
4. Генерал Демарклевскийҙың Юлай Аҙналинға биргән баһаһы ниндәй?
5. Ҡәлғә хужаһының Юлай Аҙналинға, Салауат Юлаевҡа, Ҡәнзәфәр Усаевҡа күрһәткән изгелектәре тураһында һөйләгеҙ.

### Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр

Теҙмә ҡушма һөйләм өлөштәре араһында төрлө теркәүестәр була ала. Теркәүестәрҙең әһәмиәте шунда: улар һөйләмдәр араһындағы мәғәнәүи бәйләнештәрҙе күрһәтәләр. Мәҫәлән: *һәм, ла, лә* һ. б. теркәүестәр бер-бер артлы йә бер ваҡытта булған хәл-ваҡиғаларҙы белдерәләр. *Ә, ләкин, тик* һ. б. теркәүестәр ҡаршы мәғәнәле һөйләмдәрҙе теркәйҙәр. *Йә, йәки, әллә* һ. б. теркәүестәр сиратлашҡан йә берәүһе генә мөмкин булған хәл, ваҡиғаларҙы белдерәләр: *Фәнил урманға бара, ә Наил бөгөн өйҙә ҡала.*

Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙәге мәғәнәүи үҙенсәлектәрҙе интонация белдерә. Сағыштырығыҙ:

*Бына көҙҙәр етер,*
*Ер өҫтөнә ятыр һалҡындар, –*
*Беҙ туңмабыҙ.*

(Рәшит Назаров)

Былар – ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һөйләмдәр.

Теҙмә ҡушма һөйләм мәғәнәләре, төҙөлөшө, тыныш билдәләренең ҡуйылышы буйынса рус телендәге сложносочинённое предложениенан айырылмай, тиерлек.

**55-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ.

### Урыҫ самауыры

Урыҫ самауыры тип йөрөтөлгән сәй ҡайнатыу ҡорамалының Рәсәйҙә таралып китеүе башҡорттар менән бәйле икәнен күбебеҙ белмәй. Ә был ысынлап та шулай.

Уралда В. Н. Тянышевтың ғәйнә башҡорттары ерендә һалынған Ирген заводында эшләгән эшселәр йыш ҡына урындағы халыҡтың мал-мөлкәтен талар булғандар. Бер ваҡыт урыҫ эшселәренең ҡулына быға тиклем улар ғүмерҙә күрмәгән, ҙур ҡорһаҡлы сәйер бер ҡорамал килеп эләгә. Был башҡорттарҙың һыу ҡайнатыу яйланмаһы икән. Улар уны Ҡытайҙан алып ҡайтҡан була.

Был ҡорамалдың бик уңайлы нәмә икәнлеген белгәс, заводтың приказчигы, Родион Набатов тигән берәү, быны күпләп етештереүҙе ойоштора. Хәҙер беҙ бөтәбеҙ ҙә «урыҫ самауыры» тип белгән сәй ҡайнатыу һауыты шунан таралып китә. Аҙаҡ Демидовтар Набатовты, төрлө льготалар менән әүрәтеп, үҙҙәренә эшкә саҡыралар, һәм Набатов самауырҙы уларҙың Соҡсон заводында етештерә башлай. Демидовтар Тула ҡалаһы

кешеләре була. Улар менән самауыр Тулаға барып еләгә. Хәҙер инде уны Тулала күпләп эшләй башлайҙар. Бөтә донъяға таралған «Тула самауыры» шулай барлыҡҡа килә.

Шулай итеп, «рус самауыры» тигән һыу ҡайнатыу һауытының донъяға таралыуына башҡорттар сәбәпсе булып сыға. Ҙур ҡорһағында «Ирген заводы. 1741 йыл» тигән яҙыулы самауыр иң боронғо Рәсәй самауыры һанала.

Был мәғлүмәттәр Алексей Иванов тигән авторҙың Мәскәүҙә донъя күргән «Увидеть русский бунт» тигән китабында баҫтырылған.

Тексҡа ҡарата һорауҙар төҙөгөҙ.

**56-сы күнегеү.** «Ҡәлғә хужаһы һәм тотҡон» тексынан ике теҙмә ҡушма һөйләм яҙып алығыҙ.

**57-се күнегеү.** Ағас өлөштәрен белдергән һүҙҙәрҙең исемдәрен уҡығыҙ. Ағас һүрәте төшөрөп, уның күренеп торған өлөштәренең исемдәрен яҙығыҙ. Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

Олон, үҙәк, ҡабыҡ, сөрөк (ағас ите), ҡыртыш (ҡабыҡ аҫтында өлөш), ботаҡ, сатыр, сыбыҡ, туҙ, тәлгәш, суғырмаҡ, оро, сата (тармаҡ), тубырсыҡ, энә, бөрө, япраҡ, ылыҫ, йәйек.

Бер нисә һүҙҙе индереп, дүрт һөйләм төҙөгөҙ.

**58-се күнегеү.** Бирелгән ике составлы һөйләмдәрҙе бер составлыға әйләндерегеҙ.

Өлгө: *Беҙ ни эшләйек һуң? – Беҙгә ни эшләргә һуң? Ни эшләйек һуң?*

1. Ағайым 2014 йылда хәрби хеҙмәткә алына. 2. Иртән көн бик һалҡын ине. 3. Беҙ был эште бергә эшләрбеҙ. 4. Аҡҡан һыуҙар кире борола алмай. 5. Стеналарға картиналар, фоторәсемдәр эленгән. 6. Тәҙрә төптәрендә гөлдәр ултыра.

**59-сы күнегеү.** Шиғырҙы уҡығыҙ. Ҡорамаларҙа ниндәй сер ята икән?

## СЕРЛЕ ҠОРАМА

Ҡорама ҡорай өләсәй,
Биҙәктәргә сер һала:
Ҡымыҙлыҡ, андыҙ, бәпембә,
Ҡаҡы, бөтнөк, бысала,

Кәзә һаҡалы, дегәнәк,
Боланут, йыуа, күрән,
Кесерткән, оҫҡон, ҡырҡбыуын
(хвощ полевой)
Алабутаһын күрәм.
Мәтрүшкәле, ҡуҙғалаҡлы,
Юл япраҡлы ҡорама,
Ниңә шулай итә икән –
Үҙең уйла, һорама!

*(Г. Ситдиҡова)*

**60-сы күнегеү.** Тексты уҡығыҙ.

Башҡорт телендә *ут йәшел, утлыҡ, утлай, утай* тигән һүҙҙәр бар. Был һүҙҙәрҙең тамырындағы *ут* һүҙе – үлән һүҙенең синонимы ул, ләкин *ут* һүҙенең «огонь» тигән мәғәнәһе лә бар бит әле. Беҙ ул һүҙҙе шул мәғәнәһе буйынса ғына беләбеҙ ҙә. Ниңә был *ут* һүҙенең тәүге мәғәнәһе юғалған һуң? Э сәбәбе уның ябай: башҡорт теле саф лексик омонимдарҙан (бер үк һүҙ төркөмөнә ҡараған, бер үк һорауға яуап була торған, бер үк төрлө үҙгәрә торған һүҙҙәр) ҡотолорға тырыша.

Беренсе һөйләмдәге һүҙҙәрҙең бөтәһенең дә мәғәнәһе үлән һүҙе менән бәйле. Ҡарағыҙ: *утлыҡ* – мал һарайҙарындағы бесән һала торған урын. *Утлай* һүҙе «мал болонда үлән ашай» тигәнде аңлата. *Ут йәшел* иһә – асыҡ йәшел, ә *утау* сүп үләндәрен өҙөп ташлау була.

Элекке мәғәнәһендә *ут* һүҙе бер нисә үлән исемендә һаҡланып ҡалған – *күҙлут, боланут, һарут.*

Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе табығыҙ. Уларҙың өлөштәре араһында ниндәй мәғәнәүи бәйләнеш бар?

**61-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Үҙегеҙ берәй дарыу үләне тураһында белешмә яҙығыҙ.

### Боланут

Урман, юл ситтәрендә, тупрағы аҡтарылып ташланған ерҙәрҙә, ағасы ҡырҡылған урындарҙа балҡып үҫеп ултырған, 20–30 см оҙонлоғонда осо һандал сәскә менән ҡапланған бейек үләнде, моғайын, һәр кемдең күргәне барҙыр. Һуңынан был

сәскәләр мамыҡҡа әүереләләр, һәм ел уларҙы осороп алып китеп тарата. Был үләндең русса исеме – **иван-чай**, шулай уҡ **кипрей** тигән атамалары бар. Башҡортса исеме – **боланут**. *Болан* һүҙе аңлашыла, ә *ут* һүҙенең *үлән* икәнен алдағы күнегеү буйынса беләбеҙ.

Халыҡ медицинаһында боланутты дауалау, дауаланыу өсөн ҡулланалар. Үләндәрҙе өйрәнеүселәр, болануттың химик составы бик бай, тиҙәр. Унда бигерәк тә С витамины күп икән. Болануттың сәскәләре лә файҙалы, япрағын да сәй итеп эсергә мөмкин, ә татлы тамырҙарынан бутҡа ла бешереп була, салат та яһайҙар икән.

## Повесть тураһында төшөнсә

Повесть – әҙәбиәттең эпик төрөнә ҡараған иң киң таралған жанрҙарҙың береһе. Жанрҙың исеме рус теленән килеп ингән – повествование, йәғни хикәйәләү тигән һүҙҙән алынған. Боронғо рус әҙәбиәтендә хикәйәләү рәүешендә яҙылған әҫәрҙәрҙең бөтәһен дә повесть тип йөрөткәндәр. Был термин башҡорт әҙәбиәтенә XX быуат баштарында килеп инә. Шуға тиклем был жанрға ҡарарҙай әҫәрҙәрҙе оҙон хикәйә тип атағандар.

Повесть – хикәйә менән роман араһындараҡ торған жанр. Ул, ғәҙәттә, төп геройҙың яҙмышына бәйле ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙ тасуирлауҙан (хикәйәләүҙән) ойоша. Шуға ла ул күләме яғынан да хикәйәләрҙән ҙурыраҡ, романдарҙан бәләкәйерәк була.

Башҡорт әҙәбиәтендә повесть ныҡ үҫешкән жанр булып иҫәпләнә. Сәғит Агиш, Зәйнәб Биишева, Әнүәр Бикчәнтәев, Ноғман Мусиндар бик күп повестар ижад иттеләр. Һуңғыраҡ быуын яҙыусыларынан Әмир Әминевтең, Ринат Камалдың повестарын уҡыусылар яратып уҡый.

1. Һеҙ ниндәй башҡорт повестарын уҡының? Уларҙың исемлеген төҙөгөҙ.
2. Өләсәйең (олатайың, атайың, әсәйең) һинең ниндәй повесть уҡыуың менән ҡыҙыҡһынды, ти. Повестың йөкмәткеһен һеҙ уға нисек һөйләр инегеҙ?

# БАЙРАМ, БАЙРАМ...

## БАЙРАМДАРЫБЫҘ ТАРИХЫНАН

Беҙҙең байрамдарыбыҙ бик күп.

Донъя, ил кимәлендәге әһәмиәтле ваҡиғаларға бәйле тыуған байрамдар: иң яратҡан байрамыбыҙ, әлбиттә, – Яңы йыл байрамы. 23 февраль – Ватанды һаҡлаусылар, 8 март – Ҡатын-ҡыҙҙар, 9 май – Еңеү көнө. Был байрамдарҙы беҙ яҡшы беләбеҙ һәм ихлас байрам итәбеҙ.

Тормош үҙгәргән һайын, ҡайһы бер байрамдарҙың актуаллеге юғала бара, йөкмәткеһе үҙгәрә, йәиһә бөтөнләй онотола. Совет осоронда, мәҫәлән, 7–8 ноябрь 1917 йылда булған Октябрь революцияһы көнө булараҡ байрам ителә ине. Хәҙер был байрам юҡ. 23 февраль Совет Армияһы һәм хәрби диңгеҙ флоты көнө тип билдәләнә ине. 1 майҙа Хеҙмәтсәндәрҙең бөтә донъя теләктәшлек көнөн билдәләй инек, хәҙер ул Яҙ һәм хеҙмәт байрамы ғына булып ҡалды.

Рәсәй Федерацияһының Дәүләт думаһы ҡарары менән яңы байрам булдырылды – 4 ноябрҙе Халыҡтар берҙәмлеге көнө тип иғлан иттеләр. Был көндө 1612 йылда Минин менән Пожарский етәкселегендәге ополчение Мәскәүҙе поляк илбаҫҡынсыларынан азат итә. Был ополчениела Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар ҙа ҡатнаша. Рәсәй Федерацияһының үҙаллылығын иғлан иткән көндө – 12 июнде – Рәсәй көнө булараҡ байрам итәбеҙ.

Дини байрамдар:

7 ғинуар – Иисус Христостың тыуған көнө – Рождество Христово (Раштыуа) байрамы. Был байрам православие христиандарыныҡы. Католик христиандар уны йыл аҙағында – 25 декабрҙә билдәләп үтә. Мосолмандарҙың да ике ҙур байрамы бар – Ураҙа ғәйете (Ураҙа байрамы) һәм Ҡорбан ғәйете

(Ҡорбан байрамы). Был байрамдарҙың аныҡ датаһы юҡ – ул һижри йыл иҫәбе (мосолман календары) буйынса күсеп йөрөй.

Быларҙан тыш, беҙҙә профессиональ байрамдар бик күп: Уҡытыусылар көнө, Урман хужалығы эшсәндәре көнө, Тимер юлсылар көнө, Төҙөүселәр көнө, Шахтёрҙар көнө, Физкультурниктар көнө, Рәсәй почтаһы көнө, Металлургтар көнө, Медицина хеҙмәткәрҙәре көнө, Китапханасылар көнө һ. б.

Үҙебеҙҙең шәхси тормошобоҙҙа ла байрамдар булып тора: тыуған көндәр, мәктәпте тамамлау, туйҙар һ. б.

1. Һанап үтелгән байрамдар тураһында белешмәләр төҙөгөҙ.
2. «Байрам ни өсөн кәрәк?» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.
3. Берәй байрамға бәйле иҫтәлекле ситуацияға, ҡыҙыҡлы хәлдәргә арнап кескәй хикәйә төҙөгөҙ.

*Закирйән Әминев*

## БАШҠОРТ ҺАБАНТУЙЫ

Донъяла байрамһыҙ халыҡ юҡ. Кешеләр үҙҙәренең тормошондағы ваҡиғаларға, тәбиғәт үҙгәрештәренә бәйле байрамдарҙы таш быуат замандарында уҡ үткәргәндәр. Ҡышҡы һыуыҡтар үтеп, йылы көндәр килеүе, сәсеүгә төшөү йәки сәсеү эштәренең тамамланыуы, көҙгө уңышты йыйып алыу, ҡышҡы һуғымдар башланыуы, мәҫәлән, байрам итерҙәй әһәмиәтле ваҡиға булғандар.

Башҡорттарҙың да бик борондан үҙҙәренең тормош-көнкүрешендә, йәшәгән төбәктәренең тәбиғәтенә яраҡлаштырылған байрамдары булған. Ҡарғатуй (ҡарға бутҡаһы), кәкүк сәйе, науруз, нардуған, һуғым байрамдары, мәҫәлән, ҡайһы бер урындарҙа әле лә үткәрелә. Улар бөтәһе лә халыҡтың боронғо ырым-ышаныуҙары нигеҙендә тыуған. Был байрамдар араһында төрлө мауыҡтырғыс тамашаларының күплеге, бай йөкмәткеле булыуы, күп кешеләрҙе ылыҡтырыуы менән һабантуй айырылып тора. Хәҙерге ваҡытта һабантуй башҡорттоң ғына милли байрамы түгел, Башҡортостанда йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да уртаҡ һәм яратҡан байрамына әүерелде.

Башҡорт һабантуйы тураһында тәүге мәғлүмәттәрҙе рус ғалимдары Георгиҙың, Лепёхиндың хеҙмәттәренән табырға була. Георги, мәҫәлән, башҡорт һабантуйы тураһында

ентеклəп яҙғандан һуң, сирмештəрҙə лə (мариҙарҙа) шуға оҡшаш байрам булғанлығын əйтə. Уның яҙмаларынан күренеүенсə, шул заман һабантуйының тамашалары, эстəлеге хəҙерге һабантуйҙарҙа ла һаҡланған.

Һабантуйҙы төрки халыҡтарының байтағы байрам итə. Башҡорт менəн татарҙан тыш, ул нуғайҙарҙа, ҡумыҡтарҙа, ҡарасай-балҡарҙарҙа бар. Ҡайһы бер айырмалы яҡтары булһа ла, уның йөкмəткеһе, нигеҙҙə, бер төрлө.

Һабантуйҙы, Себер яҡтарында йəшəгəн ҡəрҙəш халыҡтарҙың милли байрамдары менəн сағыштырыу, тикшереү уның бик боронғо дəүерҙəрҙə барлыҡҡа килгəн һəм дөйөм бер тамырҙан икəнлеген күрһəтə. Мəҫəлəн, яҡуттарҙа Ысыах, хакастарҙа Тон байрам, тываларҙа Шагаа, алтайҙарҙа Сага байрам бер-береһенə бик оҡшаштар.

Тағы ла боронғораҡ замандарға күҙ һалһаҡ, боронғо һундарҙың да беҙҙең һабантуй кеүегерəк байрам үткəреүе тураһында Ҡытай яҙмаларында мəғлүмəттəр һаҡланған. Унан да элегерəк дəүерҙəрҙə шундай уҡ байрамды скифтарҙың, сактарҙың үткəреүе тураһында боронғо гректар яҙып ҡалдырған. Көнсығыш Иран телдəренең береһендə һөйлəшкəн сактарҙың, сарматтар, аландар кеүек үк, башҡорт халҡын формалаштырыуҙа ҡатнашыуы фəндə иҫбат ителгəн, хəҙер быға берəү ҙə шик белдермəй. Тимəк, ата-бабаларыбыҙ борондан үткəреп килгəн милли байрамыбыҙ – һабантуйҙың да йəше бер нисə меӊ йыл иҫəплəнə. Был байрам донъяла мифологик аң хөкөм һөргəн дəүерҙə уҡ формалашҡан. Шуға уның эстəлеген дə башҡорт мифологияһынан сығып аңлатырға кəрəк.

Хəҙерге һабантуйҙар, яҙғы сəсеү эштəре бөткəс, ошо эштəргə йомғаҡ яһау кеүегерəк үткəрелə. Элек иһə башҡорттар һабантуйҙы, ҡар иреп, тау биттəрендə йəшел үлəн ҡалҡып, ағастарҙа бөрөлəр тулыша башлағас, үткəрер булған. Ул, башҡорттарҙың боронғо календарь байрамы булараҡ, тəбиғəттең терелеүен, тормоштоң яңырыуын һынландырған тамашаларҙан торған. Яҙ көндəре тəбиғəт ҡышҡы йоҡонан уянып, донъя яңырған саҡты бик күп халыҡтар байрам иткəн.

Ат сабышы (бəйге), йүгерешеү, көрəш, бейек бағана (һырғауыл) башына үрмəлəү, көршəк ватыу, бер яҡ башы ергə ҡыя-латып ҡаҙып ултыртылған, икенсе башына аҡ тəкə бəйлəп ҡуйылған, сайҡалып торған бүрəнə буйлап үтеп, шул тəкəне алырға тырышыу, ике аяҡты ла тоҡҡа тығып йүгерешеү, күсəрендə əйлəнеп торған бүрəнəгə ултырып, тоҡ менəн

һуғышыу кеүек тамашалар – башҡорт һабантуйының мотлаҡ үткәрелергә тейешле ритуалдары. Борон замандарҙа был тамашаларҙың мәғәнәһе һәр кем өсөн аңлайышлы булған. Уларҙың теүәл үтәлеше халыҡтың именлегенә йоғонто яһай, тип ышанғандар боронғолар. Уларҙың уйлауынса, был тамашаларҙы ипле, тәртипле донъя яралған саҡта уҡ үҙҙәренең иң боронғо ата-бабаһы Урал батыр башҡарған. Урал батыр өсөн улар тамаша ғына түгел, ә бөтә йыһанды солғап алған хаостан (дейеү, аждаһаларҙан) азат итеп, донъяны кешеләр һәм бүтән тере йәндәр йәшәрлек хәлгә килтереү өсөн көрәш булған. Ваҡыт үтеү менән, һабантуйҙың мифологик нигеҙҙәре лә, уны үткәреүҙең төп сәбәптәре лә онотолған, һәм ул матур, мауыҡтырғыс бер тамаша һымаҡ ҡына булып ҡалған.

Боронғо замандарҙа, һабантуйҙағы батырҙар көрәшен аҡ, изге көстәрҙең яуыз ҡара көстәргә ҡаршы көрәше, тип аңлағандар. «Урал батыр» эпосында Урал батыр Ҡатил батша иленә барып сыҡҡас, үгеҙ менән көрәшә һәм еңә, ундағы бөтә ҡара көстәрҙе юҡ итә. Батырҙың үгеҙ менән көрәше башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә осрай. Быңдай көрәш, әкиәт батыры кәләш алыр алдынан, уны һынар өсөн үткәрелгән. Үгеҙ менән көрәш, ғөмүмән, төрки халыҡтарҙа бик борондан килгән йола. Бында үгеҙ ҡышты һынландырған, теге донъяның символы булған. Шуға күрә Урал батырҙың үгеҙ менән көрәшеүен теге донъя, ҡараңғылыҡ, яуызлыҡ менән көрәшеүе, тип аңларға кәрәк. Урал үгеҙҙе еңә, тимәк, яҡтылыҡ, изгелек еңә. Ваҡыт үтеү менән, был тамашаның төп мәғәнәһе онотолған. Аҙаҡ үгеҙҙе көрәшсе алмаштырған. Яҡуттарҙа был тамашаның төп мәғәнәһе өлөшләтә XIX быуатта ла һаҡланған була әле: көрәшселәр ат, үгеҙ тиреһе ябынып, йәғни атты, үгеҙҙе һынландырып көрәшкәндәр.

Борон һабантуйҙа аяҡтарҙы тоҡ эсенә тығып йүгерешеүҙең дә үҙ мәғәнәһе бар. Хәҙер ул көлкөлө бер тамаша һымаҡ ҡабул ителә. Башҡорт этнографияһында ярымтыҡ, йәғни һыңар аяҡлы, шүрәле кеүек кешеләргә зыян килтерергә маташыусы мифологик заттар тураһында бик күп легендалар, риүәйәттәр бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған. Боронғо кешеләрҙең ышаныуҙары буйынса, ана шул ярымтыҡ тигәндең күҙе лә, аяғы ла тик берәр генә булған. Улар төндә атлап йөрөргә ратҡандар, имеш. Зәғифлек, боронғоларҙың уйлауынса, теге донъя менән бәйләнеште аңлатыусы бер символ. Ә теге донъя иһә ҡыш менән бәйле. Башҡорт ҡобайырҙарындағы «ҡара

ерҙең үлгәне – ҡар аҫтында ҡалғаны» тигән юлдарҙан ҡарҙың, ҡыштың үлем менән бәйле булыуы аңлашыла. Ҡыш менән үлемдең борон синоним булараҡ йөрөүе башҡа халыҡтарҙың да фольклорында күренә. Башҡорт әкиәттәрендә Йүгерек батыр әбей менән ярыша. Был ярышты ла һабантуйҙа тоҡ кейеп йүгереү менән бәйләп ҡарарға кәрәк. Бында әбей иҫкене, үткән ваҡытты һынландыра, ә Йүгерек батыр яңы тыуып килгән ваҡытты символлаштыра. Алтай, Саян тауҙары буйында йәшәүсе төрки телле халыҡ йыл аҙағындағы бер айҙы әле лә «Ҡортҡа» йәки «Ҡортҡа айы» тип атай. Боронғоларҙың ҡарашынса, әбей, ғөмүмән, ҡарттар, зәғифтәр, шул иҫәпкә инеүсе ярымтыҡ, шүрәле кеүектәр – бөтәһе лә үткән заман – иҫке менән бәйле заттар. Тимәк, һабантуйҙа тоҡ кейеп йүгереүҙе Йүгерек батырҙың әбей менән, йәки ярымтыҡ, шүрәле кеүек заттар менән ярышының символик бер күренеше тип аңларға кәрәк. Һабантуйҙа аяҡтарға тоҡ кейеп йүгерергә маташыу ана шул ярымтыҡты, һыңар аяҡлылыҡты күрһәтергә тырышыу ул. Хәҙер ул, әлбиттә, көлкө тыуҙырыусы ҡыҙыҡ бер тамаша һымаҡ ҡына ҡабул ителә.

Боронғо ышаныуҙар буйынса, теге донъяла ожмахҡа эләгеү өсөн, сират күпере аша үтергә кәрәк. Был күпер аша аҡ тәкә үҙ ғүмерҙәрендә тик яҡшылыҡ, изгелек эшләгән кешеләрҙе генә үткәреп ебәрә, имеш. Халыҡ телендә әле лә бик ныҡ өлкәнәйеп, йәшәргә күп ҡалмаған кеше тураһында «аяғына аҡ тәкә бәйләнгән» тигәнде ишетергә була. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен теге донъяла сират күпере аша үтергә күп ҡалмаған, тип аңларға кәрәк. Һабантуйҙа ергә ҡыялатып ҡаҙып беркетелгән, сайҡалып торған бүрәнә аша үтеп осона бәйләнгән тәкәне призға алыуҙы, ана шул сират күпере аша уҙып, ожмахҡа эләгеүҙең символик бер һынландырылышы тиергә була. Теге донъяла ниндәйҙер күпер аша үтеү тураһындағы ырым-ышаныуҙар бик күп халыҡтарҙа бар.

Һабантуйҙың тағы бер мәҙәге – күҙҙәрҙе бәйләп көршәк ватырға маташыу. Быны да башҡорт мифологияһында сағылышы бар. Яңы ваҡыт башланғанда, иҫке әйберҙәрҙән ҡотолоу, уларҙы ватыу, онтау йолаһы бик күп халыҡтарҙа бар. Был йола Европа, Урта Азия халыҡтарында, яңы йыл тыуғанда, үҙенсә бер байрам шаярыуы булараҡ әле лә киң таралған. Уның мәғәнәһе иҫкене бөтөрөп, яңыға юл асыуға, йәғни иҫке китмәй тороп, яңы килмәй, тигәнгә ҡайтып ҡала. Башҡортта әле лә «Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй» тигән мәҡәл йәшәп килә.

Һабантуйҙа бейек бағана (һырғауыл) башына менеп бүләк алып төшөүгә лә башҡорт мифологияһында аңлатма табырға була. Боронғоларҙың ҡарашынса, донъяның үҙәгендә Донъя тирәге (Донъя ағасы) үҫә, имеш. Был ағас яҡты донъяны теге (аҫҡы) донъя менән үрге (күк) донъяны тоташтырып тора икән. Ағастың тамыры аҫҡы донъяла, ә башы үрге донъяла. Ағастың олоно шул донъяларҙы тоташтырып тора. Был ағастың тамырында бик ҙур бер йылан оялаған, ә башында Сәмреғош оя ҡорған. Хәтерегеҙҙәлер, Аҡъял батыр Сәмреғош балаларын шул йыландан ҡотҡарғас, Сәмреғош уны теге (ер аҫты) донъяһынан был (яҡты) донъяға алып сыға. Һабантуйҙағы һырғауыл ана шул Донъя ағасын символлаштыра. Был бағананың һырғауыл (һырғай тип тә әйтәләр) тип аталыуы беҙҙе ҡәрҙәш халыҡтар донъяһына алып китә. Себерҙә йәшәүсе төрки телле халыҡтарҙа «серге ҡуйыу» тигән йола бар. Серге – ат бәйләй торған бағана. Ул донъя терәге, йәғни Донъя ағасының символы булып тора. Борон был бейек бағанаға (һырғауылға, һырғайға) менеүҙе, күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән күрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр. Ошоға оҡшаш йола үзбәк, тажик суфыйҙарында әле лә бар. Улар йылына бер тапҡыр Науруз байрамында, майҙан уртаһына бейек бағана ҡуйып, башына яңы кейем эләләр ҙә, бағана башына менеп, иҫке кейемдәрен яңыға алмаштырып төшәләр. Бағана башына менеүҙе улар, күккә күтәрелеп, унда Алланың үҙе менән осрашыу тип иҫәпләйҙәр. Ошондай уҡ Донъя ағасына менеү йолаһы боронғо һиндтарҙа ла булған. Быны улар Алланың үткән юлынан үтеү тип аңлатҡандар. Ошоға оҡшаш йолалар донъялағы башҡа күп кенә халыҡтарҙа әле лә бар. Шуға күрә башҡорттарҙың һабантуйҙа һырғауыл башына менеп бүләк алып төшөүҙәрен, күктәге Тәңреләре янына менеп, унан фатиха алып, яңырып төшөү тип аңларға була.

Шулай итеп, һабантуйҙа йола буйынса үтәлгән һәр тамашаның тәрән йөкмәткеһе бар. Улар боронғо замандарҙа ниндәй ҙә булһа мәғәнә менән башҡарылған. Был боронғо байрамыбыҙҙың төп мәғәнәһе донъялар имен, тәртипле торһон, тигән изге теләктәргә ҡайтып ҡала. Тик ваҡыт үтеү менән, уларҙың тәүге мәғәнәләре онотолоп бөткән, һәм беҙ бөгөн һабантуйҙы күңел асыу байрамы булараҡ ҡына ҡабул итәбеҙ. Шулай ҙа ул халҡыбыҙҙың бик борондан килгән төп байрамы булып тора. Уны боронғо ата-бабаларыбыҙ булған сак, сармат, аландар,

һундар ҙа байрам иткән. Беҙ, башҡорттар, уларҙың тура-нан-тура вариҫтары булараҡ, был традицияны бөгөн дә дауам итәбеҙ.

**1.** Тексты ентекләп өйрәнегеҙ. Унда автор һабантуйҙа үткәрелгән ниндәй тамашалар тураһында һөйләй?
**2.** Текста һабантуйҙың тарихына бәйле ниндәй мәғлүмәттәр килтерелә?
**3.** Һабантуйға оҡшаш байрамдар ниндәй халыҡтарҙа бар?
**4.** Һеҙҙең яҡта һабантуйҙар нисек үтә? Үҙегеҙ ҡатнашҡан һабантуй тураһында һөйләгеҙ.
**5.** Нимә ул сират күпере? Ололарҙан һорап, шул турала белешмә төҙөгөҙ.
**6.** Текста ниндәй халыҡтар телгә алына? Улар тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
**7.** Тайфур Сәғитовтың «Һабантуй» романы менән танышығыҙ.
**8.** Һабантуйға арналған ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ?

### «Теҙмә ҡушма һөйләм» темаһы буйынса эштәр һәм һорауҙар

1. Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең төп билдәһе.

2. Теҙмә ҡушма һөйләм эсендәге ябай һөйләмдәр араһында ниндәй мәғәнәле бәйләнештәр була ала?

3. Теҙмә ҡушма һөйләм эсендәге һөйләмдәр бер-береһенә нисек теркәләләр?

4. Теҙмә ҡушма һөйләм тураһында ҡағиҙә сығарығыҙ.

**62-се күнегеү.** Бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡайҙың шиғырын уҡығыҙ.

### ТЫУҒАН АУЫЛ

Тау башына һалынғандыр беҙҙең ауыл,
Бер шишмә бар, яҡын беҙҙең ауылға ул;
Ауылыбыҙҙың йәмен, һыуы тәмен беләм,
Шуға күрә һөйәм йәнем, тәнем менән.

Иҫтән сыҡмай бында минең күргәндәрем,
Шатлыҡ менән уйнап үткән ғүмер һөргәндәрем;
Ағай менән бергәләшеп ҡара ерҙе
Һуҡа менән йыртып-йыртып йөрөгәндәрем.

Был донъяла, бәлки, күп эштәр күрермен,
Билдәһеҙҙер – ҡайҙа ташлар был тәҡдирем;
Ҡайҙа барһам, ҡайҙа торһам, нишләһәм дә,
Хәтеремдә мәңге ҡалыр тыуған ерем.

**1.** Беренсе строфанан теҙмә ҡушма һөйләмде табығыҙ.
**2.** *Ғүмер һөргәндәрем, һуҡа, тәҡдир* һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

**Эйәртеүле ҡушма һөйләм**

Эйәртеүле ҡушма һөйләм баш һөйләмдән һәм эйәрсән һөйләмдәрҙән тора.

Теҙмә ҡушма һөйләм рус телендәге сложносочинённое предложение исемендәге һөйләмдән әллә ни айырылмай тигәйнек.

Ләкин эйәртеүле ҡушма һөйләм был ике телдә бербереһенән ныҡ ҡына айырыла. Рус телендә баш һөйләм (главное предложение) менән эйәрсән һөйләмдең (придаточное предложение) сиктәре асыҡ ҡына күренеп тора.

Сөнки эйәртеүле ҡушма һөйләмдә теркәүес һүҙҙең (союзное слово) булыу – мотлаҡ, ә уға ҡарап, эйәрсән һөйләмде лә табып була.

Ә башҡорт телендә эйәрсән һөйләм күпселек осраҡта баш һөйләмгә ҡылым формалары, килеш ялғауҙары, бәйләүестәр менән бәйләнә. Теркәүес һүҙҙәре булған эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр башҡорт телендә лә бар.

Миҫалдарҙы сағыштырығыҙ:

1. Теркәүес һүҙҙәре булған эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр: *Кем эшләмәй, шул ашамай. Кем дә кем еңә, шуға бүләк бирелә. Ҡасан эшең бөтә, шунда ҡайтырһың.*

Күренеп тора: был һөйләмдәр телмәрҙә йыш осрамай.

2. Эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә ҡылым, килеш формалары менән бәйләнә.

*Хәҙерге һабантуйҙар, яңы сәсеү эштәре бөткәс, ошо эштәргә йомғаҡ яһау кеүегерәк үткәрелә.*

*Яңы ваҡыт башланғанда, иҫке әйберҙән ҡотолоу йолаһы бар.*

*Иҫке китмәй тороп, яңы килмәй.*

*Берәү үлмәй (-енсә), берәү көн күрмәй.*
*Был байрамдарҙың төп мәғәнәһе, донъялар имен торһон, тигән изге теләктәргә ҡайтып ҡала.*
*Һабантуйҙы боронғо ата-бабаларыбыҙ булған сармат, аландар байрам иткән.*

Күренеүенсә, былдай эйәрсән һөйләмдәрҙең барыһы ла баш һөйләмдән тыныш билдәһе менән айырылмай. Тағы ла былдай эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә иткәндә, теркәүес һүҙҙәр мотлаҡ була:
*Сабантуй праздновали и сарматы, и аланы, которые являлись нашими древними предками.*

3. Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүестәр ҙә, ярҙамсы исемдәр ҙә бәйләп килә ала.
*Тамашаларҙың теүәл үтәлеүе халыҡтың именлегенә йоғонто яһай, тип ышанғандар боронғолар. Был тамашаларҙы, донъя яралған саҡта уҡ, иң боронғо ата-бабабыҙ Урал батыр башҡарған. Ваҡыт үтеү менән, һабантуйҙың мифологик нигеҙҙәре лә, сәбәптәре лә онотолған.*

**63-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Мәғәнәһе буйынса һөйләшегеҙ. Ошо кескәй генә ваҡиғаның иллюстрацияһын яһағыҙ (кем нисек булдыра алған тиклем). Текста бер эйәртеүле ҡушма һөйләм бар, шуны табығыҙ, грамматик нигеҙҙәрен билдәләгеҙ, бәйләнеү сараһын күрһәтегеҙ.

### Еләк көсө

Шундай лаҡап һөйләйҙәр. Башҡорт егетен дошмандары баҫтыра. Бына егет бейек ҡая ситенә килеп етә. Тау-таш араһында үҫкән егет күп уйлап тормайынса һикерә һәм һуңғы мәлдә ҡаяның алғараҡ сығып торған бер ташына тотоноп өлгөрә. Егет хәҙер ҡая өҫтөндәге дошмандарына күренмәй, ләкин уға ла бер ҡайҙа ла китергә мөмкинлек юҡ. Өҫтә – дошмандар, түбәндә – упҡын. Ҡотолоу юлы күренмәй. Шул саҡ егеттең күҙенә таштар араһына йыйылған йоҡа ғына тупраҡта үҫеп ултырған еләк күренеп ҡала. Һәм йәнһеҙ таштар араһындағы ошо бәләкәй генә тормош емеше егеткә көс өҫтәгәндәй була. Ул аяҡтарына баҫырға уңайлыраҡ урын таба, тотонған ташына ҡулдарын алмашлап йәбешерлек мөмкинлек ала.

Һуңғы сиккә етеп арыһа ла, упҡын өҫтөндә аҫылынып торорға көс таба. Һәм дошмандарының, уны үлгәнгә һанап,

кире киткәндәренән һуң, ошо еләк биргән йәшәү көсө менән үрмәләп өςкә күтәрелә.

**64-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһенә ярашлы һорауҙар төҙөгөҙ. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр юҡмы? Эйәрсән һөйләмдәргә һорауҙар ҡуйығыҙ.

### Андыҙ

Был оҙон һабаҡлы, ҙур япраҡлы, сәскәһе көнбағышҡа оҡшаған үлән йылға буйҙарындағы туғайҙарҙа үςә. Русса исеме – **девясил.** Дауаланыу өсөн, көҙ еткәс, андыҙҙың тамырын ҡаҙып алалар. Андыҙ тамыры дөрөς киптерелһә, уның файҙалы матдәләре өс йылға тиклем һаҡлана.

Андыҙ тамырының төнәтмәһен, ашҡаҙан, эсәк юлдарында төрлө ауырыу тыуҙырыусы бактериялар, ҡылйыландар ояларғанда, ҡулланалар. «Андыҙ барҙа, ат үлмәς», – ти халыҡ. Аттың аш һеңдереү ағзалары насар эшләгән саҡта ла, беҙҙең ата-бабалар уға андыҙ тамыры төнәтмәһен эсергәндәр. Рустар, андыҙ туғыҙ ауырыуға дауа, тип иςәпләгәндәр. Башҡорттар ҙа, андыҙ – мең ауырыуға дарыу, тиҙәр.

*Дәүләт Мәһәҙиев*

### НАУРУЗ БАЙРАМЫ

Науруз – ауыл хужалығы эшсәндәренең байрамы. Ул кешенең тәбиғәт менән мөнәсәбәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Науруз көн менән төндөң яҙғы тигеҙләшеү мәлендә – 21 мартта үткәрелә. Тимәк, ул Ерҙең йыллыҡ хәрәкәте менән бәйләнгән. Көнсығыш календары буйынса, был көн – йыл башы. Науруз тигән һүҙ үҙе лә «яңы көн» тигәнде аңлата. Халыҡ яңы көндө билдәләп, яҙғы эштәргә тотона. Тимәк, Науруз – Яңы йыл, Яҙ һәм хеҙмәт байрамы ул.

Науруз – бик борондан килгән байрам. Уның тураһында тәүге мәғлүмәттәр Иранда беҙҙең эраға тиклемге 560–330-сы йылдарҙағы яҙмаларҙа һаҡланған. Көнсығыштың бөйөк ғалимдары Әбү Рәйхан Бируни (973–1048), Ғүмәр Хәйәм (1054–1131) әςәрҙәрендә Науруз тураһында тулы мәғлүмәттәр бар.

Көнсығышта, шулай уҡ Европаның ҡайһы бер илдәрендә Наурузды әле лә байрам итәләр, XX быуатҡа тиклем ул Рәсәйҙә лә мосолман халыҡтарының оло байрамы һаналған.

Науруз байрамын уйын-көлкө менән, бүләктәр бирешеп үткәрә торған булғандар. Был көндө кис, ғәҙәттә, өлкәндәр бала-сағаға, үҫмерҙәргә риүәйәттәр, әкиәттәр һөйләгән, ҡобайыр, бәйет әйткән. Тимәк, байрамдың йәш быуынға халыҡ традицияларын, ата-бабалар тарихын күндереүҙә, уларҙа ватансылыҡ тойғоho тәрбиәләүҙә әһәмиәте ҙур булған.

1. Науруз байрамы тураһында һөйләгеҙ. Әле ул беҙҙә ни өсөн байрам ителмәй? Әңгәмәләшегеҙ.
2. Түбәнерәк кластарҙа өйрәнгән байрамдарҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, улар араһындағы оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы билдәләгеҙ.
3. Байрамдарға арналған әҙәби әҫәрҙәрҙе табығыҙ.

**Хәтер һандығына...**

Көс һабантуйҙа беленер, эш өмәлә беленер.

Һау кешегә көн дә байрам.

Дәртле күҙҙе йоҡо баҫмаҫ.

Йырҙан ир йәшәрмәһә лә, күңел йәшәрер.

Көсөң барында көрәшеп ҡал, егәрең барҙа ярышып ҡал.

Йыр – йөрәккә ял.

Йыр йырламай күңел баҫылмай.

Туй – йыйын, һый ҙа уйын.

Ил йолаһына хан да буйһона.

# УРАЛЫМДА ҮҪКӘН, АЙ, ҠУРАЙЫМ...

*Мәүлит Ямалетдинов*

## МИРАҪ

Ҡалдырмаған ата-бабаларым
Инселәгән алтын тауҙары;
Әммә ҡалған беҙгә ҡомартҡыға
Быуаттарҙай оҙон йырҙары.

Тыуа торған быуындарға атап
Һалдырмаған затлы һарайҙар;
Ҡалдырғандар ләкин мираҫ итеп,
Йыр-моңдарын сәсер ҡурайҙар.

Белгән улар ҡулға йоға торған
Донъя малы айлыҡ икәнен,
Күңелдәргә йоғор ихлас моңдоң
Баһаһы юҡ байлыҡ икәнен.

1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.
2. Әҫәрҙә ата-бабаларҙан ҡалған мираҫҡа ниндәй баһа бирелә? Ни өсөн шағир рухи мираҫты алтын тауҙарынан да, затлы һарайҙарҙан да өҫтөн күрә? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?
3. «Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны» тигән мәҡәл бар. Мәҡәлдең мәғәнәһен үҙегеҙсә аңлатығыҙ. Шул раҫлау менән һеҙ ризамы?
4. «Байлыҡ – бер айлыҡ» тигән темаға фекер алышығыҙ.
5. Шиғырҙы ятлағыҙ.

**65-се күнегеү.** Тарихи-документаль тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөгөҙ. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе табығыҙ,

уларҙың грамматик нигеҙен билдәләгеҙ. Эйәрсән һөйләмдәрҙең ниндәй һорауға яуап биреүен асыҡлағыҙ.

1790–1792 йылдарҙа башҡорт һыбайлы ғәскәре, Рәсәй ҡоралл ы көстәре составында илдең көнбайыш сиктәрен һаҡлап, дозорҙа йөрөнө.

1790 йылдың көҙө башланған саҡта, башҡорт атлыларының беренсе полкынан өсөнсө йөҙө (сотня) Ревель ҡәлғәһенән (хәҙерге Таллин ҡалаһы) Рогервикка юл алды. Рогервикка етәрәк сотник Күсәрбай Аҡсолтанов: «Һай, егеттәр! Эйҙә йырлап ебәрегеҙ!» – тип бойороҡ бирҙе. Ҡәлғәнең ҙур ҡапҡалары асылды – бында дозорҙа йөрөгән башҡорт казактарын ишетеп яҡшы беләләр. Һыбайлылар Рогервик урамдарына йыр менән килеп инделәр.

Тап ошо ваҡытта Салауат, таш карьерында эшен тамамлап, атаһы Юлай эшләгән ат аҙбарына ҡарай атлай ине. Тәүҙә Салауат, башҡорт йыры ныҡ һағыныуҙан ҡолағыма ғына ишетеләлер, тип уйлағайны. Ләкин йыр ысынлап яңғырай, көсәйгәндән-көсәйә, башҡорт һүҙҙәре асыҡтан-асыҡ ишетелә, көйө лә таныш.

Башҡорт ғәскәре ҡәлғәгә килеп ингәнде күргән Салауат ат аҙбарына йүгерә-атлай килеп етте лә был шатлыҡлы хәбәрҙе атаһына ла еткерҙе.

Ҡәлғә коменданты полковник Экбаум башҡорт сотнигы Күсәрбайға: «Каторжандар араһында һеҙҙең яҡташтарығыҙ ҙа бар. Осрашып сәләмдәр еткерергә, һөйләшеп күрешергә теләһәгеҙ, мин ҡаршы түгел», – тип өндәште. Полковник Экбаум, бынан ун һигеҙ йыл элек юлбаҫарҙар һөжүм иткәндә, Юлай Аҙналин ҡотҡарған офицерҙарҙың береһе ине. Уңайы тура килгән һайын, шуға ла башҡорттарға ниндәй ҙә булһа яҡшылыҡ эшләргә тырыша ул.

Һәм шул уҡ кистә башҡорт казактары инде ун биш йыл буйы тыуған яҡтарҙан хәбәр алмаған, башҡорт һөйләшеүен, йырын ишетмәгән, һары һағышҡа батҡан башҡорт каторжандары менән осрашалар. Һорауҙар... һорауҙар, күңел тулыуҙар, йәш ҡатыш шатланыуҙар, ҡурай моңо...

Башҡорт атлы казактары, үҙҙәре дозор хеҙмәтен башҡарған ваҡытта, бындай осрашыуҙарҙы йыш үткәрҙеләр. Һәм уларҙың һәр береһендә Салауат менән уның атаһы Юлай, Ҡәнзәфәр Усаев ҡатнашты.

*(Ғ. Вәлиуллин буйынса)*

**66-сы күнегеү.** Айырыу билдәһе булған һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

Тәьмин, тәьҫир, мәсьәлә, Мөьминә, маъмай, әьем.

**67-се күнегеү.** Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын яҙығыҙ.

**68-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Уға ниндәй исем бирерһегеҙ? Шиғырҙа дүрт һөйләм, бөтәһе лә ҡушма һөйләм. Уларҙың төрөн билдәләгеҙ. Тәүге ике юлды рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ҡыҙарып ҡояш ҡалҡҡанды
Һайрап ҡаршылай ҡоштарың.
Тонйорап ҡояш батҡанды
Һайрап оҙата ҡоштарың.
Һине данлай йырҙарым,
Һине маҡтай йырҙарым.
Һин бит минең төйәгем,
Һине һөйә йөрәгем.

*(С. Юлаев)*

*Шәйехзада Бабич*

## ҠУРАЙҠАЙҒА

Һыҙҙырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын,
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.
Һөйлә Һаҡмар, Яйыҡ, Ашҡаҙарҙы,
Һөйлә йәмле Урал буйҙарын;
Һөйлә ожмах кеүек сәхрәләрҙе,
Йәйелеп ятҡан йылҡы, ҡуйҙарын.
Һөйлә, йәйләүҙәрҙә йәйҙе йәйләп,
Ҡырҙан ҡырға күсеп ҡуныуҙы;
Һөйлә, ҡашмау кейеп, селтәр бәйләп,
Ҡырҙа йырлап йөрөгән һылыуҙы…
Һөйлә, тарихыңдан, яуҙарыңдан,
Һөйлә ҡанлы башҡорт болаһын;
Һөйлә олатайҙар хәлдәренән
Йөрөш, торош, заңын, йолаһын…
Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан
Һуғарылды ҡара ҡан менән;

Сыҡтыҡ ҡара көстән ҡанды эскән,
Һуғарылһын инде йәм менән!
Яугир ирҙәребеҙ нисә заман
Аҡ тирмәлә ҡылыс ҡайраны;
Шалтыр-шолтор сыңлап һауыт-һайман,
Өҫтөбөҙҙә һөңгө яйнаны.
Нисә заман, бахыр ҡурайҡайым,
Ғазраилдың йырын йырланың;
Күпме ҡыйын күреп, күпме вайым,
Үкһеп-үкһеп өҙөлөп иланың.
Килде заман, инде шатлан, ҡурай,
Йәмле тауышың илгә яңраһын!
Ҡыуанып китһен урман, сәхрә, туғай,
Буҙ турғайҙар ҡыуанып һайраһын!
Уйна, ҡурай, күктән йәм шаулаһын,
Нур яйнаһын баштар өҫтөндә!
Йәм яҡтыһы юйһын ҡан шәүләһен,
Гөлдәр үҫһен таштар өҫтөндә!
Күкрәтеп, геүләп, һайрап, өҙләп,
Килде, ҡурай, уйнар миҙгелең,
Яҡты уйҙар һалып, дәртен ҡуҙғап,
Күккә ашыр йөрәктәр һиҙгерен!

1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.
2. Шағир ҡурайҙың халыҡ тарихында уйнаған ролен нисек баһалай?
3. Ш. Бабичтың үҙегеҙгә билдәле булған әҫәрҙәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, уларҙы берләштереүсе төп мотивты табығыҙ.

*Ҡәҙим Аралбай*

## МӘШҺҮР ҠУРАЙСЫ

1991 йылда музыка һөйөүселәр һәм республика йәмәғәтселеге, 20-се йылдар урталарында Мәскәү, Париж, Стокгольм сәхнәләрендә сығыш яһап, донъяны таң ҡалдырған оҫта ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыу тантанаһын киң билдәләне.

Иҫәнбаев Йомабай Мотиғулла улы Хәйбулла районы Үрге Смаҡ ауылында тыуған. Йәштән үк йыр яратҡан. Байҙарҙа ялсылыҡта көтөү көткәндә, ҡурайҙа уйнарға өйрәнә. Ун ете йәшендә инде ул башҡорт халыҡ моңдарынан йөҙҙән ашыу

көйҙө ҡурайҙа иркен уйнай белгән. Оҙон буйлы, киң күкрәкле, төҫкә һылыу егет һабантуйҙарҙа, тирә-яҡта үткәрелгән йыйындарҙа, байрамдарҙа тәжрибәле ҡурайсылар менән ярыша башлай.

1925 йылдың июнь айында Йомабай Иҫәнбаевты, Парижда асыласаҡ Бөтә донъя декоратив сәнғәт күргәҙмәһенә ебәреү өсөн, Өфөгә саҡырып алалар. Бер нисә көндән ул илебеҙҙең төрлө яҡтарынан йыйылған халыҡ таланттары менән бергә Мәскәүҙә була. Парижда буласаҡ концерттар программаһы Мәскәү тамашасыларына ике тапҡыр күрһәтелә. Милли республикаларҙан килгән артистарҙың, бигерәк тә ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың, сығышы юғары баһа ала. Был концерттарҙа ул «Урал», «Буранбай» һәм «Перовский» көйҙәрен башҡара.

Францияның баш ҡалаһындағы тәүге концерт 1925 йылдың 20 июлендә була. Совет артистары бөтәһе 11 концерт бирә. Париж тамашасылары һәм музыка белгестәре ҡурайҙы бик оҡшата, уның менән нык ҡыҙыҡһына. Концерт ваҡыттарында, башҡа музыка ҡоралдарына бер генә номер бирелһә, ҡурайға ике номер бирелә. Ҡурайсыны оҙаҡ алҡышлап, һәр ваҡыт бер нисә тапҡыр сығарып уйнатҡандар. Бер ваҡыт бер француз, сәхнәгә күтәрелеп, ҡурайҙың эсендә ниндәй тылсым барлығын белеү өсөн, яҡтыға үтә ҡарап, уны тикшерә икән. Шул урында Йомабай, Уралдан тамыры менән йолҡоп алып килгән таҡыя башлы ҡурайҙы тамашасылар алдында уҡ бәкеһе менән тиҙ генә ҡырҡып алып, биш тишек яһап, «Байыҡ» көйөн уйнап та ебәрә. Шул саҡ сәхнәгә бер гүзәл ханым сыға ла, ҡулындағы алтын балдағын Йомабай ағайҙың бармағына кейҙереп, уның ҡулын ҡыҫа.

Башҡорт ҡурайсыһы Йомабай Иҫәнбаев менән ҡаҙаҡтың оҫта йырсыһы һәм думбыраһыһы Әмре Ҡашаубаевты Сорбонналағы фонограмма кабинеты мөдире профессор Перно, үҙенә ҡунаҡҡа саҡырып, уларҙың көйҙәрен фонограф таҫмаһына яҙып ала. Фонографҡа яҙылғанда, Йомабай Иҫәнбаев «Буранбай», «Урал», «Ҡара юрға» һәм «Байыҡ» көйҙәрен уйнаған.

Париж күргәҙмәһендә башҡарған көйҙәре өсөн арҙаҡлы ҡурайсы ҡиммәтле әйберҙәр һәм дипломдар менән бүләкләнә.

Өфөгә ҡайтҡас, Йомабай Иҫәнбаевты Башҡорт күсмә драма театрына ҡурайсы-артист итеп эшкә алалар, бер-ике йыл эсендә ул Башҡортостандың бөтә кантондарын йөрөп сыға, сәхнәлә ҡуйылған «Салауат батыр», «Ашҡаҙар»,

«Ҡарағол», «Ынйыҡай менән Юлдыҡай», «Шәүрәкәй» пьесаларында ҡурайсы ролдәрен башҡара.

Был осорҙа Башҡорт драма театрында өс ҡурайсы – Ғиниәт Ушанов, Хәмит Әхмәтов һәм Йомабай Иҫәнбаев эшләй. Һәр ерҙә спектакль алдынан, өс ҡурай менән сығыш яһап, улар халыҡтың иң яратҡан моңдарын уйнай. Бер аҙҙан был ҡурайсылар триоһы, Мәскәүгә барып, Ҙур театр сәхнәһендә лә сығыш яһап ҡайта.

1927 йылдың йәйендә Германияның Майндағы Франкфурт ҡалаһында үткәрелгән Бөтә донъя музыка күргәҙмәһенә лә Башҡортостандың данлыҡлы ҡурайсыһы Йомабай Иҫәнбаев ебәрелә. Ул бында «Урал», «Буранбай», «Сәлимәкәй» һәм «Сыңрау торна» көйҙәрен уйнай. Ҡурайсыны тамашасылар, көслө алҡышлап, тағы ла өс тапҡыр саҡырып сығара. Сәхнәнән йәнә башҡорт моңдары «Аҡ мәсет», «Байыҡ», «Ҡара юрға» яңғырай.

Германияның Европа концерттары бүлеге хеҙмәткәре Лебидондың саҡырыуы буйынса бер төркөм совет артистары Берлинға килә һәм унда биш концерт бирә. Артабан гастролдәр Германияның Гамбург, Росток, Шверин, Ганновер һәм башҡа ҡалаларында, унан инде Швецияның Стокгольм, Гётеборг, Вестерос, Венерсборг һәм башҡа 22 ҡалаһында үтә. Бөтәһе 27 концерт бирелә. Биш айға һуҙылған был оло сәфәрендә, Европа ҡалаларында ойошторолған 54 концертта ҡатнашып, Йомабай Иҫәнбаев тарафынан 55 боронғо башҡорт көйө уйнала.

Был концерттарҙа даны донъяға таралған йырсы Ирма Яунзем да ҡатнаша. Ул «Ҡурай» һәм «Абдрахман» тигән башҡорт халыҡ йырҙарын башҡорт һәм рус телдәрендә башҡара. Ҡурайҙа уға Йомабай Иҫәнбаев ҡушылып уйнай. Яунзем был йырҙарҙың һүҙҙәрен Йомабайҙан яҙып ала, көйҙәрен дә унан өйрәнә. Был йырҙарҙы башҡарғанда, ул сәхнәгә һәр ваҡыт башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кейемендә сыға.

Даны бөтә донъяға таралған мәшһүр ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаев 1929 йылда, тыуған яҡтарына ҡайтып, бер төркөм ауыл ярлылары менән яңы ауылға ойошоп, колхоз төҙөшә. Уны, донъя күргән, алдынғы ҡарашлы кешене, колхоздың рәйесе итеп һайлайҙар. Ләкин 1940 йылда, нахаҡҡа ғәйепләнеп, Йомабай Иҫәнбаев ҡулға алына. Уның иң һуңғы хәбәре 1941 йылда Ульяновск ҡалаһынан фронтҡа китеп барыуы тураһында яҙған хаты була.

Йомабай Иҫәнбаев менән Ғиниәт Ушановтарҙан һуңғы быуын ҡурайсылар – Хәмит Әхмәтов, Ғалиастан Шәмсетдинов, Рәхмәт Бүләкәнов менән Мөхәммәт Рәхмәтуллин, Ғата Сөләймәнов менән Заһир Исмәғилев, Кәрим Дияров менән Ишмулла Дилмөхәмәтовтар – Башҡортостандың данлыҡлы ҡурайсыларына әүерелде.

Тылсымлы ҡурай моңон Болгария һәм Һиндостанда, Япония һәм Финляндияла, Афғанстан һәм Иранда ла, Африка менән Америка илдәрендә лә яңғыратып, атаҡлы ҡурайсылар Ғата Сөләймәнов менән Ишмулла Дилмөхәмәтовтар халҡыбыҙҙың милли сәнғәтен яңы баҫҡысҡа күтәрҙе.

Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы ҡарары менән 1978 йылдан ҡумыҙ, ҡурай һәм өзләү оҫталығы буйынса республика бәйгеһендә еңеүселәргә Йомабай Иҫәнбаев исемендәге приз булдырылды. Был приз лауреаттары араһында исемдәре киң билдәле булған Юлай Ғәйнетдинов, Азат Айытҡолов, Сәйфулла Дилмөхәмәтов, Мөхәмәт Түләбаев, Ишморат Илбәков, Роберт Юлдашев, Рәсүл Ҡарабулатов кеүек ҡурайсылар бар.

1988 йылдан башлап, йәйҙең иң матур көндәрендә мәшһүр ҡурайсының тыуған яғында – «Матрай» совхозы ерендә һәм Хәйбулла районының үҙәге Аҡъярҙа – Йомабай Иҫәнбаев көндәре үткәрелә.

**1.** Тексты уҡып, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Йомабай Иҫәнбаевтың биографияһына ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**2.** Йомабай Иҫәнбаев башҡарған көйҙәрҙең исемдәрен яҙып алығыҙ. Был йырҙарҙы ишеткәнегеҙ бармы? Уларҙың яҙмаларын табып тыңлағыҙ.

**3.** Йомабай Иҫәнбаев булған илдәрҙең, ҡалаларҙың исемдәрен картанан табығыҙ. Был илдәр һәм ҡалалар тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.

**4.** Йомабай Иҫәнбаев традицияларын дауам иттереүсе күренекле ҡурайсыларҙың исемдәрен яҙып алығыҙ. Улар тураһында материалдар йыйып, «Башҡорт ҡурайы» альбомына теркәгеҙ.

**5.** Һеҙҙең ҡурай уйнарға өйрәнгегеҙ киләме? Мөмкинлек табып, быны эшләп ҡарағыҙ.

**6.** Берәй билдәле ҡурайсы менән осрашыу ойоштороғоҙ.

## РӘШИТ СОЛТАНГӘРӘЕВ

*(1935–2000)*

Күренекле прозаик Рәшит Ғимран улы Солтангәрәев 1935 йылдың 25 декабрендә Көйөргәҙе районы Таймаҫ ауылында тыуған. Егерменән артыҡ китап авторы. «Беҙ йәшәгән ер» романы, «Йылы ямғыр», «Тау», «Осто бөркөт» һ. б. повестары, хикәйәләре киң билдәле.

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## ИШМУЛЛА ҠУРАЙСЫ

Һүҙҙе бер хәбәрҙән башлағы килә: башҡорт әҙәбиәтенең ике вәкиле – шағирҙар Муса Ғәли менән Фәүзиә Рәхимғолова – Франция буйлап сәйәхәттә йөрөп ҡайттылар. Ҡайтҡас, улар Парижда ишеткән бына ошо хәбәрҙе һөйләнеләр: Сена йылғаһы аша үткәндә, экскурсанттарҙы оҙатып йөрөүсе гид 1814 йылда башҡорт ғәскәрҙәре торған урынды күрһәткән.

Франция – ҙур ил, Париж – ҙур ҡала. Рәсәй ғәскәрҙәренең, Наполеон армияһын ҡыйратып, Парижға барып инеүенә лә күп ваҡыт үтеп киткән. Билдәле, Тыуған иленең азатлығы өсөн көрәшкән рус армияһы составында башҡорттар күп булған, улар хаҡында күпме ваҡыт үткәндән һуң да, шундай иҫтәлектәрҙең һаҡланыуы – атай-олатайҙарҙың йылдар юя алмаҫлыҡ эҙ ҡалдырып китеүе киләсәк быуын кешеләре өсөн ҡыуаныслы.

Башҡорттар Парижға уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс ҡына түгел, Урал ҡурайын да алып килгәндәр. Уларҙың, ҡурай уйнап, французҙарҙы таң ҡалдырыуы, ә тегеләрҙең, ҡурайҙың ябай үлән генә икәненә ышанмайынса, уны ярып ҡарауҙары хаҡында ла хикәйәттәр бар. Веймарҙа бер ғәскәр башлығының бөйөк немец шағиры Гётеға уҡ-һаҙаҡ һәм ҡурай бүләк итеп ҡалдырыуы хаҡында документ та һаҡланған. Йәғни үҙҙәренең төп вазифаһы менән һуғышсы булған саҡтарҙа ла башҡорттар сәнғәттең көсөн инҡар итмәгәндәр, ә, киреһенсә, шуны файҙаланғандар.

Әйткәндәй, ҡурайсы башҡорттоң Парижға ғына түгел, бөтә Европаға сәйәхәте бер быныҡ менән генә ҡалманы. 1925 йыл. Париж. Бында Бөтә донъя декоратив сәнғәт күргәҙмәһе бара.

Күргәҙмәлә ҡатнашыусыларға ҡурай моңон ишеттереү өсөн, Матрай районының (хәҙерге Хәйбулла) Үрге Смаҡ ауылы башҡорто Йомабай Иҫәнбаев килгән.

Ят ҡурай, ят моң үҙ ғүмерендә бындай инструментты тәү күргән кешеләрҙе хайран ҡалдыра. Хатта залда ултырған бер ҡатын, рәхмәт билдәһе итеп, ҡурайсыға алтын балдағын һалып бирә. Гәзит биттәрендә Йомабайға маҡтау һүҙҙәре яуа.

Йомабай Иҫәнбаев, илдәр гиҙеп ауылына ҡайтҡас, бөтә күргән-ишеткәндәрен дуҫы, ҡурайсы Ишҡәлегә һөйләй. Ишҡәле – Смаҡтан алыҫ түгел Иҫке Яҡуп ауылыныҡы... Ул да, Йомабай кеүек, тирә-яҡта дан тотҡан ҡурайсы. Улар шулай донъя хәлдәре тураһында ла, үткәне, алдағыһы хаҡында ла гәпләшә. Тик шуныһы бар, был мәлдә уларҙың береһе лә, берәй заман Ишҡәленең улы тыуыр ҙа, ата-бабалары кеүек атаҡлы ҡурайсы булыр, Парижға барып йөрөр, тип баштарына ла килтермәгәндер. Улдары тыуһа, ҡурайсы булырына, бәлки, шикләнмәгәндәрҙер, атаһынан күргән уҡ юнған, алма ағасынан алыҫ төшмәй, тиҙәр, ә бына Парижға барып, ата-бабалары йөрөгән ерҙәрҙә йөрөп, халыҡты таң ҡалдырып ҡайтырына, бәлки, хыялдары етмәгәндер.

Уйламаһалар уйламағандарҙыр, әммә шулай килеп сыҡты. 1972 йылда Иҫке Яҡуп ауылы егете, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, мәшһүр ҡурайсы һәм йырсы Ишмулла Дилмөхәмәтов Париждың һигеҙ мең кеше һыйҙырышлы һарайында ҡурай моңон яңғырата ине. Ул бында Башҡортостандан бер үҙе генә түгел, оҫта бейеүсе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Рәшиҙә Туйсина менән килде.

Ул саҡта Париж ҡалаһында СССР халыҡтары сәнғәтенең байрамы булды. Был байрамда бөтә союздаш республикалар, Башҡорт һәм Яҡут автономиялы республикалары, Коряк милли округының таланттары ҡатнашты. Шундай ҙур сәхнәгә сығыу, әлбиттә, Ишмулла Дилмөхәмәтов менән Рәшиҙә Туйсинаның ғына түгел, ә, бәлки, башҡорт милли сәнғәтенең дә оло ҡаҙанышы ине.

Ошо байрамда ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, концертты ҡарарға тип, Парижға, Франция кешеләре генә түгел, самолётҡа ултырып, махсус рәүештә Италиянан, Канаданан, хатта ер сиге Япониянан да килеп сыҡҡандар.

Париждағы Спорт һарайының ҙур сәхнәһе... Прожекторҙың көслө нурҙары ғына сәхнәгә бер һыҙат яҡтылыҡ бирә.

Шул яҡтылыҡта башына ҡама бүрек, өҫтөнә аҡ елән кейгән, ҡулына ҡурай тотҡан кеше күренә. Ул йырлай-йырлай килә:

*Ай Уралым, Уралым,*
*Күгәреп ятҡан Уралым!*
*Нурға сумған түбәһе,*
*Күккә ашҡан Уралым!..*

Салауат Юлаев шиғырына үҙе сығарған көйҙө Ишмулла үҙе үк йырлап та күрһәтә.

Йыр ҡурайға күсә. Залда мөһабәт «Урал» көйө яңғырай. Шунан ҡурай бейеү көйөн һыҙҙырта. Бына, күл ҡамышындай талғын ғына бөгөлөп-һығылып, бейеүсе лә килеп сыға. Оҫта бейеүсе Рәшиҙә Туйсина Париж сәхнәһендә «Заһиҙә» бейеүен башҡара, һигеҙ мең кеше, тып-тын ҡалып, уға ҡарап ултыра.

Моң туҡтала. Бейеүсе башҡорт ҡатындарына ғына хас әҙәплелек менән баш эйә. Кешеләр залды күтәреп сыҡҡандай итеп геүләшә башлай.

Телевидение аша сығыш яһағанда ла, миллиондарса кешеләр уларҙың сәнғәтенә ҡарап һоҡландылар. Париждың «Комба» гәзите шулай тип яҙҙы: «Рәшиҙә Туйсина башҡарыуында «Заһиҙә» бейеүенең бик тә нәфис икәнлеген әйтергә кәрәк. Уның тәңкә, балдаҡтар менән биҙәлгән ҡулдары үҙе бер моң төҫлө. Бейеүсегә ҡурай-флейта аккомпанировать итә. Артист Ишмулла Дилмөхәмәтов флейтала бик матур уйнай һәм шул уҡ ваҡытта бик һоҡландырғыс тауыш менән йырлай». Әлбиттә, француз гәзитенең репортёры Уралда үҫкән таҡыя башлы ҡурайҙы белмәгән һәм шуға ла уны ҡурай-флейта тип атағандыр, шулай уҡ донъяла өҙләү тигән сәнғәттең барлығын да ишетмәгәндер – уны йыр тип атаған. Хәйер, эш ундамы ни! Иң мөһиме – башҡорт сәнғәтен ҡабул иткәндәр, яратҡандар. Ысын сәнғәт ил һәм тел сиктәрен белмәй.

Ишмулла Дилмөхәмәтовтың Парижға ниндәй ҡурай алып барыуын һорағайныҡ, ул ошоларҙы һөйләне:

– Ҡурай бөтә ерҙә лә үҫмәй. Төрлө ерҙә үҫкән ҡурай ҙа төрлөсә була. Һаҡмар буйында Әбеш ауылынан алыҫ түгел (Хәйбулла районы) «Айыу ҡоҙоҡ» тигән бер урын бар. Шул ерҙең ҡурайы шәп. Үҙе төҙ, йыуан һәм оҙон үҫә. Тауышы ла шәп, үҙе түҙем. Түҙем, тип шуға әйтәм, нәҙек ҡурайға минең тын һыймай, бик бирелеп, ғәйрәтләнеп уйнаған саҡта, остары кителеп, ярылып ҡуя. Уйнағанда бит, донъяңды онотоп ебәрәһең. Париж концерттарының береһендә хатта ошо

«Айыу ҡоҙоҡ» ҡурайы ла сатнап сыҡты. Ҡурай сатнаһа, тауышы боҙола.

Ҡурай ярғансы уйнар өсөн, киң күкрәк кенә түгел, ҙур күңел дә кәрәктер, әлбиттә. Был сифаттарҙың бөтәһен дә ул тыуған төбәктә, оҫта йырсыларҙан, ҡурайсыларҙан, атаһы Ишҡәленән алғандыр. Ун дүрт йәшлек Ишмулла далала йылҡы көтөп йөрөгәндә, атаһы Ишҡәле ағай, ҡулына ҡорал тотоп, ҡамауҙа ҡалған Ленинград һағында тора ине. Атыштар тынған арала, бер йорттоң балконына сығып, ҡоралдаштарына ҡурай уйнап ишеттергән мәлдә лә ул, әлбиттә, минең улым да, берәй ваҡыт ошо ҡалаға килеп, ҡурай һыҙҙыртып йөрөр, тимәгәндер.

Тормошта шулай хикәйәткә оҡшаш хәлдәр ҙә булғылай. Ошо көндәрҙән һуң тап сирек быуат үткәс, 1969 йылдың октябрендә, Башҡорт мәҙәниәте көндәрендә Ишҡәле ҡарттың ике улы – профессиональ артист Ишмулла менән тракторсы Сәйфулла Ленинградҡа килделәр. Улар аталары йөрөгән ерҙәрҙә булдылар, атаһының ҡаны тамып ҡалған урамдарҙы үттеләр. Кронштадт моряктары алдында сығыш яһанылар. Ә Киров (элекке Путилов) заводының бер цехындағы ҡыҙыл мөйөштә барған концертта миңә лә булырға тура килгәйне. Шул саҡ завод эшселәренең ҡурайҙы ла ҡайһылай ихлас тыңлауҙарына, ҡайһылай яратып, ҡыҙыҡһынып ҡабул итеүҙәренә шаһит булдым.

Ишмулла Дилмөхәмәтовтың ҡурайын Башҡортостанда, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Кишинёвта ғына түгел, бәлки, Пакистан менән Афғанстанда ла, Япония менән Польшала ла, башҡа илдәрҙә лә хәтерләйҙәрҙер.

Ишмулланың бар булмышы менән үҙ сәнғәтенә бирелгән булыуын, тик шуның менән йәшәгәнлеген әйтмәй булмай. Артистың «Уралым – минең төйәгем» тигән импровизацияһын кем генә яратып тыңламайҙыр. Бында йыр ҙа, ҡурай ҙа, өҙләү ҙә, һамаҡлау ҙа бар. Йырҙы тыңлағанда, сикһеҙ дала, күгәреп ятҡан тауҙар ҙа, ҡара болот баҫҡан күк тә, сыуаҡ көндәр ҙә күҙ алдына килә. Йырсы, ҡурайсы, әйтерһең, үҙ уйын, хәсрәтен, шатлығын, ҡыҫҡаһы – бар күңелен тышҡа сығара ла һала. Был сәнғәт Назар Нәжми әйтмешләй, тик Ишмулла Дилмөхәмәтовтыҡы.

...Концерт бөткәс, Париж тамашасылары, күрәһең, башҡорт йыры менән бейеүенең иҫтәлеге итеп былардан автограф алырға киләләр. Шул ваҡыт артистың нисек итеп бер ниндәй

аккомпанементһыҙ йырлай алыуын һорайҙар. Ишмулла яуап урынына тота ла тағы йырлап күрһәтә. Иҫ киткес күренеш килеп сыға. Тағы ҡул сабалар.

Ҡайһы саҡта Ишмулла Дилмөхәмәтовҡа һинең ҡурайыңдан ҡош һайрауы тауыштары ла, шишмә сылтырауы ла, бөркөт саңҡылдауы ла, япраҡтар шыптырлауы ла ишетелеп ҡалған төҫлө, тиҙәр ине. Эйе, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк барҙыр. Сөнки ул моңдо ла, дәртте лә, илһам менән ҡөҙрәтте лә тыуған тупраҡтан, тыуған ерҙән алды. Шуға ла был сәнғәт тыуған ер ауазы булып ишетелә.

1. Тексты иғтибар менән уҡып, уның йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.
2. Текста *тәңкә* һүҙе бар. Башҡорттарҙа *һум* һүҙе менән бер рәттән аҡса берәмеген белдерә. Ҡаҙағстанда ла аҡса *тенге* тип атала. Был һүҙҙең рус телендә лә *аҡса* мәғәнәһендә йөрөгәнлеген беләһегеҙме? Немецтарҙың элегерәк монеталары *талер* тип аталған. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары көмөш талерҙарҙы (көмөш тәңкәләрҙе) биҙәүес әйбере итеп файҙаланғандар. *Доллар һүҙе* лә ошо талерҙан килеп сыҡҡан, тиҙәр. Ошо мәсьәләләргә һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек? Фекер алышығыҙ.
3. «Алма ағасынан алыҫ төшмәй», «Атаһынан күргән уҡ юнған,..» мәҡәлдәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Икенсе мәҡәлдең аҙағын табып, тултырып яҙығыҙ.
4. Мәҡәләлә ҡурай сәнғәте үҫешендәге күсәгилешлек (преемственность) тураһында һүҙ бара. Йомабай Иҫәнбаев тураһындағы тексты ла файҙаланып, «Ҡурай сәнғәте – кисә һәм бөгөн» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.
5. Ысын сәнғәт ил һәм тел сиктәрен белмәй, ти автор. Һеҙ быны нисек аңлайһығыҙ? Фекер алышығыҙ.
6. Ишмулла Дилмөхәмәтовтың шәхесе, ижады тураһында мәғлүмәттәр туплап, «Ишмулла ҡурайсы» тигән белешмә төҙөп яҙығыҙ.
7. Ишмулла Дилмөхәмәтовтың Салауат Юлаев һүҙҙәренә яҙған «Уралым» музыкаль импровизацияһын авторҙың үҙе башҡарыуында фонояҙманан тыңлағыҙ.

**69-сы күнегеү.** «Ишмулла ҡурайсы» тексынан алынған һөйләм өҙөктәрен тултырып яҙығыҙ. Эйәрсән һөйләмдәргә һорау ҡуйығыҙ.

1. Ҡорал көсө онотолған саҡтарҙа ла, ... . 2. Ун дүрт йәшлек Ишмулла далала йылҡы көтөп йөрөгәндә, ... . 3. Ошо көндәрҙән һуң тап сирек быуат үткәс, ... . 4. Концерт бөткәс, ... .

## Эйәрсән һөйләм төрҙәре

Һөйләм киҫәктәре кеүек үк эйәрсән һөйләмдәрҙең дә исемдәре бар. Эйәрсән һөйләм ниндәй һөйләм киҫәгенең һорауына яуап бирә, ул шул уҡ исемде ала. Мәҫәлән, 69-сы күнегеүҙәге эйәрсән һөйләмдәр **ҡасан?** һорауына, йәғни хәл һорауына, яуап бирә. Был эйәрсән һөйләмдәр барыһы ла **хәл** (ваҡыт) һөйләм була.

**70-се күнегеү.** Эйәрсән киҫәктәр менән эйәрсән һөйләмдәрҙе сағыштырығыҙ, оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын билдәләгеҙ.

Һөйләм киҫәктәре:

1. Ҡайтҡан көндә ямғыр яуҙы.
2. Тыуған ерҙең әреме лә хуш еҫле.
3. Күпте күтәргәнгә күпте өйәләр.
4. Эйелгән ағасҡа ел теймәҫ.

Эйәрсән һөйләмдәр:

1. Беҙ ҡайтҡан көндә ямғыр яуҙы.
2. Атам-бабам тыуған ерҙең һәр ташы ҡәҙерле.
3. Көсө еткәнгә көсөк тә йәбешкән.
4. Башы эйелгәнде ҡылыс сапмай.

**71-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ил, республика исемдәрен алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

*Стан* һүҙе ил мәғәнәһен аңлата икәнде һеҙ, моғайын, беләһегеҙҙер. Бөгөн ошо һүҙ ингән тиҫтәнән ашыу дәүләт һәм республика атамаһы бар. Ҡарағыҙ: Һиндостан, Пакистан, Афғанстан, Ғәрәбстан, Тажикстан, Үзбәкстан, Төркмәнстан, Дағстан, Башҡортостан, Татарстан, Сыуашстан, Ҡарағалпаҡстан.

1. Һиндостан менән Башҡортостан һүҙҙәрендә *стан* һүҙе алдынан ***о*** хәрефе өҫтәлгән. Сәбәбе нимәлә икән?
2. Тәүге ике һөйләм – эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәр ниндәй һорауға яуап бирәләр? Шул ике һөйләмде телдән рус теленә тәржемә итегеҙ. Һөйләмдәр төҙөлөшөндә ниндәй үҙгәрештәр булды?

**72-се күнегеү.** Шиғырҙы уҡығыҙ. Йөкмәткеһе буйынса һөйләшегеҙ. Эйәрсән һөйләмдәр ниндәй һорауға яуап бирә? Уларҙы баш һөйләмгә ҡылымдың ниндәй формаһы бәйләй?

## ҺАРЫ ҺАҒЫШ. АҠ ҠЫУАНЫС

Гәлсәр шишмәмдең һыуҙары һайыҡһа,
Гөлдәремә ҡара ҡырау ҡаныҡһа,
Сағылымда бойоҡһа йор ҡурайым,
Таң алдынан зар илаһа турғайым,
Ҡайынымдың япраҡтары ҡойолһа,
Тупрағымда тәрән яра уйылһа,
Ел һөйләһә әгәр хәүеф хаҡында,
Һары һағыш булыр минең йырымда!
Ишелеп үҫһә туғайҙа үләнем,
Йәшел бәрхәткә төрөнһә биләнем,
Сал бөркөттәр төйәк итһә тауымды,
Ҡоштар һайрап уятһалар таңымды,
Ағиҙелем аҡһа ярһып, алҡынып,
Аҡсарлағым ҡанат ҡаҡһа талпынып,
Тос башаҡтар сайҡалһа киң ҡырымда,
Аҡ ҡыуаныс сыңлап торор йырымда!

*(А. Игебаев)*

Шиғырҙың исемендә ниндәй үҙенсәлек күрәһегеҙ? Һеҙ үҙегеҙ уны нисек атар инегеҙ?

**73-сө күнегеү.** Күпселек ҡиммәтле таштарҙың башҡортса исемдәре лә бар. Танышығыҙ.

гәрәбә – янтарь
гәлсәр (бәлләүер) – хрусталь
гәүһәр – бриллиант
ынйы – жемчуг
фәйрүзә – бирюза
яҡут – яхонт
ҡыҙыл яҡут – рубин
зәңгәр яҡут – сапфир
зөбәржәт – изумруд
аҡыҡ – агат
аҡ аҡыҡ – опал
йәшмә – яшма
мәрйен – коралл

Таштарҙың башҡортса исемдәрен алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

## АЗАТ АЙЫТҠОЛОВ

Моңло йырсыларҙың, музыканттарҙың бөтәһе лә тиерлек ауылдан сыға. Тәбиғәт эсендә тыуып үҫеү үҙенекен итә. Азат та гүзәл төбәктән – Йылайыр районының Юлдыбай ауылынан. 5-се кластан алып Рәми Ғарипов исемендәге интернат-мәктәптә уҡый. Шунда Әҙһәм Исҡужин етәкселегендә түңәрәктә ҡурайҙа уйнарға өйрәнә. 1978 йылда Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлеген тамамлай һәм шунан бирле филармонияла эшләй. Төрлө концерттарҙа атаҡлы ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтов менән бергә алты йыл дауамында сығыштар яһау уның оҫталығын үҫтереүҙә ҙур роль уйнай. Хәҙер Азат Айытҡолов үҙе йәш ҡурайсыларҙы тәрбиәләүҙә әүҙем эшләй.

– Ҡурай – өйҙә, бәләкәй клубта, тар даирәлә ҡулланылыусы камерный уйын ҡоралы, – ти А. Айытҡолов. – Сөнки уның төп сифаты, бар булмышы – моң. Яҡындан ишетелгәндә ул кешегә бик көслө тәьҫир итә. Ә ҙур залдарҙа, ҡысҡыртып уйнарға тура килгәнлектән, моң боҙола. Радио, телевидение аша яңғырағанда ла шулай. Элекке ҡурайсыларҙан айырмалы рәүештә, беҙ, хәҙергеләр, баянға, ҡумыҙға, думбыраға, хатта синтезаторға ла ҡушылып уйнайбыҙ. Был ҡурайҙың яңы яңғырашҡа, бығаса күрелмәгән киң мөмкинлектәргә эйә булыуы тураһында һөйләй.

1. Күренекле ҡурайсы Азат Айытҡоловтың шәхесенә, ижадына ҡағылышлы мәғлүмәттәр менән танышығыҙ. Фонояҙмаларын табып, уның башҡарыуында башҡорт көйҙәрен тыңлағыҙ.
2. «Моңло йырсыларҙың, музыканттарҙың бөтәһе лә тиерлек ауылдан сыға», – тип әйтелә текста. Һеҙ бының менән килешәһегеҙме? Фекер алышығыҙ.
3. А. Айытҡоловтың ҡурай сәнғәте тураһындағы фекерҙәренә баһа бирегеҙ.

**74-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Биҙәнеү әйберҙәренең һүрәтен эшләгеҙ.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәнеү әйберҙәре күп һәм төрлө-төрлө булған. Йөҙөк, балдаҡ, беләҙек бармаҡтарға, беләккә кейҙерелгән, муйынсаҡ, алҡа, сулпы, елкәлек муйынға, ҡолаҡҡа, сәскә тағылған.

Биҙәүестәрҙе, нигеҙҙә, көмөштән яһағандар, ә ҡайһы бер оҫталар уларҙы алтындан да сүкей алғандар. Фирүзә, аҡыҡ таштарын йөҙөк, алҡа ҡаштары итеп ҡуйырлыҡ оҫталар

булған. Кавказ, Урта Азиянан сауҙагәрҙәр алып килгән биҙәүестәрҙе лә башҡорт ҡыҙҙары һәм ҡатындары шулай уҡ бик яратып таҡҡандар.

Биҙәүестәр араһында алҡаларҙың урыны айырым: улар матурлыҡ символы ғына түгел. Алҡа ҡатын-ҡыҙҙы яуыз күҙҙәрҙән, яман күҙҙән дә һаҡлай тигән ышаныс йәшәгән халыҡта.

Алҡа тағыуҙың да үҙ зауығы, үҙ тәртибе бар, сөнки төрлө кешегә төрлө алҡа килешә. Бәләкәй ҡолаҡта оҙон, суҡлы алҡалар бик матур күренә икән, ҙур ҡолаҡты иһә кескәй генә түңәрәк алҡа «бәләкәйләтә». Ә ҡолаҡ япрағы ҙур булһа, ауыр алҡа тағырға кәңәш итмәйҙәр. Хатта биттең формаһы ла алҡа ярҙамында үҙгәрә ала – оҙон алҡалар йөҙҙө оҙонораҡ итеп күрһәтә, ҡыҫҡалар иһә «киңәйтә» бирә.

**1.** Тексты өлөштәргә бүлегеҙ, йәғни планын төҙөгөҙ.

**2.** Ҡушма һөйләмдәрҙе табығыҙ, төрҙәрен билдәләгеҙ.

**75-се күнегеү.** Төҙөлөшө буйынса эйәртеүле ҡушма һөйләм формаһында булған мәҡәлдәрҙең эйәрсән һөйләм өлөшө бирелгән. Шуларға баш һөйләмдәр өҫтәп, тултырып яҙығыҙ. Эйәрсән һөйләмдәргә һорау ҡуйығыҙ.

Башлаусыһы булһа, ...
Көсөң барҙа ...
Ҡоралы үтмәҫтең ...
Һүҙ күп ерҙә ...
Ояһында ни булһа, ...
Түр кемдеке булһа, ...
Эттең тамағы ҡайҙа булһа, ...
Эттең ҡойроғон кем ҡырҡа, ...
Ағасты кем ултыртһа, ...
Өйө булғас, ...

*Мәҡәлдәрҙең баш һөйләмдәре:* мендәр шуныҡы; аш аҙ булыр; емеш шуныҡы; эшеңде ҡара; сөйө лә булыр; эше бөтмәҫ; ҡеүәтләүсеһе табылыр; осҡанында шул булыр; тамағы шунда; уға шул яҡшы.

**76-сы күнегеү.** Һөйләм киҫәктәре менән эйәрсән һөйләмдәр бербереһенә ниндәй һорауҙар бирә алыр ине? Уларҙың «һөйләшеүен» ойошторoғоҙ.

**77-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙең баҫымын дөрөҫ ҡуйып уҡығыҙ. Ошо һүҙҙәрҙә ниндәй баҫым хаталары китеүе мөмкин?

| | |
|---|---|
| ҡайтала́р | йығылма́ҫ |
| йөрөйҙә́р | йығылма́м |
| тыңлайҙа́р | еңелмә́м |
| һөйлә́мәйҙәр | килмәҫтә́р |
| ашы́ҡмайҙар | йөрөмә́беҙ |

**78-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Уға һорауҙар төҙөгөҙ. Йыр строфаһының 3–4-се юлдарын яҙығыҙ.

Шарлап ҡына аҡҡан Иҙел аша
Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ.

*(«Тәфтиләү»)*

«Кисеү таба алмаҫ...» Был һүҙҙәр әллә ниндәй ҙур мәғәнәгә лә эйә түгел кеүек, йырҙың артабанғы юлдарына рифма һымаҡ ҡына тойола. Ләкин башҡорт халыҡ йырҙарында уйланылмаған, мәғәнә һалынмаған һүҙҙәр булмай. Халыҡ йыры – ул таҡмаҡ түгел. Ғәҙәттә, йыр куплетының тәүге ике юлы һуңғы ике юлдағы төп мәғәнәгә өҫтәмә мәғлүмәт бирә. Халыҡ йыры – ул халыҡ тарихы, уның уй-кисерештәре, драмаһы, әрнеүе, фажиғәһе, ғорурланыуы, һоҡланыуы, тормошҡа ҡарашы...

Бында ла шулай. Элекке Башҡортостанда йылғалар аша кисеү табыуы, ысынлап та, бик ауыр булған, сөнки тирә-яғын тиҫтәләрсә саҡрымдарға йәйелгән әрәмә ҡаплаған, йылға ярына яҡын урындар батҡыл. Шундай шырлыҡты йырып, һаҙлыҡты үтеп, йылға ярына барып етеүе, барып еткәс, шарлап ағып ятҡан тәрән йылға аша сығыуы сит-яттарға, урынды белмәгәндәргә, әлбиттә, мөмкин булмаған.

Ә йылға кисеүҙәрен башҡорттар үҙҙәре генә белә. Кисеүҙәргә илтә торған юлдар ҙа йәшерен була. Ул юл тапалып әрәмәләргә бер урындан ғына барып инмәгән. Халыҡ ян-яҡтан йомро (һуҡмаҡ) юлдар менән йөрөгән. Алдатҡыс юлдар ҙа күп булған.

Шулай итеп, тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән «...кисеү табалмаҫ» һүҙҙәре башҡорт көнитмешенең мөһим бер һыҙатын күрһәтә.

## Әҙәбиәт ғилеме тураһында төшөнсә

Әҙәбиәт ғилеме – әҙәбиәтте өйрәнеүсе фән. Әҙәбиәтте ҡайһы яҡлап өйрәнеүенә ҡарап, ул бер нисә тармаҡҡа бүленә.

1. Әҙәбиәт тарихы (история литературы) – әҙәбиәттең боронғо дәүерҙәрҙән алып бөгөнгө көнгә тиклемге үҫеш тарихын өйрәнә: осорҙарға бүлә, һәр осорҙағы әҙәби процесты тикшерә, күренекле әҙиптәрҙең ижади эшмәкәрлектәрен барлай.

2. Әҙәбиәт теорияһы (теория литературы) – әҙәбиәттең эске тәбиғәтен өйрәнә: әҙәбиәттең структураһын (әҙәби төрҙәрҙе, әҙәби жанрҙарҙы), әҙәби әҫәрҙәрҙең художестволы үҙенсәлектәрен (композицион төҙөлөшө, образдар системаһын, темаһына, идеяһына ҡағылышлы мәсьәләләрҙе, һүрәтләү саралары н) тикшерә.

3. Әҙәби тәнҡит (литературная критика) – бөгөнгө әҙәби процесҡа бәйле мәсьәләләрҙе тикшерә, яңы ғына баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәргә баһа бирә.

Былары әҙәбиәт ғилеменең төп тармаҡтары булып иҫәпләнә. Быларҙан тыш уның тағы бер нисә ярҙамсы (вспомогательный) тармаҡтары бар. Шуларҙың әһәмиәтлерәге – *текстология*. Ул әҙәби мираҫҡа ҡараған, күбеһенсә авторҙары билдәле булмаған боронғо текстарҙы өйрәнә.

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәрҙе беләһегеҙме? Белгәндәрегеҙҙең исемлеген төҙөгөҙ.
2. Үҙегеҙгә оҡшаған берәй әҫәргә рецензия яҙығыҙ.

# ВАТАНҒА ХЕҘМӘТ – ИЗГЕ БУРЫС

*Риф Мифтахов*

## ҠАЛҠАН

Байраҡтарын сөйөп, байрамдарҙа
Парадтарҙа барған сағыңда
Тарих яҙған ябай исемеңдең
Һүнеү белмәҫ даны алдында,
Һоҡланып һәм тағы ғорурланып,
Илем баға мәғрур һыныңа:
Корчагиндар тигән тоҡомона,
Матросовтар тигән улына.

Хәтерләһәң, ә бит парад түгел,
Яҡлау һәм яу булды үткәнең.
Ниндәй генә һыуҙар кисмәнең дә
Ниндәй генә уттар үтмәнең! –
Дуҫтарыңа сикте бикләмәнең.

Дошман килһә – урын тапманы.
Ҡорос ҡулың, Ватан, Европанан
Һыпырып түгеп, Гитлер йыртҡыстарын
Үҙ өңөнә илтеп ҡапланы.
Һин бөгөн дә дауылдарҙан һаҡлар
Ер шарының иң ҙур ҡалҡаны.
Байраҡтарың сөйөп байрамдарҙа
Ингән саҡта майҙан-парадҡа,
Донъя үҙе аяҡ өҫтө баҫа
Һоҡланырға беҙҙең һалдатҡа!

1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Уның ни өсөн «Ҡалҡан» тип аталғанын аңлатығыҙ.

2. Шағир һалдат исеме менән ни өсөн ғорурлана? Рәсәй һалдатының миссияһын ул нимәлә күрә? Ә һеҙ һалдат хеҙмәте тураһында нимә уйлайһығыҙ?

3. Һалдат Тыуған илен, тыуған ерен, ата-әсәһен, туғандарын, дуҫ-иштәрен һаҡлай. Ошо бурысын үтәргә теләмәгән, армияға бармаҫҡа тырышҡан егеттәр тураһында һеҙ ниндәй фекерҙәһегеҙ? «Егетлек бурысы» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.

## РӘШИТ НАЗАРОВ

*(1944–2006)*

Рәшит Сәйетбаттал улы Назаров 1944 йылдың 1 ноябрендә Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылында тыуған. Шағир. Шиғырҙары «Таңды ҡаршылау», «Йөрәгемде һеҙгә илтәм», «Йәшен» һ. б. йыйынтыҡтарында, ике томлыҡ «Һайланма әҫәрҙәр»ендә тупланған.

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## ҺАЛДАТ

Илем сиге.
Һалдат посҡа баҫҡан.
Бурыс оло – ҡаҡмай керпек тә.
Ҡайһы саҡта оҙон төндәр буйы
Күҙ серем дә алмай бөртөк тә.
Ҡорал – ҡулда.
Телгә килһен өсөн,
Бер хәрәкәт етә кескенә, –
Һәм, ут булып, данһыҙ үлем ауыр
Баш ҡалҡытҡан дошман өҫтөнә.
Һалдат һиҙгер.
Алда ят ер ята.
Сит йолалар унда, сит сәскә...
Кәрәк икән,
Ил сафлығын һаҡлап,
Һалдат сығыр данлы көрәшкә.
Һалдат әҙер.

Артта иле тора,
Яҡты тормош тора нур сәсеп.
Үлем ялсылары уға ҡарай,
Көсһөҙ көсөк кеүек үсләшеп.
Һалдат ғорур.
Уға ныҡ ышанып,
Өлкән бурыс бирҙе Ватаны,
Тыныс тормош уны һөйөү менән:
«Минең улым», – тиеп атаны.
Ҡулға ҡыҫып ғәҙел ҡоралын,
Һаҡлап тора һалдат Ер шарын.

1. Шиғырҙа ниндәй һалдат тураһында һүҙ бара? Ил һағында шундай һалдаттар ғына торамы? Армияла тағы ниндәй һалдаттар бар? Ғәскәр төрҙәре (роды войск) тураһында фекер алышығыҙ.
2. Һеҙ ниндәй частарҙа хеҙмәт итергә теләр инегеҙ? Үҙегеҙгә оҡшаған ғәскәр төрө (авиация, пехота, артиллерия һ. б.) тураһында белешмә төҙөгөҙ.
3. «Минең ағайым (туғаным) – танкист (моряк, лётчик һ. б.)» тигән темаға кескәй хикәйә (шиғыр, нәҫер һ. б.) яҙығыҙ. Әҫәрҙәрегеҙҙе класта уҡып, күмәкләп баһа бирегеҙ.
4. Рәшит Назаровтың башҡа шиғырҙарын да иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, уның ижады тураһында кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.

*Рәмзилә Хисаметдинова*

## АРМИЯҒА КИТӘ МАЛАЙҘАР

Эй оҙата, кемде оҙата –
Эсә-өләсәй, ата-олатай?..
Әллә кемде кемдер йыуата,
Әллә кемдәр гармун уйната, –
Армияға китә малайҙар.
Ҡыҙҙар йәшерен яулыҡ болғайҙар.
Ил һаҡлайҙар йәп-йәш малайҙар:
Кешелекте һаҡлай, йыһанды,
Киләсәкте һаҡлай, бөгөндө,
Уй-өмөттө, яҡты хыялды.
Матурлыҡты һаҡлай батырлыҡ:
Фирүзә яҙ кирә ҡоласын –
Зөбәржәттәй ужым өҫтөндә
Яҡут ялҡындары ҡояштың...

Матурлыҡты һаҡлай батырлыҡ,
Янып бешә – һис юҡ көйәһе
Ҡыҙҙар биттәренең алмаһы,
Ҡыҙҙар ирененең сейәһе.
Илде һаҡлай йәп-йәш һалдаттар:
Урал тыныс. Хозур донъяһы!
Супылдашып-сутылдашып тора
Һәр бер бишек, һәр ҡош ояһы...
Армиянан ҡайта малайҙар –
Кем танымай, кемдәр таныйҙар:
Армиянан ҡайта егеттәр!
Армиянан ҡайта бөркөттәр!

1. Шағирә армияға киткән малайҙарҙың егет булып ҡайтыуҙарын тасуирлай. Текстан шуны раҫлаусы миҫалдар килтерегеҙ.
2. Ағайҙарығыҙҙың, туғандарығыҙҙың, яҡын таныштарығыҙҙың армияға оҙатылыу һәм армиянан ҡайтыу мәлдәрен хәтерләгеҙ, кескәй хикәйә итеп һөйләгеҙ.
3. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

*Мәүлит Ямалетдинов*

## ҺАЛДАТ ИТЕГЕ

Ҡояш апай аяу белмәй
Ҡыҙҙыра бөгөн.
Өй башынан алып төштөм
Һалдат итеген.
Ҡар һыуына тиҙҙән бөтә
Донъя туласаҡ,
Ана шунда был итектәр
Кәрәк буласаҡ.
Уның яҫы табанында –
Һалдат юлдарым.
Йөйҙәрендә – баҫҡан ерҙең
Һары ҡомдары.
Ҡуңысына һеңеп ҡалған
Карабин майы;
Поста тороп ҡаршылаған
Таңдар сырайы.

Йөрөтһөндәр был итектәр
Илем тупрағын,
Тик тулмаһын йөйҙәренә
Һуғыш бысрағы.
Һеңһен уға Тыуған илдең
Алһыу таңдары,
Тик таммаһын йөҙлөгөнә
Сабый ҡандары.
Төрөнһөндәр ил һаҡлаусы
Һалдат данына,
Буялмаһын сит-ят ерҙең
Һоро саңына.
Ҡояш апай аяу белмәй
Ҡыҙҙыра бөгөн.
Алып төшөп, майлап ҡуйҙым
Һалдат итеген.

**1.** Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
**2.** Шағир ҡояшты *Ҡояш апай* тип атай. Ни өсөн икәнлегенә аңлатма бирегеҙ. Бала саҡта әйткән һамаҡтарығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Мәҫәлән:

Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Һимеҙ тәкә һуйырмын,
Һыңә майын бирермен,
Үҙем итен ашармын...

Был һамаҡты ниндәй осраҡта әйтәләр?
**3.** Шағир итектәренең Тыуған ил тупрағына бысраныуына риза, тик уларҙың һуғыш бысрағына, сабый ҡандарына, сит ил саңдарына буялыуын теләмәй. Фекерҙең асылына төшөнөгөҙ.

*Ирек Кинйәбулатов*

## БОРОДИНО

Тотош ере ҡанға батҡан,
Данға батҡан Бородино.
Ҡанға батып, данға батып,
Ер әйләнә, бата донъя.

Күпме дәүләт, күпме әрме
Даръя булыр ҡандар түкте.
Юйылмаҫлыҡ булып ҡалыр
Тарихтарҙа дандар күпме!

Был батырлыҡ – мәңгелеккә
Бөтә донъя таң ҡалырлыҡ.
Хаттин ашып шашҡандарға
Һабаҡ булыр аң алырлыҡ.

Һаман шулай күп дәүләттең
Шешеп күҙ ҡабаҡтары,
Онотмаҫҡа аңы етмәй
Бородино һабаҡтарын.

Оноталар Наполеондың
Нисек кире ҡасҡандарын,
Париждың бар ҡапҡаларын
Башҡорт тибеп асҡандарын.

Иҫәбе юҡ һәр һуғышта
Башҡорт һанһыҙ ҡорбан бирҙе.
Батырҙарса һәләк булған
Юғалтты ил күпме ирҙе…

Урал батыр васыятын
Һис онотмай башҡорт халҡы.
Ғәзиз ергә ҡул һуҙылһа,
Һәр осорҙа сыға ҡалҡып.

Халыҡ тоғро дуҫлығына,
Халыҡ тоғро анттарына;
Башҡорт халҡы һәр саҡ әҙер
Атланырға аттарына.

1. Шиғырҙы иғтибар менән уҡығыҙ, уның төп пафосын, шағирҙың нимә әйтергә теләгәнен асыҡларға тырышығыҙ.
2. *Данға батыу, ҡан түгеү, хаттин ашыу, ҡул һуҙыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
3. 4-се, 5-се строфаларға иғтибар итегеҙ. Шағир ниндәй тарих һабаҡтары тураһында һүҙ алып бара, «күҙ ҡабаҡтары шешкән» ҡыҫҡа хәтерлеләрҙе нимәнән иҫкәртә?
4. Башҡорт ҡасан «Париж ҡапҡаларын тибеп асҡан»? Һүҙ ниндәй ваҡиға тураһында бара? Я. Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары»н иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, хәтерегеҙҙе яңыртығыҙ.
5. Күренекле рус шағиры М. Ю. Лермонтовтың «Бородино» шиғырын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, башҡорт шағирының «Бородино»һы менән сағыштырығыҙ, уртаҡ яҡтарын табығыҙ.

**6.** Килтерелгән шиғырҙарҙан сығып, «Нимә ул патриотизм?» тигән темаға фекер алышығыҙ, уның һөҙөмтәһе буйынса инша яҙығыҙ.

*Әхмәр Үтәбай*

## ҺАҠМАР АҒА БИТ

*(«Байыҡ» әҫәре буйынса)*

Һуғышҡа тиклем Ғәбделбарый ауылда беренсе егет ине.

Ғәбделбарый бейеһәме... шул бейеүе менән был төбәк ауылдарының йәменә, ҡотона, заманса итеп әйткәндә, маркаһына әүерелгәйне ул.

Бейеүе лә ниндәй бит әле – «Байыҡ»! Күҙ алдына килтерегеҙ: ҡурайҙа һәлмәк кенә, әммә көсәйә һәм дәртлерәк була барған бейеү көйө ағылыуға, сәхнә уртаһына яҫҡынып сығып баҫҡан Ғәбделбарый тәүҙә рәтен килтереп үксә сарлап ала. Бер юлы өҫ-башын иплэгән була, мыйыҡтарын һыпыра, өлпәй сәсен тағы ла ҡабарта төшә, ул-был иткән була. Бының менән тамашасының иғтибарын үҙенә йүнәлтә. «Ҡарамаһағыҙ, бейемәйем дә ҡуям» тигән һымағыраҡ ишаралар ҙа яһап алыуға, бейеүсенең кире уйлауынан ҡурҡҡан тамаша ҡылыусылар ҡул саба башлай. Ҡыҫҡаһы, Ғәбделбарый, улар сәпәкәй итмәйенсә, бейей башламай. Барыһы ла уның был ҡылығына өйрәнеп бөткән. Шуға күрә лә, сәхнәлә күренеүе була, ҡул саба ла башлайҙар. Әммә егет ашыҡмай, тәүҙә үҙен ҡарарға тип килеүселәрҙе күҙҙән үткәреп ала: кем бар, кем юҡ, йәнәһе. Шулай итеп, һәр береһе менән күҙ ҡарашы аша иҫәнләшә лә, мыйығын тағы бер һыпырып алғас, ара-тирә ҡурайын ғыжылдатып тороусы көйсөгә баш һелкә.

*Ай, һай, һай, һай,*
*Һары балды һалығыҙ,*
*Арыҫландай батырҙарҙың*
*Арҡаһынан ҡағығыҙ.*

Бейеүсенең һыпы булмышына, йөрәктәрҙе ҡуҙғытып яһаған йылдам ынтылышына, ғорур һәм текә кәүҙәһенә, ылдым аяҡтарын ҡарап һоҡланыусылар, йәндәре һәм рухтары тоҡаныусылар, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, бейеүҙе күтәреп алып, «Байыҡ»тың һүҙҙәрен таҡмаҡлай башлай. Әммә был дөйөм «тоҡаныуҙың» башы ғына әле. Бына тағы ла, көйҙөң икенсе яртыһы башланыуға, сәхнәнең мөйөшөнә барып етеп, кирегә әйләнгән бейеүсе, аяҡ хәрәкәтен туҡтатып, яурындарын

бейетеп, алға килә башлағанда, залда ултырыусыларҙың йөрәге түҙмәй, кәпәс ташлап бейергә тотона, ҡайһылары хатта сәхнәгә үк менеп китеп, Ғәбделбарый менән йәнәш тыпырлата. Күмәк бейеүгә барлыҡ ир-ат ҡушыла, хәҙер инде залдағы ҡатын-ҡыҙ йырлай. Бейеүсенең шойҡаны барыһына ла күсә, унда шомтайып ултырыусылар ҡалмай.

*Ай, һай, һай, һай,*
*Һары балды һалығыҙ,*
*Арыҫландай батырҙарҙың*
*Арҡаһынан ҡағығыҙ.*

Шулай итеп, барлыҡ ир-аттың, ҡыҙ-ҡатындың йөрәген ҡуҙғытып, бейеүгә төшөрә алырлыҡ ҡөҙрәткә эйә ине егет. Бындай саҡта, билдәле, башҡорт балаһының күңелендә яу ҡомары ҡуҙғала. Уларҙы ошо мәлдәрендә, атҡа атландырып, ҡулдарына ҡорал ғына тоттор, хәҙер яуға яҫҡынасаҡ.

Ысын бейеүҙе һүҙ менән һүрәтләп, аңлатып булмай, тиҙәр. Шулайҙыр. Бары тамаша ҡылған кешенең сәнғәттең был төрөнән алған кинәнес, дәрт һәм илһам тойғолары хаҡында ғына һөйләп биреү мөмкиндер. Бейеүҙең асылын һүҙ менән һүрәтләү мөмкинлеге булһа, ғөмүмән, уның кәрәге лә ҡалмаҫ ине, һәм ул айырым сәнғәт өлкәһе тип һаналмаҫ та ине. Ғәбделбарыйҙың бейеүен ҡараусы һәр бер кеше күңел күтәренкелеге, йән шатлығы байрамы кисерҙе, тип әйтһәк, һис тә хата булмаҫ. Уның тамашаһын ҡарарға килер алдынан, төрлө сәбәптәр арҡаһында кәйефтәре мөшкөл булғандар, балтаһы һыуға төшкәндәр, бөтөнләй үҙгәреп, тормоштарында башҡа маҡсаттар билдәләп, клубтан ҡайтып китә ине. Хатта оло ҡайғыға тарығандар ҙа, фажиғәле яҙмыш кисергәндәр ҙә, уның бейеүен ҡарағандан һуң, күҙ йәше аралаш булһа ла, көлөп, йыуаныс алып, бушанып, Ғәбделбарыйға рәхмәт һүҙе яуҙырҙы.

«Уның хатта бармаҡтары ла бейей» тигән хәбәр ҙә нәҡ Ғәбделбарый хаҡында. Ҡайһы саҡ уны, оҙаҡ ваҡыт сәхнәнән сығармай, ҡайта-ҡайта һорап бейеттеләр. Тап ана шундай мәлдәрҙә, тирләп-бешеп, арманһыҙ булып талсыҡҡанда, ул ҡул бармаҡтарын көй ыңғайына килешле итеп бейетергә өйрәнеп алды. Тора-бара был алымды төп сығышының бер өлөшө итеп тә файҙаланды. Әйтәйек, көй башлана, ул сәхнәгә сығып баҫа. Йолаһы буйынса үксә сарлау, йәғни тамашасыны әҙерләү ваҡытында, иплəп-иплəп бармаҡтарын да бейетә башлай. Көй әкренләп дәртлерәк була барған һайын, бейеүсе бармаҡтарын тән буйлап түбәнгә тыпырлап төшөп, аяҡтарҙы

хәрәкәткә килтерә. Ә инде Ғәбделбарыйҙың аяҡтары үҙ эшен беләләр. Сабып барған ат тояғы тауышына көйләнеп, тыпырлығын сығарып тыпырлай. Нәҡ атаһы өйрәткәнсә баҫа ул. «Донъяға яралғандан бирле эйәр өҫтөнән төшмәгән башҡорттоң йөрәге ат тояғы тауышына көйләнгән, шуға күрә уны ҡуҙғытыр өсөн дә бейеүебеҙҙә тояҡ тауышы ишетелергә тейеш. Ат тояғы тауышы ишетелдеме – башҡорттоң да йөрәге дөпөлдәп, ҡупҡалйый башлай. Был – ата-олаталарыбыҙҙың борондан ҡалған аманаты», – тип әйтә килде уның мәрхүм атаһы. Ғәбделбарый атаһынан бейеү серҙәрен, бейеүҙең халҡыбыҙ өсөн ниңә кәрәк икәне тураһында ла күп нәмә отоп ҡалып өлгөрҙө. Бигерәк тә атаһының: «Ғәмдәребеҙ булһын өсөн бейейек...» – тигән һүҙҙәре зиһененә ныҡ һеңде.

Егеттең бейеүсе тигән даны тирә-яҡҡа таралды. «Байыҡ» ҡушаматы ла йәбеште үҙенә. Тәүҙәрәк Ғәбделбарый-Байыҡ тип тә атап йөрөттөләр үҙен, аҙаҡ Барый-Байыҡҡа күсеп, һуңынан Байыҡҡа ғына тороп ҡалды.

Ҡотдосов Ғәбделбарый, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та, яуға китте. 1943 йылға тиклем Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы составында һуғыша, шул уҡ йылдың ҡышында Сталинград эргәһендәге утлы яуҙа әсиргә эләгә. Ауылына 1945 йылда ғына ҡайта.

Бөйөк Ватан һуғышынан Ғәбделбарый, ауылдаштары әйтмешләй, инәле-сығалы, бер һүҙ менән әйткәндә, иҫәүән булып ҡайтты. Ҡарап тороуға уппа ҡәҙәрем, буйтым ғына кеүек, һөйләгән хәбәре, ҡыланышы баланыҡы, тиһәң, үҙе бала түгел, орҙом-бәрҙем холҡо көтмәгәндә бүлтәйә лә сыға.

Ғөмүмән, ул һуғыштан үҙенең Ғәбделбарый икәнлеген генә түгел, барлыҡ үткәнен, башҡаларҙың күңелдәрен тоҡандырыр бейеү һәләтен дә онотоп ҡайтҡайны. Тәүҙә был хаҡта ҡатыны Ҡафия һиҙҙе. Ни өсөн тигәндә, 1945 йылдың йәйендә, ҡаҡ һөйәккә ҡалып, ауылына ҡайтып ауған иренең тәүге һүҙҙәре лә ҡолаҡҡа ят, аңлайышһыҙ ине. Әллә урыҫ, әллә немец телендә бупылданы ул. Бер ни ҙә аңламаған Ҡафия бар көсөн йыйып ирен аяҡҡа баҫтырырға тотондо. Көн һайын тиерлек мунса яғып төшөрҙө, парланып, хушланып сығыуға төрлө үләндәрҙән ҡайнатҡан төнәтмәләр эсерҙе, аш-һыуҙы ла барынса мул әҙерләп, ирен хәленсә ҡәҙер итте. Кис ятыр алдынан, бар тәнен майлап, үҙенсә имләне. Төндәрен иһә Хоҙайға ялбарҙы.

Ҡайтыуына ике ай тигәндә, Байыҡ әҙәм ҡарарлыҡ булып, төҫ ҡунып, быуын нығытты, колхозға көтөүсе булып эшкә

сыҡты. Ара-тирә ҡатыны менән үҙ телендә хәбәрләшә лә башланы, тик һуғыштан алда булған үткәненә ҡарай асылған хәтер ҡапҡалары бөтөнләйгә ябылғайны. Ауыл мәктәбе пионерҙары 9 май көнө, Еңеү байрамы тантанаһын үткәрергә, һуғыштан иҫән ҡайтҡандарҙы митингка йыйҙы. Шунда бер уҡыусы: «Байыҡ олатай, беҙгә һуғыш тураһында һөйләгеҙ әле, ниндәй ерҙәрҙә булдығыҙ?» – тип һорағас, ҡарт тегеләй итте, былай борғоланды, әммә бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Бары «Һаҡмар аға бит, уландар» тигәндән артыҡ өн-ауаз сығарманы.

Митингынан һуң Еңеү көнө хөрмәтенә концерт ойошторолдо. Байыҡты ла бейер өсөн сәхнәгә саҡырҙылар. Байыҡ аптыраштa ҡалды, уны ниңә саҡырғандарын да аңламаны. «Ниңә уны ике ятып бер төшөнә инмәгән эш менән шөғөлләнергә ҡушалар?» Ул урынында тик ултырыуын белде, хатта ниндәйҙер ынтылыш яһап ҡымшанманы ла.

Был һаман да элеккесә инәлтеүен беләтип уйлаған тамашасы, ярһып, дәррәү ҡул сабып ебәрҙе. Яугир һаман да урынынан ҡуҙғалманы. Янындағы яугир ҡорҙаштары сәхнәгә әйҙүкләп бөйөрөн төйә башлауға, халыҡ араһында ултырған ҡатыны Ҡафия, ире янына килеп, уны сәхнәгә етәкләп сығарып баҫтырҙы. Тик Байыҡ нисек сығып баҫҡан булһа, шул урынында һуйҙайып баҫып тик торҙо, аптыраштан күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ итә. Ахыр килеп, залдағыларҙы уғата ғәжәпләндереп, сәхнәнән төшөп, ишеккә табан йүнәлде, артынан ҡатыны Ҡафия ла тышҡа йомолдо. Ул үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр сәхнәнән бейеүен башҡармай төштө.

Һуғыштан алда хатта үлеләрҙе терелтә, йән өрә алырлыҡ ҡөҙрәткә эйә булған бейеүсенең даны ошо тирә ауылдары кешеләренең күңелендә үкенесле хәтирә булып, үҙе лә аңламаған Байыҡ тигән ҡушамат-исемендә генә ҡалды. Ауылдаштары, күпме генә уйланмаһын, был хаҡта үҙ-ара бәхәстәр ҡормаһын, бейеүсенең был серен аса алманы.

Йылдар артынан йылдар үтте. Байыҡ та хәҙер ҡарттар рәтенә баҫты. Тик был донъяла ни өсөн көн итеүкәйҙәренең мәғәнәһен дә йүнләп аңларлыҡ хәлдә түгел ул хәҙер. Көн һайын таң ата ла кис була, таң ата ла кис була. Иртәгәһен, унан һуң да шул уҡ хәл ҡабатлана ла ҡабатлана. Һаҡмарға ҡарап торһаң да, шул уҡ: бер үк төрлө һыу аға ла аға, аға ла аға. Йәшәүенең барлыҡ мәғәнәһе ошо йылғаның тулҡындарына уралған кеүек...

Уға һәр саҡ бейеүсе булыуы тураһында, һуғыштан алда, ер һелкетеп баҫып, дан яулауы хаҡында һөйләйҙәр, әммә, нисек кенә тырышмаһын, Байыҡ ҡарт был хаҡта иҫләй алмай. Бейеүен генә түгел, хатта һуғыш мәлен дә яҙа-йоҙа ғына иҫләй ул, тик бына һуғышҡа нисек барыуы, ҡайҙа һуғышыуы хәтерендә бөтөнләй һаҡланмаған. Хәйер, тыуғандан алып иҫ белгәне бирле, уның тәүләп иҫендә ҡалған ваҡиғаһы бик хәтәр – фашист концлагерындағы тотҡонлоҡ. Һуңғы ваҡытта ундағы ғазаптарын бик йыш иҫенә төшөрә, быны тик үҙе генә белә, хатта ҡатыны Ҡафияға ла был хаҡта һүҙ ҡатҡаны булманы. Һорашһа, «эй, булды инде» тип кенә ҡотола.

Ауылдаштары ла Байыҡ ҡарттың һәр төрлө әкәмәттәренә, берҙәй үк әкиәттәренә күнеп бөткән инде ул. Уны нисек бар шулай ҡабул итәләр, ҡылыҡтарын береһе-бер ек күрмәй. Иң мөһиме, ул һәр ерҙә лә һин дә мин, иң кәрәкле кеше. Әйтәйек, ике ауылдашы һүҙгә килешеп дәғүәләшһә, уҫал һүҙҙәр әйтеп ирешһә, уларҙы ҡарт анһат ҡына татыулаштырып та ҡуя. Бер-береһен хатта дөмбәҫләшеүгә, уҫмаҡлашырға етешкәндәр, бер ни булмағандай, бер-береһенә ҡул бирешеп айырылыша. «Нишләп бушал юҡҡа талашаһығыҙ у, әллә Һаҡмар аҡмай тип беләһегеҙме, көноҙоно ҡарауыллап сығам, Һаҡмар аға бит, көнөн дә, төнөн дә аға, талашмағыҙ кеше көлдөрөп…» – тип әйтһә, әле генә талашып торған ауылдаштары тәүҙә үҙ-үҙҙәрен онотоп, донъя яңғыратып хахылдаша, шуның менән асыуҙары ла онотола, йәһәт кенә татыулаша ла ҡуя.

«Һаҡмар аға бит» тигән һүҙҙәрҙең дә тарихы бик ябай. Байыҡ ҡартҡа ишек алдында, урамда тәпәйләүҙең ҡыҙығы ҡалманымы икән, ул ауылдарын ярып аҡҡан Һаҡмар йылғаһы ярына төшә.

Һаҡмарҙың шаулап аҡҡаны ауылға ишетелеп тора. Бигерәк тә Байыҡ ҡарттың «Һаҡмар аға бит» тип, кешеләрҙе ышандырырлыҡ итеп әйткән һүҙҙәренән һуң йылға тауышы кешеләрҙең ҡолағына шифалы моң булып ағыла, яҙғы ташҡын ваҡытында был ауылда йүнләп йоҡлап булмай. Беренсенән, әлеге лә баяғы йылға шауы тынлыҡты боҙһа, икенсенән, Байыҡ ҡарттың төнгө әкәмәттәре.

Былдай саҡтарҙа ҡарт төнө буйы йоҡламай, ауыл урамы буйлап бер остан икенсе осҡа табан ҡыран-ғәләмәт йөрөп сыға. Ауыл халҡы бер нәмәгә ныҡ өйрәнгән: яҙ еттеме, төндә шарлап аҡҡан йылға шауына ҡушылған икенсе тауыш – Байыҡ ҡарттыҡы. Бәғзе бер кешеләрҙең өйөнөң ишеген дә килеп туҡылдата ул. Йоҡо аралаш күҙен ыуып йорт ишеген асҡан хужаға

шундай һүҙҙәрен дә ысҡындыра Байыҡ ҡарт: «Нишләп йоҡлап ятаһығыҙ, Һаҡмар аға бит, шундай йәмле мәлдә, фәлән-фәсмәтән!..» Ана шулай яҙғы ташҡын мәлдәрендә бар ауылды аяҡҡа баҫтырып сыға ул. Әммә кешеләр үҙҙәрен төн уртаһында сәбәпһеҙгә килеп уятыусыға асыуланмай. Киреһенсә, күптәр ҡарттың килеп ишек ҡаҡҡанын көтөп ята...

Байыҡ ҡарт килеп уларҙың ишеген ҡаҡһын ғына. Ауылда берәйһе икенсеһенән һаулыҡ һорашып, тормош хәлдәрен белергә ниәтләнһә, «Һаҡмар ағамы?» – тип һорай. Икенсеһе – «аға» тип яуаплай. Ә ҡарттың йәшәүенең мәғәнәһе ошо йылғаның тулҡындарына уралған кеүек. Һаҡмарға төшкәс, Байыҡ ҡарт яр буйында һибелеп ятҡан таштарҙы бер урынға өймәкләргә керешә. Уларҙың барыһын да эләктермәй, һәлмәгерәктәрен, төрлө әйберҙәргә, бигерәк тә йылҡы малына оҡшағандарын ғына ҡулына алып, бер аҙ күҙҙән үткәреп, ғәжәпһенеп ҡайҡайып ҡарап тора. Күңеленә оҡшаһа, табышына ҡарап йылмая, ниҙер әйтә кеүек, шунан йылға ситенә килеп ташты һыуға сайҡатып ала ла, ҡәҙерле әйберендәй мөғәмәлә менән өйөмгә алып барып һала. Ат сүрәтендәге һәр бер ташты ҡулға алған һайын, уларға бышылдаған һүҙҙәре ишетелмәй, әммә күҙҙәрендә балҡыған осҡон күптән юғалтҡан танышын осратҡан кешенекенә оҡшай.

...Таштарын атлы ғәскәр сафы рәүешенә килтереп теҙеп бөткәс, Байыҡ ҡарт ҡыҙғылтыраҡ йәйпәгерәк һәлмәк ташты иң алға, ғәскәр башлығы урынына ҡуя. Ахырыһы, түрә кеше туры атта булырға тейеш, тип самалай. Ә бына яугирҙар барыһы ла «ҡола» аттарҙа, һәр рәт башында тороусылар «ерән» менгеләргә атланған. Ситтән ҡарап торған кеше уның был ҡылығын «тәтәй уйнай» тип тә баһалар. Әммә яҡыныраҡ килеп ғәскәрҙең теҙелеү рәүешенә, аттарҙың төҫөнә һәм «уйнаусының» үҙен нисек тотоуына иғтибар итһә, бынан ниндәйҙер мәғәнә эҙләргә керешер ине. Ҡарт үҙ «уйынына» шул тиклем ихлас бирелә, мәҙәк күреп, килеп ҡарап тороусыларҙы күҙгә лә элмәй. Бигерәк тә бала-саға үҙ итә ҡартты. Ҡарап-ҡарап торалар ҙа, үҙҙәре лә уйын сәменә бирелеп, ҡарттыҡына оҡшатып ғәскәр теҙергә керешә. Алыҫтаныраҡ был күренешкә ҡараш ташлаһаң, бала-саға менән мәж килгән һаҡаллы сабыйҙы ла сырамытырһың.

Ҡыран-ғәләмәт килә улар, ҡайһы саҡ, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, матурыраҡ ташҡа талаша башлайҙар. Ташты ҡулына эләктереү бәхетенә ирешкән малай аҙаҡ уртаҡ табышты барыбер

Байыҡ олатаһына үҙе үк килтереп бирә. Олатаһы ла буш ҡалмай, кеçәһенән тегегә кәнфит сығарып һуҙа. Малайҙарға шул ғына кәрәк инде, кем уҙарҙан бер-бер артлы үҙҙәренең ғәскәренән һайланмыш иң-иң матур, иң һәлмәк ташты тотоп килә башлай. Шулай итеп, Байыҡтың ғәскәре янына сират теҙелә, әйтерһең дә, әрмегә егеттәр ҡабул итәләрме ни. Улай ғына ла түгел, иң-иң аçыл егеттәрҙе бер нисә ғәскәрҙән һайлап алып, «гвардия полкы» төҙөйҙәр. Ҡарт өсөн «һалдат» мөһим булһа, малайҙарға – кәнфит алыу шатлығы.

Һаҡаллы сабый теҙеп бөткән ғәскәренә ҡарап-ҡарап тора ла, аҙаҡ ниҙелер иçенә төшөрөп, кем менәндер һөйләшкәндәй ҡысҡырып көлә, унығына нимәнелер аңлата, иçбат итә... Аҙаҡ килеп, сафта тороусы ике «атлының» урындарын алмаштырып ҡуя. Үҙенең был яңылығына үҙе атҡа атланған сабыйҙай ҡыуанып, сафта торған башҡаларға ла ҡарап ала, улар менән дә нимә тураһындалыр әңгәмә ҡора. Малайҙар был саҡта, үҙҙәре лә һиҙмәçтән, ҡарт менән сафтағылар араһындағы әңгәмәгә ҡушылып китә, үҙҙәре теге йәки был һалдаттың икенсеһенең урыны менән алмаштырыу мохтажлығы тыуһа, олаталарының күңелен күреү форсаты сығыуға ҡыуанып йүгереп йөрөй. Тора-бара малайҙар, кәнфит тураһында ла онотоп ҡарт ҡорған уйынға башкөллө сума.

Байыҡ һуңғы айҙарҙа төндәр буйы йоҡлай алмай башланы. Әбейе Ҡафия үҙенә йоҡо дарыуы ла биреп ҡарай, юҡ, барыбер элеккесә әүен баҙарына юлыға алмай, түбә таҡтаға ҡарап тик ята. Тәүлегенә сереме бер сәғәттән дә уҙмай. Ҡафия, медсестраны саҡыртып, көслө укол да ҡаҙап ҡаранылар, юҡ, йоҡлап та өлгөрмәй, килеп тә тора.

Бер көн Һаҡмар буйында ултырғанда, уның үлеп йоҡоһо килде, күҙҙәре үҙенән-үҙе йомола ла китә. Байыҡ ҡарт артабан бер ни ҙә иçләмәй.

Байыҡ ҡарт шул ҡолауынан дауаханала ярты йылдан ашыу ятты ла ҡуйҙы. Әүәлгесә шаҡтай булып аяғына ла баçты, әммә аяҡ-ҡулдары тартышыуы, барлыҡ тәненең туҡтауһыҙ ҡалтыраныуы бөтмәне.

Ауырыуҙы ниндәй генә табиптар ҡараманы, хатта Өфөнән махсус рәүештә республикаға ныҡ таныш психотерапевт, медицина фәндәре докторы Аçылғужин килеп етте.

Фән докторы Байыҡтың тормош биографияһы һәм «ауырыу тарихы» яҙылған журналдарҙан уның хаҡында белеште. Район дауаханаһының баш табибы менән ауырыу ятҡан

палатаға инделәр. Палата тәҙрәһе янында уңға-һулға йөрөп тышты күҙәткән Байыҡ ҡарт уларҙың ингәнен аңғарманы ла.

– Һаумыһығыҙ, Ғәбделбарый Ғәбделхалиҡович... – Доктор уның сәләмләүенә битараф ҡалған ауырыуҙың янына уҡ килеп баҫып, йылмайып ҡулын һуҙҙы. Тегеһе табиптың һыңар усына ике ҡулын тәҡдим итте.

– Мин... Байыҡ булам, һаумыһығыҙ...

– Тормоштар нисек бара әле, Байыҡ ағай, еңгәй нисек, тиҙҙән беҙ һеҙҙе өйөгөҙгә ҡайтарабыҙ...

– Хәлдәр тип ни, беҙҙең ни шул инде, таң ата ла, кис була, Һаҡмар аға... – Ул район табибына боролдо. – Мына Усман Ғәлиевичҡа көн дә тылҡыйым, мин һаумын, ҡайтар, тиеп, юҡ... Һеҙ Һаҡмар йылғаһын күргәнегеҙ, уның аҡҡан тауышын тыңлағанығыҙ бармы? – тине Байыҡ ҡарт, аяғына баҫып.

– Бар, Байыҡ ағай, мин дә һеҙҙең кеүек Һаҡмар һыуын эсеп үҫкәнмен.

– Әйтәгүр, үҙебеҙҙең яҡтыҡы тип сырамытам, беҙҙең Һаҡмар буйы кешеләре үҙенсә инде ул, хәбәрҙе лә беҙҙеңсә ҡушаһығыҙ...

Шул ваҡыт күтәренеп, ҡояштай балҡып, палатаға карттың әбейе Ҡафия килеп инде.

– Аһ-аһ, һуңланым тип торам, ыста, үҙебеҙҙең кеше икәнһегеҙ ҙә...

Ҡафия, алдан һөйләшеп ҡуйғандай, йүгереп йөрөп өҫтәлгә мул ғына итеп табын да ҡороп ташланы. Өфө ҡунағы уңайһыҙланып:

– Кәрәкмәй, еңгә, борсолмағыҙ, беҙ бында ҡунаҡ булырға тип килмәнек, – тине, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә. Дауахана мөдире:

– Роберт Батырович, Ҡафия еңгәнең йолаһы шулай, ағайҙың хәлен белергә килеүселәргә сәй эсермәйенсә ебәрмәй, – тине лә үҙе лә хужабикәгә булышырға тотондо. Байыҡ ҡарттың үҙенә ҡарап йылмайып ултырыуын күргәс, ҡунаҡ табын янына килеп ултырҙы.

Ауыл кешеһе нимәне танһыҡҡа тәғәм итеп йәшәй, барыһын да килтергәйне Байыҡтың әбейе. Ҡаҙыһын, ҡоротон, эремсеген, бауырһағын, ҡоймағын әйтеп тораһы ла түгел, уңған хужабикә ҡымыҙ ҙа хәстәрләгән. Аҙаҡ термостан эҫе сәй яһап, өҫтәлгә бал ҡуйҙы.

– Һеҙҙең килерҙе миңә ҡапылғарай әйттеләр, шуға таҡы-тоҡо булды инде, – тине Ҡафия Өфө ҡунағы алдында түбәнселек менән. Аҫылғужин бот сапты.

– Һеҙ нимә, Ҡафия еңгә, таҡы-тоҡо, имеш, былай һыйлаһағыҙ, ана Байыҡ ағай, йәш еңгә эҙләп, үҙегеҙҙән ҡасып та китер әле…

Шаяртыу шул тиклем урынлы булды, барыһы ла шаңғыратып хахылданы. Байыҡ та башҡалар ыңғайына көлөп ебәрҙе лә, ҡапыл аяғына баҫып, тәҙрә янына килде.

– Эх, егеттәр, Һаҡмар аға бит әй, – тип ебәрмәһенме ул, күҙҙәрендә осҡондар балҡытып.

– Тағы башланы шул Һаҡмарын, – Ҡафия Аҫылғужин яғына боролдо. – Иптәш духтыр, әйтегеҙ әле шуға, тәкәтемде ҡоротто шул Һаҡмары менән, ауыл халҡына ла шул һүҙҙе генә һөйләй…

Аҫылғужин, ҡатындың күҙҙәрендәге хафаны, әйтеп бөтөрөлмәгән кинәйәне тойоп, дилбегәне үҙ ҡулына алды. Уның ҡарашында табип шуны ла аңланы: Ҡафия уға бик мөһим хәбәр еткергеһе килә.

– Ярай, еңгә, ризыҡҡа хуш итәйек, рәхмәт, Усман Ғәлиевич, һеҙ Байыҡ ағайҙы процедурныйға алып барып выпискаға әҙерләй тороғоҙ, минең бында еңгәйгә бер-ике һүҙем бар ине, – табип Байыҡ картҡа боролдо, – беҙ һеҙҙе дауахананан сығарабыҙ, Байыҡ ағай…

– Миңә шул ғына кәрәк ине бит, ҡустым, атыу мынауҙар… Тиҙҙән Һаҡмарҙа боҙ китәсәк, ә мин һап-һау көйөмә ят, имеш. – Шулай тине лә Байыҡ карт дәртләнеп әйберҙәрен йыйырға тотондо.

…Ҡарты өсөн нисек борсолоуҙарын, уның күңел һәм хәлторошон энәһенән-ебенә тиклем, түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе Ҡафия ире Байыҡ хаҡында. Ҡайһы бер хафаларын ҡат-ҡат еткерҙе: «Ул бит һин дә мин кеше кеүек, әммә әүәлгене бер ҙә иҫләмәй, етмәһә, туҡтауһыҙ ҡалтырай, йоҡлай алмай, һуғыштан ҡайтҡаны бире ҡулсыр бала кеүек инде, һәр саҡ энә өҫтөндә кеүекмен, ҡу-у-уй, үҙен бер нәмә итеп ҡуймаһын. Һатта инде, ҡарағыҙ инде үҙен, духтыр иптәш, өмөт һеҙҙә генә…»

Ҡотдосовтар ауылға ҡайтырға йыйынып-төйнәнеп бөткәс, Аҫылғужин Байыҡ карт менән тағы ла һөйләшеп ҡарарға итте. Барлыҡ тәжрибәһен туплап, карттың хәтер ҡумтаһын асырға тырышып ҡараны, әммә пациенты, урыҫтар әйтмешләй, «ҡаты сәтләүек» булып сыҡты. Ауырыуҙың телен сисеп

хәтерен ҡуҙғатыу өсөн ниндәй генә дәғүәләр килтерһә лә, тегеһенең һәр һүҙе ана шул «Һаҡмар аға бит» тигәндән уҙманы ла кеүек. Ауыл ҡарттарына хас тормошсан, зирәк аҡыллы, әммә үткәне тураһында бер һүҙ ҙә әйтә алмаған кешене нисек баһалайһың инде? Аҫылғужиндың Байыҡ Ҡотдосов менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеп ҡарарға тигән уй-маҡсаты тормошҡа ашманы. Алдында торған мәсьәләне һәр саҡ сисеп өйрәнгән фән докторы серле сир менән яфаланыусы ауыл ҡарты алдында көсһөҙ булып ҡалды.

Ҡарттар ауылға ҡайтып киткәс, профессор баш табипҡа:

– Усман Ғәлиевич, Байыҡ ҡарт ғәҙәти булмаған кеше, уның сире лә физиологик хәленән бигерәк, тәбиғи булмышына бәйле. Психология фәне беҙҙә әле шәхесте ул кимәлдә өйрәнерлек тәжрибә тупламаған, – тине.

Байыҡ ағайға ғәжәйеп тәбиғи талант һалынған, мөғжизәләргә ышанырға мөмкин булһа, күрәҙәлек ҡылмайым, әммә ул кире элекке хәленә ҡайтыр кеүек... Ул юлды ла үҙе табыр һымаҡ.

Миңә был турала уның күҙҙәре һөйләне. Күҙҙәр абстракт төшөнсә түгел. Байыҡтың ҡараштары хәтерен юйыр алдынан булған ауыр кисереш мәлендә күргән әйберендә ҡатып ҡалған. Шул хәлгә оҡшаш ваҡиға уның хәтерен тергеҙәсәк...

– Шулай ҙа бында биргән дарыуҙы уға өйөндә лә ай һайын ҡаҙап торорға кәрәк буласаҡ, – тине баш табип.

* * *

Ай тулыуға бер аҙна самаһы ҡалғас, Ҡафия әбей, тейешле дарыуҙы алып ҡайтыр өсөн, район үҙәгендәге дауаханаға барҙы. Тик кәрәкле дарыу Өфөнән әле килеп етмәгән. Баш табип Ҡафияға тиҙ генә ауылға ҡайтып ауырыуҙы баш ҡалаға алып барыуҙан башҡа сара ҡалмауын белдерҙе.

Ошо хәбәрҙе алып, ашҡынып ауылға ҡайтып еткән Ҡафияны Байыҡ «бармайымдан» һалдырып ҡаршы алды.

– Бармайым тигәс бармайым, таптығыҙ ауырыу кешене, белгегеҙ килһә, минән дә һау кеше юҡ, Һаҡмар аға бит, – Байыҡ ҡарт әбейенең тылҡыуын ишетергә лә, Өфө тигәндәрен күрергә лә теләмәй. – Ауылда минең йәшкә еткән кеше юҡ, ауырыу булһам, күптән дөмөккән булыр инем...

Йорт хужаһын Өфөгә барырға өгөтләү өсөн, район дауаханаһы баш табибы Сәлимов та килеп етте. Тик ҡарттың ауыҙынан сыҡҡан һүҙ берәү генә – «бармайым» булды.

Баш табип Сәлимов буш ҡайтып китте. Юҡ, ауырыуға үпкәләмәне ул, киреһенсә, профессор Аҫылғужин әйткән һүҙҙәр иҫенә төшкәс, һиҫкәнеп китте, тәрән уйға сумды. «Уның ауырыуы физиологик хәленән бигерәк, тәбиғи булмышына бәйле... ул элекке хәленә кире ҡайтасаҡ һәм юлды үҙе табасаҡ...» тип әйткәйне бит фән докторы. Тап ошо дәлилдәрҙе хәтерендә тергеҙгәс, Сәлимовтың табип интуицияһы телгә килде. «Ҡотдосовты урынынан ҡуҙғатырға ярамай, кем белә, профессор әйтмешләй, бәлки, ай тулғас өҙлөгөүе ҡабатланмаҫ...»

Әбейенең күҙенә сак-саҡ йоҡо эленеүенә, йәнен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән Байыҡ ҡарт төн уртаһында ихатаға сыҡты. Туҡтауһыҙ тартышып ҡалтыраған тәнен нисек тынысландырырға белмәй, шәп-шәп йөрөп алды. Әҙ генә туҡталып хәрәкәтһеҙ ҡалһа, аяҡ-ҡулы, тән ағзалары һулҡылдап, тартышып ала ла китә. Тик бер туҡтауһыҙ хәрәкәт иткәндә генә бер аҙ онотолғандай, әммә бар булмышын ялмап алған ҡалтыраныу, бер аяғын күтәреп, икенсеһен баҫҡан арала ла, үҙлеген белдерә. Хәҙер инде тән һыҙланыуы менән йән ғазапланыуы бергә ҡушылған кеүек, киреһенсә, береһенә көс төшөрһәң, икенсеһе лә ҡуҙғый, артабан дөйөм өҙлөгөүгә тартыла.

Ғазапланыуынан арыныу әмәлен тынғыһыҙ аяҡтары иҫенә төшөрҙө, улар, төн уртаһы булыуға ҡарамаҫтан, ҡартты Һаҡмар буйына тартты. Шул яҡҡа ыңғайлағас, күңеленә лә ҡайҙандыр еңеллек килде. Уға башҡаса юл юҡ кеүек, тик Һаҡмарына тартып торған илаһи хозурлыҡ ҡына ҡалған. Ана, уның Һаҡмары шыбырлай, үҙенә ниндәйҙер серҙе, михнәттәренән арыныр әмәлде әйткәндәй. Белә ул ерҙе Байыҡ ҡарт. Көндәр буйы ауыл балалары менән таш теҙеп уйнаған урын. Уның төрлө төҫтәге таштары, «тоғро һалдаттары» ла, шунда ята. Хәҙер ул шул таштар өҫтөнә һуйҙайып ятасаҡ һәм үҙенә мәңгелек тыныслыҡ табасаҡ, ғазаптарынан ҡотоласаҡ. Хәҙер, хәҙер, күп ҡалманы. Ҡарт, йылға ситенә яҡынлашҡан һайын, тәненең көслөрәк янып барғанын тойоп, өҫтөндәге күлдәген сисеп бырағытты. Ҡараңғылыҡ уға кәртә түгел, тоҫмал менән булһа ла, теге таштар ятҡан урынды табып алды. Хәйер, ҡарт ул ерҙе күҙгә энә менән төртһәң дә, бер ни күрмәҫлек төндә генә түгел, күҙҙәрен япма менән бәйләп килтерһәләр ҙә, эҙләп табасаҡ. Күңел ҡушыуы буйынса.

Әллә инде ярһыулығы сиктән ашып китеп, зиһене тарҡалдымы, тәне һиҙгерлеген юғалттымы, ул хатта таштар араһына түшәлеп һибелгән быяла ярсыҡтарына ла иғтибар итмәне.

Бындай саҡта, үҙе аңлауынса, дөм ҡараңғы донъялыҡ менән хушлашыр алдынан, хет табанына сөй ҡаҙаҡлаһалар ҙа, һиҙмәҫ ине, тәрән ауыртыныу уға тиҙерәк иҫен юғалтырға ярҙам ғына итер ине. Шешә ярсыҡтары, таштарҙы күмеп үк китеп, баҙрашып ятһа ла, үҙенсә әжәл күҙенә генә ҡарап килгән ҡарт уларҙы күрә буламы. Быяла ярсыҡтары өҫтөнә салҡатан төшөп ятты.

Арҡаһын быяла ватыҡтары семетеп алыуға, Байыҡ ҡарт, киреһенсә, ләззәт тойғоһо ғына кисерҙе кеүек. Әллә бар тәненең тартышып өҙләгөүен ауыртыныу еңдеме, һәр хәлдә ҡалтырамай башланы ла кеүек. Арҡаһының һәр ус аяһы еренә ғыршылдап ҡаҙалған быяла остоҡайҙары уны ниндәйҙер үлемесле, шул уҡ ваҡытта ләззәтле түшәккә ҡоршап ҡуйғандай. Байыҡ ҡарт, күҙҙәрен йома ла, аса ла алмай, саҡ ҡына ятты, әммә был мәл уға бик оҙаҡ, мәңгелектәй тойолдо. Быяла-тырнаҡтар ныҡ итеп матҡып алды уны, бер үк ваҡытта бик күптән инде сеймәлеп ойоп ҡалған хәтер ептәрен дә ысҡындырҙы.

Быяла ярсыҡтарының тәненә һөләктәй ҡаҙалыуы бер талайға Байыҡ ҡартты йылға ярына ҡаҙаҡлап һалып ҡуйған кеүек булһа ла, ул тиҙ иҫенә килде. Ҡоршаулы яҫтыҡтан ҡотолоп тороп ултырҙы ултырыуын, әммә бәғерен ҡармап алған күңелдәге хәтер ҡоршауынан ысҡына алманы. «Туҡта, ҡайһы ерҙә ултырам әле, бәй, был бит Һаҡмар яры, ана Ташаҫты ҡаяһы, ана ауыл» тип, күҙе таныған күренештәрҙе барлап, иҫе китеп ултыра торғас, зиһенен йәнә икенсе һорау телгеләне: «Бәй, әле генә немец һалдаттары уратыуында ул бит Садиҡтың ҡурайына «Байыҡ»ҡа баҫа ине, бәй, төш кенә булдымы, улай тиһәң, ул хәл төш кенә лә түгел, бөгөнгөләй хәтерендә».

Үҙенә юғалған хәтере көтмәгәндә әйләнеп ҡайтыуын Байыҡ ҡарт һаман да аңлай алмай әле. Ниңәлер бар ғүмере атҡа һыбай менеп, ҡылыс болғап танкыларға ҡаршы барыуға ғына ҡайтып ҡалған кеүек. Шул мәленән алып бөгөнгө көнөнә тиклем арауыҡта – бушлыҡ, хәтерендә ҡалған һуңғы ваҡиғалар барыһы ла немец һалдаттары менән бергә иҫенә килә. Шуларҙың араһында офицер Ганс Грюндиг. Үҙе һауалы ла кеүек, әммә күҙҙәренә ҡараһаң, фашистарға ерле оҡшамаған.

...Бына улар, һыбайлы егеттәр, ҡылыс болғап, дошманға ҡаршы бара, баш осонда самолёттар кәйелә, ҡаршыларында һыртына тәре төшөрөлгән танкылар. Бер снаряд Байыҡ менгән юрғаның аяҡ аҫтына төшөп ярылды, аты ҡаты итеп кешнәп ситкә ауҙы. Хужаһы иҫен юғалтты...

«Ғәбделбарый ағай, тор, был мин – Садиҡ, Ғәбделбарый ағай, танкылар китте», – Байыҡ был тауышты төшөндә ишетә кеүек. Иҫенә килгәс тә, тәүҙә үҙенең донъялыҡта, иҫән булыуына ҡыуанып, йылмайҙы. Бер ере лә яраланмаған, кипсәлмәгән кеүек, баҡтиһәң, ул снаряд шартлаған ҡаты тауышҡа шаңҡыған. Бәй, аһ-аһ, ҡурайсы Садиҡтың йәнасыҡҡа ҡысҡырған тауышын төштә ишетәм тип тора. Бына бит ул үҙе, Байыҡҡа аяғына баҫырға ярҙамлаша.

– Беҙҙекеләр ҡайҙа? – Булды уның тәүге һорауы, һалдат һаман да тулыһынса иҫенә килеп етмәй, ҡолағындағы шаулау яйлап баҫыла төштө.

– Ҡайҙа булһын, беҙ ҡамауҙа ҡалдыҡ, немецтарҙың танкыларына осраныҡ бит, – йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан бик зирәк Садиҡ Байыҡҡа фляғаһын һуҙҙы. – Мә, Байыҡ ағай, башта эсеп ал…

– Һыумы? – Байыҡ, егеттең ҡулындағы һауытты алып, ғолтлатып бер-ике тапҡыр уртланы ла Садиҡҡа кире бирҙе: – Беҙ немец тылында инде улай булғас?

– Ниңә беҙгә, һәтәүҙәргә, күрәләтә танкыларға ат менән ҡаршы барырға инде? – тине Садиҡ.

– Күрәләтә шул, ярай, Садиҡ, беҙгә тиҙерәк ҡыбырларға кәрәк, – шулай тине лә Байыҡ, атлай ҙа башланы, артынан бер тотам ҡалмай Садиҡ эйәрҙе.

Артабан, үҙҙәренсә әйткәндә, фронт һыҙығына, Сталинградҡа табан юл тотмаҡсы улар. Һәр хәлдә, Садиҡтан ике йәшкә өлкән Байыҡ шундай ҡарар ҡабул итте. Үлгән аттары менән хушлашҡанда, егеттәрҙең күҙенән йәш килеп сыҡты. Менгеләренең сит ерҙә ошолай ҡәҙерһеҙ килеш ятып ҡалыуын бик ауыр кисерҙе егеттәр. Уларҙы күмергә ваҡыттары һәм әмәлдәре юҡ. Ҡоҙғон-фәлән күҙенә ем булып ятмаһын өсөн, яугирҙар аттарының өҫтөн үлән, сыбыҡ-сабыҡ менән ҡапланы. Быны менән егеттәр уларға ҡулынан килгән һуңғы ҡәҙерҙе күрһәтте. Садиҡ һәр саҡ эйәр ҡашағаһынан төшөрмәй йөрөткән еҙ ҡурайын да үҙе менән алды.

Ҡаты-ҡото тәғәм итеп, һыу менән тамаҡ сылатып алғас та, ҡоралдарын ҡулына тотоп, яугирҙар юлға сыҡты. Эңерҙә ҡыҙғылт төҫкә мансылып торған офоҡ тарафын улар Сталинград тип билдәләне.

Ниңәлер, алға барған һайын, офоҡ та артҡа шыуыша кеүек. Бер аҙым алға атлауҙары була, Сталинград тигәндәре ике аҙымға алыҫая. Әллә арығанға, әллә үҙҙәренә таныш түгел

сит ер булғанға шулай тойолдо был хәл. Былай ҙа эйәрҙә саҡта өс тәүлек буйына керпек тә ҡаҡмай талсыҡҡан егеттәрҙең аяғын арыу тышауланы, зиһендәрен йоҡо ҡарманы. Бер арығансы барып, өйәңке төбөнә хәл йыйырға ултырған ерҙәренән ойоп та китте улар. Саҡ ҡына аяҡ яҙырға иткәйнеләр ҙә бит.

Уяныуҙарына, дөрөҫөрәге, уларҙы кемдәрҙер ҡаты итеп типкеләп уятыуҙарына, үҙҙәрен ялпаҡ каска кейгән немец һалдаттары уратып алғайны. Егеттәр йүнләп ниҙең ни икәнен аңларға ла өлгөрмәне, уларҙы тиҙ арала ҡоралһыҙландырып өлгөргән һалдаттар, йәһәт кенә аяҡтарына баҫтырып, бөтөнләй кире яҡҡа, Байыҡ менән Садиҡ әле генә килгән тарафҡа йүгерергә ҡушты. Немецтар хатта уларға иҫнәргә лә әмәл бирмәне. Бер тына йүгергәс кенә, егеттәр үҙҙәре кеүек әсир төшөп яндарында елдергән тағы ла биш һалдатҡа иғтибар итте. Тик шул саҡ ҡына хәлдәренең сиктән тыш ауыр булғанын аңланы Байыҡ менән Садиҡ. Немец һалдаттары үҙҙәре алдан төшкән икән, байтаҡ ҡыналар, ә арттан бишәүҙәре автоматтарын әҙер килеш тотоп, әсирҙәрҙе ҡарауыллап йүгерә.

Шулай күпме барғандарҙыр, хәлдәре бөтөп аһылдаған немец һалдаттары бер аҙ тын алырға булды. Улар автомат көбәге менән төрткөләп, әҫирҙәрҙе уртаға өйөрөп үк ҡуйҙы. Егеттәрҙең тын юлдары ҡурылып, тамаҡтары кипте. Байыҡ үҙҙәренең ни өсөн шулай немец һалдаттары менән эргәләш йүгереүҙәрен аңларға иткәндәй, тегеләрҙән күҙен алмай. Урталарында ултырған бик ҙур дәрәжәле офицерҙы күргәс, барыһын да аңлағандай итте. Тимәк, фашистар Сталинград янында ҡыйратылған булып сыға, был төркөм һәләк булыуҙан, йә әсир төшөүҙән ҡурҡып, табан ялтырата. Һалдаттар әсирҙәрҙе шул уҡ ерҙә, әүен баҙарына киткән урындарында атып уҡ китерҙәр ине, һәр хәлдә, үлемдән ҡасып сигенеп барыусылар оҙаҡ уйлап тормаҫ ине. Тимәк, ана шул уртала ҡуҡырайып ултырыусы офицерҙың ғүмерен һаҡлау өсөн, уларҙы арттан «ҡалҡан» итеп йүгертәләр был башкиҫәрҙәр. Арттарынан ҡыуа килеүсе совет һалдаттары үҙҙәренекенә тота килеп атмаҫтар бит.

– Ғәбделбарый ағай, аҙаҡ бит беҙҙе атып китәсәктәр, – Садиҡ Байыҡтың ҡолағына нығыраҡ эйелде. – Беҙҙекеләрҙән алыҫлашҡас та, дөңкәйтәсәктәр, исемебеҙҙе лә һорап тормаясаҡтар…

Немец һалдаттары әсирҙәрҙе тағы аяғына баҫтырҙы. Тағы йүгерҙеләр. Беҙҙең теге әсирҙәрҙең икеһе ҡасырға уйлағайны,

шикелле. Икеһе ике яҡҡа ынтылыуы булды, уларҙың юлын арттан килгән немец һалдатының автомат тыҡылдауы бүлде. Байыҡ менән Садиҡ былай итеп ҡасыуҙа мәғәнәһеҙ үлем генә күрҙеләр. Немецтар өсөнсө һалдатты, хәле бөткәс, атып киттеләр. Ул арала таң атып, ер өҫтө яҡтыра ла башланы. Егеттәр ҡаршыларында ҡуйы урман күрҙе, тағы ла бер тына йүгерһәләр, унда барып та инәсәктәр.

Сталинград яғынан табан ялтыратыусылар өсөн урман ҡотолоу, эҙ яҙлыҡтырыу сараһы булһа, әсирҙәр үҙҙәренең әжәл сәғәте еткәнен һүҙһеҙ аңлай. Хәҙер, хәҙер барып етәсәктәр ҙә, урмандың ситендә уларҙан ҡотоласаҡтар. Фашистан мәрхәмәт көтөп булмай. Әсирҙәр үҙҙәренең донъяла һуңғы сәғәт йәшәүҙәрен, немец һалдаттарының, урманды күреү менән, шатланыуҙарынан да яҡшы аңлай. Ана ҡайһылай ихахайлап көлөшә улар. Телдәрен аңламаһалар ҙа, ишаралары үтә яҡын уларҙың.

Урман ситенә барып етеп, дала асыҡлығынан йәшеренгән фашистар, әсирҙәр уйлағанса, уларҙан тиҙ генә ҡотолорға уйламай кеүек. Төркөм, ҡайындар араһынан хәтһеҙ барып, ҡуйы шырлыҡҡа барып морон төрткәс, ялға туҡтаны. Теге юғары дәрәжәле офицер ике һалдатты урмандың ситенә, Сталинград тарафына һуҙылған асыҡ яланды күҙәтергә ебәрҙе, ҡалғандары тамаҡ ялғап, әүеш-тәүеш итте. Ниңә улар әсирҙәрҙән ҡотолорға уйламай һуң? Тимәк, дошман тағы ла мәкерерәк уй-ниәт ҡора, йә булмаһа, улар әлегә үҙҙәрен хәүефһеҙ тойған урынға барып етмәгәнме? Байыҡ менән Садиҡ ошо хаҡта баш вата, йәндәрен ҡайыҙлаған билдәһеҙлектән ҡотолоу әмәлен эҙләй. Ғөмүмән, аңлы рәүештә үҙ үлемеңде, һуңғы минутыңды, һуңғы һулышыңды көтөүҙән дә ауырыраҡ әмәл бармы икән? Бына-бына, теге офицер фарман бирер, һалдаттар яғына баҫыр һәм уларҙы, Садиҡ әйтмешләй, дөңкәйтеп атып китәсәктәр. Байыҡ ошо ерҙә ҡанһырап ятып ҡалған үҙ кәүҙәһен күҙ алдына баҫтыра ла, ирекһеҙҙән, тештәрен ҡыҫып, сайҡалып уҡ ҡуя. Уның кәйефе бауырҙашы Садиҡҡа ла күскән, ул хатта ирендәрен ярғансы тешләгән, өмөтһөҙлөктөң һуңғы сигенә бирелгәндәй, йөҙө ҡара янған. Уларҙың яҙмышын бүлешеүсе, әжәл әмәлен уртаҡлашырға әҙерләнеүсе теге ике рус һалдаты бер-береһенә өнһөҙ ҡарашҡан да, туҡтауһыҙ суҡыныуын белә. Егеттәргә был минуттар, секундтар мәңгелектең үҙе кеүек, тағы ла бер аҙ ғына көтһәләр, ул тарафтың ҡапҡалары асыласаҡ.

Офицер ярҙамсыһын саҡырып ниҙер аңлатты, бармағы менән әсирҙәргә төртөп күрһәтте. Ҡолға буйлы немец

урталыҡта ултырған тотҡондар янына килеп, урыҫсаны вата-емерә һөйләй башланы.

– Русиш зольдатен, госпадин оберштурмбанфюрер Ганс Грюндиг просит фас прашатся друг з другом…

Бер нисә секунд эсендә барлыҡ ғүмерен күҙ алдынан үткәрә алды Байыҡ. БыҒаса йәшәгәне бер тотамдай ғына ара. Күргән генәләре лә ауылы, туғандары, кәләше Ҡафия һәм дә сәхнәлә бейегән сағында алҡышлаусы ауылдаштары. «Үлем килде миңә», – тип шыбырланы Байыҡ, күҙен бер аҙға ғына йома төшөп. Күҙ алдары асылыуға, ҡараштары немец офицерыныҡы менән осрашты. Кикереге шиңде тегенең, Байыҡтың утлы осҡондарын күтәрә алмайынса, Грюндиг башын түбән эйҙе. Әсирҙең яҙмышына үҙе хужа булыуын иҫенә төшөрөп булһа кәрәк, тиҙ генә ҡарашына икенсе мәғәнә һалып, йәнә текәлде лә ҡатты ул. Бына һиңә кәрәкһә. Офицерҙың икенсе тапҡыр күтәрелгән башында йыйылаған ике алма тәүҙә бер аҙ нәфрәткә тулышҡандай тойолдо ла тағы ла Байыҡтың ҡоростай ихтыяры алдында селпәрәмә килде. Ганс ирекһеҙҙән аяғына баҫты, тылмасын эйәртеп, әсир янына килде, әйткән һүҙҙәрен ярҙамсыһы урыҫсаға бик нәзәкәтле итеп ауҙарҙы.

– Гаспадин оберштурмбанфюрер хочет фас фыслушат перед смертью, – тип йылмайҙы ҡолға.

Офицер Байыҡҡа терәлеп үк килеп баҫты, уны ҡараштары менән еңергә иткәндәй, тексәйеп торҙо ла, артҡа сигенеп, элекке урынына барып ҡунаҡланы. Тынлыҡ бик оҙаҡҡа һуҙылды, һәр хәлдә, әсирҙәр өсөн шулай тойолдо.

Байыҡ, немец офицерынан ҡараштарын айырмайынса аяғына баҫты. Башҡа әмәле ҡалмағайны шул. Аяғына баҫты, тик ни эшләргә? Ошолай һерәйеп тороп, мәғәнәһеҙ үлергәме?

Инде әжәл килеп үҙен ҡармап алдым тигәндә генә, Байыҡҡа тәбиғи булмышы алға табан бер аҙым яһарға ҡушты. Бары бер генә аҙым. Грюндиг менән уны барлығы унлап аҙым айыра, тимәк, әжәленә тиклем тағы ла туғыҙ ынтылыш ҡала. Әле йәшәргә була икән. Ошо әмәлде файҙаланып, Байыҡ һаман да хәтеренән ысҡынған үткәнен иҫләп, яҡты уйҙарға бирелергә тырыша… Хәҙер алға бер аҙым яһағас, туҡталып ҡалырға ярамай, ул үҙе үк автоматтарҙың телгә килеүенә һылтау ғына буласаҡ. Бары һылтау ғына.

Байыҡ Грюндигка табан бишенсе аҙымын яһағанда, ҡапыл ер аҫтынан урғылып сыҡҡандай, ҡурай моңо ағылмаһынмы. Ниндәй илаһи аһәңле икән ул ҡурай тауышы, бигерәк тә һуңғы

һулышыңды алыр мәл еткәндә, ҡәҙерле йәнеңә торошло. Уның бәғергә үтә яҡын ғыжғылдауы, аяҡ табандарынан башлап ҡытыҡлап, бар тәнгә майҙай яғылып күтәрелә. Байыҡтың тәбиғи булмышы өҫкә сыҡты, тантана итте, «Байыҡ» көйө ағыла башлауға, ер һелкетеп бейеп тә китте. Бейеүе, данлыҡлы Байыҡ сәсән ҡотҡарҙы үҙен. Афарин, Садиҡ, еҙ ҡурайын ҡуйынына йәшереп ҡала алған. Бейеү башындағы боролошта йөгәнәкләп ҡурай тартып ултырған Садиҡҡа Байыҡ баш һелкеп алырға ла өлгөрҙө. Мәрҙәс Садиҡҡа, әмәлен тапты, ағаһы Байыҡты ғына түгел, дүртеһен дә үлемдән ҡотҡарҙы. Былай барлығы биш кенә ынтылышы ҡалғайны уның. Хәҙер уларҙың ғүмере тотош «Байыҡ» бейеүе оҙонлоғона һуҙылды, тик уйнауыңдан ғына туҡтап ҡуйма, Садиҡ! Ул хәҙер сәғәттәр буйы, көндәр, айҙар һуҙымында бейергә лә риза. Ошо әмәл уларҙың ғүмерен оҙайтһын ғына, үлгәнсе бейергә риза Байыҡ. Йөҙәр, меңәр тапҡыр башҡарғаны бар ошо бейеүҙе. Тик бына йәне ҡыл осонда торғанда, ул тәүге тапҡыр тыпырлата. Бейей генәме, берсә бөркөт булып осҡандай, арыҫландай ажарланғандай. Аҡбуҙат булып юрғалағандай. Уның дәрте Садиҡҡа ла күсә, уныһы тағы ла ауаҙлыраҡ итеп ҡурайын ғыжғылдата, көйө дәртлерәк булған һайын, бейеүсеһе лә оторо ярһый. Бейеү азартына бирелеп, үҙҙәрен фашист һалдаттары уратып алыуын бөтөнләй онотто Байыҡ менән Садиҡ. Хәҙер улар бар ни, юҡ ни! Автоматтары тыҡылдаһа ла, ишетмәйәсәк, үлһәләр ҙә, яҡты донъя менән йылмайып хушлашасаҡ улар. Әле генә ғүмерҙәре менән хушлашырға йыйынып бөтөүсе әҙәм балаларына йән инде, гүйә, бейеү уларҙың ҡайһылыр күҙәнәгендә ойоп ҡалған йәшәү ҡотон уятты.

Ҡурай тауышы немец һалдаттарын тәүҙә һиҫкәндерҙе, Ганс Грюндиг хатта һикереп аяғына баҫты, янында торған һалдатҡа ниндәйҙер фарман бирергә итте лә, кире уйланы, сөнки шул мәл Байыҡ һыңҡылдата баҫып бейей ҙә башлағайны. Улар барыһы ла уҫал ҡарашлы тотҡондоң офицерға килә ятҡан еренән тегеһе ниндәйҙер флейта кеүек музыка ҡоралында уйнаған көйгә бейей башлауын нимәгә юрарға белмәй, ғөмүмән, был хәлгә бер ниндәй ҙә аңлатма таба алмайынса, ауыҙын асып ҡатҡайны. Автоматтарын әҙер тотҡан ҡулдары һәленеп төштө, тәтегә баҫырға әҙерләнгән бармаҡтары яҙылды. Ганс Грюндиг бирсәткәләрен һалып усын усҡа һуҡты.

Барлыҡ немецтар ҙа фашист булмауын дүрт әсир ошо саҡ аңлағандыр. Ганс Грюндиг йөҙҙәренә ризаһыҙлыҡ сығарың-

ҡырап ҡуйған башҡа һалдаттарҙың асыуын үҙенең ҡорос ихтыяры менән баҫты. Улар хатта тотҡондарға ашарға ла бирҙе, һыу тәҡдим итте. Үҙҙәрен Кузнецов һәм Громов тип таныштырған рус егеттәре Байыҡ менән Садиҡҡа сикһеҙ рәхмәтле булыуын белдерҙе, күҙҙәрендә йәш тә күренде. Әүкәтләнеп ултырғандарында, немец һалдаттары, күҙлеккә ҡыҙыҡҡан маймыл кеүек, Садиҡтың ҡурайын ҡулдан ҡулға йөрөтөп ҡарап сыҡты. Берәүҙәре хахылдап көлдө, уның төрлө яғынан тотоп, эсенә өрөп тә маташты, бәғзеләре үҙҙәре аңлай алмаған музыка ҡоралы һәм бейеү хаҡында тәржемәсе аша егеттәргә төрлө һорауҙар бирҙе.

Артабанғы юлдары сикһеҙ урмандар аша һуҙылды. Әсирҙәр еңел һулыш алған кеүек булдылар ҙа ул, ләкин тора-бара был елкенеүҙең ҡыҫыр шатлыҡ ҡына икәненә лә инандылар. Сөнки уларҙы алда миллионлаған кеше ғүмерен ҡыйған ҡоллоҡ көтә.

Артабан тотҡонлоҡ, улар немец һалдаттары уратыуында дүрт көн урман буйлап барҙы. Һуңынан уларҙы тағы ла үҙҙәре кеүек иллеләп әсир менән бергә көнбайышҡа ҡыуҙылар. Сигенеп барыусы фашистар уларҙы һәр саҡ үҙенә ҡалҡан итеп файҙаланды. Ғәжәпкә ҡалғандай, Ганс Грюндиг та улар менән һәр саҡ бергә килде. Артабан, эйе-эйе, ул көндө Байыҡ бик яҡшы хәтерләй. Хәтеренең иң төпкөлөнә тап шул ваҡиға эленеп ҡалған икән, сөнки шул дәһшәтле көндән был яғын ул, күпме генә тырышмаһын, иҫләй алмай. Сталинград янындағы ҡыйралыштан һуң күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән немец офицерҙары, юҡ һылтауҙы бар итеп, үҙҙәренсә сәбәп ҡылып, күңел асырға өйрәнеп алды. Ниндәйҙер ҙур булмаған Европа ҡалаһында туҡталған саҡта, офицерҙар, үҙҙәре әйткәнсә, «еңелмәҫ Гитлер командованиеһының ниндәйҙер совет ҡалаһын яулап алыуын» байрам итте.

Бына бер мәл офицерҙар араһында торған Ганс Грюндиг башҡаларға ниҙер тәҡдим итте. Тегеләре, шуны ғына көткәндәй, шаулашырға тотондо. Ганс, тимер сыбыҡлы ҡойма янына килеп, күҙ ҡарашы менән тотҡондар араһынан Байыҡ менән Садиҡты эҙләп тапты. Байыҡ үҙенә таныш ҡараштан барыһын да аңланы: ул тағы ла «ниҙер әйтергә» тейеш.

Йәшәүгә ынтылышы, тормошто һөйөүе был юлы ла Байыҡты бейетте. Үҙенең һәм башҡаларҙың ғүмерен һаҡлар өсөн, ул хәҙер немец офицерҙарын һиҫкәндерерлек итеп, тотҡондарҙы үлтереүҙән туҡтатырлыҡ итеп бейергә бурыслы. Бейеүен өҙмәһендәр генә, хет таңға тиклем, бүре кеүек ҡоторған фашистар араҡы, хәмер шауҡымынан арынғансы, бейер ҙә бейер.

Шулай булды ла. Тик таңға тиклем, офицерҙар араҡы, хәмер шауҡымынан арынғансы түгел. Байыҡ ҡанһырап аяғынан йығылғансы. Асфальт өҫтөнә ялан аяҡ бейергә төшкән тотҡондо тәүҙә бер һыуһындай ҡарап кинәнгәндән һуң, офицерҙар уның аяҡ аҫтына ҡулындағы бокалдарын, шешәләрҙе ташларға тотондо. Тәүҙә Байыҡ табанының сите менән быяла ярсыҡтарын бер яҡҡа ышырыңҡырап баҫып йөрөнө, аҙаҡ ул да мөмкин булмай башлағас, табандары аҫтында ялтлаған ҡуҙлы торомбаштарҙы тойҙо. Шул килеш бик оҙаҡ бейене лә бейене ул. Аҙаҡ бер нәмә лә иҫләмәне, ҡайҙалыр, хәтер упҡынына ауҙы, буғай…

Иртәнсәк бабайының өйҙәме, түгелме икәнен дә ҡарап тормайынса, дарыу алырға тип, район дауаханаһына киткән Ҡафия әбей баш табип менән, уның машинаһына ултырып, төш ауыуға ғына, ауылдарына ҡайтып етте. Өйҙәренә барып етәрәк, ҡапҡаларының асыҡ тороуын күреп, былай ҙа ире өсөн ныҡ борсолған әбей, шартлай яҙҙы.

– Уй, берәй хәл булдымы, йөрәгем, – тип, машина туҡтартуҡтамаҫ сығып та йүгерҙе...

Еңгәләре артынан борсолоуҙан аһылдап өйгә барып ингән табиптар ишек төбөндә шаҡ ҡатты: төпкө яҡтың бер мөйөшөндәге тумбочка өҫтөнә ҡуйылған магнитофондан ҡурайҙа дәртле «Байыҡ» көйө ағыла, ә иҙән уртаһында лысма тиргә батҡан Байыҡ ҡарт йәш сағындағыса һыңҡылдата баҫа...

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Ғәбделбарый нисек «Байыҡ» булып киткән? Уның бейеү һәләтенә ентекле баһа бирегеҙ.
3. Ғәбделбарыйҙың фажиғәле яҙмышына күҙәтеү яһағыҙ. Уның хәтерен юғалтыуға сәбәпсе булған ваҡиғаны тасуирлап һөйләгеҙ.
4. *Ек күреү, һүҙгә килешеү, үлеп йоҡо килеү, телен сисеү, түкмәй-сәсмәй һөйләү, уйға сумыу, табан ялтыратыу, эҙ яҙлыҡтырыу, морон төртөү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
5. *Һаҡаллы сабый* тип кемгә әйтәләр? Һеҙ үҙегеҙгә шулай тип әйтеүҙәрен теләр инегеҙме?
6. Кешегә *төҫ ҡуныуҙы* һеҙ нисек аңлайһығыҙ? *Төҫө ҡасҡан* тигән төшөнсә лә бар. Кемгә шулай тип әйтәләр?
7. Бер һыуһын ваҡыттың оҙонлоғон билдәләгеҙ.
8. *Йәне ҡыл өҫтөндә тора* тип ҡасан һәм кемгә әйтәләр?
9. *Иҫ белгәне бирле* ҡасандан алып булған ваҡыт ул? Кеше ҡасан иҫ белә башлай?

**10.** Ғәбделбарый тураһында «уның хатта бармаҡтары ла бейей» тигәндәр. Бармаҡтарҙың бейеүен күҙ алдына килтерегеҙ, үҙегеҙҙең бармаҡтарығыҙҙы бейетеп ҡарағыҙ.

**11.** «Байыҡ» конкурсында ҡатнашыусыларҙың сығыштарын ҡарағыҙ, уларҙы үҙегеҙсә баһалағыҙ, фекер алышығыҙ.

**12.** Ғәбделбарый образына характеристика бирегеҙ.

**13.** Ғәбделбарыйға башҡорт бейеүе тураһында атаһы әйткән һүҙҙәрҙе табып уҡығыҙ. Һеҙҙең быға ҡарашығыҙ нисек?

**14.** Һеҙ үҙегеҙ бейегәнегеҙ бармы? Ғөмүмән, һеҙҙең бейеү сәнғәтенә ҡарашығыҙ нисек?

**15.** Үҙегеҙ белгән күренекле бейеүселәрҙең исемдәрен барлағыҙ. Улар тураһында кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.

**79-сы күнегеү.** «Һаҡмар аға бит» хикәйәһенә аннотация яҙығыҙ.

Аннотация – әҫәрҙең, китаптың ҡыҫҡаса йөкмәткеһен, тәғәйенен, үҙенсәлектәрен биреүсе характеристика.

## Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар

Әлегә тиклем ҡараған ҡушма һөйләмдәр, нигеҙҙә, ике һөйләмдән тора ине. Улар бер-береһе менән йә теҙмә бәйләнештә, йә эйәртеүле бәйләнештә булдылар. Текстарҙа иһә бик күп ябай һөйләмдәрҙе үҙ эсенә алған төрлө бәйләнештәре булған ҡатмарлы һөйләмдәр ҙә йыш осрай.

Ҡушма һөйләм схемалары.

1. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр:

*Айыуҙы айыу ашамаҫ, бүрене бүре ашамаҫ.*

[ ], [ ].

*Мал ашаған еренә ҡайтыр, ә ир тыуған иленә ҡайтыр.*

[ ], ә [ ].

2. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.

*Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа, күсе шунда ҡуныр.*

(ҡайҙа...), [шунда...].

*Аҡыллы кеше һүҙен һөйләгәндә, ашар ашың онотолор.*

(...гәндә), [ ].

3. Төрлө бәйләнеү төрҙәре булған һөйләмдәр.

*Алтын ерҙә ятһа ла, тут теймәй, әжәлһеҙгә төҙәп атһаң да, уҡ теймәй.*

(...һа ла), [ ], (...һаң да), [ ].

*Атың барҙа елеп ҡал, йөрөй алмай торған көн килер.*

(...ҙа ) [ ], [ ].

**80-се күнегеү.** Төрлө бәйләнеү төрҙәре булған һөйләмдәрҙең грамматик нигеҙҙәрен билдәләгеҙ, һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөгөҙ.

1. Әллә инде ярһыулығы сиктән ашып китеп, зиһене таркалдымы, тәне һиҙгерлеген юғалттымы, ул хатта таштар араһына түшәлеп һибелгән быяла ярсыктарына ла иғтибар итмәне.

2. Ниндәй илаһи аһәңле икән ул ҡурай тауышы, бигерәк тә һуңғы һулышыңды алыр мәл еткәндә, ҡәҙерле йәнеңә торошло.

3. Уның дәрте Садиҡҡа ла күсә, уныһы тағы ла ауазлыраҡ итеп ҡурайын ғыжылдата, көйө дәртлерәк булған һайын, бейеүсеһе лә оторо ярһый.

**81-се күнегеү.** «Һаҡмар аға бит» хикәйәһе буйынса кино төшөрөргә кәрәк булһа, һеҙҙең сценарий нисек булыр?

## НӘЖИБ АСАНБАЕВ

*(1921–2013)*

Нәжиб Асанбаев (Николай Васильевич Асанбаев) – Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, күренекле драматург, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Уның «Беҙгә егеттәр килде», «Кәләш әйттергәндә», «Күктән төшкән бәхет», «Һыу юлы» комедиялары, «Рәйсә», «Фәйзи», «Алтын бишек», «Зәйтүнгөл», «Ҡыҙыл паша» һ. б. драмалары киң билдәле.

## ҠЫҘЫЛ ПАША

*(драманан өҙөк)*

Өҙөктә ҡатнашалар:

Йәғәфәр – имам, Ғәрәп имаматының (короллегенең) башлығы (һуңынан үҙен король тип иғлан итә).

Әхмәт – Йәғәфәрҙең улы, имаматтың хәрби министры.

Ҡазый – хөкөм сығарыусы (судья).

Әбүбәкер – Имамат «Диуан»ының (хөкүмәтенең) сәркәтибе (секретары).

Сәйет – Имаматтағы сөнни мәҙһәбендәге мосолмандарҙың башлығы (шәйехе).

Кә р и м – СССР-ҙың Ғәрәп Имаматындағы генераль консулы (илсеһе).

Ғүмәр Иҙриси – Имаматта йәшәүсе эмигрант, элекке Рәсәй офицеры.

## Беренсе картина

Имам һарайы. Ярым ҡараңғыла Йәғәфәр үҙенең йәмәғәте менән иртәнге намаҙҙы уҡый. Яҡында ғына Ҡөрьән һүҙҙәре яңғырай. Бер аҙҙан сәхнә яҡтыра. Бында Әбүбәкер менән ҡазый ҙа бар. Бөтәһе лә үҙ вазифаһын башҡарырға керешә. Йәғәфәр тәхеткә ултыра.

Ҡазый *(ишек төбөндәге һаҡсыларға)*. Индерегеҙ!

Тышта шау-шыу ҡуба, ҡулдары бығауланған Сәйетте алып инәләр.

Сәйет *(һөрән һалып)*. Хурлыҡ! Хурлыҡ! Хурлыҡ! Имам әғзам! Ниңә беҙҙе былай мыҫҡыл итәләр? Беҙ бығаулап йөрөтә торған кешеме ни? Лә Иләһә илләл-лаһ, Мөхәммәд-рәсүлуллаһ!..

Йәғәфәр *(уға)*. Шәйех Сәйет, һеҙ әллә имам һарайын йәннәт тип белдегеҙме?

Сәйет. Беҙ йәһәннәмгә тип тә килмәнек, имам әғзам!

Йәғәфәр. Ашыҡмай тор, йәһәннәменә өлгөрөрһөгөҙ!

Ҡазый. Аллаға шөкөр итеп, имам ғали йәнәптәренә рәхмәт әйтәһе урынға, ана нимә эшләп ятҡанһығыҙ! Ҡәбиләләр араһында дошманлыҡ уты ҡабыҙыу шәйех кешегә һис тә килешә торған эш түгел, мосолман! Ниңә баш күтәрҙең? Яуап бир, ҡол!

Сәйет. Мин ҡол түгел, мин – шәйех!

Ҡазый. Ошо сәғәттән алып һин – ҡол!

Сәйет. Имам әғзам! Был нимә эшләүегеҙ? Беҙ бит һеҙҙең дуҫығыҙ?!

Ҡазый. Батшаларҙың дуҫтары буламы ни, диуана! Батшаларҙың ҡолдары ғына була! Эйеме? Эйе...

Йәғәфәр. Ярай, беҙ шиғыйҙар мәҙһәбендәге, һеҙ сөнниҙәр мәҙһәбендәге мосолман, ти. Булһа һуң! Беҙ бит – ғәрәптәр! Бөтәбеҙ ҙә Мөхәммәт өммәтенән! Ғәрәпте ошо ҡәбиләләр араһындағы ыҙғыш-талаш харап итә лә! Ана, инглиздәр шуға таяна – ғәрәпте ғәрәп ҡулы менән туҡмай! Беҙгә берҙәмлек кәрәк, шәйех! Ә һеҙ...

Сәйет. Ниңә баш күтәрҙекме? Әйтәм!.. Беҙҙең ҡәбилә халҡын ҡолдарға әйләндергәнең өсөн! Һарайығыҙҙа беҙҙең

сөнниҙәрҙән бер әҙәм юҡ, бөтәһе лә үҙегеҙҙән! Дәүләт башында, мин идаралыҡ даирәләрен әйтәм, аҡыл эйәләре ултырырға тейеш! Был тигеҙһеҙлек сөнниҙәрҙе бик ныҡ рәнйетә.

Ҡазый. Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе Мөхәммәт нәҫеленән яратмағанға беҙ ғәйепләмә ни, диуана! Беҙ, шиғыйҙар, пәйғәмбәр ҡыҙы Фатима вә кейәүе Ғәли затынан булғас ни, идара итәбеҙ шул! Эйеме? Эйе!..

Йәғәфәр. Ҡазый, фетнәсе Сәйеткә ҡатын-ҡыҙ күлдәге кейҙереп, ҡулдарының ус төбөн ҡынаға буяғыҙ ҙа, дөйә ҡойроғона тағып, аҡшам намаҙына тиклем ҡала буйлап йөрөтөгөҙ!

Ҡазый. Дөйә әҙер, һарай ишеге алдында көтөп тора!

Сәйет *(ҡото алынып)*. Имам әғзам! Сөнниҙәр шәйехен йәберләп, һин үҙең ултырған ботағыңды үҙең ҡырҡаһың! Быны һиңә сөнниҙәр бер ваҡытта ла ғәфү итмәйәсәк. Алланан ҡурҡмаһаң, халыҡ ҡәһәренән ҡурҡ! Халыҡ нәфрәте һинең тәхетеңдән көслөрәк! Көслөрәк, имам әғзам! *(Алып сығалар.)*

Йәғәфәр. Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!..

Әбүбәкер. Эйе, дәүләт менән идара итеүе еңел түгел. Тәҡсир, ишеткәнһегеҙҙер инде, тәхет вариҫы Әхмәт ҡайтты бит!..

Йәғәфәр. Эйе, ишеттем.

Әбүбәкер. Ә ниндәй миссия менән киткәйне ул?

Йәғәфәр. Донъя күрергә... Уның шулай йыл да Европанан урап ҡайта торған ғәҙәте бар инде.

Ҡазый *(ниндәйҙер бер мәғәнә һалып)*. Бик иртә боролған. Ул тиклем ашығып ҡайтыу ниңә кәрәк булды икән?

Әбүбәкер папкаһын асып, Йәғәфәргә ниндәйҙер ҡағыҙ күрһәтергә итә. Тап шул ваҡыт һаҡсы ишекте аса, Әхмәт килеп инә. Был оҙон буйлы, ыҫпай кәүҙәле йәш кеше. Ул, нигеҙҙә, европаса кейенһә лә, костюмының ҡайһы бер деталдәре Шәреҡҡә лә тартым. Ҡулына сағыу аҡ бирсәткә кейгән, еңел таяҡ тотҡан. Уны күргәс тә, Әбүбәкер папкаһын ябып, ситкәрәк барып баҫа.

Әхмәт. Әссәләмәғәләйкүм!

Йәғәфәр. Вәғәләйкүмәссәләм, улым!

Әхмәт. Беҙ ҡайтҡанды көтһәгеҙ, мин ул боласыларҙы, фетнәселәрҙе ер менән тигеҙләй инем!..

Әбүбәкер. Ҡан ҡойошто ҡорал ярҙамында ғына түгел, һүҙ менән дә туҡтатырға була, әмир Әхмәт.

Әхмәт. Һүҙеңдең көсө булһа!

Әбүбәкер. Һүҙҙең көсө – аҡылда! Сәйәсәттә ҡоралға таян, аҡылды өҫтөн ҡуй, тигәндәр боронғолар...

Әхмәт *(мыҫҡыллы йылмайып)*. Ә-ә, онотҡанмын... Һеҙ бит әле имам һарайында сәйәсәт тоҙағы ҡороусыларҙың береһе лә баһа!

Әбүбәкер *(уға шарап тәҡдим итеп)*. Иҫән-һау ғына йөрөп ҡайттығыҙмы, әмир Әхмәт?

Әхмәт *(шараптан баш тартып)*. Мин, былар дәүләт эштәре менән мәшғүл икән, тиһәм, туйҙар үткәреп яталар икән! Мин киткәнде генә көттөгөҙмө ни?

Йәғәфәр. Йәштәр бик көтөргә яратмайҙар шул. Күңелегеҙҙе киң тотоғоҙ, алда туйҙар күп әле, бишәүһе өйҙә.

Әхмәт *(Әбүбәкергә)*. Ғөмүмән, бик етеҙ булып сыҡтығыҙ, кейәү балаҡай!..

Әбүбәкер. Ни хәл итәйем һуң инде, бәхет үҙе юлыма сығып торғас!..

Йәғәфәр. Йә, һөйләп ебәрегеҙ, әмир Әхмәт, сәфәрҙән ҡәнәғәтһегеҙме?

Әхмәт. Мәғлүм булһын, беҙ ожмахта ҡунаҡ булып ҡайттыҡ!..

Йәғәфәр. Әстәғәфирулла тәүбә!..

Әхмәт. Эйе, эйе, ожмахта, атай! Ниңә ғәжәпләнәһегеҙ?

Йәғәфәр. Ожмахты Аллаһы Тәғәлә фани донъя өсөн яратмаған шул!

Әхмәт. Һаташмағыҙ, йәмәғәт! Һеҙ ожмахты Ҡөрьән буйынса ғына күҙ алдына килтерәһегеҙ, ә беҙ уның емештәрен татып ҡайттыҡ! Европа тип атала ул ожмах, Европа!

Йәғәфәр. Европа?! Ә тамуғы бармы һуң?

Әхмәт. Тамуғы?

Йәғәфәр. Ожмахы булғас, тамуғы ла булырға тейеш.

Әхмәт. Эйе, сағыштырып ҡарарға була. Беҙҙә был мәсьәлә күптән борсой... Бына Имамат, тибеҙ. Ә ниндәй дәүләт ул Имамат? Ана, Европа илдәре... һәр ҡайһыһында король, премьер-министр, парламент! Корпорациялар, синдикаттар, трестар! Хәрби флот, танк, артиллерия! Маршалдар, адмиралдар! Европа йәшәй, Европа гөр килә! Ә беҙҙә – ҡәбер тынлығы!..

Йәғәфәр. Аллаһы Тәғәлә донъяны алты көндә яралтҡан. Ә уның бер көнө – мең йыл. Аҙ ғына сабыр итегеҙ, беҙ ҙә дәүләтебеҙҙе үҙебеҙ теләгәнсә төҙәрбеҙ. Тик, һеҙ әйткән парламенттар ҙа, синдикаттар ҙа түгел. Улар беҙгә юлдаш була алмаҫ...

Әхмәт. Ә кем юлдаш булыр һуң?

Йәғәфәр. Уныһын уйларға кәрәк.

Әхмәт. Беҙҙән башҡа ғынамы?

Йәғәфәр яуап бирмәй.

Бәлки, һеҙ уны әллә ҡасан уйлап та ҡуйғанһығыҙҙыр? Йортоңдағы хәбәрҙе күршеңдән һора, тиҙәр, Европаға барып еткән...

Ҡазый ашығып инә.

Ҡазый. Малик! Ҡыҙыл диңгеҙ ярҙарына Русия карабы якорь ташлаған!

Йәғәфәр. Бәрәкалла!..

Ҡазый. Русия вәкиләтен ҡаршы алырға утыҙ һыбайлы ебәрҙем. Бына-бына килеп етергә тейештәр!..

Әхмәт. Нимәгә киләләр? Ә ниңә беҙ хәбәрҙар түгел?

Йәғәфәр *(хәйләләп)*. Әллә әйтмәнемме? Сауҙа итергә.

Әхмәт. Сауҙа итергә? Ә унан һуң?

Йәғәфәр. Сауҙа ни күрһәтер...

Әхмәт. Юлдаш тигәнегеҙ әллә шулар?

Тышта мылтыҡ атҡан тауыш.

Ҡазый. Малик, Шуралар мәмләкәте илсеһе килде!..

Йәғәфәр. Беҙгә Русия илсеһен хөрмәт менән ҡаршы алырға кәрәк! *(Сығып китергә йыйынған Әхмәткә.)* Һеҙ ҙә бында булығыҙ!

Әхмәт *(тороп ҡалһа ла)*. Иблис менән һөйләшергә була, ул ҡиәмәт көндө яңынан фәрештәгә әйләнәсәк, ә кафыр менән...

Йәғәфәр. Тыңлап ҡына ултырырһығыҙ! (*Әбүбәкергә.*) Ниндәй телдә һөйләшергә уйлайһығыҙ?

Әбүбәкер *(көлөбөрәк)*. Русҡа үҙ аллалары биргән телдә, тәксир!

Әхмәт *(йөҙөн һытып)*. Һеҙҙе тыңлап тороуы сирҡаныс, Әбүбәкер әфәнде!

Һаҡсы ишекте аса. Алдан смокинг кейгән Кәрим Хәкимов, уның артынан батмусҡа һалып көмөш ҡылыс тотҡан һаҡлап йөрөтөүсеһе һәм Ғүмәр Иҙриси инә.

Кәрим. Мөмкинме? Әссәләмәғәләйкүм, хәҙрәте имам! *(Башҡаларға.)* Әссәләмәғәләйкүм, йәмәғәт!

Йәғәфәр. Вәғәләйкүмәссәләм!

Кәрим. Һеҙҙең ғали йәнәптәре! Шуралар мәмләкәтенең Үҙәк Башҡарма комитеты мине, Кәрим Ғәбдрәүф улы Хәкимовты,

һеҙҙең илгә генераль консул, йәғни вәкиләт итеп тәғәйенләүҙе хәйерлегә һананы. Ошо туралағы хатты һеҙҙең ғали йәнәптәренә тапшырырға рөхсәт итегеҙ! Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! *(Йәғәфәргә хатты бирә.)*

Йәғәфәр *(хатты алып)*. Бәрәкалла!..

Әхмәт *(ҡапыл)*. Һеҙ ғәрәпсә һөйләшәһегеҙ? Ә милләтегеҙ?

Кәрим. Беҙ – башҡорт!

Әхмәт. Башҡорт?

Кәрим. Туғыҙынсы быуат ғәрәп яҙмаларында беҙҙе «башғорт» тип атағандар!

Әхмәт. Һеҙҙе, башҡортто, беҙгә рус иле...

Кәрим *(бүлдереп)*. Ул хәҙер һеҙ белгән рус иле түгел. Мин Русия нигеҙендә төҙөлгән, йөҙҙән ашыу милләтте, шул иҫәптән ислам динен ҡабул иткән утыҙлап милләтте берләштергән бөйөк Советтар иле вәкиле булып килдем!..

Йәғәфәр *(Кәримгә)*. Таныш булығыҙ, «ислам ҡылысы» әмир Әхмәт! Беҙҙең ғәскәр башлығы, тәхет вариҫы!..

Кәрим. «Ислам ҡылысы» әмир Әхмәт, һеҙҙең менән танышыуыма бик шатмын!

Әбүбәкер. Беҙ Әбүбәкер булабыҙ...

Кәрим *(уға иғтибар менән ҡарап)*. Әбүбәкер әфәнде?

Йәғәфәр. «Диуан» ағзаһы, беҙҙең сәркәтип! Әллә беҙҙең халыҡҡа оҡшамағанмы? Ул тыумышы менән төрөк, ә күңеле менән ғәрәп!

Әбүбәкер *(йылмайып)*. Мөхәммәт өммәтенән!

Кәрим. Һеҙгә мәғлүм булһын, беҙ ҙә Мөхәммәт өммәтенән!

Йәғәфәр. Күренеп тора, күренеп тора, йөҙөгөҙҙә Шәреҡ нуры бар!

Кәрим. Һеҙҙең ғали йәнәптәре! Беҙҙең халыҡ телендә ғәрәптәрҙән инеп ҡалған бик матур һүҙҙәр бар. Шуларҙың береһе – йәдкәр тигән һүҙ. Уны күберәк ғашиҡтар ҡуллана. Бына мин дә Совет хөкүмәте исеменән һеҙгә бер бүләк – йәдкәр алып килдем! *(Йәғәфәргә алтын-көмөш менән биҙәлгән ҡылыс бирә.)*

Йәғәфәр. Ҡылыс? Бәрәкалла! Ниндәй затлы!

Кәрим. Ғашиҡ тигән һүҙ ҙә беҙгә ғәрәптән ингән!

Йәғәфәр. Ә һеҙҙеңсә нисек була?

Кәрим. Башҡортса – һөйөүсе, яратыусы, русса – влюбленный, любящий тигән һүҙ.

Йәғәфәр *(һүҙҙе боҙоборaҡ)*. Любәший?

Кәрим. Эйе, любящий...

Ҡазый. Любәший...

Көләләр.

Йәғәфәр. Шөкран, Кәрим әфәнде, шөкран! Бәй, улай булғас ни... Ҡара әле, Әбүбәкер әфәнде! Әйтегеҙ, дөйә салһындар! Кәрим әфәнде шәрәфтәренә табын әҙерләһендәр!

Әбүбәкер. Аңланым, тәҡсир!

Йәғәфәр. Кәрим әфәнде, аҡшам намаҙынан һуң имам һарайына ашҡа рәхим итегеҙ!

Ғүмәр Иҙриси *(алғараҡ сығып)*. Һеҙҙең ғали йәнәптәре! Юлда Кәрим әфәнденең ғаиләһе бик ҙур бәхетһеҙлеккә осраған: ике йәшлек улдары вафат булған.

Йәғәфәр. Ярабби...

Кәрим. Әс ауырыуы йәбеште. Өс көн эсендә бала юҡ булды.

Йәғәфәр. Аҙна буйына дөйә өҫтөндә килеү ҙә ауыр булғандыр инде. Ҡайғығыҙ ҙур икән, Хоҙай Тәғәлә сабырлыҡ бирһен! *(Ултырып доға ҡыла, уға башҡалар ҙа ҡушыла.)* Әбүбәкер әфәнде мәйетте ерләргә һеҙгә ярҙам итер.

Кәрим. Шөкран! Улайһа, һеҙҙе хәйерле сәғәттә ҡалдырырға рөхсәт итегеҙ! Хушығыҙ!

Кәрим, уның һаҡлап йөрөтөүсеһе һәм Ғүмәр сыға.

Йәғәфәр. Бик күркәм кеше... *(Ҡылысты ҡарай-ҡарай.)* Бына, күрҙегеҙме, донъялар нисек үҙгәрә? Беҙгә хәҙер министрҙар кәрәк! «Диуан» менән генә булмай! Әбүбәкер әфәнде, беҙ һеҙҙе ошо сәғәттән Имаматтың сит ил эштәре министры итеп тәғәйенләйбеҙ!

Әбүбәкер. Тәҡсир! Баш өҫтө! Мин һеҙҙең ышанысығыҙҙы...

Әхмәт *(ҡысҡырып)*. Хәҙрәте имам! Сит ил эштәре министры итеп? Илдең яҙмышын ниндәйҙер бер килмешәккә тапшырырға?!

Әбүбәкер *(йәшен һуҡҡандай)*. Әмир Әхмәт?! Һеҙ нимә... *(Тиҙ генә сығып китә.)*

Йәғәфәр *(Әхмәткә)*. Кеше, башын киҫкәндә лә, был тиклем ҡысҡырмай!.. Ғәскәри етәксенең башы түгел, ҡоралы ҡыҙыу булырға тейеш!.. Бөтә Имаматҡа университет бөткән берҙән-бер кешебеҙ бар, ул да булһа – Әбүбәкер әфәнде! Рус, инглиз, француз телдәрен белә. Барығыҙ, ғәфү үтенегеҙ!

Әхмәт. Минме? Тәхет вариҫы башым менән... (*Ишеккә ташлана.*)

Йәғәфәр *(тыныс ҡына)*. Һеҙгә бер һүҙем бар...
Әхмәт. Ниндәй һүҙ?

Ҡазый инә, ҡулында – ҡанлы ҡулъяулыҡ.

Йәғәфәр. Ҡазый, был нимә? Беҙ әллә берәйһенең үтенесен яуапһыҙ ҡалдырғайныҡмы?

Ҡазый. Малик! Әбүбәкер әфәнде бармағын киҫеп...

Йәғәфәр. Ант иттеме?

Ҡазый. Эйе, ант итте!..

Йәғәфәр. Тоғролоҡ – әҙәм балаһына Аллаһы Тәғәлә биргән иң ҙур ҡөҙрәт! Лә Иләһә иллә-лаһ, Мөхәммәд-рәсүлуллаһ!..

Әхмәт. Ҡылыс йөҙөнән йөрөйһөгөҙ түгелме, ғали йәнәп?!

Ут һүнә.

1. Тексты, ролдәргә бүлеп, тасуири уҡығыҙ.
2. *Һөрән һалыу, баш күтәреү, гәфү итеү, гәфү үтенеү, мәшғүл булыу, мәғлүм булыу, сабыр итеү, хәбәрҙар булыу, вафат булыу, ант итеү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Ошо уҡ мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән әйтегеҙ, руссаға тәржемә итегеҙ, бер нисә һөйләм төҙөгөҙ. Был һүҙбәйләнештәрҙе файҙаланып, үҙ-ара диалог ойоштороғоҙ.
3. Кем ул *күркәм кеше*? Кешене ниндәй сифаттарына ҡарап шулай тиҙәр? Фекер алышығыҙ.
4. Кем булған ул Кәрим Хәкимов? Уның образына характеристика бирегеҙ.
5. Нәжиб Асанбаевтың тағы ниндәй әҫәрҙәре барлығын асыҡлағыҙ. Уның биографик белешмәһе менән танышығыҙ.

**82-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Уларҙың барыһын да ниндәй һүҙ берләштерә? Бер мәҡәлгә тап килгән бәләкәй инша яҙығыҙ.

1. Үгәй әсәйҙең яҡшыһы – үҙ әсәйеңдең яртыһы. 2. Үкһеҙгә өгөт биреүсе күп, урын биреүсе юҡ. 3. Әсәйең үгәй булһа, үҙ атайың еҙнә була. 4. Үҙ ҡыҙыма – үҙәк, үгәй ҡыҙға – сүбәк. 5. Үҙ әсәң – бауырһаҡ, үгәй әсәң – һарымһаҡ. 6. Атаһы үгәйгә ат бирмә, инәһе үгәйгә ҡыҙ бирмә.

Ҡасандыр башҡорт телендә *үк* тигән һүҙ булған. Мәғәнәһе – атай-әсәй (йәғни родители). Был һүҙ хәҙер телдән төшөп ҡалған, шулай ҙа унан яһалған бер нисә һүҙ әле лә ҡулланыла. Мәҫәлән, *үкһеҙ йәтим* – атай-әсәйһеҙ йәтим, *үгәй ул* – пасынок, *үгәй ҡыҙ* – падчерица, *үгәй әсәй* – мачеха, *үгәй атай* – отчим.

# АЙҒА ЛА ҒЫНА, КӨНГӘ ТИҢЛӘМӘЙЕМ...

## ИРЕК КИНЙӘБУЛАТОВ

*(1938–2016)*

Ирек Лотфый улы Кинйәбулатов 1938 йылдың 15 июлендә Ҡырмыҫҡалы районы Абдулла ауылында тыуған. Күренекле шағир. «Сыйырсыҡтар бала осора», «Йөрәк ҡаны», «Йыр яҡтыһы» кеүек тиҫтәләгән поэма һәм бик күп шиғырҙар авторы. Башҡорт, рус, татар телдәрендә ун китабы донъя күргән.

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Салауат Юлаев ордены кавалеры.

### ҺЕҘҘЕҢ ЙӘШӘҮ МЕНӘН

Йылына бер –
Ҡатын-ҡыҙҙар көнө.
Йылына бер –
Улар байрамы.
Ә уйлаһаң –
Бына ҡатын-ҡыҙһыҙ
Берәр байрам йүнле барамы?

Уларға бит
Көнөң, айың, йылың,
Бар ғүмерең тотош бәйләнгән.
Бөтә донъя улар ҡулдарынан,
Улар ҡарашынан йәнләнгән.

Нисек белеп,
Ниндәй көндө бүлеп
Әйтеп булыр икән: «Беҙҙеке!»

Ҡайһы минут,
Ҡайһы сәғәт, миҙгел,
Ҡайһы йыл һуң түгел һеҙҙеке?

Бөтәһе лә
Һеҙҙеке бит улар –
Көндәр, айҙар, йылдар – тотоштан.
Кешелек тә
Һеҙҙең йәшәү менән
Мәңгелеккә барып тоташҡан.

1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.
2. Шағир 8 Мартты ғына ҡатын-ҡыҙ байрамы тип әйтеү – дөрөҫ түгел, асылда бөтә байрамдар ҙа уларҙыҡы, ти. Һеҙҙең фекер нисек? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.
3. Ил һәм кешелек тормошонда, уның йәшәйешендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың роле тураһында әңгәмәләшегеҙ.

*Риф Мифтахов*

## ӘСӘ

Һулыштарым иркенәйәп китә,
Ошо һүҙҙе әйтһә телдәрем.
Хатта уның ҡыҫҡа исеме генә
Ҡабатлауы бәхет икәнен
Йылдар буйы, ғүмер буйы
Мин төшөнә киләм, төшөнә...
Ҡайһы ваҡыт, күк күгәрсен булып,
Күкрәк һөтө керә төшөмә.

Яландағы мәтрүшкәләр һымаҡ,
Баҡсалағы муйыл шикелле,
Йәнең менән бергә ҡушылып үҫкән
Шундай ябай, яҡын кешене
Сәңгелдәктән сал сәсеңә тиклем
Ҡайҙа һуң бар, ҡайҙа күргәнең!
Ҡайһыбыҙ һуң йөрәк яндарында
Тоймай икән әсә йөрәген!

Ҡош инәһе ҡанат аҫтарында
Балаларын нисек наҙлаһа,
Ана шулай беҙҙе иркәләүсе,
Ирәйтеүсе – әсә лә баһа.

Йөҙө уның – шәфҡәт, сабырлыҡ,
Ҡөҙрәт ҡулы – йомшаҡ, илһамлы.
Әсә барҙа, кеше генә түгел,
Донъя булыр үҙе иманлы.

Йырҙар итеп яҙып бөтөп булмаҫ,
Һәйкәлдәргә һынлап күтәреп.
Әсә исемен, әсә бөйөклөгөн
Мөмкин бары аңлау һәм ҡәҙерләү
Тик йөрәгең аша үткәреп.
Әсәй, тиһәк, һулышыбыҙ иркен,
Әсәй, тиһәк, нурлы юлыбыҙ.
Бәхет, шатлыҡ беҙҙе ташламаһын –
Һеҙ, әсәйҙәр, янда булығыҙ.

1. Шиғырҙа әсәйҙәргә дан йырлана. Уларҙың бөйөклөгөн йыр итеп яҙып та, һәйкәл итеп һынландырып та бөтөрлөк түгел, ти шағир. Һеҙҙең быға ҡарашығыҙ нисек?
2. «Минең әсәйем» темаһына кескәй хикәйә, шиғыр йәки нәҫер ижад итегеҙ, унда әсәйҙәргә үҙегеҙҙең һөйөүегеҙҙе, тормошоғоҙҙа уларҙың ролен күрһәтегеҙ.
3. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

*Михаил Воловик*

## ЕРӘНСӘ СӘСӘН ҠАТЫН-ҠЫҘ ЗИРӘКЛЕГЕ ХАҠЫНДА

Берҙән-бер көн Ерәнсәгә Апуш ҡыҙған:
– Ниндәй аҡыл булһын, – тиеп, – ҡатын-ҡыҙҙа.

Ҡатындарҙың сәсе оҙон – аҡылы ҡыҫҡа,
Кем уларҙы аҡыллы ти һинән башҡа?

Кәрәк булһа, әйтәм тағы шуны ярып:
– Ҡатын-ҡыҙҙың хәтер – кәзә, аҡыл – һарыҡ!

Ерәнсә лә, бер елкенеп, һүҙ башлаған,
Абдулланы зиһене менән тоҙаҡлаған:

– Көтөп торҙом, – тигән, – һүҙең ослағаның
Инде ҡолаҡ һал һүҙемә һин, туғаным.

Йәшәгән, ти, элегерәк Тапҡырбикә,
Буйға һылыу, һүҙгә сәсән otҡор бикә.

Уға бер көн Хикмәт байҙан яусы килгән,
Тапҡырбикә уйынсалап яуап биргән:

– Ашыҡмайым мин бишенсе ҡатынлыҡҡа,
Урын миңә әҙер, – тигән ул, – ханлыҡта.

Ғәрсел Хикмәт хан алдына барып баҫҡан,
Шаян һүҙҙе аңламайса һүҙ ҡуйыртҡан:

– Хаким, – тигән, – Тапҡырбикә атлы ҡатын
Бер ауылда һата һинең яманатың.

Һин һораткас, йәнәһе, ул үҙһенмәгән,
Яратмағас, әмереңә буйһонмаған.

Яуап бирһен, тиеп, ҡыҙы хатаһына,
Хан ебәргән сапҡын ҡыҙҙың атаһына.

Бына бер саҡ меҫкен ата килеп еткән,
Әмер көтөп, хан алдында билен бөккән.

Хан екереп: «Ҡайҙа, – тигән, – Тапҡырбикәң,
Бөгөндән үк булһын ҡыҙың минең бисәм!»

Кибеп бөткән ҡарт булһа ла ҡарар күҙгә,
Хан алдында батыр булған ата һүҙгә:

– Ҡыҙ теләге хан нәфсеһе менән тиңдер,
Ҡыҙ кәрәкһә, – тигән ата, – үҙең күндер!

Хан, йомшарып, ҡартҡа биргән ун тәкәһен,
Тик шарт итеп ҡуйған шундай әтнәкәһен:

– Ун көндән һуң ҡарт уларҙы кире ҡыуһын,
Ун тәкәгә тап ун бәрәс артыҡ булһын!

Үтәлмәһә әгәр, – тигән, – ошо шартым,
Башы менән хушлашасаҡ йолҡош ҡартың!

Ҡарт, меҫкенең, ҡайтып киткән илай-илай,
Әжәл килер көн-сәғәтен һанай-һанай.

– Ҡатын-ҡыҙҙы аҡыллы тип әйтеүең буш! –
Тип шул ваҡыт ҡалҡа биреп ҡуйған Апуш, –

Ана бит ҡыҙ шапырынғас, һөйләп хата,
Ниндәй хәлгә тороп ҡалған меҫкен ата!

– Инде тыңла, – ти Ерәнсә, – һүҙ аҙағын:
Тапҡырбикә оҫта юйған үҙ яҙығын.

Ваҡыт етеп, бына бер саҡ килә сапҡын,
Тапҡырбикә ҡаршы ала уны һалҡын.

– Атайымды, – ти ул, – өйҙә тулғаҡ тота,
Улан көтөп, бәпәйләргә сирләп ята.

Тыуҙырһа ул, тәкәләр ҙә бәрәсләр, – ти, –
Әйт ханыңа, хаҡ һүҙемде дөрөҫләр, – ти.

Хан ишеткәс ҡыҙҙың һүҙен: «Аҡыллы! – ти, –
Инде тағы эйәрләп ал атыңды», – ти.

Вәзиренә бер киҫенте буҫтау биреп:
– Ебәрһен, – ти, – Тапҡырбикә сапан тегеп!

Бына шул саҡ оҫталығын һынармын, – ти,
Кәләшлеккә ярарлыҡмы, ҡарармын, – ти.

Бына тағы юрта-елә сапҡын килә,
Тапҡырбикә хандың ҡуйған шартын белә.

– Ризамын, – ти һәм вәзиргә бер тап бирә,
Тапҡа ҡушып, шартҡа ҡаршы бер шарт бирә:

– Сапаныңды, – ти, – һалып киҫергә тиҙерәк
Миңә иркен һәм уңайлы өҫтәл кәрәк.

Кейгеһе килһә әгәр ҙә аҫыл сапан,
Хан өҫтәлде эшләтһен, – ти, – ошо таптан.

– Ошо таптан ниндәй өҫтәл яһалһын! – тип
Ҡысҡырынған шул саҡ вәзир, ҡыҙып китеп.

– Бик туҙынма, – тигән ҡыҙый, – улай яман,
Бер киҫенте буҫтауҙан да сыҡмай сапан!

Быны ишеткәс, хан белгән ҡыҙ зирәклеген,
Үҙенә тап шундай кәләш кәрәклеген.

Ә унан һуң, тормайынса бик күп уйлап,
Зирәк ҡыҙҙы алып ҡайтҡан хан, туй туйлап.

– Инде, – тигән, – булһаң да һин үтә зирәк,
Кеше алдында ҡыҙыл телең тыймаҡ кәрәк.

Ә кәңәшең миңә кәрәк булған саҡта,
Гәпләшербеҙ икәү генә беҙ аулаҡта.

Әгәр ҙә боҙа ҡуйһаң ошо шартым,
Шул ваҡыттан һин түгелһең миңә ҡатын!

Әйткән һүҙ бар: «Аҡыллыға – бер ишара!»
Йәш бикәгә риза булмай ҡайҙа сара?

Әммә мохтаж ваҡыттарҙа хан кәңәшкә,
Өндәшмәүе ситен булған йәш кәләшкә.

Бына бер көн көтмәгәндә, яғалашып,
Ике бәндә ханға килгән ҡырталашып.

Бер бейәнән бер шәп ҡолон тыуған икән,
Һылыулығы тап ҡойған да ҡуйған икән.

Әммә әле аңралыҡтан ҡолон-сабый
Йонсой икән, үҙ инәһен алмай таный.

Эйәреп ул күршенең тыу бейәһенә,
Һалған икән оло ҡаза эйәһенә.

Бына ҡупҡан ҡолон өсөн дау һәм талаш,
«Минеке лә минеке!» – тип ҡан яғалаш.

Тора улар бына көтөп хаҡ-ғәҙеллек,
Хан асыулы: бөтә бара, ти, түҙемлек.

Туҙына хан: «Ниндәй хөкөм табырға? – тип, –
Һәр ҡолондо тейешле хан таныррға!» – тип.

Шул ваҡытта килеп сығып Тапҡырбикә,
Мәсьәләне бик тиҙ һәм дә тапҡыр сисә.

Икеһенә тоттора ла ике һауыт:
– Килтерегеҙ, бар, – ти, – бейә һөтө һауып!

Береһе инә туҫтаҡ тулы һөтө менән,
Икенсеһен хан әҙләтә эте менән.

Тик шуныһы: онотмаған хан һис шартын:
– Ник эшемә ҡыҫылаһың, – ти, – һин, ҡатын?! –

Ҡәтғи торам мин әйтелгән һүҙемдә, – ти, –
Һарайымдан сығып кит һин бөгөндән, – ти. –

Ана бер тоҡ: ни теләйһең, һайлап ал, – ти, –
Һайлап ал да, әҙең булмаһын, юғал! – ти.

Тапҡырбикә: «Ни эшләмәк, – ти, – хушлашайыҡ,
Әммә тауыш-тынһыҙ ғына ташлашайыҡ!»

Үҙе шул саҡ ханға һонған йәш ҡымыҙға
Йоҡлатҡыстан ике-өс тамсы ыу тамыҙа.

Хан – йоҡола, хур ҡыҙҙары – төштәрендә,
Күҙен асһа, ята ҙур тоҡ эстәрендә!

Тапҡырбикә иҫбат итеп зирәклеген,
Һалған тоҡҡа тап үҙенә кәрәклеһен.

Таныған, ти, ханбикәһенең хаҡлығын,
Һүҙе – дөрөҫ, аҡылы зирәк һәм паклығын.

Шунан бирле уның зирәк кәләшкәйе
Бирер булған һис йәшермәй кәңәштәрен.

*(В. Әхмәҙиев тәржемәһе)*

1. Шиғырҙы иғтибар менән уҡып, аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлап яҙығыҙ.
2. *Һүҙ ҡуйыртыу, яманатын һатыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, уларҙы икенсе һүҙҙәр менән алыштырығыҙ.
3. *Әтнәкә* һүҙенең ҡайҙан килеп сыҡҡанлығын асыҡлағыҙ. Рус теленән килеп ингән ошондай варваризмдарҙы барлағыҙ.
4. *Ҡатын-ҡыҙҙың сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа* тигән әйтем киң таралған. Шиғырҙа ошо фекер раҫланамы? Һеҙҙеңсә нисек? Әңгәмә ойоштороғоҙ.
5. Әҫәрҙә ҡатын-ҡыҙҙың хәтере кәзәнекенә, аҡылы һарыҡтыҡына тиңләнә. Маҡтаумы был, әллә көләүме? Әңгәмәләшегеҙ.
6. *Аҡыллыға – бер ишара* тигәндең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
7. Шағир ҡыҙҙың исемен Тапҡырбикә тип атаған. Ул быға ниндәй мәғәнә һалды икән?
8. «Оҙон сәс – аҡылһыҙлыҡ билдәһеме?» темаһына фекер алышығыҙ.

**83-сө күнегеү.** Башҡорт халыҡ йырҙарында ҡатын-ҡыҙға әйтелгән һоҡланыу һүҙҙәрен уҡығыҙ. Дөйөмләштереп, бер ижади эш яҙығыҙ.

1. Ҡарағаттан ҡара, ай, күҙгенәң,
   Мәҙинәкәй һылыуым, бөҙрә сәсем,
   Бөрлөгәндән ҡыҙыл йөҙгөнәң.
   Бөрлөгәндән ҡыҙыл йөҙгөнәңде,
   Мәҙинәкәй һылыуым, бөҙрә сәсем,
   Ҡарап ҡына туймай күҙгенәм.

*(«Мәҙинәкәй»)*

2. Айға ла ғына, көнгә тиңләмәйем,
   Һылыулығың, Шәүрә, шул саҡлы.

*(«Шәүрә»)*

3. Сәлимәкәй һылыу йоҡлағанда
   Ай көнләшә ҡыйғас ҡашынан.

*(«Сәлимәкәй»)*

4. Уң ҡулында көмөш йөҙөк,
   Ҡуш беләҙек, билкәй нәҙек.

*(«Ирәндек»)*

**84-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше –
Ҡыҙым бер йондоҙ ише:
Ап-аҡ ҡына тештәре,
Алтын ғына сәстәре,
Нурлана ике күҙе,
Балҡып тора аҡ йөҙө.
Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше –
Ҡыҙым – ҡайғыһыҙ кеше;
Шаярыуҙан һис туймай,
Һикереп төшөп уйнай,
Селтер ҙә селтер көлә,
Теленән наҙ бөркөлә.
Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше –
Ҡыҙым шат йондоҙ ише.

*(Әсхәл Әхмәт-Хужа)*

1. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һанағыҙ.
2. Шиғырҙан башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре булған туғыҙ һүҙ яҙып алығыҙ.

**85-се күнегеү.** Алфавитты иҫкә төшөрөгөҙ.

1. Ғ, .. ң.
2. Һ, .. Я.

*Рәлиф Кинйәбаев*

## МИН ҠАЙТЫРМЫН, ӘСӘЙ!

Радионан йыр ағыла. Ул күңелде йыраҡтарға әйҙәй, моңландыра. Йыр хәтирәләрҙе яңырта, үткәндәргә алып ҡайта:

*Бер ҡайтмаһам, әсәй, бер ҡайтырмын,*
*Утыңды һүндермәйсә, мине көт.*
*Һине көттөрөп тә ҡайта алмаһам,*
*Кисер мине, әсәй, гәфү ит.*

Мөғлифә әбей ойоҡбаш бәйләп ултырған еренән туҡталып ҡалды. Шау аҡ сәсле башын күтәреп, әле нурҙары һүнеп бөтмәгән күҙҙәрен тәҙрә аша оло юлға төбәне. Бәйләп ултырған ойоҡбашын ситкә ҡуйҙы, тәҙрәнән тәгәрләп төшөп һүтелеп киткән йөн йомғағына ла иғтибар итмәне. Үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп, әлеге моң ағылды ла ағылды. Хәтирәләр ҙә, ошо йырҙың моңолай, ептәй һуҙылдылар һәм күптән үткән ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрҙөләр.

...Ауыл менән ҡыҙыҡһынып, ваҡыт-ваҡыт юлға күтәрелеп ҡарайҙар.

– Әсәй!

Мөғлифә апай, улының тауышын танып, билен турайтты һәм килеүсегә табан йүнәлде. Йыраҡтан уҡ «Әсәй!» тип ҡысҡырып, уның берҙән-бер улы Мөслим килә ине.

– Әсәй! Мин фронтҡа китәм.

Әсә менән ул ҡосаҡлашып тын ҡалды. Хәбәрҙе ишетеп, тирә-яҡтағылар ҙа улар эргәһенә йыйыла һалдылар.

– Ҡасан? – тип кенә һорай алды әсәһе.

– Бөгөн. Әсәй, әсәй, тим. Зинһар, илама! Бына дошмандарҙы еңербеҙ, әйләнеп тә ҡайтырбыҙ. Бер көн дә тормам.

– Һине лә юғалтһам, улым, мин нимә эшләрмен?

– Әсәй, әсәкәйем! Ҡайтырмын! Бына күрерһең, әйләнеп ҡайтырмын. Мин әйтте тиерһең.

Күрше ҡатындар ҙа Мөғлифәне тынысландырырға тырышты.

– Әсәй, әсәкәйем! Мин хушлашырға ғына. Мине көтәләр. Беҙ кис Стәрлелә булырға тейеш.

– Шулай тиҙме? Юлыңа ла әҙерләндерә алманым бит, улыҡайым.

– Миңә бер нәмә лә кәрәкмәй. Үҙеңде һаҡла, әсәкәйем. Миңә ваҡыт, һау бул! Хушығыҙ! – Мөслим, әсәһенең күҙ йәштәрен күрмәҫ өсөн, атына һикереп менде лә ҡыуа башланы. Ерән, китергә теләмәгән һымаҡ, үрә һикереп ҡуйҙы ла ауылға ҡарай сапты.

Иҫенә килгән әсә улының артынан ташланды:

– Улыҡайым! Көлсә ал юлыңа! Бына көлсәләр!

Ләкин Мөслим туҡталманы. Бер аҙ йыраҡлашҡас, атын тыя биреп, боролоп ҡысҡырҙы:

– Әсәй! Мин ҡайтырмын! Мине көт! Көлсәләр бешереп көт!..

Мөслимдән хаттар өҙөлмәне. Дары еҫе һеңгән, төрлө ҡағыҙҙарға яҙылған өсмөйөшлө хаттар ҡаты һуғыштар барған ерҙәрҙән килә торҙолар. Мөслим хеҙмәт иткән частың штабынан әсәгә улының орден тағып төшкән рәсеме менән бер фронт газетаһы килде. Һуғыш бөтөргә лә күп ҡалмаған кеүек ине, ләкин Мөслимдән хаттар ҡапыл туҡталды…

Көтөп алынған Еңеү таңы ла атты. Еңеүселәр берәм-һәрәм ауылға ҡайттылар. Ләкин, әсә күпме генә тилмереп көтһә лә, унын Мөслиме «әсәй» тип йүгереп килеп сыҡманы. Көндәр үтә торҙолар. Үтенес менән төрлө эҙләү органдарына ебәргән хаттар ҙа яуапһыҙ ҡалды. Мөслим хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенә эләкте. Күрше ауылдан берәү Мөслимдәрҙең янған танкыһын күреүен, унын эргәһендә бер исемһеҙ ҡәбер булыуын ғына килеп һөйләп китте. Тик әсә ышанманы. Ул, ҡыш етһә, ойоҡбаштар бәйләп, йәй булһа, төрлө һыйҙар әҙерләп көттө. Айҙар, айҙарға эйәреп йылдар үтте.

Радионан ниндәйҙер тапшырыу бара ине, күрәһең. Билдәһеҙ йырсы, йырҙы ҡабатлап, тапшырыуҙы тамамланы.

*...Һине көттөрөп тә ҡайта алмаһам,*
*Кисер мине, әсәй, ғәфү ит.*

Әсә: «Ғәфү итәм, улым, ғәфү итәм. Тик ҡайт, һуңлап булһа ла ҡайт», – тип һөйләнеп ҡуйҙы.

Тәҙрә сирттеләр. Мөғлифә әбей һиҫкәнеп китте. Ул һаман да, Мөслим улымдыр, тип өмөтләнеп, ашығып тәҙрәгә барҙы. Унда әхирәте Зөбәйҙә тора ине.

– Әхирәт, ни эшләп бер үҙең ултыраһың? Бөгөн байрам даһа. Бөтә халыҡ клуб алдында. Һиңә лә килергә ҡушҡандар. Бөгөн һәйкәл асалар бит, – тип һөйләнде лә юҡ булды.

Мөғлифә әбей йәһәт кенә кейенә һалды ла ауыл клубы яғына ыңғайланы. Унда бик күп халыҡ йыйылғайны... Байраҡтар елберләй. Күбеһенең ҡулында сәскәләр. Әсә ашығып уртағараҡ үтте һәм үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай ҡатып ҡалды. Майҙан уртаһында тап Мөслимгә оҡшаған таш һәйкәл тора ине. Был көндә һәр кемдең күңелендә яуҙа ятып ҡалған улы, ағаһы, ире, атаһы таш һын ҡиәфәтендә, тере иҫтәлек булып, нисә йылдар үткәс, яңынан тыуған ауылына әйләнеп ҡайтты. Әсәнең ҡолағына улының «Әсәй, мин ҡайтырмын!» тигән һуңғы һүҙҙәре ишетелеп ҡалғандай булды. Ул, ниҙер иҫенә төшөрөп, ҡапыл ашығып өйөнә ҡайтып китте һәм оҙаҡ та тормай бер төргәк тотоп килде.

Тантана дауам итте. Диктор көслө динамик аша:

– ...Тыуған илебеҙҙең азатлығы өсөн һәләк булғандарға мәңгелек дан! – тип өндәште. Байраҡтар ергә эйелде. Кешеләр, сәскәләр тотоп, тын ғына һәйкәлгә йүнәлделәр. Иң арттан Мөғлифә әбей килде. Ул, әкрен генә ниҙер һөйләнә-һөйләнә, төргәгенән бер пар ойоҡбаш һәм яңы ғына бешкән көлсәләр алып, һаҡ ҡына һәйкәл алдына һалды. Йәштәр уны сәйерһенеп күҙәттеләр, ә оло йәштәгеләр, Мөғлифә әбейҙең улы менән хушлашыуына шаһит булған кешеләр, күҙ йәштәрен күрһәтмәҫ өсөн, ситкә боролдолар.

Күптән түгел ауыл Мөғлифә әбейҙе һуңғы юлға оҙатты... Ул һәйкәл янынан һәр көн үтеп йөрөйөм. Тапҡырынан үткәндә ниндәйҙер эске тулҡынланыу кисерәм: унда һаман Мөғлифә әбей ултыра һымаҡ. Ә һәйкәл, көнбайышҡа ҡарап баҫҡан да тын ғына тора – ул сит ерҙәрҙә ятып ҡалған дуҫтарын, туғандарын көтә кеүек...

1. Хикәйәне иғтибар менән уҡып сығығыҙ, йөкмәткеһен тасуири итеп һөйләргә өйрәнегеҙ.
2. Кем ул *әхирәт*? Һеҙҙең әхирәтегеҙ бармы? Булһа, берәй ваҡиғаға бәйләп, уның тураһында белешмә яҙығыҙ.
3. Әсә образына характеристика бирегеҙ.

**86-сы күнегеү.** Йәше буйынса йылҡы малын бүлә торған һүҙҙәрҙе уҡығыҙ һәм бәләкәйҙән ҙурая барыу тәртибендә яҙығыҙ.

Дүнән, байтал, ҡолоҡай, тыуар, ҡырҡмыш тай, ҡонан, тай, тулаҡ, ябаҡ.

*Толпар* һүҙенең аңлатмаһын иҫкә төшөрөгөҙ.

**87-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Унан берәр бер составлы һөйләм, ике составлы һөйләм һәм ҡушма һөйләм яҙып алығыҙ.

### Мәтрүшкә һәм һары мәтрүшкә

Мәтрүшкә... Был хуш еҫле сәскә Башҡортостандың бөтә ерендә лә үҫә. Уны сәскә атҡан ваҡытында йыялар. Кипкәс, япраҡтарын һәм сәскәләрен һыпырып алалар, һабаҡтарын ташлайҙар. Мәтрүшкәне һалҡын тейгән ваҡытта сәй итеп эсәләр. Русса әйтелеше – душица. Һары мәтрүшкә лә шулай уҡ бөтә урында ла үҫә. Уны ла сәскә атҡан ваҡытында йыйып киптерәләр. Уның төнәтмәһе ашҡаҙан юлдарының эшен яҡшыртыу өсөн файҙаланыла. Һары мәтрүшкәнең русса **зверобой** исеме ҡаҙаҡ телендәге **жярабәй** һүҙенән сыҡҡан. Йәғни, башҡортса әйтһәк, яраға бәйләй торған үлән булып сыға. Халыҡ был ике сәскәгә шундай мәҡәл сығарған: һары мәтрүшкә – алтмыш төрлө ауырыуға, көрән мәтрүшкә – етмеш төрлө ауырыуға дауа.

**88-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Башҡорт алфавитында нисә хәреф?
2. Башҡорт телендә һүҙ баҫымының ниндәй үҙенсәлеге бар? Башҡорт теле менән рус телендәге һүҙ баҫымы араһында ниндәй айырмалар бар?
3. Фразеологизмдарҙы башҡорт телендә ниндәй термин менән дә атап йөрөтәләр?

Фонетика һәм лексика буйынса үҙегеҙ ҙә һорауҙар өҫтәгеҙ.

**89-сы күнегеү.** 86-сы күнегеүҙең дөрөҫ эшләнеше.

Ҡолон, ҡолонсаҡ, ҡолоҡай – тыуғандан алып 6–7 айға тиклем.

Ябаҡ (ябаға) – 7 айҙан 1 йәшкә тиклем.
Тай – 1 йәштән 1, 5 йәшкә тиклем.
Ҡырҡмыш тай – 2 йәшкә тиклемге айғыр.
Байтал – 2 йәшлек.
Ҡонан – 3 йәшлек.
Дүнән – 4 йәшлек.
Тулаҡ – 5 йәшлек.
Тыуар – 6 йәшлек.

**90-сы күнегеү.** Халыҡ мәҡәлдәрендә бөгөн беҙгә аңлашылмаған һүҙҙәр йыш осрай. Түбәндәге мәҡәлдәрҙәге шундай һүҙҙәрҙе һәм уларҙың аңлатмаларын уҡығыҙ. Бер мәҡәлгә ярашлы ижади эш эшләгеҙ.

1. **Ҡараса** килмәй, көҙ булмаҫ, **ҡантар** тыумай, боҙ булмаҫ. Элек башҡорттарҙа ай исемдәре үҙенсәлекле булған. **Ҡараса** – сентябрь, **ҡантар** – ноябрь.

2. Ғәйепһеҙ аш эҙләмә – ас ҡалырһың, ғәйепһеҙ дуҫ эҙләмә – **таҡ** ҡалырһың. **Таҡ** – яңғыҙ (нечётный), антонимы – **йоп** (чётный).

3. Ас арғымаҡҡа **ҡапырыҡ** моң булыр. **Ҡапырыҡ** – 1) былтырғы үлән; 2) һаҙҙа үҫкән ашһыҙ оҙон үлән. Мәҡәлдең мәғәнәһе: Ас малға (кешегә лә) ҡаты-ҡото ла яҡшы аҙыҡ кеүек тойола.

*Әмирхан Еники*

## МАТУРЛЫҠ

Күптән, бик күптән булған ваҡиға, әммә бөгөнгөләй күҙ алдымда: беҙ, өс шәкерт, бер атҡа ултырып, өйәҙ мәҙрәсәһенән ауылыбыҙға ҡайтырға сыҡтыҡ. Дөрөҫөрәге, Ғилемдар менән мин бер ауылға – Сыбаркүлгә ҡайтабыҙ, ә Бәҙретдинде юл өҫтөндәге Ишле ауылына ҡалдырып китергә тейешбеҙ. Тағы шуны ла әйтәйем, беҙҙе ялҡау ғына юртып алып ҡайтып килгән күк алаша Ғилемдарҙыҡы ине. Беҙ ауылда улар менән күрше генә торабыҙ. Шул сәбәпле Ғилемдар менән мине алырға бер яҙын беҙҙең ат килһә, икенсе яҙҙа уларҙың аты килә торғайны.

Ә Бәҙретдин – беҙҙең осраҡлы юлдашыбыҙ. Ул кешегә бер ҙә йөк булырға яратмай. Уҡыуҙар бөткәс тә, ул ауылдаштарының береһенә эйәреп китә лә бара, йәки яңғыҙ үҙе генә утыҙ саҡрымда ятҡан ауылына йәйәүләп һыпырта торғайны. Был юлы инде беҙ уны, үҙебеҙ һорап тигәндәй, бергәләп ҡайтырға күндерҙек.

Бәҙретдин – беҙҙең мәҙрәсәлә иң ярлы шәкерт. Уға ауылынан бер ниндәй ҙә ярҙам килмәй. Тик ауылдарынан баҙарға килеүсе берәйһе бик һирәк кенә уға әсәһенең киндер сепрәккә төрөп ебәргән тары икмәген йәки берәр йомарлам майын индереп сыға торғайны. Бәҙретдин шуны ла бик ҡыйынһынып: «Ниңә инде был? Әсәйемә әйтегеҙ, мин ас түгел, үҙенән өҙөп ебәрмәһен!» – тип алып ҡала. Һәм шул майҙы ул ни өсөндөр

беҙ (шило) менән сәнсеп ашай. «Ниңә улай итәһең?» – тип һораһалар, Бәҙретдин көлгән булып ҡына: «Беҙ менән ашағас, оҙаҡҡа етә ул!» – тип яуап бирә торғайны.

Бәҙретдин, асҡа интегеп булһа ла, уҡыуын алып бара һәм бик яҡшы уҡый ине. Был күп һыналған нәмә: рәхимһеҙ нужала тороп уҡыған ярлы шәкерт, ғәҙәттә, бик һәләтле булып сыға. Ярлы шәкерт, бик яҡшы уҡыһа ғына, үҙенең матди хәлен бер аҙ еңеләйтә ала.

Бына беҙҙең Бәҙретдингә лә байҙар иғәнәһенән ара-тирә ярҙам тейә ине. Насар уҡыусыларҙың дәрестәрен әҙерләшкән өсөн дә уға аҙ-маҙ тама, хәлфәләргә лә булышҡылай, унан тағы ауырыу-сырхауҙарға доғалыҡтар күсереп тә әҙерәк баҡыр тиндәр төшөргөләй. Ләкин эште лә, ярҙамды ла ул үҙе бер ваҡытта ла һорап алмай, әрһеҙ меҫкенлекте беҙ уның йөҙөндә бер ҡасан да күрмәнек.

Тәбиғәте менән үк ул шундай тигеҙ, сабыр холоҡло бер егет ине. Ялағайлана ла белмәҫ, яҡшы менән яҡшы, ә яман менән алыш-биреше юҡ. Ундайҙарҙан үҙен нисектер бөтөнләй ситтә тота белә. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ: ул берәүҙән дә бер нәмә лә һорарға яратмай. Киреһенсә, шәкерттәр уның үҙенән тегенеһен-быныһын һорап торалар. Сөнки уның үҙ ҡулы менән яһаған йәшник һымаҡ һандығында мәҙрәсә тормошо өсөн кәрәк бөтә нәмәһе: энәһе лә, ебе лә, уймағы ла, беҙе лә, эҫкәге лә, көҙгөһө лә, төҫлө ҡәләмдәре лә, ҡағыҙ-дәфтәрҙәре лә, хатта елем менән балауыҙы ла һаҡлана.

Ана шундай сәйер генә, серле генә һәм һөйкөмлө генә ине беҙҙең Бәҙретдинебеҙ.

Бына беҙ өсәүләшеп ситән кырандаста ауылыбыҙға ҡайтып барабыҙ. Юл таҡыр, туҙан юҡ, күк алаша үҙ көйөнә һалмаҡ ҡына юрта. Тирә-яҡта бөтә нәмә лә күтәрелеп, үҫеп бара: арыштар һабаҡҡа һуҙыла башлаған, бойҙайҙар ҡуйы булып һыҙылып ҡына сығып килә, һөрөлмәгән сирәмдәрҙе йәш үлән ҡаплап киткән. Әйтәһе лә юҡ, тәбиғәттең иң садә (добродушный), иң йәмле сағы!..

Беҙгә, ҡыш буйы мәҙрәсәлә кибеп ятҡан шәкерттәргә, был сикһеҙ иркен, яҡты, йылы донъя иҫ киткес танһыҡ, беҙ уны еҫкәп тә, һулап та, күреп тә туя алмайбыҙ.

Баштараҡ беҙ әленән-әле кырандастан төшөп, аяҡтарыбыҙ ерҙең йылыһын рәхәтләнеп татыһын тигәндәй, сиҙәмгә кереп киттек, йүгерештек, ҡыуыштыҡ, эйелеп сәскәләр өҙҙөк. Бәҙретдин тау йыуаһы тапты, уны өҙөп сәйнәнек. Мин беҙҙең ауылда «тәмлекәй» тип йөрөтөлә торған, һабағы дүрт ҡырлы

оҙон ғына бер үләнде йыйып алдым. Уның да тышын әрсеп, ашап ҡараныҡ. Бәҙретдин әйтә, быны беҙҙең башҡорттар «кейәү ҡамсыһы» тип йөрөтәләр, ти, сөнки осондағы бына ошо бөрөләре зәңгәр сәскә булып асылғас, ул ысынлап та суҡлы ҡамсыға оҡшап китә, ти.

...Юл буйы беҙҙе һабантурғайҙар һайрауы оҙатып барҙы. Гүйә, бына төпһөҙ нурлы аяҙ күктән өҫтөбөҙгә сихри бер моң, тибрәлеп-сеңләп, өҙлөкһөҙ яуып торҙо. Ә beləhегеҙме, һабантурғай һайрауының сихыры нимәлә? Иң элек һабантурғай һайрағанда, ер өҫтөнә еңелсә генә уйсан-моңһоу бер тынлыҡ йәйелә. Әйтерһең, бөтә тәбиғәт, барлыҡ йән эйәһе бары уны ғына тыңлай, уны тыңлап, һөйөнөслө, һағышлы, ләззәтле бер рәхәткә сума... Икенсе сихыры шунда, һабантурғай һайрағанда, донъя нисектер иҫ киткес йәйелеп, киңәйеп, яҡтырып киткәндәй була. Ана шул, юғарыла кескенә ҡошсоҡ талпынған күктең үҙе шикелле үк, ер йөҙө лә икһеҙ-сикһеҙ булып, ғәжәп тын, нурлы булып тойола башлай...

Шулай кәйефләнеп, күңелле генә ҡайта торғас, беҙ Ишле ауылына ла яҡынлаштыҡ. Юлға сыҡҡас та, Бәҙретдин беҙҙе, үҙҙәрендә туҡтап, сәй эсеп сығырға саҡырғайны. Беҙ, билдәле, ҡыҫтатып торманыҡ.

Ауылға еткәндә генә, Бәҙретдин, дилбегәне үҙенә алып, урамдың иң ситендәге бүтән йорттарҙан айырылыбыраҡ, яңғыҙы ғына торған бер өйҙөң ҡаршыһына беҙҙе килтереп тә туҡтатты.

Беҙ фәҡир кешеләргә инеребеҙҙе белеп килә инек, ләкин был ҡәҙәр ярлы хужалыҡты күрербеҙ тип һис тә көтмәгәйнек. Хәйер, быны хужалыҡ тип атар ере лә юҡ. Шыр ҡырҙа ултырған бәләкәй генә яңғыҙ өй иҫкереп, туҙып, яртылаш ергә батып бөткән. Һалам түбәһе сереп, ҡарайып, тиреҫкә әйләнә башлаған. Ишек-тәҙрәләр ҡыйшайған, ә тәҙрә быялалары йәшкелт-зәңгәр төҫкә ингән... Ҡапҡа юҡ, ҡойма юҡ, тик урам яҡлап ҡына ике рәт кәртә һуҙылған... Ишек алдын үлән баҫып киткән, тимәк, бер ниндәй ҙә мал юҡ.

Беҙ инде хайран булып, ғәжәпләнеп ҡалыуыбыҙҙы Бәҙретдингә һиҙҙермәҫкә тырышабыҙ. Түбәһе сыбыҡ-сабыҡ менән ябылған иҫке генә ситән аҙбар алдына атыбыҙҙы туҡтаттыҡ. Өйҙән бәләкәй буйлы, аҡ сырайлы, ерән һаҡаллы ябыҡ ҡына бер ағай сыҡты. Уның өҫтөндә киндер күлдәк, тубыҡ баштарына ҙур ямауҙар һалынған кизе ыштан, башында меҫкен бүрек, аяҡтарында тула ойоҡ менән туҙған сабаталар ине. Ул кырандас янына килеп, бары: «Улым!» – тип кенә Бәҙретдин

менән күреште, унан беҙгә лә шулай һүҙһеҙ генә ике ҡулын һуҙҙы һәм, шунда уҡ ат башына барып, уны туғара ла башланы...

Бәҙретдин һандығын күтәреп өйгә ашыҡты. Өй ишегендә бер ҡатын күренде, ләкин ул ни өсөндөр тиҙ генә боролдо. Был Бәҙретдиндең әсәһе булғандыр инде, тик бына уның ишектән сығыр-сыҡмаҫ кире сигенеүе беҙҙе бер аҙ ғәжәпләндерҙе.

Атты туғарып бөтөүгә, Бәҙретдин өйҙән силәк менән һыу, сүмес һәм таҫтамал күтәреп сыҡты. Сиҙәм өҫтөндә генә силәктән бер-беребеҙгә һыу ҡойоп йыуынып алдыҡ. Күңелгә: «Ҡомғандары ла юҡ, күрәһең», – тигән уй килде. Ләкин Бәҙретдин үҙе бик тыныс, һәр хәлдә, оялыу-уңайһыҙланыу кеүек бер нәмә лә һиҙҙермәй.

Йыуынып бөткәс, сәләм биреп өйгә индек. Бәҙретдиндең атаһы беҙҙе бик ябай ғына: «Әйҙәгеҙ, шәкерттәр!» – тип ҡаршы алды.

Ҡараңғыраҡ ҡына өй эсе тышҡы яғы кеүек үк иҫкереп, туҙып бөткән икән инде. Ләкин бүрәнәләре балауыҙҙай һары көрән ине әле, тапалып ашалған иҙәне лә тап-таҙа. Өйҙөң бөтә түрен иңләп, өҫтөнә кейеҙ йәйелгән һике тора, ике ултырғыс, бер эскәмйә, мейес буйында бер бүкән – бөтә йыһаз тигәне шул ғына.

Һике түрендә стенаға терәлеп бер бабай ултыра. Ул Хызыр Ильяс төҫлө ап-аҡ һаҡаллы, ап-аҡ күлдәк-ыштандан. Башындағы түбәтәйе генә күкһел ҡара.

Беҙ бабайға күрешер өсөн ҡулдарыбыҙҙы һуҙҙыҡ. Бабай һелкенмәне. Бәҙретдин ашығып әйтеп ҡуйҙы:

– Олатай, шәкерттәр һинең менән күрешергә теләйҙәр.

– Ә, шулаймы ни, бәрәкалла! – тине бабай, аҙ ғына йәнләнеп, һәм беҙгә кипкән ҙур ҡаты ҡулдарын һуҙҙы. Күҙҙәре асыҡ булһа ла, ул дөм һуҡыр икән.

Беҙ ултырышып доға ҡылдыҡ һәм бер мәлгә тынып ҡалдыҡ. Беҙҙең үҙебеҙгә һүҙ башлауы, билдәле, ҡыйыныраҡ ине. Ләкин, ғәжәп хәл, хужалар үҙҙәре лә һүҙһеҙҙәр. Бабай үҙенең эске донъяһына киткәндәй, текә ҡатҡан килеш, тып-тын ултыра. Бәҙретдин арлы-бирле йөрөнә, ниҙер әйтмәксе лә шикелле, ләкин һүҙ таба алмай кеүек... Атаһы башта мейес буйындағы бүкәндә беҙгә бер аҙ ҡаранып ултырҙы ла, урынынан тороп, һике ситенә сәй урыны әҙерләй башланы, иҫке генә кизе ашъяулыҡ килтереп йәйҙе, кителеп, сатнап бөткән өс сынаяҡ ҡуйҙы, ҡыҫҡа ғына салғы бысағы, сепрәккә төрөл-

гән ярты икмәк, туҫтаҡ менән һөт килтереп ҡуйҙы. Шунан тағы үҙенең бүкәненә барып ултырҙы. Бәҙретдин үҙенең һандығынан бер-ике ус шәкәр алып, шуны ашъяулыҡ уртаһына һалды.

Бер аҙҙан шаршау эсенән әкрен генә: «Булды, улым!» – тигән һүҙ ишетелде. Бәҙретдин инеп самауырҙы алып сыҡты. Был самауырҙың да морон һәм тотҡа төптәре ямалып бөткән ине.

Бәҙретдин беҙгә һикегә менеп ултырырға ҡушты. Беҙ, аяҡтарҙы бөкләп, менеп ултырҙыҡ. Шунан һуң алдыбыҙға ҡыҙҙырылған йомортҡалы таба килеп ултырҙы. Бәҙретдин шаршау эсенә йомшаҡ ҡына өндәште:

– Әсәй, сәй яһарға үҙең сыҡ инде.

– Атайың һуң? – тине шаршау эсенән әсәһе әкрен генә.

– Атайыммы?.. Юҡ, һин үҙең яһа инде беҙгә, – тине Бәҙретдин, нисектер бик ихласлап үтенгәндәй итеп.

Шаршау эсе бер аҙ тынып торҙо, унан һуң киндер күлдәк өҫтөнән шундай уҡ киндер алъяпҡыс быуған, ойоҡ-сабаталы бер ҡатын ситса яулығының ситен битенә тартып һәм башын эйеп кенә сыҡты ла, самауыр артына килеп ултырҙы.

Уға күтәрелеп ҡарағас та, минең йөрәк әллә нимә эшләп китте. Дөрөҫөрәге, йәшермәйенсә әйтәм, бер сикәнеү тойғоһо йөрәкте өшөтөп ебәргәндәй булды: бисара ҡатындың бөтә битен, күҙен ҡасандыр кисергән рәхимһеҙ сәсәк зәхмәте тамам боҙоп бөтөргән. Һул күҙе бөтөнләй ҡыҫылған, ә уң күҙе иләмһеҙ ҙурайып ҡалған. Йәш пәрҙәһе аша ҡараған ҡашһыҙ, керпекһеҙ күҙендә бисараның бөтә эске йәне сағылырға ғына тора кеүек. Әйтерһең, был һис йомолмаҫ, йәшкәҙәгән, моңһоу күҙ – уның яланғасланып ҡалған берҙән-бер күңел көҙгөһө!

Уны күреп, беренсе сикәнеү һәм ҡыҙғаныу тойғоһон кисергәс тә, күңелгә шундай уй килде: Бәҙретдин был бәхетһеҙ әсәһен саҡырып алырға һәм беҙгә күрһәтергә нисек итеп йөрьәт итте икән? Беҙ бит, ғәҙәттә, кешене ҡурҡытырлыҡ йәмһеҙ йәки ғәрип туғандарыбыҙҙы яттар күҙенә күрһәтмәҫкә тырышабыҙ, уңайһыҙланабыҙ, оялабыҙ һымаҡ.

Ә еңгә, шул арала сынаяҡтарға сәй яһап, йөҙөн самауыр артына йәшерә төшөп, беҙгә һуҙҙы. Бәҙретдин беҙҙе ҡыҫтап:

– Йәгеҙ әле, бары менән ашап ҡына эсегеҙ, ашап ҡына! – тине. Уның тауышында уңайһыҙланыу ҙа, оялыу ҙа ишетелмәй.

Ашап, икешәр сынаяҡ сәй эскәс, беҙ шәшкеләребеҙҙе ҡапланыҡ.

Бәҙретдин ҡапыл аяғүрә баҫты ла:

– Булмаһа, мин һеҙгә үҙемдең китаптарымды күрһәтәйем әле, – тине һәм тәҙрә башына яһалған кескенә кәштәнән бер өйөм китаптарын алып беҙгә бирҙе. Беҙ, бер эш сыҡҡанға ҡыуанып, шуларҙы ҡарай башланыҡ.

– Минең һеҙгә күрһәтәһе тағы бер нәмәм бар бит әле, – тине Бәҙретдин һәм кәштәнән кескенә скрипка алды. Был ҡулдан ғына яһалған, буялмаған көрән генә бер скрипка ине.

Беҙ ғәжәпләнеп ҡараныҡ:

– Ҡайҙан был һиндә?

– Үҙем маташтырған булдым инде, – тине Бәҙретдин һәм, скрипканың тоноҡ ҡына тауышын сығарып, ҡылдарын көйләргә тотондо. Уның ҡумыҙ уйнауын, мандолина сирткеләүен беҙ белә инек. Әммә скрипка!..

– Әй, Бәҙри, ниңә әлегәсә йәшерҙең. Мәҙрәсәлә Сәғиттең скрипкаһынан уйнаттырған булыр инек, – тинек беҙ.

– Оҫта барҙа ҡулың тый... – тине Бәҙретдин, тыйнаҡ ҡына йылмайып. Ул скрипкаһын шаҡтай оҙаҡ аҙапланып көйләне. Шул саҡта мин уның әсәһенә күтәрелеп ҡараным: әсә үҙенең шәкерт улына бәғергә төшөрлөк шундай бер тәрән мөхәббәт менән, бәхет, һөйөнөс менән сихырланып, иреп, мөкиббән китеп ҡарап ултыра, мин хатта йәнем-тәнем менән тетрәнеп ҡуйғандай булдым. Күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы – гүйә, был ҙурайып асылған һыңар күҙҙәге өнһөҙ ҡараште үҙе эшләгән мөғжизәгә таң ҡалыу, шуға сикһеҙ ҡыуаныу, шуның менән ғорурланыу хистәре ап-асыҡ сағылып тора: ул тапҡан бит был баланы! Ул имеҙгән бит уға күкрәк һөтөн! Ул ошо һөлөк кеүек егеттең әсәһе бит! Шәкерт әсәһе, ғилем эйәһе буласаҡ кешенең әсәһе...

Бәҙретдин, маташа торғас, скрипкаһын көйләне, яурынына терәне, йәйә һымаҡ смычок менән һыҙғыларға тотондо. Скрипканың тауышы бик зәғиф, себеш тауышындай көсһөҙ, ләкин был минутта беҙҙең күңелдәрҙә ул да бик яғымлы, бик танһыҡ ине. Бәҙретдиндең уйнауын барыбыҙ ҙа, сылт та итмәйсә, тып-тын ҡалып тыңлап ултырҙыҡ. Текә генә ҡатып ултырған ап-аҡ бабай нимә уйлай, букәне өҫтөндә ҡуҙғалмай ултырған ағай ни кисерә – быны белеүе мөмкин түгел. Тик ошо моң эсендә, томан аша ҡараған ай төҫлө, Бәҙретдиндең әсәһе генә үҙенең һүҙһеҙ шатлығы менән яҡтырып ултыра.

Бер-ике көй уйнағас, Бәҙретдин әсәһенә өндәште:

– Әсәй, һиңә нимәне уйнайым?

Әсәһе бер мәлгә балаларса ҡыҙарынды һәм ҡыуанысынан тағы ла балҡыбыраҡ китте. Ләкин ҡайтарып һүҙ әйтә алманы.

– Әсәй, һин ошо көйҙө ярата инең бит! – тине лә Бәҙретдин, «Һалҡын шишмә»не уйнай башланы. Уның һүҙҙәре, һүҙҙәренән бигерәк шул ҡәҙәр ябай, тәбиғи, йылы, яҡын итеп өндәшеүе менән һуңғы шиктәремде лә селпәрәмә килтерҙе. Әсәһе өсөн уңайһыҙланыу тигән нәмәнең әҫәре лә юҡ икән Бәҙретдиндә!.. Ҡайҙа ул уңайһыҙланыу! Берәүҙе лә күрмәйенсә, бары әсәһенә, әсәһенең ана шул шаҙра, салыш, аҡайған күҙле йөҙөнә генә ҡарап, ул скрипкаһын уйнаны ла уйнаны. Уның был йылы ҡарашында әсәһен өҙөлөп яратыу ғына түгел, ә уны тотошлайы менән аңлау, ҡәҙерләү, йыуатыу һиҙелеп тора кеүек. Белмәйем, былай ҡарай алыр өсөн, күңелдәрҙә ниндәй генә тәрән мөхәббәт даръяһы ятырға тейештер инде?!

Шулай ҙа беҙгә ҡуҙғалырға ваҡыт ине инде.

Күк алашаны егеп, юлға сыҡтыҡ. Бәҙретдин һәм уның атаһы, йәнәшә баҫып, беҙҙе оҙатып ҡалдылар.

Ҡояш байырға табан боролған ине. Ә шулай ҙа һабантурғайҙар тағы ла бейеккәрәк менеп, тағы ла һуҙыбыраҡ, ярһыбыраҡ, өҙлөкһөҙ һайрайҙар ҙа һайрайҙар. Донъя киң, киң, киң, әл-ләләләү! Ере, күге тын, буш, моңһоу... бик моңһоу миңә! Бер ни ҙә эшләй алмайым үҙем менән: самауыр артынан ғына улына ҡарап ултырған әсәй кеше күҙ алдына килә лә, эсемдән тағы үкһей башлайым... Кемгәлер йоҙроҡ һелкеп, ҡысҡырғым килә: йәмһеҙ түгел бит ул, матур бит ул, матур, матур Бәҙретдиндең әсәһе.

**1.** Хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.

**2.** *Оҫта барҙа ҡулың тый* тигән мәҡәлдең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Уның икенсе өлөшө нисек яңғырай? Ошоға оҡшаш мәҡәл, әйтемдәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

**3.** *Был күп һыналған нәмә: рәхимһеҙ нужала тороп уҡыған ярлы шәкерт, гәҙәттә, бик һәләтле булып сыға* тигән раҫлауға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек? Үҙегеҙ уҡыған башҡа әҫәрҙәрҙән, тормоштан быға миҫалдар килтерегеҙ. Был раҫлау әлеге заман өсөн дә тап киләме? Фекер алышығыҙ.

**4.** Бәҙретдин образына характеристика бирегеҙ.

**5.** Әҫәр ни өсөн «Матурлыҡ» тип атала, аңлатығыҙ. Унда ниндәй матурлыҡ тураһында һүҙ бара? Матурлыҡ төшөнсәһенең, ғөмүмән, ниндәй төрҙәре бар? Әңгәмә ойоштороғоҙ.

**6.** Һабантурғай һайрауын һүрәтләгән урындарҙы Р. Ғариповтың «Һабантурғай» шиғыры менән сағыштырығыҙ. Оҡшашлыҡтары бармы?

**91-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Мәғәнәһенә ярашлы һорауҙар төҙөгөҙ. Бөтә ижектәрендә лә ***о*** һәм ***ө*** һуҙынҡылары булған биш һүҙ яҙып алығыҙ.

Солоҡсолоҡ – башҡорттарҙың борон-борондан килгән шөғөлө. Ҡасандыр Башҡортостан ере тотош урман менән ҡапланып алынған саҡта, ҡырағай бал ҡорттары менән бөтә ер тулған булған. Башҡорттар йыуан, таҙа, ҡаты ағастарҙа (имән, ҡарағай, ҡарағас) ҡорттар өсөн ҡыуыштар яһағандар. Бал ҡорттары өсөн оя ер өҫтөнән 6–7 метр бейеклектә ағасты соҡоп эшләнә. Элекке ояларҙан айырылып сыҡҡан күстәр ошо «өй»ҙәргә килеп ултыра һәм бал йыя башлай. XVIII быуатта йәшәгән, башҡорттарҙың тормошо тураһында күп хеҙмәттәрҙең авторы географ Пётр Рычков: «Бөтә башҡорттарҙың да тип әйтерлек солоғо бар, ә ҡайһы берҙәренең солоғо бер нисә йөҙ, хатта меңдән дә ашып китә», – тип яҙып ҡалдырған. Бөгөн иһә эре ағаслы урмандарҙың ҡырҡылып бөтөрөлөүе арҡаһында, солоҡсолоҡ бер Бөрйән районы ҡурсаулыҡтарында ғына һаҡланып ҡалған.

**92-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Башҡорт телендә яңы һүҙҙәр ниндәй юлдар менән яһала?
2. Башҡорт телендәге һүҙьяһалыштың ниндәй төрө рус телендә юҡ?
3. Рус телендәге һүҙьяһалыштың ниндәй төрө башҡорт телендә юҡ?

**93-сө күнегеү.** «Матурлыҡ» хикәйәһенең бишенсе абзацынан («Бына беҙҙең...») яһалма һәм ҡушма һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ.

**94-се күнегеү.** Киң билдәле мәҡәлдәрҙең икенсе өлөшөн яҙығыҙ.

1. Оҫта барҙа ҡулың тый, ...
2. Сысҡанға үлем, ...
3. Ағас күрке – япраҡ, ...
4. Йән биргәнгә, ...
5. Йән тартмаһа ла, ...
6. Ни сәсһәң, ...
7. Һабанда һайрашмаһаң, ...
8. Тырышҡан – тапҡан, ...
9. Бер көн артта ҡалһаң, ...

Бер мәҡәлдең мәғәнәһенә ярашлы ижади эш эшләгеҙ.

**95-се күнегеү.** Бер составлы һөйләмдәрҙән торған текст төҙөгөҙ. Йыйнаҡ һөйләмдәрҙән торған текст төҙөгөҙ.

### Умырзая

Күк умырзая Урал тауҙары биттәрендә иртә яҙҙа иң тәүгеләрҙән булып сәскә ата. Ирәндек, Ҡырҡты, Уралтау тауҙарында апрель аҙаҡтарында, май баштарында бөтә асыҡ урындар умырзая менән ҡаплана. Умырзая сәскәһе тышҡы формаһы менән тюльпанға оҡшай. Умырзая сәскәһенең ғүмере бик ҡыҫҡа: 4–5 көн. Ғәжәп күренеш: әле ныҡлап үлән дә сыҡмаған, ағастар ҙа әле яланғас тора, ә асыҡ урындар күк умырзая сәскәһе менән ҡапланған, һәм улар араһында әле бында, әле тегендә һары умырзая ялҡынлана... Умырзаяны русса подснежник тип тәржемә итеүселәр ҙә бар. Ләкин был дөрөҫ түгел. Һары умырзаяны русса **горицвет** тип йөрөтәләр, ә күк умырзаяның исеме – **сон-трава**.

## УМЫРЗАЯ

*(риүәйәт)*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер хан. Уның берҙән-бер генә улы булған. Атаһы улы өсөн бөтәһен дә алдан уҡ хәл иткән: уны төрлө фәндәргә өйрәткән, кәләш һайлаған, үҙ мөлкәтенән өлөш сығарған. Улы менән кәңәшләшеп тә тормаған. Хан улы бер ярлы кешенең Умырзая исемле ҡыҙына ғашиҡ булған. Бер саҡ ошо һылыуҙарҙан-һылыу ҡыҙ менән ҡасып киткән. Хан улын эҙләргә вәзирҙәрен ебәргән. Улар ғашиҡтарҙы өс көн, өс төн эҙләп тә, таба алмай ҡайтҡандар.

Ҡайтып килгәндә, бер вәзирҙең яурынына кешесә һөйләшкән ҡара ҡарға килеп ҡунған. Вәзир уны һарайға алып ҡайтҡан. Ҡарға ханды улына ниндәй яза бирергә өйрәткән. Уның һүҙен тыңлап, хан улын ҡарғай башлаған. Күп тә үтмәй, уның ҡарғышы төшкән: хан малайы боҙға, ә һөйгән ҡыҙы Умырзая моңһоу сәскәгә әйләнгән. Ә ғашиҡтар барыбер мәңгелеккә айырылғыһыҙ дуҫтар булып ҡалған: иртә яҙҙа ҡарҙар ирей башлау менән йоҡа боҙ эргәһенән умырзая ҡалҡып сыға – яҙҙың тәүге сәскәһе һөйгәнен тәбрикләй.

Ғашиҡтарҙы айырмайыҡ – умырзаяларҙы өҙмәйек. Быны хатта хандың үҙе лә эшләй алмаған бит.

1. Риүәйәтте иғтибар менән уҡып сығығыҙ ҙа, уның төп идеяһын (мәғәнәһен) аңлатып бирегеҙ.
2. Вәзирҙең яурынына ни өсөн нәҡ ҡарға килеп ҡунған, ә һандуғас йәки ҡарлуғас түгел?

# МӘҢГЕЛЕК УТ

*Әмир Моратов*

## ТЕРЕ ХӘТЕР

Алыҫлаша бара һуғыш беҙҙән,
Тиҫтә йылдар ята арала.
Алыҫлаша. Тик уңалыу белмәй
Ҡанһыраған хәтер-яралар.
Һаман ҡайта алмайбыҙ яу ҡырынан –
Һуғыш беҙҙең өсөн бөтмәгән.
Һыҙлауҙары һаман баҫылмаған,
Күҙ йәштәре һаман кипмәгән.
Хәтер һаҡлай, хәтер һыҡтап илай,
Хәтерҙәргә уйып яҙылған.
Һуғыш беҙҙең әрнеү йөрәктәргә
Тутыҡ ярсыҡ булып ҡаҙалған.
Канонада булып иҫләтә ул,
Күк күкрәһә, йәшен йәшнәһә.
Шыбыр тиргә батып уянабыҙ
Мәхшәрҙәрҙе күреп төштәрҙә.
Танк илә һажлап өҫтөбөҙгә,
Пуля яуа, шартлай миналар.
Ҡырҡ беренсе йылда ауған дуҫтар
Ҡабат атакаға баралар…
Торалар ҙа тағы ауалар…
…Тын ҡурғандар йоҡлай төштәр күреп,
Окоптарҙы үлән ҡаплаған.
Беҙҙең өсөн ваҡыт ҡырҡ бер менән
Ҡырҡ биш араһында туҡтаған.

1. Шиғырҙы иғтибар менән уҡығыҙ. Тасуири уҡығанда, интонация, пафос нисегерәк булырға тейеш, аңлатығыҙ.
2. Һуғыш ветеранының хәтере ни өсөн һаман уңалмай? Шиғырҙан миҫалдар килтерегеҙ.

## БОҘЛО ҠУҘ

Күҙ алдымдан китәһе юҡ
Әсәйемдең һөттәй йөҙө,
Ишеккә лә көсө етмәй
Саҡ-саҡ атлап өйгә керҙе.
Асыҡ өйҙә ел туланы,
Сәсә-сәсә ҡар буранын…
Шунда күрҙем әсәйемдең
Сәстәренә ғүмер буйы
Иреməҫкә ҡар ҡунғанын…
Миҙә атлап, битен ҡаплап,
Сайҡалғайны, ҡулындағы
Кескәй ҡағыҙ осоп йөрөп,
Һөйләй, гүйә, ни булғанды…
Өй түренән көн-төн беҙгә
Өмөт бөркөп көлгән һүрәт
Ошо мәлдә: «Туғандарым,
Хуш…» – тигәндәй булды кинәт.
Әсәйемдең йән тетрәткес
«Улым» һүҙен әйткән көндәй,
Минең йөрәк был донъяла
Яманыраҡ мәлде белмәй.
Туңды йәнем, янды йәнем
Ҡарлы иҙән уртаһында…
Ошо ҡағыҙ, гүйә, һаман
Боҙло бер ҡуҙ… хәтерләргә,
Ағай, һинең тураһында.

1. Икенсе строфаның һуңғы өс юлының мәғәнәһен аңлатығыҙ.
2. Ағаһының ҡара ҡағыҙын алған сабыйҙың кисерештәрен күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Шағир уны нисек һүрәтләгән?
3. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## НАЗАР НӘЖМИ

*(1918–1999)*

Назар Нәжметдин улы Нәжметдинов 1918 йылдың 5 февралендә Дүртөйлө районы Миңеште ауылында тыуған. Күренекле шағир, драматург. «Ҡапҡалар», «Күлдәк», «Йыр

тураһында баллада», «Йоҡлаған бала янында», «Дуҫ тураһында ун бер йыр», «Шағир һәм шаһ», «Иблис», «Урал» поэмалары киң билдәле. «Саҡырылмаған ҡунаҡ», «Гармунсы дуҫ», «Егет егетлеген итә», «Күршеләргә ҡунаҡ килгән» һ. б. драмалары бар. Утыҙ биш китап авторы.

Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. 2-се дәрәжә Ватан һуғышы (ике тапҡыр), Ҡыҙыл Йондоҙ, Октябрь Революцияһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры. Башҡортостандың халыҡ шағиры.

## ҠАЙТМАНЫҒЫҘ ТЫУҒАН ЕРҘӘРГӘ

Һеҙ ҡайҙарҙа ятаһығыҙ икән,
Ниндәй тупраҡ, ниндәй ерҙәрҙә?
Ҡайтырбыҙ, тип киткәйнегеҙ ҙә бит,
Ҡайтманығыҙ тыуған илдәргә.
Яу ҡырында Тыуған иле өсөн
Ир-егеткәй юҡҡа ауырмы?
Йөрәктәрҙә һеҙҙең – утлы ҡурғаш,
Күтәреүе әллә ауырмы?
Яу ҡырҙары күптән инде тынды,
Шул ҡырҙарҙа мәңге ҡалдығыҙ.
Һеҙ – үлемһеҙ. Үлемегеҙ менән
Еңеү булып балҡый данығыҙ.

1. Һуғыш ветеранының яуҙан ҡайтмаған иптәштәрен һағыныуҙары әҫәрҙә нисек бирелгән?
2. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.
3. Шиғырға күренекле композитор Заһир Исмәғилев көй яҙған, уның фонояҙмаһын тыңлап, ҡушылып йырлағыҙ.

*Муса Йәлил*

## ЫШАНМА

Һиңә минән хәбәр килтерһәләр,
«Ул йығылды арып», – тиһәләр,
Һин ышанма, бәгерем, бындай һүҙҙе
Дуҫтар әйтмәҫ, яҡын күрһәләр.
Байрағыма ҡаным менән яҙған
Антым саҡыра алға барырға,

Хаҡым бармы минең абынырға,
Хаҡым бармы арып ҡалырға?
Һиңә минән хәбәр килтерһәләр,
«Алмаштырған илен», – тиһәләр,
Һин ышанма, бәғерем, быңдай һүҙҙе
Дуҫтар әйтмәҫ, мине һөйһәләр.
Һиңә минән хәбәр килтерһәләр,
«Муса инде үлгән», – тиһәләр,
Һин ышанма, бәғерем, быңдай һүҙҙе
Дуҫтар әйтмәҫ, һине һөйһәләр.
Тупраҡ күмер тәнде, күмә алмаҫ
Ялҡынлы йыр тулы күңелде.
«Үлем» тиеп әйтеп буламы һуң
Еңеп үлгән быңдай үлемде?

1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Уның кемгә төбәп яҙылғанын асыҡлағыҙ.
2. Муса Йәлил – күренекле татар шағиры. Маобит төрмәһендә фашист тотҡонлоғонда һәләк булған. Үлгәндән һуң уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән. Шағирҙың шәхесе, ижады тураһында мәғлүмәт туплап, белешмә төҙөп яҙығыҙ.
3. Шиғырға Заһир Исмәғилев көй яҙған. Йырҙың фонояҙмаһын табып тыңлағыҙ, ҡушылып йырлағыҙ.

*Азамат Мәһәҙиев*

## ЕҢЕҮ МЕНӘН ҠАЙТҠАН

Өфөнөң Черниковка биҫтәһендә, Ветерандар скверында, ғәҙәти булмаған бер һәйкәл барлыҡҡа килде – эскәмйәлә ултырған һалдат һәйкәле. Бейеклеге 3 метр, ауырлығы 6 тонна тәшкил иткән был һәйкәлде скульпторҙар – Илдар Шәйәхмәтов менән Валерий Новиков ижад иткән.

Һуғыштан ҡайтып килгән һалдат, арып, эскәмйәгә ял итергә ултырған. Ул бына-бына тыуған йортона ҡайтып етер, ҡәҙерле туғандарын, балаларын күрер. Һалдаттың йонсоған йөҙөндә ҡыуаныс, еңеү тантанаһы сағыла. Түшендәге орден-миҙалдары уның батыр һалдат булыуы тураһында һөйләй. Шул уҡ ваҡытта һағайып та ҡалған кеүек – ул, гүйә, йәнә бомбалар шартламаһын, ғүмерҙәр ҡыйылмаһын, тип хәүефләнә. Эргәһендәге муҡсайында – һалдат күстәнәсе.

Быға тиклем беҙҙә Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов), Миңнеғәле Ғөбәйҙуллин, Муса Гәрәев, Миңлеғәли Шайморатов, Таһир Күсимов кеүек геройҙарға һәйкәлдәр ҡуйылғайны. Әлегеһе – дөйөмләштерелгән һалдат образы. Ул – һинең, минең, уның олатаһы, яҡыны, туғаны.

1. Текст менән танышығыҙ. Һуғышта һәләк булғандар иҫтәлегенә ҡуйылған һәйкәлдәр бик күп. Үҙегеҙҙең ауылдағы һәйкәлгә сәскәләр һалығыҙ.
2. Һуғышта һәләк булған ауылдаштарығыҙҙың, туғандарығыҙҙың исемлеген төҙөгөҙ. Уларға арнап, шиғыр йәки кескәй хикәйә яҙығыҙ.

## Башҡорт телендә юҡлыҡты белдереү

Рус телендә юҡлыҡ, нигеҙҙә, *не* киҫәксәһе менән белдерелә. Ул киҫәксә бөтә һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәр янына ла ҡуйыла ала: *не дом, не улица, не молодой, не пять, не я, не играл, не вчера* һ. б.

Башҡорт телендә **ҡылымдарҙа** юҡлыҡ *-ма, -мә, -маҫ, -мәҫ* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән белдерелһә, башҡа һүҙ төркөмдәренә *түгел* мөнәсәбәт һүҙе өҫтәлә:

а) *уҡы́-ма, уҡы-ма́ҫ, ки́л-мә, кил-мә́ҫ;*

б) *өй түгел, йәш түгел, биш түгел, мин түгел, кисә түгел, кәрәк түгел.*

Өҫтәп шуны әйтәйек. *Кәрәк* һүҙе янына *түгел* һүҙе лә, *-мә, -мәҫ* ялғауҙары ла ҡушыла ала. Ул – шундай берҙән-бер һүҙ. Уға исем ялғауҙары ла, сифат ялғауҙары ла, ҡылым ялғауҙары ла ҡушылыуы мөмкин. Сағыштырығыҙ: Исем формалары – *кәрәк түгел, кәрәктәрен алды.* Сифат формалары – *кәрәгерәк, иң кәрәге.* Ҡылым формалары – *кәрәкмәй, кәрәкһә, кәрәкһен, кәрәгер, кәрәкмәҫ* һ. б.

**96-сы күнегеү.** Бер һөйләмдәге ике юҡлыҡ ялғауы һәм һүҙе ниндәй мәғәнә белдерә икән? Һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

1. Урманға тағы ла бар**май** бул**май**.
2. Маратты был бәләһенән ҡотҡар**май** яра**май**.
3. Ҡунаҡтарҙы яңы йортта ҡаршыла**маһ**аҡ, килеш**мәҫ**.
4. Ваҡытында барып ет**мә**һәк, был килешкән эш **түгел**.

**97-се күнегеү.** Башҡорт телендә көн өлөштәрен белдергән бына ниндәй һүҙҙәр бар. Уҡығыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.

| | |
|---|---|
| таң атыу | төшкә ҡарай |
| таң һыҙылыу | эңер |
| таң ҡалҡыу | ҡыҙыл эңер |
| таң тишеге | эңер төшөү |
| ҡара таң | шәфәҡ батыу |
| таң һарыһы | кис |
| таң һарғайыу | ҡараңғы төшөү |
| иртә | төн |
| иртәнсәк | төн етеү |
| төш | төн уртаһы |
| көн үҙәге | ҡара төн |
| төш ауғас | ете төн уртаһы |

**98-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһе буйынса һөйләшегеҙ. Ҡушма һөйләмдәрҙе табығыҙ, уларҙың теҙмә йәки эйәртеүлеме икәнен билдәләгеҙ. Эйәртеүле ҡушма һөйләмде рус теленә тәржемә итегеҙ.

1784 йылда Әбей батша ҡушыуы буйынса, Рогервик ҡәлғәһендә таштан яңы сиркәү һалына башлай. Германиянан килгән архитектор Иоганн Мор үҙенә ярҙамсылар итеп уҡый, яҙа белгән каторжандарҙы ла алды. Каторжандарҙан өс бригада төҙөлөп, уларға етәкселәр билдәләнде. Сиркәү нигеҙенә траншея ҡаҙыу бригадаһына Иван Почиталин етәкселек итте, төҙөү блоктарын ташыусылар башына Ҡәнзәфәр Усаев ҡуйылды, ә сиркәүҙең нигеҙен һәм стеналарын һалыусыларға Салауат бригадир итеп тәғәйенләнде. Төҙөлөш өс йыл дауам итте, һәм 1787 йылдың көҙөндә Георгий Победоносец исемен алған яңы сиркәүҙе асыу тантанаһы үтте. Ошо тантанала төҙөүселәрҙең етәкселәре Иван Почиталиндың, Ҡәнзәфәр Усаевтың, Салауат Юлаевтың исемдәре телгә йыш алынып, уларға ҙур рәхмәттәр еткерелде.

Шул көндәрҙән һуң, был өсәүҙең абруйы ҡәлғә гарнизонында ғына түгел, ә яҡын тирәләге хуторҙарҙа йәшәүселәр араһында ла ныҡ күтәрелде. Халыҡ уларға ихтирам менән ҡараны.

Салауаттың, кенәз Салауаттың, исеме бөгөн дә Эстония ерендә, Рогервик ҡәлғәһе урынындағы Палдиски ҡалаһында ҡәҙерләп һаҡланыла.

2012 йылда Башҡортостандан килгән делегация ағзаларына Изге Георгий Победоносец сиркәүенең настоятеле отец Валерий Нозаренко, Салауаттың ҡәбере ошо сиркәү нигеҙе эргәһендә булырға тейеш, тигәйне.

*(Ғ. Вәлиуллин буйынса)*

*Жәлил Кейекбаев*

## ЗӨБӘЙ ҮТӘҒОЛОВ

*(Очерктан өҙөк)*

Үтәғолов тәҙрә төбөнә төшөп ярылған быяла ярсыҡтарын еңе менән һыпырып төшөрҙө. Ликунов, бүлмәнең ҡабырға яҡ тәҙрәһенә барып, күрше йорттағы боецтарҙың хәлен белде. Ундағы боецтарҙың береһе, ҡулдары менән ишаралап, хәлдәренең арыулығын белдерҙе. Ликунов та йылмайып баш һелкте һәм, ҡабат үҙ урынына килеп, бинокле менән атыш майҙанын күҙәтә башланы.

– Немецтар тағы сыҡтылар. Әҙерләнергә!

– Есть әҙерләнергә!

Арғы урамдағы йорттар араһынан өс танк һөйрәлеп килеп сыҡты. Улар Ликунов үҙенең боецтары менән нығынған йортҡа туп-тура килә. Танкыларҙың өсөһө лә тимер һөйрәткеләр таҡҡандар. Ликунов немецтарҙың был хәйләһен белә: һөйрәткеләрҙең эсендә немецтарҙың һалдаттары һәм офицерҙары йәшенеп киләләр. Улар, йорт эргәһенә еткәс кенә, һөйрәткенән йүгереп сығырға ла, йортҡа баҫып инеп, беҙҙе ҡырып һалырға уйлайҙар!

Танкыларҙың береһе күрше йортҡа етеп үк килә. Йорттоң тәҙрәләренән бер-бер артлы өс граната ырғыттылар. Танк туҡтаны. Һөйрәтке эсендә йәшенеп килгән ун бишләп фашист ҡапыл йүгереп килеп сыҡты ла йортто урата башланы. Улар, сүкәйеп боҫа-боҫа, стена буйына һырыҡтылар. Күрше йорттоң был яҡ стенаһына йәшеренгән ике немецты Үтәғолов күреп ҡалды. Ул ҡыҫҡа ғына очередь бирҙе – немецтар тәкмәсеп барып төштө.

– Молодец, Үтәғолов! – тине Ликунов.

– Күршегә ярҙам итә торған йола бар башҡортта, иптәш лейтенант, – тине Үтәғолов.

Немецтар, стена буйлап шыуыша-шыуыша, йорттоң эсенә инергә маташалар. Күрше йорттағы боецтар, тәҙрәнән һонолоп, уларҙың баштарына ата башланылар.

Бер аҙҙан атыш тауышы йорт эсендә лә ишетелә башланы.

– Йортҡа баҫып инергә маташалар, эттәр! – тине Ликунов, асыуланып.

– Беҙгә лә яҡынлайҙар, иптәш лейтенант, – тине Үтәғолов.

Танк йортҡа етеп килә. Үтәғолов, гранаталар бәйләмен ҡулына алып, Ликуновҡа ҡарай.

– Ырғыт әйҙә! – ти лейтенант.

Үтәғолов ырғытҡан гранаталар танкының тап мотор өлөшөнә төшөп ярылды. Көслө шартлау тауышына ер һелкенде. Зыйлап осҡан граната ярсыҡтары тәҙрәләргә лә тейҙе, тәҙрә быялалары зыңғырлап ҡойолдо. Танк туҡтап ҡалды. Үтәғоловтан һуң Ликунов тағы бер граната ырғытты. Уның гранатаһы тимер һөйрәткенең эсенә үк төшөп ярылды. Һөйрәтке эсендә йәшенеп ятҡан немецтар тороп таралырға ла өлгөрмәй ҡалдылар. Һөйрәтке эсенән йәмһеҙ тауыш менән аҡырышыуҙар ишетелде.

Һул яҡтағы йортҡа туралап килгән танк та, ҡапыл боролоп, туҡтап ҡалды. Быны ҡарап тороусы Ликунов менән Үтәғолов шатландылар: был – снайпер Петрушенконың эше. Петрушенко танкының водителе ҡарап килгән тишеккә атырға ярата. Ул был юлы ла шулай эшләне, һәм водителһеҙ ҡалған немец танкыһы туҡтап ҡалды. Һөйрәтке эсендә йәшенеп килгән немецтар һикерешеп торҙолар ҙа ҡысҡыра-ҡысҡыра йортҡа табан йүгерешә башланылар.

– Рус! Здавайся! Русланд капут!

Күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй йүгерешкән гитлерсыларға ҡаршы тәҙрәләрҙән бер-бер артлы гранаталар осто.

– Юҡ, гвардеецтар бирелмәйҙәр! – тип ҡысҡырҙы Ликунов.

Ликунов сәғәтенә ҡарап алды. Көн кисләп бара. Ул, күршеләге боецтарҙың хәлен белеү өсөн, тәҙрә эргәһенә килде.

Күршеләге йорттоң тәҙрәһенән бер боец ишара менән хәлдәрен аңлатырға тырыша: өс бармағын усына йомоп, ике бармағын күрһәтә. Тимәк, улар икәү генә ҡалғандар. Икеһе йә яраланған, йә һәләк булған.

Бер аҙҙан тағы танк тауыштары ишетелде. Ана улар. Юл башлап килеүсе танкының мороно күренде. Уның артынса тағы береһе килеп сыҡты, тағы, тағы… Алтау, етәү… Ун дүрт! Ун дүрт танк туп-тура йорттарға табан йүнәлде.

– Ишәйгәндәр ҙәһә былар, иптәш лейтенант!

– Ничего, Үтәғолов, ныҡ тор! Барыбер үтә алмаҫтар! Ун дүрт танк, тимәк, кеше башына икешәр танк. Күп түгел! – ти Ликунов.

Ҡапыл танкылар араһына миналар төшөп ярыла башланы. Ликунов был миналарҙың ҡайҙан килеп төшкәнен белә: уларҙы станциянан Рубцов ебәрә. Тимәк, Рубцов Ликуновтың ракетаһын күргән. Бына хәҙер ул станциянан немец танкылары өҫтөнә мина яуҙыра.

Ҡара төтөн сығарып, өс танк янып ултырып ҡалды.

– Молодец, Рубцов! – ти Ликунов.

Ул арала йорттарға яҡын уҡ килгән тағы ике танк туҡтап ҡалды.

– Беҙҙекеләр сыҡтылар, иптәш лейтенант! Сыҡтылар!..

Үтәғолов шатлана. Ликунов та йылмая. Бына хәҙер Рубцов килеп сығыр кеүек тойола уға. Һәм Рубцов, һис шикһеҙ, киләсәк! Уның ҡулында бит бер эшелон боеприпас бар!

– Киләләр! Беҙҙекеләр киләләр, иптәш лейтенант!

– Күрәм, күрәм, Үтәғолов!

Күрше йортто ҡапыл ут ҡаплап алды. Быны күреп, Үтәғолов һиҫкәнеп китте: бер төркөм немецтар арт яҡлап һалам ҡосаҡлап килтерәләр. «Былар беҙҙе шулай айыу ыҫлаған кеүек ыҫлап сығармаҡ булалар, ахырыһы...» – тип уйлай Үтәғолов һәм гранатаһын әҙерләй.

Биш-алты немец, ҡысҡыра-ҡысҡыра, урталағы йортҡа табан килә.

– Рус! Здавайся! Капут!

Ликунов менән Үтәғолов, тәҙрә яңағына ышыҡланып тороп, немецтарҙы револьвер менән берәм-берәм сүпләйҙәр.

Һул яҡтағы йортто ла ялҡын ялмап алды. Ялҡын ҡаплап алған тәҙрәнән ике боец һикереп төштө лә өй тирәһендә буталып йөрөүсе немецтарҙы штык менән уңлы-һуллы сәнскеләргә тотондолар. Был хәлде күреп тороусы Ликунов менән Үтәғолов уларҙың тиңһеҙ батырлығына һоҡланалар.

– Молодцы, егеттәр! – ти лейтенант.

Немецтар бөгәрләнеп йығылалар. Улар һалдаттарҙы тереләй тотоп алырға маташалар, күрәһең. Ләкин боецтар, йорт эргәһендә ҡыйралып ултырған танкыларға ышыҡланып, уларҙы штык менән «һыйлайҙар».

Ликунов менән Үтәғолов үҙҙәренә табан бата-сума йүгереп килеүсе немецтарға тәҙрәнән икеһе бер юлы граната ырғыттылар. Немецтарҙың бер нисәһе тәгәрәне, ҡалғандары боролоп ҡастылар.

Йортто арт яҡтан уратып, немецтар дөбөр-шатыр соланға килеп инделәр. Улар ишекте дөбөрләтәләр, ә ишеккә эстән ныҡлы арҡыры ағас һалынған.

– Рус! Здавайся! Ви капут!

Ликунов уларҙы мыҫҡыллай:

– КүреҺегеҙ әле капутты! Сабыр итегеҙ, йыртҡыстар! Гвардеецтар бирелмәйҙәр улар! Һис бер ваҡытта ла бирелмәйҙәр! Юҡ, беҙ бирелер өсөн тыумаған!

Шулай, ҡысҡыра-ҡысҡыра, Ликунов бер-бер артлы ике граната ташланы. Немецтарҙың байтағы тәгәрәп ятып ҡалды. Ҡалғандары, соланға бәреп инеп, ишекте ҡайыра, ишек аша револьверҙарҙан ата башланылар.

Үтәғолов, кеҫәһендәге ике минаны алды ла Ликуновҡа әйләнеп ҡараны.

– Давай, – тине Ликунов. Үтәғолов ишеккә мина ҡуйҙы.

Ликунов менән Үтәғолов, ҡулдарын ҡыҫышып, бер-береһенең күҙҙәренә ҡарап торҙолар, туғандарса ҡосаҡлаштылар. Был уларҙың мәңгелеккә хушлашыуы ине.

– Мин – Рәсәй өсөн!.. – тине Ликунов. Ул һүҙен әйтеп бөтөрмәне – был һүҙ былай ҙа аңлашыла ине.

– Ә мин – тыуған Башҡортостаным өсөн! – тине Үтәғолов.

– Тимәк, икебеҙ ҙә – Ватан өсөн…

Немецтар ишекте тағы ла нығыраҡ дөбөрләтә, шарт та шорт ата башланылар.

– Рөхсәт итегеҙ, иптәш лейтенант, – тине Үтәғолов, командирына ҡарап.

Ликунов Үтәғоловты тағы бер ҡат ҡосаҡлап үпте лә:

– Давай! – тине һалҡын ҡан менән.

Үтәғолов ишеккә һалынған арҡыры ағасты алып ырғытты ла тиҙ генә командиры янына барып баҫты.

Ишек асылыуға, немецтар өйгә тула башланы. Шул саҡ көслө шартлау бөтә йорттоң аҫтын-өҫкә килтерҙе…

Тыуған илдең намыҫын һаҡлап, батырлыҡ менән үлеүҙе дошман ҡулына бирелеүҙән артыҡ күргән ун өс гвардеец шулай һәләк булды. Был батырлыҡтары өсөн уларҙың бөтәһенә лә Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Ростов өлкәһенең Красновка станцияһында уларға һәйкәл ҡуйылған.

1. Тексты мәғәнәһенә төшөнөргә тырышып, аҙаҡ тасуири итеп уҡып сығығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Таныш булмаған һүҙҙәрҙең текста ҡулланылышына иғтибар итегеҙ. Улар тағы ниндәй мәғәнәлә ҡулланыла ала? Был һүҙҙәр менән бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
3. *Күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй* тип ниндәй кешегә әйтәләр? Һеҙҙең дә күҙҙәрегеҙгә аҡ-ҡара күренмәгән сағығыҙ булғаны

бармы? Ошо уҡ мәғәнәне тағы ниндәй һүҙҙәр менән биреп булыуын асыҡлағыҙ.

4. Текста һүрәтләнгән һуғыш эпизодын һеҙ нисек итеп күҙ алдына килтерҙегеҙ? Уның һүрәтен төшөрөгөҙ.

5. Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында батырлыҡ күрһәткән яҡташтарыбыҙ тураһында материалдар йыйып, «Башҡорттар китте һуғышҡа» исемле альбом төҙөгөҙ.

*Мостай Кәрим*

## МАЛАЙҘАР

Беҙ инде илебеҙҙең сиктәренән алыҫта, Болгария ерҙәрендә, фашист ғәскәрҙәрен эҙәрләп, алға бара инек. Беҙҙең мотопехота часы, ҡояш байыр алдынан, кескәй генә ҡалаға килеп инде. Азатлыҡтың тәүге көнөн кисереүсе ҡала халҡы беҙҙе икмәктоҙ менән ҡаршы алды. Көҙ мәлендә ағастарҙан япраҡ нисек ҡойолһа, ул көндә ҡала урамдарына кешеләр шулай һибелде. Тарма баҫыуына төшкән турғайҙар, кеше килгәнде һиҙеп, пырылдап һауаға нисек күтәрелһә, беҙҙе ҡаршылаусы төркөмдәр өҫтөндә лә күккә сөйөлгән кәпәстәр шулай осоп торҙо. Ҙур-ҙур автомашиналарға ултырып барыусы совет һалдаттары өҫтөнә яуған сәскә ямғырын һис ни менән дә сағыштырырлыҡ түгел ине.

Ә малайҙар һуң, малайҙар! Ялан аяҡ малайҙар улар бөтә ерҙә лә бер төҫлө булалар. Уларҙың сәскә ырғытып та, кәпәс сөйөп тә торорға ваҡыттары юҡ. Улар иң алдан барыусы машина менән йәнәшә ҡулдарын болғай-болғай йүгерәләр. Ҡаланы солғап алған шау-шыуҙан, машиналарҙың геүләүҙәренән, ҡайҙалыр арттараҡ башланған йыр моңдарынан асығыраҡ булып, малайҙарҙың нескә тауыштары яңғырай. Ул тауыштар тотош геүләп торған һауаны, гүйә, нескә-нескә генә һөңгөләр булып тишеп үтәләр. Малайҙар азатлыҡ килтереүсе армияны шулай сәләмләйҙәр:

– Добро дошли, братушки!

– Братушки! Братушки!

Ҡала уртаһындағы майҙанға еткәс, колонна туҡтап ҡалды. Һалдаттар машиналарҙан һикерешеп төштөләр. Шунда уҡ алдағы машина эргәһенә бер төркөм малайҙар килеп етте. Улар башта, һалдаттарҙың пилоткаларындағы йондоҙҙарға, иңдәрендәге автоматтарға, уларҙың саң баҫҡан йөҙҙәренә һынаулы ҡараш ташлап, шымып торҙолар. Шунда бер малай иптәш-

тәренән айырылып сыҡты ла ошо беренсе машинанан төшкән яугирҙар эргәһенә килде. Малайҙың ҡолаҡтарын күмерлек булып еткән сәстәренә, уның ҡасандыр салбар балаҡтары тип аталған нәмәһенән һәленеп-һәленеп төшкән эреле-ваҡлы суҡтарына, себештәр сығып бөткән ҡара-көрән аяҡтарына ҡарағанда, уның быға тиклем бал-май эсендә йәшәмәгәнлеге асыҡ ине. Ләкин ҡуйы ҡара ҡаштар аҫтында ике тере күмер булып янған күҙҙәре, эшкә лә, моғайын, туҡмашҡа ла күнеккән ҡарағусҡыл ҡытыршы ҡулдары уның үҙ дәрәжәһен һаҡлай алырлыҡ кеше булыуын күрһәтеп тора ине.

Малай, берәүгә лә төбәп кенә ҡарамай, әйтә һалды:

– Миңә генерал кәрәк ине.

– Ниндәй генерал?

– Иң баш генерал!

Яугирҙар тәүҙә ғәжәпләнеберәк ҡалдылар, унан һуң тыйыла алмай көлөшөргә тотондолар. Ләкин малай үҙенекен ҡабатланы:

– Миңә генерал кәрәк!

– Беҙ ни, туған, бында бөтәбеҙ ҙә генерал инде, – тине автоматчик Вершинин.

Малай, иптәштәренә боролоп, кемгәлер ҡул болғаны. Һалдаттар эргәһенә козырёкһыҙ фуражка кейгән мыҡты кәүҙәле, киң битле икенсе малай йүгереп килде.

– Былар генералдармы, Младен? – тип һораны ул киң битле малайҙан.

– Түгел. Генералдың салбар балағына ҡыҙыл таҫма тегелгән була уның. Иртәнсәк үткән һалдаттар араһында шундай генералды атайым үҙе күргән.

– Ә һин үҙең кем һуң? – тип һораныҡ тәү килгән малайҙан.

– Минме? Мин – Анастас. Быныһы – Младен. Ә тегеләре? – ул ситтә торған иптәштәрен күрһәтте. – Ярай, уларҙы әйтеп тормайым инде. Уларҙың әле һеҙҙең менән танышырлыҡ уҡ эш эшләгәндәре юҡ. Ә генерал ҡайҙа?

– Егеттәр, ә, егеттәр! Беҙҙең Йәрмөхәмәтов ни менән генералға оҡшамаған һуң? – тине берәү. Ул бынан ай ярым самаһы элек, госпиталдән сығып, беҙҙең подразделениеға килгән яугирҙың фамилияһын телгә алды. Йәрмөхәмәтов әүәле башҡорт дивизияһында хеҙмәт иткән һәм кавалерияны үтә яратыуынан әле лә лампаслы салбар кейеп, мыйыҡ еткереп йөрөгән үткер генә бер егет ине.

Шул арала бер нисә кеше бер юлы элекке кавалеристы саҡырырға тотондо. Өсөнсө машина эргәһендә торған Йәрмөхәмәтов, үҙенең фамилияһын ишеткәс, йүгереп үк килеп етте.

– Генерал кәрәк булып китте бит әле бынау егеттәргә.

Элек тә һирәк-һаяҡ «генерал» ҡушаматын ишеткән Йәрмөхәмәтов эштең ниҙә икәнлеген тиҙ үк төшөнөп алды.

– Нимә булды? – тип һораны ул эре генә.

Салбарына ҡыҙыл таҫма тегелгән элекке кавалеристы күргәс, малайҙарҙың йөҙҙәре асылып китте.

– Ошомо? – тине Анастас, иптәшенә боролоп. Младен баш ҡаҡты.

Анастас серле итеп ян-яҡҡа ҡарап ҡуйҙы һәм, ымлап, Йәрмөхәмәтовты бер аҙ ситкәрәк алып китте. Ләкин малайҙың мөмкин тиклем серлерәк әйтергә тырышҡан һүҙҙәре бөтәбеҙгә лә ишетелеп торҙо.

– Другарь генерал, – тине ул, – беҙ һеҙҙең килеүегеҙгә ҡайһы бер нәмәләр әҙерләп ҡуйҙыҡ. Ләкин көпә-көндөҙ уларҙы һеҙгә килтерә алмайбыҙ. Үҙегеҙ беләһегеҙ – хәрби сер...

Тап шул ваҡытта ялға туҡтау өсөн билдәләнгән урындарға барырға команда булды. Беҙ яңынан машиналарға ултырыштыҡ, һәм подразделение үҙенә тәғәйенләнгән урынға китте.

Ә малайҙар шунда уҡ ҡайҙалыр юҡ булды. Уларҙы хәтергә алыусы ла табылманы.

* * *

Беҙҙең подразделениены ҡала майҙанынан алыҫ түгел бер ҙур йортҡа урынлаштырҙылар. Сентябрь айында Болгарияла төндәр йылы була, шуның өсөн һуғышсылар асыҡ һауала ҡуныуҙы артығыраҡ күрҙеләр. Беҙ йоҡлар алдынан, ихата уртаһына ултырып, һалдат сәйен эсергә керештек.

Ҡапыл эңер төштө. Тауҙа эңер шулай ҡапыл төшә шул. Арлы-бирле иткәнсе, Йәрмөхәмәтов ҡайҙандыр лампа табып, табын уртаһына ултыртып ҡуйҙы. Табын яҡтырып китте.

Шул саҡ урам ҡапҡаһы шығырлап асылды. Беҙ бөтәбеҙ ҙә әйләнеп ҡараныҡ. Унда ике ҡараҫҡы күренде лә тағы юғалды. Ҡапҡа артында нимәгәлер бәрелгән тимер сыңлауы ишетелде, һәм шул арала теге ике ҡараҫҡы ихатаға килеп инде. Шәүләләр утҡа яҡынлаштылар. Беҙ был төнгө ҡунаҡтарҙы тиҙ үк таныныҡ. Ҡынһыҙ ҡылыс күтәреп алдан килеүсе Анастас ине. Уның артынан Младен эйәргән. Ул нимәлер тултырылған фуражкаһын ҡулына тотоп алған.

Малайҙар табын эргәһенә килеп туҡтанылар һәм күҙҙәре менән кемделер эҙләргә тотондолар. Арғы яҡтараҡ ултырған Йәрмөхәмәтовты күреп алғас та, Анастас ҡулындағы ҡылысты уның алдына килтереп һалды. Ҡылыс эргәһенә Младен фуражкаһын килтереп ҡуйҙы. Ләкин уның фуражкаһын ҡалдырғыһы килмәне. Малай яңынан эйелде лә фуражканың бер ситенән тотоп һелкте. Унан автомат патрондары ҡойолдо. Һалдаттар, малайҙарҙың нимә әйтерен көтөп, өнһөҙ ҡалдылар.

Эште еренә еткереп башҡарғанлығына ышанғас ҡына, Анастас һүҙен әйтте:

– Бына, иптәш генерал, ҡабул итеп алығыҙ.

– Ҡабул ит, генерал! – Һалдаттар пырхылдап көлөп ебәрҙеләр.

Йәрмөхәмәтов юғалып ҡалманы.

– Көлөүҙе туҡтатығыҙ! – тип бойорҙо ул. Һәм, малайҙарға ҡарап, йомшаҡ ҡына дауам итте. – Рәхмәт, егеттәр. Ә нисек итеп ҡулға төшөрҙөгөҙ һеҙ был нәмәләрҙе?

– Һеҙгә бүләк ул. Ике-өс көн элегерәк, төн уртаһында, бынан фашистар ҡастылар. Буталыш, ҡысҡырыш китте бер заман! Эй мәрәкә булды. Шул ваҡыт беҙ Младен менән икәүләп Стоян байҙар эргәһендә торған машинанан ошо ҡылысты сәлдерҙек. Теге машина фашист генералыныҡы ине. – Анастас ашыҡмай ғына дауам итте. – Үҙебеҙҙе лә саҡ-саҡ ҡына эләктермәнеләр. Арттан атып ҡалдылар. Ә беҙ яр аҫтына һикерҙек. Ана, Младендың фуражкаһында пуля тишеге лә бар… Ә патрондар – элегерәк ҡулға төшкән нәмә улар. Һеҙгә кәрәк булыр әле.

Һүҙгә ҡапыл Младен ҡушылды:

– Бына ошо генералдың үҙ ҡылысы менән үҙенең башын сабып өҙөгөҙ. Һәләк яман ул! Һеҙ уны барыбер ҡыуып етәһегеҙ бит.

– Әлбиттә, етәбеҙ!

– Сабып өҙөгөҙ, йәме!

– Ярар.

«Генерал» малайҙарҙы үҙ эргәһенә ултыртып алды. Вершинин уларға сәй ҡойоп килтерҙе, алдарына шәкәр, икмәк, колбаса өйөп ҡуйҙы. Ләкин малайҙар башта дәрәжәне юғары тоттолар, ҡомһоҙланып һыйға ташланманылар. Вершининдың ҡыҫтауына ла «рәхмәт әйтәбеҙ» тип кенә яуап бирҙеләр.

Тик бер аҙҙан һуң ғына малайҙарҙың ҡыйыулығы арта төштө. Беҙ улар менән тиҙ үк дуҫлашып та алдыҡ. Оҙаҡ итеп

сәй эстек. Ҡунаҡтар һүҙгә йомарт булып сыҡты. Улар үҙҙәре хаҡында ла күп кенә нәмә һөйләнеләр. Анастас менән Младен икеһе лә урамда аяҡ кейеме таҙартып көн итәләр икән. Анастастың ауырыу әсәһе бер йыл инде өйҙән сыға алмай, байҙарға кер йыуырға ла бара алмай. Ә Младендың атаһына бер үҙенә һигеҙ йәнде туйҙырырға тура килә. Малайҙарҙың әлегә тиклем мәктәп юлына аяҡ баҫҡандары ла юҡ икән. Ләкин уларҙың һүҙҙәрендә бер генә лә зарланыу ауазы ишетелмәне. Сөнки хәҙер бит уларға яңы тормош киләсәк.

Һүҙгә аҙ ҡатнаша торған Младен ҡапыл ғына белдереү яһаны:

– Һеҙ килгән шатлыҡтан, Болгария азат ителеү шатлығынан беҙ Анастас менән өс көн буйы байрам итәсәкбеҙ. Аяҡ кейеме таҙартырға урамға сыҡмаясаҡбыҙ. Байрам итәсәкбеҙ.

Анастас та уның һүҙен ҡеүәтләне:

– Эйе, беҙ шулай хәл иттек. Ҡулға щётка ла тотмаясаҡбыҙ!

Хушлашыр алдынан һалдаттар Младендың фуражкаһына шәкәр, сохари, колбаса, шоколад тултырҙылар.

Ләкин малайҙарҙың киткеһе килмәй ине шикелле. Улар, нимәлер әйтергә теләп, бер-береһенә ҡарашып алдылар. Младен ҡапыл әйтеп һалды:

– Пилоткаға ҡуйыр өсөн һеҙгә нисәшәр йондоҙ бирәләр?

– Берәрҙе.

– Ә юғалһа?. .

Һалдаттар малайҙарҙың тел төптәрен шунда уҡ һиҙеп алдылар һәм тоҡтарын аҡтарырға тотондолар. Шул арала йондоҙ ҡуйылған өр-яңы ике пилотка ла табылды. Йәрмөхәмәтов пилоткаларҙы, бик тантаналы итеп, ҡунаҡтарҙың баштарына кейҙерҙе. Сикһеҙ ҡыуаныуҙан малайҙар бөтөнләй һүҙһеҙ ҡалдылар. Бер аҙҙан һуң ғына, Анастас ныҡ итеп башын эйҙе. Младен да шуны уҡ ҡабатланы.

– Дәү итеп рәхмәт әйтәбеҙ, другари! – тинеләр малайҙар һәм йүгереп сығып та киттеләр.

Беҙ байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙыҡ. Башлап Йәрмөхәмәтов өндәште:

– Насар эшләнем мин, егеттәр. Ниндәй һәйбәт малайҙарҙы алданым. Генерал, имеш... Миңә хәҙер инде генерал булғансы, хеҙмәт итергә тура киләсәк...

Мин ҡояш менән бергә уяндым. Иптәштәрем әле йоҡлап ята ине. Ләкин мине бер нәмә ғәжәпкә ҡалдырҙы. Һалдаттарҙың һәр береһенең аяҡ осонда ултырған итектәре яңы сыҡҡан

ҡояш нурында ялтырап тора ине. Улар шундай һәйбәт итеп таҙартылып, майланып ҡуйылғандар. Мин сыҙаманым, егеттәрҙе уяттым.

– Бына мөғжизә, – тине Вершинин.

– Мөғжизә түгел, – тине ҡапҡа төбөндә һаҡта тороусы һалдат. – Мин уларға үҙем рөхсәт иттем. Таң алдынан килгәйнеләр.

– Бына ниндәй бит улар, – тип ҡабатланы Йәрмөхәмәтов. – Их, егеттәр, егеттәр...

Беҙгә нисектер күңелле лә, моңһоу ҙа булып китте.

Малайҙарҙы беҙ башҡаса күрә алманыҡ. Бер сәғәттән ары киттек.

1. Хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ. Һүҙлек эше башҡарығыҙ.
2. *Һынаулы ҡараш, серле итеп ҡарау, күҙ менән эҙләү, ҡулға төшөрөү, тел төбөн һиҙеү (аңлау)* һүҙбәйләнештәрен руссаға дөрөҫ тәржемә итегеҙ.
3. *Бал-май эсендә йәшәү* тигәнде нисек аңлайһығыҙ? Балда-майҙа йөҙөү төшөнсәһе әкиәттәрҙә, халыҡтың йәнле һөйләү телендә лә йыш осрай. Ата-әсәләрегеҙҙән, ололарҙан һорап, уның мәғәнәһенә төшөнөгөҙ.
4. *Себештәр сығып бөткән ҡара-көрән аяҡтарҙы* һеҙ, хәҙерге заман балалары, күҙ алдығыҙға килтерә алмайһығыҙҙыр. Уны һеҙҙең ата-әсәләрегеҙ ҙә белмәүе мөмкин. Бала сағы һуғыш йылдарына, һуғыштан һуңғы осорҙарға тура килгән бабайҙарҙан һорашып, шул турала кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.
5. *Младендың атаһына бер үҙенә һигеҙ йәнде туйҙырырға тура килә; Малайҙарҙың әлегә тиклем мәктәп юлына аяҡ баҫҡандары ла юҡ икән* һөйләмдәрен руссаға тәржемә итегеҙ.
6. Мәғәнәләре асыҡланған һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, хикәйәнең йөкмәткеһен тасуири итеп һөйләп өйрәнегеҙ.
7. Анастас менән Младен образдарына характеристика бирегеҙ.
8. Хикәйәнең йөкмәткеһе буйынса изложение яҙығыҙ, эштәрегеҙҙе класта уҡып, күмәкләп баһа бирегеҙ.

*Шакир Янбаев*

## ЙӘНЕКӘЙ ҠАРТ

Төшкө һауын алдынан йәйләүгә райком инструкторы артистар алып килде. Көндөң иң эҫе мәле еткән саҡ ине, һауынсылар бер яҡ ситтәрәк өйкөм үҫкән ҡайынлыҡ күләгәһенә теҙелешеп ултырҙылар. Артистар ҙа оҙаҡ көттөрмәне,

машинанан килеп тә төштөләр, һөнәрҙәрен күрһәтә лә башланылар. Йырланылар, эсте ҡатырғансы көлдөрөп тә алдылар. Үлән өҫтөндә аяҡ тыпырҙағаны ишетелмәһә лә, парлашып та, яңғыҙ ҙа бейенеләр. Күңел күтәрелһен өсөн, әҙәм балаһына күп кәрәкме ни, ярты сәғәт эсендә йөҙҙәр балҡыны, йөрәктәр талпынды, арыу-талыуҙар онотолдо. Өйкөм ҡайынлыҡ, әллә ниндәй концерт залдарың ары торһон тигәндәй, йыр-моңға күркәм төйәк булды, япраҡтар араһынан һарҡыған ҡояш нурҙары кешеләрҙең йөҙҙәрендә уйнаны.

Концерт тыңлаусылар араһында бер генә һауынсы күмәк ҡыуанысҡа ҡушылмай, йөҙөн-ҡашын көлдөрмәй, тауыштынһыҙ ултырҙы. Тирәһендә йөҙҙәр балҡый, ә ул артистарға түгел, ә бер яҡ ситтәрәк ҡайынға һөйәлеп торған инструкторға текләгән дә ҡатҡан. Инструктор ҙа быға иғтибар итте, ниңә миңә текләй икән, тип ғәжәпләнде.

Концерт бөткәс тә, һауынсылар таралыштылар, теге ҡатын ғына, кейекте күҙҙән яҙҙырмаҫҡа тырышҡан һунарсы төҫлө, һаман инструкторҙан күҙен алманы, ахырҙа, яҡынырaҡ килеп, күрешергә ҡулын һондо. Шул саҡта ғына уның ҡарашы йомшарҙы, йөҙөнә йылмайыу сыҡты.

– Раян ағай, һеҙ мине танымайһығыҙҙыр... Беҙ, атайымдың хәле ауырайғас, үткән йыл ғына ҡайтып килдек ауылға.

– Рәғиҙә һылыу, һин булаһыңмы ни?! – тип, Раян, алдында баҫып торған ҡатындың кем икәнен ошоғаса белә алмауына уңайһыҙланған төҫлө, ҡысҡырып ебәрҙе. – Йәнекәй олатай ни хәлдә? Күҙенә операция яһатҡан, тип ишеткәйнем, күрәме инде?

– Атайымдың күҙе арыуланды ла ул... Аяҡ-юллыҡ күрә... Тик һуңғы ваҡытта әлләғалайыраҡ булып китте... Ҡартлыҡ ғәләмәтеме икән, йәше лә һикһәндән уҙҙы бит инде... Үҙ алдына һөйләнеп, әллә кемдәр менән Әкрәм ағайымды теләнән төшөрмәй. «Ҡайҙа йөрөйһөгөҙ? Ниңә шул тиклем оҙаҡ көттөрәһегеҙ?» – тип һөйләнә-һөйләнә, үҙәкте өҙә. Әкрәм ағайымдың похоронный ҡағыҙын эҙләп табып, төңөлмәҫме тип, күрһәтеп тә ҡараным. Һеҙҙең икегеҙ бергә төшкән карточкағыҙҙы элегерәк ҙурайттырып алған икән, шуға текләгән дә һаман үҙенекен һөйләнеп тик ултыра. Ахырыһы, бөгөн эштән ҡайтҡас, өйөгөҙгә булһа ла шылтыратайым, тип уйлап йөрөй инем. Үҙегеҙ килеп сығып, ҡайһылай яҡшы булды. Бәлки, ваҡыт табып, атайым янына һуғылып китмәҫһегеҙме икән? – тип, Рәғиҙә ояла-тартына ғына күңелендәге ғәмен һөйләп бирҙе.

Йәнекәй ҡарттың шундай ауыр хәлдә зар-интизар булып ултырыуын ишеткәс тә, Раян үҙен бер нисек аҡлана алмаҫлыҡ ғәйепле тойҙо. Эш тә эш тигән булып, тормош мәшәҡәттәренә әүрәп йөрөй торғас, Йәнекәй олатайҙы барып күрмәгәненә байтаҡ йылдар үтеп киткән икән дә! Ҡайһылай оят, ғәрлек! Өлкән йәштәге ауырыу кешене Раян бөтөнләй иҫенән сығарып ебәргән, ә бына Йәнекәй ҡарт уны онотмаған!

– Рәғиҙә һылыу, хәҙер үк, ошонан уҡ Йәнекәй олатай янына барам. Больницаға һалырға кәрәк булһа, районда врачтар ҙа саҡыртырмын, – тине Раян. Ғәйебен аҡлар өсөн, ул ошо минутта әллә ниҙәр эшләргә лә әҙер ине.

– Юҡ, юҡ! Ул тиклем мәшәҡәтләнмәгеҙ! Больницаға йөрөтөрлөк түгел ул, тик сыҡмаған йәне генә. Инеп күренеп кенә китмәҫһегеҙме, тигәндән генә әйтеүем, – тине Рәғиҙә, уңайһыҙланып. Күҙҙәрендә өмөтлө ялбарыу һүнмәне уның, киреһенсә, көслөрәк урғылды. Атаһына күп йәшәргә ҡалмағанын, Раян менән Әкрәмде күрергә теләүе – өлкән кешенең, бәлки, иң һуңғы теләге булыуын Рәғиҙәнең күңеле һиҙә һәм, шул тойғоно һүҙ менән белдерә алмаһа ла, борсоулы үтенес менән нурланған күҙ ҡарашы аша аңғартырға тырыша ине.

Ашыҡты Раян, йәшлек дуҫы Әкрәмдең атаһы Йәнекәй олатайҙың хәлен белергә ашыҡты. Артистар бригадаһы күрше колхоздың клубында кис сығыш яһарға тейеш ине. Раян уларҙың үҙҙәрен генә оҙатты ла Йәнекәй ҡарт йәшәгән ауылға боролған юл сатында машинанан төшөп ҡалды. Район культура бүлегенең шоферы, уны йәйәү ебәргеһе килмәй, машинаһын оло юлдан бора ла башлағайны, Раян һуғышҡа тиклем педтехникумда уҡыған саҡтарында Әкрәм дуҫы менән икәүләп күп тапҡырҙар тапаған һуҡмаҡтан йәйәүләп үтергә теләне.

– Ҡаратал анау тау артында ғына... Биш-алты километр... Гел машина ла машина. Миңә әҙерәк аяҡтарымды яҙып алырға ла форсат бир әле, ҡустым, – тип, Раян үҙенең протез икәне беленмәгән аяғына ымлап, моңһоу йылмайҙы. Ҡырҡ икенсе йылдан бирле уң аяғы урынындағы протезға ул күнегеп бөткәйне инде, шул тиклем оҫта атларға өйрәнде, белмәгән кешегә аяғының ағас икәнлеге һиҙелерлек тә түгел. Машинала оҙаҡ ултырып йөрөгәндән һуң, атлап китеүе генә ауырыраҡ. Әле лә Раян, ҡыҙып киткәнсе, баҫыу юлынан бер аҙ һылтыҡлабыраҡ барҙы. Шофер егет уның артынан ҡарап тора бирҙеме икән, бәлки, һыңар аяҡлы оло кешене йәйәү ебәргәненә үкенеп, ҡыуып етергә лә машинала елдереп кенә алып барып

ҡуйырға телəгəндерме – бəлəкəй автобус, икелəнгəн төҫлө, юл сатында байтаҡ торҙо. Раян артына боролоп ҡул һелтəгəс кенə, шофёр газға баҫты. Зəңгəр төтөнгə аралашҡан һоро туҙан оло юл өҫтөндə эленеп ҡалды…

Машина күҙҙəн юғалып, ялан юлында яңғыҙы тороп ҡалғайны, Раян, аяғы протез икəнен дə, алтынсы тиҫтəне ваҡлағанын да, сəсендəге, мыйығындағы «ҡырау»ҙы ла онотто. Ул хəҙер – ун алты йəшлек үҫмер, педтехникум уҡыусыһы! Эргəһендə иптəше Əкрəм атлай. Бик дуҫтар улар. Ятаҡта карауаттары ла йəнəш тора, парта артында ла бергə ултыралар. Асыҡҡанда ла бергə асығалар. Хыялдары ла бер үк – уҡытыусы булырға. Раян – Өлкөндө ауылынан, Əкрəм – Ҡараталдан. Техникум урынлашҡан Мəсəғүттəн тураға ынтылһаң, Ҡаратал яп-яҡын, ни бары ун ике километр ғына атлайһы. Өлкөндө алыҫ. Ас көйөнсə юлға сыҡһаң, унда барып еткəнсе күҙ алдарың ҡараңғылана. Шуға күрə Раян менəн Əкрəм Ҡаратал юлын күберəк тапанылар.

– Беҙҙең мөғəллимдəр ҡайтып килə! – тип, əллə ҡайҙан уҡ күреп ҡаршы алыр ине Əкрəмде атаһы. Йəнекəй олатайға ул саҡта ҡырҡ йəштəр булғандыр. Түңəрəк таҡыяһы аҫтынан күренгəн сəсе лə сөм ҡара, ҡояшта янған йөҙөнəн көс-ҡеүəт балҡып тора. Шул тиклем ғəйрəтле. Раян, уның ҡолас ташлап бесəн сапҡанын, кəбəн ҡойғанын күреп, хайран ҡала торғайны. Инде сабынлыҡта елəккə тап булһа, салғыһын элеп ҡуйыр ҙа, себештəрен емгə саҡырған ҡош һымаҡ, Əкрəм менəн Раянды үҙе эргəһенə саҡырып алыр ине. Елəктең иң эрелəрен, иң бешкəндəрен усына йыя ла, ҡайын күлəгəһенə ултырып:

– Əйҙəгеҙ, тəкə салышабыҙ! – ти.

«Тəкə салышыу»ҙың ни икəнен белəлəр егеттəр: иң эре елəктəрҙе һайлап, бер-береңде һыйлау. Ə инде Əкрəмдең атаһы тиккə генə саҡырмай, уның «тəкəлəре» ҡарағусҡылланып бешкəн иң эре елəктəр була.

Əкрəм менəн Раяндың эре-эре елəктəрҙе кинəнеп ашауҙарын ҡарап ултырыу ҙа һөйөндөргəндер Йəнекəйҙе. Ул үҙе лə, ун алты йəшлек сағына ҡайтҡан кеүек көлə-шаяра. Иң аҙаҡтан бер һабаҡта бешкəн ике елəкте усына һалып:

– Һеҙ хəс ошо елəктəр төҫлө – икегеҙ ҙə бер-берегеҙгə оҡшағанһығыҙ. Йəнəш атлап китһəгеҙ, артығыҙҙан ҡарағанда, айырып таныуы ла ҡыйын, – тип хайран ҡала, улы Əкрəмдең үҙенə ике тамсы һыу кеүек оҡшаған Раянды табып, уның менəн дуҫлашыуына һөйөнə.

Шаян кеше ине Йәнекәй олатай. Һикегә түшәлгән кейеҙ өҫтөндә бер юрған ябынып йоҡлаған Әкрәм менән Раянды иртәнсәк аяҡ табандарын ҡытыҡлап уята.

– Башығыҙҙы бөркәгәнһегеҙ. Аяҡтарығыҙға ҡарап торам да, был аяҡтарҙың ҡайһыһы үҙ улымдыҡы икән, тип, таный алмай аптырайым, – ти, үҙе рәхәтләнеп кеткелдәп көлә.

Һуғыш башланғанда Әкрәм менән Раян педтехникумдың беренсе курсын тамамлағайнылар. Икенсе курсты яртылаш уҡығас, 1942 йылдың сатнама һыуыҡ ғинуарында Раян менән Әкрәмдең икеһен бер көндә военкоматҡа саҡырттылар. Ике дуҫты айырмауҙарына ла һөйөндө Йәнекәй. Үҙе ылаусы булып, күҙ ҡараһындай күргән Әкрәмде улының йән дуҫы Раян менән бер санаға ултыртып, Өфөгә тиклем алып китте.

– Инде бынан һуң да айырылышмаҫҡа тырышығыҙ. Ситтә йөрөгәндә яҡын иптәшең эргәңдә булһа, еңелерәк булыр, – тип хушлашты ул.

Өфөлә ике дуҫтың юлы саҡ ҡына айырылманы, Әкрәмде автоматсылар ротаһына, ә Раянды миномет батареяһына яҙҙылар. Раян исемлек төҙөгән старшинаның артынан ҡалмай эйәреп йөрөнө, үҙен автоматсылар ротаһына яҙыуҙы һораны:

– Иптәш старшина, минең йән дуҫым автоматсылар ротаһында... Унан айырылмаҫҡа теләгәйнем... Зинһар, яҙығыҙ мине лә үҙ ротағыҙға, Ворошилов стрелогы мин, насар автоматсы булмам!

Госпиталдән сығып, ҡабат фронтҡа өҫтәлмә һалдаттар алып китергә йөрөгән старшина ахырҙа ыңғайға килде:

– Дуҫым, тиһең инде... Әлбиттә, һуғышҡа дуҫың менән бергә инеү яҡшыраҡ... Алам үҙеңде, ныҡыш егет! Бар дуҫың янына, әйт, икегеҙҙе бер отделениеға яҙам... Иҫән сағығыҙҙа, утлы өйөрмә эсенә барып ингәнсе булһа ла, бергә булып ҡалығыҙ. Һуғышҡа ингәс, төрлө хәлдәр була, – тип моңһоу йылмайҙы...

Раян менән Әкрәм, бер котелоктан ашап, бер нисә аҙна тылда һуғыш һөнәренә өйрәнделәр ҙә, бер эшелонға тейәлеп, көнбайышҡа киттеләр.

Беҙҙең ғәскәрҙәр Дон далаларының һәр ҡарышы өсөн һуғышҡан бик тә ауыр мәл ине. Эшелон, фронтҡа килеп етмәҫ борон уҡ, фашист самолёттарының бомбалары аҫтында ҡалды. Әкрәм менән Раяндың бик күп иптәштәре, үҙҙәре дошманға бер генә пуля ла атырға өлгөрмәне, шунда һәләк булды. Ике дуҫты яҙмыш һаҡланы. Полктан тороп ҡалған

йөҙләп автоматсыларға ҡушылып, инде йәйәүләп, улар Дон йылғаһына ҡарай юл тоттолар.

Тимерҙе утта ҡыҙҙырһаң, ҡоросҡа әйләнә. Шуның шикелле, үлемгә күҙгә-күҙ ҡарағанда, кеше дуҫлығы ла быға тиклем тойолмаған хистәрҙе терелтеп, йөрәктәрҙе айырылғыһыҙ беректерә икән. Әкрәм менән Раяндың күҙҙәре дошманға берҙәй нәфрәт менән янды, икеһе бер мәлдә атакаға күтәрелерҙәр ине, икеһенә бер окоп ышыҡ булды. Дошман тоҫҡап атҡан пуляға үҙ күкрәген ҡуйып, бер-береһен үлемдән һаҡлап ҡалырға әҙер инеләр улар...

Әкрәм етеҙерәк булып сыҡты. Сыйылдап осоп килгән дошман снарядының тап улар ултырған окоп эргәһендә генә ярыласағын нисек тойғандыр – ул ҡолаҡ тондорғос шартлауҙан бер секунд ҡына алда Раяндың өҫтөнә ҡапланды. Аҙаҡ траншея буйлап ярҙамға килгән иптәштәре снаряд күмгән тупраҡтан ҡаҙып алғанда, Раянды Әкрәм дуҫының үлем ҡатҡыллатҡан ҡосағынан көскә айырҙылар...

Раян госпиталдә иҫенә килде. Снаряд ярсығы теткеләгән уң аяғын хирург төптән ҡырҡып ташлағайны. Йән әсеткес һыҙланыуҙан ни булғанын аңланы. «Ҡайҙа минең аяғым?» – тип һораманы. Тәүге һүҙе: «Ҡайҙа минең Әкрәм дуҫым?» – тигән һорау булды.

Өҙөлгән аяҡ урынына бик килештереп протез яһап ҡуйҙылар. Һәләк булған дуҫты ғына бер ни менән дә алмаштырып булмай икән. Раян, госпиталдән сығып, тыуған ауылына ҡайтырға поезға ултырғас, Әкрәм дуҫын бигерәк юҡһынды. «Ниңә иҫән ҡалдым икән?! Икебеҙ ҙә үлһәксе!..» – тип, вагондағы иптәш-юлдаштарын аптыраште ҡалдырып, ҡайнар йәшкә төйөлә-төйөлә үкһене Раян. Ул, үҙенән дә ҡайғылыраҡ кеше юҡ, тип уйлай ине. Баҡтиһәң, ғәзиз балаһын юғалтҡан атаның хәсрәте тағы ла әсерәк була икән. Раян, поездан төшкәс тә, туп-тура Әкрәмдең ата-әсәһенә барырға ниәтләп килә ине. Уның уйын белгәндәй, Сүлейә станцияһында Ҡаратал ауылынан ылау осраны. Ҡулына йүкәнән ишкән сыбыртҡы тотҡан ылаусы ҡатын алдан таныны.

– Әллә һин беҙҙең күрше Әкрәмдең иптәше инде? Йәнекәй ағайҙарға ял һайын бергә ҡайтып йөрөй торғайнығыҙ... Эй, бар ине заманалар! – тип ылаусы ҡатын, Раяндың яуабын да көтмәй, арбанан һикереп төшөп ҡосаҡлап та алды.

– Поездан төшкәс тә таныным үҙеңде! Беҙҙең ауылдан берәйһе төшмәҫме тип, күҙем тишелерҙәй булып ҡарап тора инем, һине күреп ҡалдым. Ауылдаш булмаһаң да, шул тиклем

яҡын күренгдең инде. Йәнекәй ағайым үҙенең Әкрәме ҡайтып төшкәндәй шатланыр инде! Ул һине үҙенең улы һымаҡ ярата ине бит. Әле булһа Әкрәмем менән Раяным, тип икегеҙҙе теленән төшөрмәй. «Икеһе һуғышҡа бергә китте, фашисты үҙ өңөндә дөмөктөрөп, икеһенең дә бергә ҡайтҡанын көтәм әле мин!» тип өмөтләнеп йәшәй беҙҙең Йәнекәй ағай.

Сүлейәнән Ҡараталға байтаҡ ара юл. Һөйләшеп килә торғас, Раянға шул билдәле булды: Йәнекәй олатай улының үлем хәбәрен алмаған икән... Уның өсөн Әкрәм һаман тере, фашистарға ҡаршы һуғышып йөрөй, дошманды үҙ өңөндә дөмөктөрөп, еңеүсе булып ҡайтасаҡ.

Шулай Йәнекәй олатай уйлағанса булһын икән дә бит! Әкрәм, үҙ кәүҙәһе менән иптәшен ышыҡлап, дошман снарядынан һәләк булды. Был хаҡта нисек һөйләргә? Ҡара хәбәрҙе әйтергә теле әйләнерме Раяндың? Нисек һүҙ табыр?

Раян оҙон юл буйына шул хаҡта ғына уйланды. Осрашыуҙың нисек булыуын барыбер күҙ алдына килтерә алманы.

Ғәжәпкә ҡаршы, Әкрәмдең атаһы ла, әсәһе лә «Ниңә яңғыҙың ҡайтып киләһең? Әкрәмде ҡайҙа ҡалдырҙың?» – тип төпсөнмәнеләр. Элекке шикелле мунса яғып ебәрҙеләр. Хуш еҫле ҡайын миндегенең иң һәйбәтен һайлап, мунса ташында Йәнекәй олатай үҙе парланы. Педтехникумдан ҡайтҡан саҡта, Әкрәм менән Раянды мунсаның тәүге эҫеһенә ебәрә торғайнылар. Был юлы Йәнекәй олатай:

– Мунсаның ташы иҫкерә башлағандыр, саҡ ҡына төтөн әсеһе бар. Инәйең менән беҙ сабынып сыҡҡас, парҙың самай йомшағына, Раян улым, һин барырһың, – тип сиратты алмаштырҙы.

Раяндың һыңар аяғы протез икәнен ҡарттар һиҙмәне, егет үҙе лә белдермәҫкә тырышты. Мунсанан һуң, элекке ғәҙәт буйынса, аяҡ бөкләптереп ултырып сәй эсергә Әкрәмдең әсәһе түргә яҫтыҡ һалғайны ла, Йәнекәй олатай табынды өҫтәлгә әҙерләтте.

– Һуғышта йөрөгән һалдат оноҡҡандыр аяҡ бөкләп ултырыуҙы, ыҙалатмайыҡ, әкренләп өйрәнер әле, – тине ул.

Ә бына ятыр урынды тап элеккесә, Әкрәм менән бергә, бер юрған аҫтында йоҡлаған һикегә йәйҙеләр. Әйтерһең, Раян яңғыҙы түгел – баш аҫтына ике яҫтыҡ һалдылар...

Ата менән әсәнең сабырлығына хайран ҡалып, күҙҙәрен йомдо Раян. «Ни өсөн Әкрәм тураһында һорашмайҙар икән? Мине үҙ улдары һымаҡ күреп, ниндәй генә хөрмәт күрһәтергә

белмәй, өлтөрәп торалар. Әйтерһең, мин улар өсөн Раян түгел, ә үҙҙәренең ғәзиз улдары Әкрәм... Ниндәй ҡайғы ябырылғанды белмәйҙәр... Бәлки, белмәгәндәре яҡшылыр ҙа...»

Мунсанан һуң, үҙенең атаһы менән әсәһе кеүек ҡәҙерле кешеләр йәйгән түшәктә онотолоп йоҡоға талды. Ҡарттар күрмәгәндә, протезын сисеп, кейеҙ аҫтына йәшерҙе. Беренсе тапҡыр татлы йоҡола һыңар аяғы юҡлығын да, олоно ҡырҡылған йәш ҡайын төбөнән тамырҙар ҡыуған яҙғы һут һымаҡ, һаман туҡтауһыҙ ҡан һырҡыраған күлтәнең һыҙлауын да онотто. Хатта төш тә күрҙе. Имеш, Әкрәм менән икәүләп педтехникумда уҡып йөрөйҙәр. Каникулға ҡайтҡандар, имеш тә, һикелә бер юрған аҫтында һуҙылып төшөп йоҡлайҙар. Ә Йәнекәй олатай уларҙың аяғын ҡытыҡлап уятырға тырыша, үҙе тауыш-тынһыҙ ғына йылмая...

Татлы төш ҡапыл өҙөлдө. Раян, кемдеңдер һаҡ ҡына юрғанын күтәреп, аяғының осонда һәрмәнгәнен һиҙеп, күҙҙәрен асты. Йәнекәй олатай Раяндың икенсе аяғын эҙләй ине шикелле... Ҡатҡыл бармаҡтары ҡалтырай, ике күҙенән, һаҡалмыйығын еүешләп, йәш тәгәрәй. Үкһеп ебәрмәҫ өсөн, Раян йөҙөн яҫтыҡҡа ҡапланы, тештәрен ҡыҫты.

Ошо таңда Раян дуҫының ата-әсәһен онотмаҫҡа ант иткәйне. Тәүге йылдарҙа, юл төшһә лә, төшмәһә лә ҡарттарҙың янына һуғылып, ярҙам кәрәкһә, ярҙам итеп, хәлдәрен белеп китә торғайны. Тормош мәшәҡәттәре арттымы, һуңғы ваҡытта, иҫенән сығармаһа ла, Ҡараталға барыуҙы һирәкләтте. Бына бит әле, Рәғиҙә өндәшмәй ултырып ҡалһа, бөгөн дә артистар менән бергә машинала геүләтеп үтә сығыр ҙа китер ине бит инде. Рәғиҙә һылыуға рәхмәт – иҫкә төшөрҙө...

Йәнекәй олатайҙы ниндәй хәлдә генә осратырмын инде, тип юл буйына борсолоп килде Раян. Бына таныш өй, таныш ҡапҡа. Элекке шикелле ялпылдап ҡаршы сығып алыусы ғына булманы. Рәғиҙә һауында. Әкрәмдең әсәһе өс йыл элек донъя ҡуйҙы. Йәнекәй олатай өйҙә ултыралыр инде.

Раян, ағас аяғын туҡылдатмайыраҡ баҫырға тырышып, болдорға күтәрелде, ишекте шым ғына асып, өйгә инде. Йәнекәй олатай, әйтерһең, Раяндың килеп инерен белеп-һиҙеп ултырған! Ишектән ингәнде күреүе булды, ике ҡулын алға һонған сабый шикелле талпынып, һикереп шыуышып, Раяндың ҡаршыһына төшә башланы. Раян йәһәт кенә күтәреп ҡосағына алмаһа, өлкән кешенең аяҡҡа баҫып торорлоҡ хәле лә, быуыны ла юҡ ине. Йәнекәй олатай, илаған һымаҡ сеңләп, оҙаҡ ҡына Раяндың күкрәгенә һырлыҡты.

– Әкрәм, балаҡайым, һине һуғышта үлде, тигән булалар. Мин ышанманым! Бик оҙаҡ көттөм дә инде үҙеңде... Ҡайтыр һуҡмаҡтарыңа ҡарай-ҡарай, күҙҙәрем һуҡырайғайны. Өфөгә духтырҙарға барҙым. Һуғыштан улымдың ҡайтҡанын көтәм, мин уны күрергә тейеш, күҙҙәремде асығыҙ, тинем. Рәхмәт уларға, күҙле итеп ҡайтарҙылар. Бына бит, күрәм һине, Әкрәм балаҡайым, минең ыласыным, минең бергенәм...

Һуғыштан ҡайтмаған улдарын һағынып, атайҙар ҙа аҡылдан яҙалар икән. Раян, дуҫының атаһын күкрәгенә ҡыҫып, уның уяу килеш һаташыуҙарына ни тип һүҙ әйтергә белмәй, өнһөҙ-тауышһыҙ баҫып торҙо. Ғүмеренең һуңғы сәғәттәрен йәшәгән Йәнекәй олатайҙың көҙгө япраҡтай йоҡарған ирендәре:

– Әкрәм балаҡайым, һин үлмәгәнһең, һин тере! Һин тере! – тип шыбырлай ине.

**1.** Хикәйәне иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Таныш булмаған һүҙҙәр осраһа, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.

**2.** *Эсте ҡатырғансы көлдөрөү, аяҡ-юллыҡ күреү, әлләғалайыраҡ булып китеү, һуғылып китеү, аяҡтарҙы яҙып алыу, алтынсы тиҫтәне ваҡлау, йәшкә төйөлөү, өлтөрәп тороу, юл төшөү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләренә төшөнөгөҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.

**3.** Ниндәй хәбәр ул *ҡара хәбәр*? «Боҙло ҡуҙ» шиғырындағы *ҡара ҡағыҙҙы* иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Һөйләшеү ойоштороғоҙ.

**4.** Кешенең сәстәренә ҡасан, ниндәй осраҡта *ҡырау төшә*? *Йөрәктең талпынғанын, күҙе тишелеп ҡарап тороуҙы* нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

**5.** *Тик сыҡмаған йәне бар* тип кемгә әйтәләр? Һеҙ үҙегеҙгә шулай тип әйтеүҙәрен теләр инегеҙме?

**6.** Яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлап, һүҙбәйләнештәр ҡулланып, хикәйәнең йөкмәткеһен тасуири һөйләү күнекмәләре үткәрегеҙ.

**7.** Йәнекәй ҡарт образына ентекле характеристика бирегеҙ.

**8.** Йән дуҫтар нисек булырға тейеш? Әкрәм менән Раяндың дуҫлығы миҫалында һөйләшеү ойоштороғоҙ.

**9.** Үҙегеҙҙең дуҫығыҙ тураһында «Минең йән дуҫым» тигән белешмә төҙөп яҙығыҙ.

### Әҙәби процесс тураһында төшөнсә

Әҙәби процесты әҙәби үҫеш тип аңларға кәрәк. Әҙәбиәт тормоштоң үҙенсәлекле (художестволы) сағылышы. Тимәк, тормош ниндәй – әҙәбиәт тә шундай. Ә тормош, халыҡ

тарихында булған ваҡиғаларға бәйле рәүештә, һәр саҡ үҙгәреп торған. Тимәк, әҙәбиәт тә төрлө дәүерҙәрҙә төрлөсәрәк үҫешкән. Башҡорт әҙәбиәтенең, әйтәйек, быуаттар төпкөлөнән килгән оло үҫеш юлы бар. Тәүҙәрәк, һүҙ сәнғәте формалаша башлау менән, халыҡта эстетик зауыҡ тәрбиәләүҙә төп ролде ауыҙ-тел ижады башҡарған. Әкиәттәрҙә, эпостарҙа, легенда-риүәйәттәрҙә боронғо кешеләрҙең аң кимәле, донъяға ҡараштары, хис-тойғолары сағылған.

Һуңғараҡ, мәшһүр һүҙ оҫталары – йырауҙар, сәсәндәр ижадында, йәғни ауыҙ-тел әҙәбиәтендә, һүҙ сәнғәтенең тәьҫир көсө, идея-эстетик тәрбиә сараһы булараҡ роле тағы ла үҫә төшә. Һабрау, Ҡаҙтуған, Асан Ҡайғы йырауҙарҙың, Ҡобағош, Ҡарас, Ерәнсә, Байыҡ һәм уларҙан һуңыраҡ йәшәгән бик күп сәсәндәрҙең ижади эшмәкәрлектәре халыҡтың эстетик ҡараштарын, зауығын тәрбиәләүҙә милли аңын формалаштырыуҙа ҙур ижтимағи әһәмиәткә эйә була. Яҙма әҙәбиәттең барлыҡҡа килеүе иһә башҡорт һүҙ сәнғәтенең йәшәү даирәһен тағы ла киңәйткән: бик күп төрки телле халыҡтар өсөн уртаҡ яҙма әҙәби телдә ижад ителгән әҫәрҙәр күпләп тарала башлай, уларҙы башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк һ. б. яратып уҡый һәм хаҡлы рәүештә үҙенеке лә тип иҫәпләй. «Хөсрәү вә Ширин», «Жөмжөмә солтан», «Мөхәббәтнамә» һ. б. бик күп яҙма әҫәрҙәр был халыҡтарҙың уртаҡ әҙәби ҡомартҡылары булып иҫәпләнә. XIX быуатта китап баҫыу эше барлыҡҡа килә. Быға са ҡулъяҙма рәүешендә йәшәгән әҫәрҙәр типографияларҙа китап рәүешендә баҫыла башлайҙар. Һөҙөмтәлә әҙәби үҫеш бермәбер киңәйә, йәнләнә, ҡатмарлаша төшә. Был процеста башҡорт һүҙ сәнғәтенең өс тармағы ауыҙ-тел ижады ла, ауыҙ-тел әҙәбиәте лә, яҙма әҙәбиәт тә актив ҡатнаша. XIX быуат аҙаҡтарында – XX быуат баштарында, бигерәк тә Октябрь революцияһынан һуң әҙәбиәт халыҡтың дөйөм үҫеш тарихын, йәмғиәттәге ижтимағи-сәйәси, милли-мәҙәни атмосфераны билдәләрҙәй мөһим күренешкә әйләнә.

Әҙәбиәттең үҫеүе, камиллашыуы, күренеүенсә, бик ҡатмарлы процесс. Был процестың үҙәгендә, әлбиттә, исеменән үк күренеүенсә, әҙәбиәт (проза, поэзия, драма әҫәрҙәре) тора. Ләкин әҙәбиәт үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә һәм үҫә алмай. Уның үҫеүе өсөн билдәле шарттарҙың булыуы кәрәк:

– әҙиптәр (яҙыусылар, шағирҙар, драматургтар) – әҙәбиәтте тыуҙырыусылар;

– әҙиптәрҙең әҫәрҙәрен уҡыусылар (читатели);

– әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыусыға еткереү саралары (китап баҫыу эше, ваҡытлы матбуғат, радио, телевидение, кино, театр һ. б.);

– әҙәбиәт ғилеме (әҙәбиәтте өйрәнеүсе ғалимдар, әҙәби тәнҡитселәр);

– әҙәбиәтте уҡытыу (әҙәбиәт уҡытыусылары). Был шарт айырыуса мөһим, сөнки төрлө нәшриәттәрҙә, гәзит-журналдарҙа, радиола, телевидениела эшләүселәрҙе лә, әҙәбиәтсе ғалимдарҙы ла, уҡыусыларҙы ла, хатта әҙиптәрҙең үҙҙәрен дә әҙәбиәт уҡытыусылары тәрбиәләй. Тимәк, әҙәби үҫештең уңыштары, иң беренсе сиратта, уларҙың эшенә бәйле.

1. Ауыҙ-тел ижадының һәм ауыҙ-тел әҙәбиәтенең йәшәү һәм таралыу үҙенсәлектәрен асыҡлағыҙ. Уларҙың бөгөнгө әҙәби процеста тотҡан урынын билдәләгеҙ.
2. Әҙәбиәт менән театр араһында ниндәй бәйләнеш күрәһегеҙ?
3. Гәзит-журналдарҙың әҙәби процеста индергән өлөшөн асыҡлағыҙ.
4. Һеҙ үҙегеҙ бөгөнгө әҙәби процеста ҡатнашаһығыҙмы? Ул нимәлә күренә?
5. Башҡортостандағы бөгөнгө әҙәби процесс тураһында фекер алышығыҙ, уның ҡаҙаныштарын, проблемаларын асыҡларға тырышығыҙ.

**Хәтер һандығына...**

Дошманға үлем сәсһәң – еңеү урырһың, ҡурҡаҡлыҡ күрһәтһәң – хур булырһың.

Батыр даны юйылмаҫ.

Батырҙы ил онотмаҫ.

Ил – һуғышһыҙ, һуғыш – батырһыҙ, батыр яраһыҙ булмаҫ.

Ат үлер – дағаһы ҡалыр, батыр үлер – даны ҡалыр.

Байлыҡ – бер айлыҡ, батырлыҡ – мәңгелек.

Илдең көнө – ир менән, ирҙең көнө – ил менән.

# БЕРҘӘМЛЕК – МӘҢГЕ ҺАҠЛАР ХАЗИНА

## БАШҠОРТОСТАН ХАЛЫҠТАРЫ

Башҡортостанда 4 миллиондан ашыу кеше йәшәй. Халыҡ һаны буйынса ул Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларынан, Краснодар крайынан һәм Мәскәү, Свердловск, Ростов өлкәләренән ҡала Рәсәйҙә етенсе урында тора. Халыҡтың 60 % ҡалаларҙа, 40 % ауылда йәшәй. Административ йәһәттән республика 54 районға бүленгән, унда 21 ҡала, 40 ҡала тибындағы ҡасаба иҫәпләнә.

Республикала йөҙҙән ашыу милләт кешеһе йәшәй. Шуларҙың 30 проценты самаһын ерле халыҡ – башҡорттар, 35 процентын рустар һәм 24 процентын татарҙар тәшкил итә. Уларҙан тыш сыуаштар, мариҙар, украиндар, удмурттар, мордвалар, белорустар күпләп йәшәй. Бөтәһенең дә мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн шарттар бар – милли телдәрҙә газета-журналдар сыға, китаптар баҫыла, радио, телевидение тапшырыуҙары алып барыла, театрҙар эшләй. Мәктәптәрҙә уҡытыу 7 телдә алып барыла. Туған телде предмет булараҡ өйрәнеү мөмкинлеге бар. Быларҙан тыш, күп кенә йәкшәмбе мәктәптәре эшләй.

1. Үҙегеҙ белгәндәрҙе лә өҫтәп, Башҡортостанда йәшәгән халыҡтар тураһында «Берҙәм ғаилә» тигән инша яҙығыҙ.
2. Үҙегеҙгә яҡшы таныш булған берәй милләт тураһында (мәҫәлән, «Башҡортостан сыуаштары», «Башҡортостан татарҙары» һ. б.) белешмә төҙөп яҙығыҙ.
3. «Минең рус (татар, мари һ. б.) дуҫым» тигән темаға шиғыр (кескәй хикәйә) яҙығыҙ.

***

Дан иле, яҙ иле – беҙҙең ил,
Йыр булып яңғырай донъяла.
Күп ерҙәр, күп телдәр берләшкән
Бер бөйөк, бер туған семьяла
Иптәш һәм друг,
Товарищ һәм дуҫ –
Башҡорт һәм рус!

Тау-таштар аҡтарған сағында,
Өҫтәлдәр һығылған табында,
Мул уңыш уңдырған ҡырҙарҙа,
Байрамда, майҙанда, туйҙарҙа
Иптәш һәм друг,
Товарищ һәм дуҫ –
Башҡорт һәм рус!

Салт аяҙ көндә ер йөҙөнә
Яуызлыҡ шәүләһе төшкәндә,
Дошманды ҡыйратып яуҙарҙа,
Ил өсөн ут-һыуҙар кискәндә
Иптәш һәм друг,
Товарищ һәм дуҫ –
Башҡорт һәм рус!

1. Шиғырҙы уның йөкмәткеһенә, пафосына ярашлы тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Шиғыр йыр тексы кеүек итеп яҙылған. Һеҙ уны нимәлә күрәһегеҙ?
3. Шағир әҫәргә исем бирмәгән. Һеҙ уға ниндәй исем бирер инегеҙ?
4. Назар Нәжми һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙың исемлеген төҙөгөҙ, белгәндәрегеҙҙе йырлап күрһәтегеҙ.
5. Назар Нәжми – Башҡортостандың халыҡ шағиры. Уның шәхесе, ижады тураһында мәғлүмәт туплап, белешмә төҙөп яҙығыҙ.

## ХӘКИМ ҒИЛӘЖЕВ

*(1923–1997)*

Лоҡман-Хәким Ғабдрахман улы Ғиләжев 1923 йылдың 1 мартында Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылында тыуған. Шағир, прозаик. Егерме биш китап авторы. «Погонһыҙ

һалдаттар» романы, «Ҡырҡ алтынсы һалдат», «Туҡай Өфөлә», «Ил балаһы», «Башҡортостанға мәдхиә» поэмалары киң билдәле.

Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. 1-се дәрәжә Ватан һуғышы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры. Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## РОССИЯҒА ЙЫР

Уралтауҡай бейек, Ағиҙел киң,
Ҡуйы урман, яҡты киң дала –
Башҡорт ере, о Россия, һинең
Күкрәк һөтөң менән тын ала.

Һиндә – ҡайындар аҡлығы,
Һиндә – һыуҙарҙың паклығы,
Һиндә – күктәрҙең сафлығы,
Россиям, илкәйем, илгенәм,
Донъяла һин генәм, бергенәм!

Уралтауҙың аҫыл таштарында
Мең-мең төҫтәр балҡый, нурлана.
Беҙҙең дуҫлыҡ, о Россия, шулай
Һинең ҡояшыңдан нур ала.

Һиндә – ҡайындар аҡлығы,
Һиндә – һыуҙарҙың паклығы,
Һиндә – күктәрҙең сафлығы,
Россиям, илкәйем, илгенәм,
Донъяла һин генәм, бергенәм!

Уралтауҙың ҡуйыны – ҡайнар шишмә,
Ағым һыуҙар шунан юл ала.
Бер тиң яҙмыш, о Россия, беҙҙең
Ҡушылып аға бөйөк Волгалай.

Һиндә – ҡайындар аҡлығы,
Һиндә – һыуҙарҙың паклығы,
Һиндә – күктәрҙең сафлығы,
Россиям, илкәйем, илгенәм,
Донъяла һин генәм, бергенәм!

Сабый саҡта, әсә бөркөт һымаҡ,
Осороп өйрәттең һин һауала.
Беҙ – ҡанатлы, о Россия, Ватан,
Һин ҡеүәтле мәңге донъяла.

Һиндә – ҡайындар аҡлығы,
Һиндә – һыуҙарҙың паклығы,
Һиндә – күктәрҙең сафлығы,
Россиям, илкәйем, илгенәм,
Донъяла һин генәм, бергенәм!

1. Йырҙың тексын тасуири итеп уҡығыҙ. Пафосҡа ярашлы интонация һайларға тырышығыҙ.
2. Әҫәрҙә Россия образының бирелешенә иғтибар итегеҙ: шағир тыуған иленең ниндәй сифаттарын айырыуса маҡтай?
3. Рус-башҡорт дуҫлығының нигеҙен автор нимәлә күрә? Тексvolutionтан миҫалдар килтерегеҙ.
4. Тексҡа композитор Рәүф Мортазин көй яҙған. Йырҙың фоноязмаһын тыңлағыҙ, ҡушылып йырлағыҙ.
5. Йырҙың бер нисә куплетын ятлағыҙ.

*Мәүлит Ямалетдинов*

## ДУМБЫРА

Мин ҡаҙаҡ дуҫымдың өйөндә.
Алдымда – думбыра.
Барлығы ике ҡыл үҙендә,
Ә ниндәй уйҙарға сумдыра!

Мин ҡаҙаҡ дуҫымдың өйөндә.
Алдымда – хужа ла думбыра.
Ат саба сирткән бер көйөндә,
Даланың билен яу һындыра.

Мин ҡаҙаҡ дуҫымдың өйөндә.
Алдымда думбыра – сая моң.
Ишетәм мең-мең ат өҫтөндә
Тарихтың ебәргән сәләмен.

Мин ҡаҙаҡ дуҫымдың өйөндә.
Алдымда – думбыра һәм хужа.
Йыр һөйләй: Абайҙар илендә
Бәхетле, мул тормош, юҡ нужа.

Мин ҡаҙаҡ дуҫымдың өйөндә.
Алдымда – думбыра.
Ике ҡыл: береһе бөгөнгә,
Береһе үткәнгә йән өрә.

1. Шиғырҙа башҡорт-ҡаҙаҡ дуҫлығы ниндәй образ аша сағылдырыла?
2. Думбыра – башҡортта ла, ҡаҙаҡта ла киң билдәле музыкаль инструмент. Башҡорт думбыраһы ҡаҙаҡтыҡынан айырыламы? Нимәһе менән?
3. Ҡаҙаҡтарҙа думбыра әле лә бик популяр. Ҡаҙаҡ аҡындары үҙҙәренең импровизацияларын думбыраға ҡушылып башҡара. Башҡорт думбыраһы бер ваҡыт онотолоп бөтә яҙғайны, уҙған быуатта һәүәҫкәр оҫталар уны, архивта һаҡланып ҡалған мәғлүмәттәргә таянып, тергеҙҙеләр. Башҡорт думбыраһының боронғо сәсәндәр заманында бик популяр булып та, онотола яҙыуының сәбәбен аңлатығыҙ.
4. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

## ИҪКЕ ҠАРА УРМАН

*(татар халыҡ йыры)*

Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,
Яҡшы аттар кәрәк үтергә.
    Ҡара урманды сыҡҡан саҡта,
    Киҫеп алдым бер уҫаҡ,
    Ай, айырылмайыҡ, дуҫ булһаҡ.
Заманалар ауыр, йылдар ябыҡ,
Дуҫ-иш кәрәк донъя көтөргә.
    Ҡара урманды сыҡҡан саҡта,
    Киҫеп алдым пар ҡайын,
    Ай, айырылмайыҡ, дуҫҡайым.
Ҡара ла ғына йылан, ай, туҙ башлы
Йөрөйҙөр ҙә ҡамыш буйынса.
    Ҡара урманға кергән саҡта,
    Киҫеп алдым пар уҫаҡ,
    Ай, айырылмайыҡ, дуҫ булһаҡ.
Яңғыҙ башым, юҡ юлдашым,
Йөрөймөн дә яҙмыш буйынса.
    Ҡара урманға кергән саҡта,
    Киҫеп алдым пар ҡайын,
    Ай, айырылмайыҡ, дуҫҡайым.

Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,
Ниндәй юлдар менән үтербеҙ?
Ҡара урманды сыҡҡан саҡта,
Киҫеп алдым пар уҫаҡ,
Ай, айырылмайыҡ, дуҫ булһаҡ.
Дуҫ-иш менән бергә эш иткәндә
Теләктәргә тиҙерәк етербеҙ.
Ҡара урманды сыҡҡан саҡта,
Киҫеп алдым пар ҡайын,
Ай, айырылмайыҡ, дуҫҡайым.

1. Йырҙың тексын иғтибар менән уҡығыҙ, уның төп мотивын асыҡлағыҙ.
2. *Дуҫ-иш кәрәк донъя көтөргә* тиелә йырҙа. Дуҫ-иш заманалар ауыр булғанда ғына кәрәкме? Фекер алышығыҙ.
3. Йырҙың фонояҙмаһын тыңлағыҙ, ҡушылып йырлағыҙ.
4. Йырҙың тәүге бер нисә куплетын ятлағыҙ.

**«Синтаксис» темаһы буйынса һорауҙар**

1. Һүҙбәйләнеш һөйләмдән ниндәй билдәләре буйынса айырыла?
2. Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең бер-береһенә ниндәй бәйләнеү юлдары бар?
3. Грамматик нигеҙ нимә ул?
4. Ябай һөйләм менән ҡушма һөйләмдең оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын әйтегеҙ.

**99-сы күнегеү.** «Синтаксис» темаһына, үҙегеҙ өҫтәп, һорауҙар бирегеҙ.

*Ғәли Вәлиуллин*

## САЛАУАТ

Балтика диңгеҙендәге Рогервик ҡәлғәһенә Рәсәй императоры Пётр I 1718 йылдың 19 июлендә нигеҙ ташы һала.

Был ҡәлғә хәрби һәм сауҙа караптары өсөн ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла туңмай торған уңайлы порт булыр тип уйланыла. Төҙөлөш өсөн бөтә Рәсәй империяһынан эшселәр һәм материал йыйыла башлай. Тиҙҙән бында каторга төрмәһе асыла, һәм ғүмерлек һөргөн эштәренә хөкөм ителгән енәйәтселәр

меңәрләп-меңәрләп ошонда ебәрелә башлай. Ҡәлғәнең исеме Рогервик – швед һүҙе «арыш утрауы» тигәнде аңлата.

1773–1775 йылдарҙағы Пугачёв бунтында ҡатнашҡандарҙы ла 1775 йылдың аҙағында ошо ҡәлғәгә килтерәләр. Улар араһында Салауат Юлаев, уның атаһы Юлай Аҙналин, Ҡәнзәфәр Усаев та була.

1778 йыл ямғырлы булды, юлдар боҙолдо, һыбай йөрөүе лә бик ауыр ине. Рогервик ҡәлғәһендә аҙыҡ-түлек тә наҡыҫланды. Каторжандарға ғына түгел, һалдаттар менән офицерҙарға ла ашау етеңкерәмәй башланы.

Ҡәлғә етәксеһе балыҡ тотоуҙы ойошторорға әмер бирҙе. Тәүҙә һалдаттарҙан торған төркөм, ике баркасҡа тейәлеп, диңгеҙгә сыҡтылар, ләкин уларҙың көнө буйы тотҡан уңышы 3–4 биҙрәнән ашманы.

Етәкселек, балыҡ тотор өсөн, ярҙамсы командалағы каторжандарҙан бригада төҙөргә ҡарар итте. Балыҡсылар бригадаһының етәксеһе итеп Салауат Юлаев тәғәйенләнде. (Ул атаһы һәм Ҡәнзәфәр Усаев менән әле яңы ғына ярҙамсы командаға күсерелгәйне.) Ике көн әҙерләнгәндән һуң, ике баркаста тотҡондар, ау менән балыҡ тоторға, диңгеҙгә сыҡты. Һәр баркасҡа ҡоралы икешәр һалдат та ултыртылды. Ҙур отрядтар менән етәкселек итеп өйрәнгән Салауат балыҡ тотоу эшен дә бик оҫта ойошторҙо.

Кискә ике баркас балыҡ менән тулды. Балыҡсылар был уңышты Салауаттың исеме менән бәйләнеләр, һәм шул көндән башлап ул «кенәз Салауат»ҡа әйләнде. Балыҡты артабан да кәрәк саҡта тоттолар. Етәкселек балыҡты күберәк тотоп, тоҙлап, ҡаҡлап, киптереп ҡышҡылыҡҡа һәм киләһе яҙға етерлек әҙерләп ҡуйырға ҡарар итте.

Йәйге матур бер көндә Салауат етәкселегендә балыҡсылар бригадаһы ике баркас менән тағы ла диңгеҙгә сыҡты. Диңгеҙгә ырғытылған ауҙар мул балыҡ менән килә. Салауат, балыҡ тотоуҙы ойоштороу менән бергә, диңгеҙҙең торошон да, тирә-яҡты ла күҙәтеп-күҙәтеп ала. Салауаттың күҙенә баркастары яғына килгән ишкәкле бәләкәй кәмә салынып ҡала. «Бәй, был ҡәлғә яры буйлап йөрөй торған бәләкәй кәмә ләһә, диңгеҙ эсендә йөрөй торған кәмә түгел, диңгеҙ эсендә бәләкәй кәмә менән йөрөү кемдең башына килде икән?» – тип уйлап ҡуйҙы Салауат.

Диңгеҙҙә һауа торошо тиҙ үҙгәреүсән. Бөгөн дә иртән ниндәй тыныс, аяҙ көн ине. Бына офоҡ мөйөшөндә генә күренгән ҡаралы-күкле болот күп тә үтмәй бөтә күкте ҡапланы, ел

көсәйҙе, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йүгергән тулҡындар арҡаларын ҡабарттылар, баркастарға ябырылдылар.

Көн ныҡлап боҙолоп өлгөргәнсе тип, Салауат балыҡ тотоуҙы туҡтатты, табыш һәйбәт, мул ине. Ул баркастарҙы бәләкәй кәмә яғына бороруға бойорҙо. Каторжандар, ишкәккә ятып, бөтә көстәре менән тулҡындарға менә-төшә иштеләр. Ауыр һәм ҙур баркас, ауырлыҡ менән булһа ла, алға барыуын дауам итте. Ә алыҫта күренгән бәләкәй кәмәне тулҡындар йә тегеләй, йә былай һуҡты ғына. Кәмә менән ара яҡынайғас ҡына, Салауат унда бала-сағалар ғына икәнен күрҙе. Балалар бишәү, ике ҡыҙ бала һәм өс малай. Улар ҡысҡырыша, илай, ярҙам һорайҙар. Ә дауыл көсәйгәндән-көсәйә. Бына бер ҙур тулҡын бәләкәй кәмәгә ырғыны һәм балаларҙы ҡаплап йоторға маташты. Кәмә түңкәрелде, балалар диңгеҙгә сумды.

Салауат һәм тағы ла бер нисә каторжан һыуға ташландылар. Улар, тулҡындар араһынан эҙләп табып, дүрт баланы ҡотҡарҙылар. Салауат ҡыҙ артынан бер нисә тапҡыр сумып ҡараны, ләкин бала бер ҡайҙа ла күренмәй. Салауаттың да хәле бөтә башланы. Ләкин ул киң күкрәген тултырып тын алды ла тағы бер тапҡыр диңгеҙ төбөнә сумды. Ниһайәт, ул батҡан ҡыҙ баланың хәрәкәтһеҙ тәненең диңгеҙ төбөнә яйлап ҡына төшөп барыуын күреп ҡалды. Салауат, һуңғы көстәрен биреп, ҡыҙ баланы эләктереп алды һәм диңгеҙ өҫтөнә алып сыҡты. Уларға шунда уҡ ярҙам иттеләр, баркасҡа тартып мендерҙеләр.

Салауат ҡыҙҙың тәненә йән өрөргә тырышты, йөҙ түбән һалып, үпкәһен һыуҙан таҙартты, ауыҙына тын өрҙө. Бер аҙҙан һуң ҡыҙ тын ала башланы һәм күҙен асты. Ләкин баланың хәле бик үк шәптән түгел әле.

Каторжандарҙың баркастары ярға килеп туҡтай торған урынға ҡәлғә халҡы йыйылған. Баркастан балаларҙы алып сыҡтылар. Салауат үҙе хәлһеҙ ҡыҙҙы күтәреп сыҡты. Был балалар Германиянан, ҙур аҡса түләп, хеҙмәткә саҡырылған офицерҙарҙың малайҙары һәм ҡыҙҙары булып сыҡты. Каторжандарҙың балыҡ тотоуҙарын ҡарарға тип, бәләкәй кәмәгә ултырып, бер кемгә лә әйтмәйенсә диңгеҙгә сығып киткәндәр икән. Балаларҙың аталары, капитан Вильям һәм инженер-поручик Отто, кискеһен оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар.

– Бына нисек ул донъя, – тине капитан. – Бынан алты йыл элек Салауаттың атаһы Юлай мине юлбаҫарҙарҙан ҡотҡарғайны. Ә бөгөн уның улы Салауат минең ҡыҙымды үлем тырнағынан тартып алды.

1. Ғәли Вәлиуллин Юлай Аҙналин, Салауат Юлаев, Ҡәнзәфәр Усаевтарҙың Рогервик ҡәлғәһендәге тормошо тураһында быға са билдәле булмаған бик күп архив материалдары тапҡан. Был яҙмалар шул документтар нигеҙендә яҙылған. Тексты иғтибар менән уҡып, унда быға са билдәле булмаған факттарҙы табығыҙ.
2. Салауаттың диңгеҙҙәге ҡаһарманлығы тураһында ентекләп һөйләгеҙ, аҙаҡ изложение итеп яҙығыҙ.
3. Салауат Юлаев тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе лә иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Ғ. Вәлиуллин яҙмалары Салауат образына ниндәй сифаттар өҫтәй? «Башҡорт әҙәбиәтендә Салауат образы» темаһына ентекле һөйләшеү үткәрегеҙ.

## САБИР ШӘРИПОВ

*(1948)*

Сабир Нәғим улы Шәрипов 1948 йылдың 20 мартында Белорет районы Баҡый ауылында тыуған. Прозаик. «Хушлашмайым», «Зәңгәр катер», «Имән бағана», «Ҡолонташ» һ. б. роман һәм повестары, хикәйәләре киң билдәле. Ундан артыҡ китап авторы. Әҫәрҙәре башҡорт, рус, татар, сыуаш телдәрендә баҫылған.

## ҺАЛСЫЛАР

Яҙғы таң ата. Еҙем өҫтөндә томан ята. Тиҫтәләгән һалдар, теҙгенендә юшаусы аттарҙы хәтерләтеп, күкһел һары тулҡындарҙа еңелсә генә бәүелә. Һалсыларҙың оҙата килеүселәр менән күңелле һөйләшеүҙәре, күмәк көлөү тауыштары бөтә Һаллыбаш туғайын күмә. Брезент куртка кейгән ир-ат һалдарын «сәйәхәт»кә әҙерләй башланы. Кәйефтәре күтәренке ине уларҙың. Бына һалсылар, әйберҙәрен тейәгәс, һалдарға менеп баҫтылар. Бригадир Халиҡ ағай, бейәләйҙәрен кейә-кейә, алдағыларға ниҙер ымланы һәм, әйҙә, ҡуҙғалдыҡ, тигәнде аңлатып, ҡулын һелтәне:

– Ярай, Малик, хуш! Кисәге ярҙамың өсөн ҙур рәхмәт. Таныйһыңдыр, һалдарҙың ситке бүрәнәләрен ҡара әле...

– Тырышып уҡы, малай, әтеү бүтәнсә һалға баҫтырмайбыҙ.

– Хәйерле юл һеҙгә!

Һырғый ҡарағайҙарҙан бәйләнгән һал, бәйҙән ысҡыныуына ышанырға теләмәгәндәй, ашыҡмай ғына ҡуҙғалды. Һалдар

каруаны, бер-береһен күҙ күреме аралыҡтар ҡалдырып, бер-береһен ауыр оҙон юлға әйҙәнеләр.

Бына Маликтың атаһы баҫҡан һал да, боролманы үтеп, күҙҙән юғалды. Малик үҙен етемһерәп ҡалғандай хис итте. Ул һалдар ағып киткән яҡҡа оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла ауылға тура алып барыусы һуҡмаҡҡа йүнәлде. Уға дәрескә өлгөрөргә кәрәк ине. Кисә ул үҙ ғүмерендә тәү тапҡыр, ишкәк ишеп, ысын һалды ағыҙышыуын хәтерләне һәм, үҙендә ниндәйҙер көс-ышаныс тыуыуын тойоп, аҙымдарын шәбәйтте.

Еҙемдең ташыу мәлендә күрше райондарға, йәғни ялан яҡтарға, колхоз төҙөлөштәре өсөн тәғәйенләп, ҡыш ҡырҡылған бүрәнәләрҙе ағыҙыу башланды. Ҡыуғынсылар өсөн бик ҡыҙыу мәл. Тик Маликтарҙың күршеһе Әбдрәхим ағай, һыуыҡ үткәреп, ҡаты сирләп киткән. Йүткерә, тәне уттай яна. Халиҡ ағай менән Әбдрәхим ағай Еҙемдең үрге өлөшөнән ҡоро бүрәнәләр һаллап төшөрөргә тейештәр ине. Ә ҡоро бүрәнәләр бик кәрәк, сөнки улар сей бүрәнәләрҙән бәйләнгән һалдарҙың ситенә тағыла. Шулай итһәң, һал ышаныслыраҡ, йәғни әллә ни батмай аға.

«Кем менән барырға? Былай ҙа кеше етмәй... Әллә Маликты һынап ҡарарғамы? Ял көнөнә тура килә, уҡымайҙар... Моғайын, булдырыр, быйыл туғыҙҙы бөтә бит инде», – тип уйланы һалсылар бригадиры.

Малик, әлбиттә, атаһының тәҡдимен шатланып ҡабул итте.

Эш ҡыҙыу барҙы. Йыуан бүрәнәләрҙән өс кәшмәк бәйләнеләр, аҙаҡ уларҙы бер-береһенә таҡтылар. Ишкәк сапҡанда атаһы улына һал ағыҙғанда була торған ҡыҙыҡлы мажараларҙы һөйләне. Ниҙәр генә күрмәгән ярһыу аттай тулап ағыусы был Еҙем! Тау йылғаһы шул – яҙҙарын аяуһыҙ ныҡ таша. Ана, әйләнә-тулғана ҡолас етмәҫлек олоно менән тирәк ағып бара.

Һал әҙер. Ҡуҙғалдылар. Малик эшлекле ҡиәфәттә артҡы быуындағы ишкәккә баҫты. Ысын һалсы ул бөгөн! Һынатмаҫҡа кәрәк. Дуғаланып йүгереүсе тулҡындарҙа һал, әйтерһең, аҡмай, ә тәгәрәй ине. Малик тәү мәлдә үҙен кейеҙгә ултырып осҡан әкиәт батырындай хис итте.

Сая шаршылы бөгөлдәр, тыныс ағымлы ятыуҙар, һыйыр дәүмәлле бүкән таштар артта ҡала барҙы. Малик атаһының, ишкәккә түше менән ята биреберәк, таһыллы ишеүен күҙәтте.

«Емерелгән барка» мороно үҙенең ҡырыҫ ғорурлығы, йәшерен серҙәре менән яҡынайғандан-яҡынайҙы. Һалдың ағымы етеҙләнде. Ошо текә ярлы бөгөлдө Маликтың балыҡ

ҡармаҡлағанда, экскурсияға килгәндәрендә күргәне бар. Ололарҙан ишетеүенсә, был ҡаяға бәрелмәй-һуғылмай үтеү – ысын ир-егетлек!

Ни өсөн ҡаяның «Емерелгән барка» тип аталыуын да белә ул. 1920 йылдың яҙында Егәҙе суйын иретеү заводынан өс барkаға – баржа кеүегерәк, тик бәләкәй була улар – тейәп, Өфөгә суйын плитәләр оҙатҡандар. Ҡорал эшләүгә! Шуларҙың береһе ҡаяға бәрелеп емерелгән. Баркаларҙы оҙатып, һаҡлап барыусы өс ҡыҙылармеецты Еҙем үҙ ҡосағына алған... Йәйге эҫе көндәрҙә, йылға ныҡ һайыҡҡан саҡта, һыу төбөндә йәшел мүккә көпләнеп, ҡарайышып ятҡан дүрткел кәмәләр күренә.

Ағым һалды һаман ҡаяға табан тарта. Ҡаяның мейес ауыҙын хәтерләтеп өңөлөбөрәк торған өлөшөнән яралы йыртҡыс иңрәүенә оҡшаш геүләү тауышы килә. Маликка ҡыуышлыҡ бына-бына һалды йотор кеүек тойола башланы.

Ишкәктәр ныҒыраҡ шығырлай башланы. Атаһы, артҡа боролоп, берсә дәртләндерергә теләп, берсә йыуатҡандай: «Иш, Малик, ҡыйын булһа ла, түҙ! Ныҡ батырмай иш! Ҡалҡыт ишкәгеңде! Һыуға ҡолап ҡуйма!..» – тип ҡысҡырҙы.

Атаһының һүҙҙәре улына яҙа-йоҙа ғына барып етә, сөнки һыу шарлауы әллә ниндәй тауышты ла күмерлек шул.

Быуындары ҡатып етмәгән үҫмер, көс-хәл менән ағым ҡаяға табан ҡайырған ишкәкте ҡалҡытып, устары янһыуына, көсәнеүҙән баш әйләнеүгә ҡарамай, тештәрен ҡыҫып ишә ине. Һалдың алдағы быуындары аҡ күбектәр һибелеп-сәсрәп торған таштарға һыйынып, бөгөлә-һығыла алға үтте. Ләкин ни аралалыр артҡы быуын һыуҙан әҙ генә сығып торған таш моронға килеп ҡыҫталды, иң ситке бүрәнә ҡасандыр ҡаянан ҡубып төшкән бөкән таштың аръяғына уҡ менеп ятты. Һал ағыуҙан туҡтаны һәм әкренләп бата башланы.

– Иш, Малик! – тип ашыҡтырҙы Халиҡ ағай, бәләнең ниҙә икәнен аңламайынса. Шунан өҫтәп ҡуйҙы: – Ҡурҡма, улым, түлке ағып китмә!

Ни эшләргә? Ниңә былай килеп сыҡты һуң әле?.. Урта быуын ярға һыйына башлау менән, ишкәкте бер-ике мәртәбә һуғып, артҡы быуынды ҡаяны үҙенә табан бер аҙ шылдырырға кәрәк. Шул саҡта һал ҡаяға эләкмәйәсәк. Онотма, бер-ике генә ишеү ҙә етә, тигәйне бит атаһы. Ә Малик, аҙауынандыр инде, онотҡан бит. Ләкин хәҙер һуң инде... Әйе, хәл мөшкөл. Ни эшләргә?

«Һөйөклө улымдың ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуям түгелме?» – тип уйлап ҡуйҙы Халиҡ ағай. Үҙ ғүмерендә йөҙәрләгән

һал ағыҙған Халиҡ ағай хафаланып ҡына көтөлмәгән бәләнән ҡотолоу мөмкин түгеллеген дә яҡшы аңлай ине.

– Атай, балта кәрәк, ситке бүрәнәне... – Һалсы малайҙың ҡысҡырыуы һыу шарлауында йотолоп ҡалды.

Малик кинәт бер ныҡлы ҡарарға килде һәм, һеләүһен сослоғо менән һикереп, алғы быуынға уҡталды – балта шунда ине. Кире килгәндә йүгерә алманы, сөнки һал өҫтөнән аҡҡан һыу тубыҡҡа етә башлағайны инде. Ҡыйыу үҫмер етеҙ генә ситке бүрәнәнең бауҙарын сапҡылап ташланы. Ҡурҡыныс нисек тиҙ килһә, шулай тиҙ генә үтеп тә китте. Ләкин «Емерелгән барканың» геүләүе уларҙың ҡолағында оҙаҡ ҡына шаулап торғандай булды.

Халиҡ ағай улының тапҡырлығына, тәүәккәллегенә һоҡланып ҡуйҙы. Ҡайҙан белә? Кемдән күргән? Бик дөрөҫ эшләне бит!

Алатау һырттарында үҫкән һомғол ҡарағайҙар, хәйерле юл теләгәндәй, яҙғы елдәрҙә һелкенешеп ҡуйҙылар. Оҙаҡламай Һаллыбаш туғайы ла күренде. Яландан зәңгәр төтөн күтәрелә. Тимәк, бүтәндәр эш менән мәшғүл – һал бәйләйҙәр.

Халиҡ ағай, һаран ғына йылмайып, Маликка ҡарап, башын һелкеп ҡуйҙы. Йәнәһе, маладис, улым, һынатманың.

Еҙем һауаһы һулап туймаҫлыҡ ине был мәлдә...

1. Телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәрегеҙ: тексты тасуири итеп уҡығыҙ, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Ниндәй кәсеп ул һал ағыҙыу? Хәҙер һал ағыҙыу бармы? Ни өсөн?
3. Малик образына характеристика бирегеҙ.
4. Еҙем йылғаһы ҡайҙа ул? Уның тураһында белешмә төҙөп яҙығыҙ.
5. Хикәйәнең йөкмәткеһе буйынса изложение яҙығыҙ.

*Нияз Сәлимов*

## АҠ ЮЛ ҺИҢӘ!

Хушлашаһың мәктәп менән,
Күҙ йәштәрең таммаһын.
Барыр юлың саҡ башлана,
Аяҡтарың талмаһын.
Бар әле тауға үрләйһең,
Мең ҡаршылыҡ күрәһең.

Аҡыл көсөң, ҡулың менән
Бәхет тажын үрәһең.
Бар әле был донъяларҙа
Йондоҙондо асаһың,
Халҡың өсөн йәнең атып,
Ғаләмдәргә осаһың.
Бер ҡасан да быҫҡымаһын
Йөрәгеңдә ут-ҡуҙың.
Баҙап ҡалма ел-дауылда,
Аҡ юл һиңә, ул, ҡыҙым!

**1.** Шағир мәктәп тамамлаусы ул-ҡыҙҙарға бөтә атайҙар исеменән изге теләктәрен әйтә, аҡ юл теләй. 2-се, 3-сө строфаларҙың 2-се һәм 4-се юлдарына иғтибар итегеҙ. Авторҙың нимәне күҙ уңында тотҡанын асыҡлағыҙ.
**2.** 9-сы класты тамамлау менән, һеҙҙең дә алдарығыҙҙа киң юлдар асыла: кемдер мәктәптә уҡыуын дауам итә, кемдер төрлө уҡыу йорттарына инеп, һөнәр үҙләштерә башлаясаҡ. «Минең буласаҡ һөнәрем» темаһына ентекле һөйләшеү үткәрегеҙ, һайлаған һөнәрегеҙ тураһында һөйләгеҙ, хыялдарығыҙ менән уртаҡлашығыҙ.
**3.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, уның йөкмәткеһен, ата наказы итеп, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

## ҺҮҘЛЕК

### А

**абыныу** – һөрөнөү; спотыкаться
**аҙау, аҙап ҡалыу** – теряться, растеряться, не знать что делать
**аждаһа** – мифик зат; дракон (мифическое существо)
**айҡашыу** – схватка, борьба
**айыл** – подпруга
**алҡыш** – хуплау; одобрение, аплодисменты
**алыш** – көрәш; состязание, борьба
**ант** – клятва
**аңра** – глупый, тупой, бестолковый
**арғымаҡ** – аргамак (породистая верховая лошадь)
**арзан** – осһоҙ; дешёвый, недорогой
**арҡа** – һырт; хребет
**арыҡ** – ябыҡ, яшыҡ; тощий
**асман** – күк; небо
**аҫабалыҡ** – вотчинное право
**ат** – исем; имя
**атаҡлы** – известный, знаменитый
**ашҡаҙан** – желудок
**аяныс** – жалкий, плачевный

### Б

**баҙау** – аптырау, оялыу, тартыныу; смущаться, стесняться
**башбаштаҡлыҡ** – самоуправство
**беләҙек** – браслет
**бетеү** – документ, амулет. **Тарханлыҡ бетеүе** – документ о тарханстве
**биҫтә** – пригород
**боласы** – баш күтәреүсе; бунтовщик
**борғо** – горн
**бошоноу** – унывать, грустить
**бупылдау** – ворчать
**буҫтау** – туҡыма; сукно
**быҕау, быҕаулау** – оковы, кандалы, наручники
**быҫҡыу** – тлеть, слабо гореть
**бытый** – бытылдап һөйләшеү; лепетать
**бәке** – складной ножик

### В

**ваз кисеү** – төңөлөү; отвыкать
**вариҫ** – наследник
**вәғәҙә** – обещание
**вәкил** – представитель
**вәхши** – дикарь, варвар

### Г

**гиҙеү** – странствовать, путешествовать
**гөлләмә** – букет

**гәпләшеү** – разговоривать, беседовать
**гәүһәр** – бриллиант

### Ғ

**ғазап** – мучение, страдание, невзгоды
**ғаләм** – донъя; мир, вселенная, космос
**ғибрәт** – поучение, назидание. **Ғибрәт өсөн** – в назидание
**ғибәҙәт** – доға уҡыу; молебен, богослужение
**ғәжәп** – странно
**ғәйбәт** – сплетни
**ғәм** – ҡайғы; горе, печаль, хлопоты
**ғәмһеҙ** – беспечный
**ғәмәл** – эш. **Ғәмәлгә ашырыу** – претворить в жизнь
**ғәрлек** – оят; стыд

### Д

**даирә** – круг
**дана** – бөртөк; абруйлы, күренекле шәхес; штука; видная, уважаемая личность
**дарман** – сила, мощь
**дат** – тутыҡ, бысраҡ; ржавчина, грязь
**дауалау** – лечить
**даһи** – бөйөк (кеше); великий (человек), гений
**димләү** – уговаривать; сватать
**дөмөгөү** – сдохнуть, сгинуть
**дәһри** – Аллаға ышанмаусы; безбожник

### Е

**елем** – клей
**емтек, емнек** – падаль
**енәйәт** – преступление
**еп** – нить

### З

**зиндан** – төрмә; тюрьма
**зөбәржәт** – изумруд
**зәғиф, зәғифлек** – урод, уродство
**зәһәр** – яд, отрава

### И

**иғәнә** – ярҙам; пожертвование, помощь
**илаһи** – божественный
**именлек** – безопасность, благополучие, мир
**имләү** – ворожить, заговоривать
**имәнес** – ҡурҡыныс; жуткий, страшный
**инҡар итеү** – кире ҡағыу; отрицать, не принимать во внимание
**инсаф** – честность, скромность, благовоспитанность
**инселәү** – предназначать, завещать
**иңсә** – яурын; плечо
**ирәйтеү** – давать возможность чувствовать себя непринуждённо
**иҫнәү** – зевать
**иҫәр** – ахмаҡ; глупый, дурак
**ихата** – двор
**ишара** – намёк, жест, знак
**ишкәк** – весло
**ишәйеү** – күбәйеү; размножаться, увеличиваться
**ишәүәтһеҙ** – непривычно большой, страшный; неуклюжий

### Й

**йоғоу** – йәбешеү, һылашыу; приставать, заражаться
**йоҙроҡ** – кулак
**йола** – ғәҙәт; традиция
**йонсоу** – утомление, изнурение, мучение
**йүгән** – узда, уздечка

**йыла** – ильм (дерево)
**йылғыр** – быстрый, шустрый, ловкий
**йыhаз** – обстановка, мебель
**йәйғор** – радуга
**йәйпәк** – плоский, неглубокий
**йәмhеҙләшеү** – портить отношение (с кем-либо)
**йәмәғәт** – общество
**йәннәт** – ожмах; рай
**йәhәннәм** – тамуҡ; ад

## К

**керпек** – ресницы
**кибет** – лавка, ларёк, магазин
**кизе** – бумажная пряжа. **Кизе-мамыҡ туҡыма** – хлопчатобумажная ткань
**кикерек** – гребень, гребешок (у птиц)
**киндер** – тарма; конопля. **Киндер күлдәк** – холщёвая рубаха
**кинәнеү, кинәнес** – удовольствие, наслаждение
**кипсәлеү** – застревать, облегать
**кирелеү** – потягиваться
**киҫенте** – отрезок, лоскут (ткани)
**көйәнтә** – коромысло
**көсөк, көтөй** – щенок
**көсәнеү** – напрягаться, тужиться
**күкрәк** – грудь
**күкрәк hөтө** – материнское молоко
**күлдәк иҙеүе** – разрез (у ворота) рубахи или платья
**күлтә** – культя
**күндереү** – внушение
**күндәм** – тыңлаусан; податливый, послушный
**кәбән** – стог
**кәпәс** – бүрек; шапка
**кәшмәк** – плот

## Ҡ

**ҡабырсаҡ** – раковина, ракушка
**ҡаҙаныш** – достижение
**ҡалҡан** – щит
**ҡама** – выдра
**ҡамасау** – тотҡарлыҡ; препятствие, помеха
**ҡаңғырыу** – одуреть, отупеть (не зная что делать)
**ҡарасҡы** – чучело
**ҡарйығыу** – нәфрәтләнеү, асыуланыу; возненавидеть
**ҡарманыу** – шарить, искать на ощупь
**ҡасҡы, ҡасҡын** – беглец, дезертир
**ҡаш** – брови
**ҡашмау** – кашмау (женский головной убор у башкир)
**ҡая** – скала
**ҡаяу** – жало. **Ҡорт ҡаяуы** – жало пчелы
**ҡибла** – юг. Направление на Каабу, куда обращаются мусульмане во время молитвы
**ҡоҙа** – сват
**ҡондоҙ** – бобр
**ҡорғаҡhыу** – кибеү; пересыхать
**ҡөҙрәт** – көс, ҡеүәт; сила, мощь
**ҡуҙғалаҡ** – щавель
**ҡумырыҡ** – вымоина под берегом
**ҡуныс** – голенище
**ҡуртым** – аренда
**ҡыҙғаныс** – жалкий
**ҡыйлыҡ** – сүплек; свалка
**ҡын** – ножны
**ҡына** – буяу; хна (краска)
**ҡыпыс, ҡапыс (күҙ)** – глаза с припухлыми веками
**ҡырау** – заморозки
**ҡырпа** – белуга (рыба)

**ҡырталашыу** – упорно добиваться
**ҡыҫыр** – яловый, бесплодный, пустой
**ҡытлыҡ** – неурожай
**ҡытыҡлау** – щекотать
**ҡыуаҡ** – куст

### Л

**лайыҡлы** – достойный
**ләззәтләнеү** – получать удовольствие

### М

**мажара** – приключение
**матди** – материальный. **Матди байлыҡ** – материальные ценности
**матҡыу** – вцепляться
**мауығыу** – увлекаться, всецело отдаваться (чему-либо)
**махсус** – специальный
**маһайыу** – зазнайство, зазнаваться
**меҫкен** – жалкий, несчастный, убогий
**морон** – томшоҡ; морда
**мотлаҡ** – безусловный, непременный, обязательный
**мохтажлыҡ** – нужда, бедность
**мөғжизә** – чудо
**мөғәмәлә** – обращение, обхождение
**мөнәсәбәт** – отношение
**мөһөр** – мисәт; печать
**мөшкөл** – трудный, затруднительный
**муйын** – шея
**мыҡты** – коренастый
**мыҫҡыллау** – оскорблять, унижать, издеваться
**мәйет** – труп, покойник
**мәке** – прорубь
**мәмләкәт** – ил, дәүләт; страна
**мәрҫиә** – элегия, стихотворение, посвящённое чьей-либо памяти
**мәрхүм** – үлгән кеше; покойник
**мәхшәр** – столпотворение, суматоха

### Н

**нағышлау** – украшать
**нар** – бер үркәсле дөйә; одногорбый верблюд
**насип булыу** – выпасть на долю (чью-либо)
**некрут** – призывник
**ниәт** – желание, стремление
**ныҡыш** – настойчивый, упорный
**ныҡышыу** – настаивать, упорствовать
**нәжес** – бысраҡ, тиҙәк; грязь, навоз
**нәфсе** – чрезмерное желание

### О

**олон** – ствол (дерева)
**олоу** – выть
**онтау** – крошить, дробить, измельчить
**орғасы** – самка. **Орғасы быҙау** – тёлка
**отҡор** – сос, зирәк; сметливый
**ошаҡ** – донос; ябеда

### Ө

**өҙләгеү** – осложнение после болезни
**өзләү** – горловое пение
**өмә** – коллективная помощь
**өң** – нора, берлога
**өркөү** – внезапно испугаться, шарахнуться в сторону

### С

**сабата** – лапоть, лапти
**саған** – клён
**садә** – добродушный

**сапан** – чапан (вид халата)
**сарлау** – точить. **Балта сарлау** – точить топор
**сиҙәм** – целина
**сиҡан** – шешек; чирей
**сирҡаныс** – противно
**сихырсы** – колдун, волшебник, чародей
**сонтор** – ҡыҫҡаҡ, тоҡос; маленький, куцый
**сүкәйеү** – приседать
**сүл, сүллек** – пустыня
**сыбар** – пёстрый, разноцветный
**сыбыртҡы** – кнут
**сыҙамлы** – терпеливый, выдержанный
**сынйыр** – цепь
**сырамытыу** – находить сходство (с кем-либо)
**сыуаҡ (көн)** – ясный, погожий (день)
**сәйәсәт** – политика
**сәлдереү** – тащить, красть, воровать
**сәпәкәй итеү** – аплодировать
**сәсәк (ауырыу)** – оспа
**сәсәү** – поперхнуться, закашляться
**сәфәр** – путешествие

## Р

**ризыҡ, аҙыҡ-түлек** – пропитание

## Т

**таҙ** – паршивый, шелудивый
**таҡы-тоҡо** – мало, недостаточно
**талымһыҙ** – нетребовательный, неразборчивый
**танһыҡ** – желанный. **Танһыҡлау** – сильно хотеть (чего-либо)
**тартыныу** – чувствовать неловкость, стесняться
**тау йыуаһы** – горный лук
**тереклек** – живность
**төнәтмә** – настой, настойка
**туҡал** – комолый, безрогий
**тула ойоҡ** – суконные чулки
**тулғаҡ** – родовые схватки
**түбә** – подразделение рода и территория, занимаемая им
**түҙем, түҙемле** – выносливый
**түмәр** – чурбан
**тылмас** – тәржемәсе; толмач, переводчик
**тылсым** – волшебство
**тырнаҡ** – ногти (у человека), когти (у животных)
**тыу** – флаг, знамя
**тыу бейә** – яловая кобыла
**тәғәм** – пища, еда. **Тәғәм итеү** – есть, кушать
**тәйән** – гел; постоянно, всегда, всё время
**тәкмәсеү** – упасть перекувыркнувшись, полететь вверх тормашками
**тәкә** – самец мелкого рогатого скота. **Кәзә тәкәһе** – козёл
**тәсбих әйтеү** – благодарить Всевышнего
**тәте** – курок
**тәьҫирләнеү** – тулҡынланыу; расчувствоваться

## У

**ужым** – озимь. **Ужым арышы** – озимая рожь
**уймаҡ** – напёрсток
**ус** – ладонь
**уҫаҡ** – осина
**уҫлаптай** – здоровенный, очень большой, крупный (человек)
**ут** – боронғоса: үлән; трава. **Утлау** – үлән ашау; есть траву

## Ү

**үкереү** – рычать
**үкһеү** – плакать навзрыд

**үләкһә** – падаль, доходяга
**үпкәләү** – обижаться (на кого-либо)
**үрсем** – приплод
**үрт** – степной или лесной пожар
**үрәпсеү** – вставать на дыбы, дыбиться (о лошади)
**үс** – месть
**үт** – желчь

## Ф

**фажиғә** – трагедия, трагический случай
**фани донъя** – реальный (этот) мир, светский мир
**фараз** – предположение, гипотеза
**фетнәсе** – бола күтәреүсе; смутьян, бунтарь
**фиҙа** – жертва, самопожертвование
**фирүзә** – бирюза (поделочный полудрагоценный камень)
**фәҡир** – бедный

## Х

**хаттин ашыу** – саманан ашыу; перейти край допустимого, не знать меры
**хилаф** – противоречивый; против, вопреки
**хур ҡыҙы** – гурия, райская дева
**хушһыныу** – быть довольным
**хыял** – мечта
**хыялый** – сумасшедший, помешанный; мечтатель
**хәйлә** – хитрость, уловка

## Һ

**һабаҡ** – стебель
**һағайыу** – настораживаться
**һайман** – тимер кейем; кольчуга
**һал** – плот. **Өс быуынлы һал** – плот из трёх частей
**һалабаш** – луб (липы), лыко. **Һалабаш йүкәһе** – вымоченное лыко
**һаташыу** – бредить; ошибаться, сбиваться с толку
**һеләүһен** – рысь
**һемереү** – пить без передышки, не отрываясь
**һиңмай, ҫиңмай** – неадекватный, тупой
**һиҫкәнеү, тертләү, ҡурҡыу** – вздрогнуть, встрепенуться
**һомғол** – стройный, грациозный
**һөлөк** – пиявка
**һөрәнләү** – громко кричать, орать, окликать (кого-либо)
**һуғарыу** – орошать (землю), поить (скотину)
**һуғым** – скот, предназначенный на убой
**һуҡмаҡ** – тропинка
**һулыу** – вянуть
**һүгенеү** – ругательство
**һыҡтау** – страдать (от чего-либо)
**һыпы** – суфый; сдержанный, благочестивый
**һырғаҡ (көн)** – һыуыҡ, буранлы (көн); холодный, ветреный (день)
**һырҡыуат (сырхыуат)** – сыпь, чирей
**һыуһар, һуҫар** – куница
**һәтәү** – иҫһеҙ; несообразительный, недогадливый

## Ш

**шаҡарыу** – закручивать, выворачивать, скручивать
**шаҡшы** – поганый, мерзкий, гадкий

**шапырыныу** – хвастаться, бахваляться; бахвальство
**шелтә, шелтәләнеү** – выговор, замечание, порицание
**шифа** – исцеление, выздоровление
**шифалы** – целебный, полезный
**шойҡан** – влияние (на кого-либо)
**шөйлә** – гораздо, порядочно, довольно-таки
**шөһрәт** – слава, известность
**шуман** – волокуша из коры липы, плетеная корзина для высадки гуся, утки; корзина для вывозки навоза
**шура** – совет
**шыбаға** – жребий. **Шыбаға тотошоу** – проводить жеребьёвку
**шәйләү** – күреп ҡалыу; заметить
**шәлкем** – пучок, клок. **Шиғырҙар шәлкеме** – подборка стихов
**шәреҡ** – восток
**шәфҡәт** – сочувствие, сострадание, милосердие

## Ы

**ыҙғыш** – раздор, ссора
**ыҙма** – зимовка, зимовье; дом
**ылау** – обоз, подвода
**ыңғырашыу** – стонать
**ыржайыу** – скалиться, щериться
**ырылдау** – рычать (о зверях)
**ырым** – ышаныу; поверье
**ыу** – ағыу; яд
**ыуылдырыҡ** – икра

## Э

**эҙәрләү** – преследовать
**эйәк** – подбородок
**эйәләшеү** – өйрәнеү; привыкать
**эйәр ҡашағаһы** – седельная лука (перед седла)
**эсәк** – кишка
**эҫкәк** – щипцы, пинцет
**этлек** – яуызлыҡ; подлость

## Ә

**әкәмәт** – диво, чудо; мудрёный, странный; чудак
**әлһерәү** – обессилеть, изнемогать, утомляться
**әләм** – байраҡ; знамя
**әмәл** – сара; способ. **Әмәлен табыу** – найти способ
**әфәнде** – господин

## Ю

**юҡһыл** – ярлы; бедняк

## Я

**яҙмыш** – судьба
**яҙыҡ** – грех, проступок, ошибка
**яҡут** – яхонт (драгоценный камень). **Ҡыҙыл яҡут** – рубин. **Зәңгәр яҡут** – сапфир
**ял** – грива. **Аттың ялы** – грива лошади
**ялағайланыу** – подхалимничать, подлизываться
**ялбарыу** – упрашивать, умолять
**ялсы** – наёмный работник, батрак
**ямау** – заплатка
**яран** – друг, соратник, сподвижник
**яҫҡыныу** – пытаться хватать; загореться желанием
**яҫтаныу** – яҫтап (баш аҫтына һалып) ятыу; подложить под голову (что-либо)
**яҫтыҡ** – большая подушка

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### ТЕРЕ ШИШМӘЛӘР

*Р. Ғарипов.* Тел . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . 4
*Б. Бикбай.* Тере шишмәләр *(өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . 6
*Р. Мифтахов.* Мираҫ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 8
*Т. Ҡарамышева.* Һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 9
*И. Хәлимов.* Төнгө моң . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 11

### КЕНДЕГЕМДЕ КИҪКӘН ЕР

*Р. Мифтахов.* Күрҙем һине . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 12
Баҫым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 13
*К. Шафиҡова.* Тыуған яҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 14
*И. Абдуллин.* Үҙ яғыма ҡайтһам... . . . . . . . . . . . . . . 14
*Х. Туфан.* Ҡыр ҡаҙҙары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 15
*З. Вәлиди Туған.* Тыуған төйәгемдә *(«Хәтирәләр» китабы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 17
*М. Әбсәләмов.* Йомағужа тирәктәре . . . . . . . . . . . . . 19
*Д. Бүләков.* Барбос . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 25
Әҙәби төрҙәр тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . 28

### ТӨЙӘК БУЛҒАН ТЫУҒАН ЕР...

*Ф. Аҡбулатова.* Тәбиғәт беҙҙең ярҙамға мохтаж . . . . . . . . . 29
*А. Ғарифуллина.* Гөрләүек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 30
*З. Алтынбаева.* Балан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 31
Морфология. Һүҙ төркөмдәренең бүленешен ҡабатлау . . . . . . . . . 32
Экология . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 33
*Д. Шәрәфетдинов.* Йылға бағыры . . . . . . . . . . . . . . 34
*Ф. Ғазин.* «Ҡырау тейһен әйҙә...» . . . . . . . . . . . . . . 35
*М. Кәрим.* Айыу мажараһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 37

*Х. Ҡашҡаров*. Әбделхалиҡ олатай хәйләһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 41
*В. Ғүмәров*. Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үсемлектәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 43
*Р. Ҡаһир*. Алтын тамыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 48
*Ҡәҙим Аралбай* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 49
*Ҡ. Аралбай*. Янғантау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
Әҙәби жанр тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50

## ДАНЛЫ ТАРИХ

*Ә. Бейеш*. Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше *(әҫәрҙән өҙөктәр)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 52
*Шәйехзада Бабич* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 55
*Ш. Бабич*. Халҡым өсөн . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 56
*Б. Рафиҡов*. Һөйәнтуҙ фажиғәһе *(«Ҡараһаҡал» романы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 58
*Ғәлим Хисамов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 64
*Ғ. Хисамов*. Алдар менән Тәфтиләү *(«Өн һәм Һан» романы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 64
Роман тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 80

## РУХИ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

Урал батыр *(эпостан өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 82
Ҡылым *(ҡабатлау)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 84
*Ҡол Ғәли*. Йософ ҡиссаһы *(өҙөктәр)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
Башҡорт шәжәрәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 88
Юрматы ырыуы шәжәрәһе *(ҡыҫҡартып алынды)* . . . . . . . . . . . . 89
Синтаксис *(ҡабатлау)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 92
Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне . . . . . . . . . . . . . . . . . . 93
Һүҙ һәм һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
Һөйләм киҫәктәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
*С. Юлаев*. Яу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 98
Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 99
*М. Аҡмулла*. Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе *(өҙөктәр)* . . . . . . 100
*М. Аҡмулла*. Инсафлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 102
Бер составлы һөйләмдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 104

## ИР-ЕГЕТКӘЙ МЕНӘН АТ БАШЫ

*С. Ярмуллин*. Башҡорт аты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 106
Ҡушма һөйләм синтаксисы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 109
*Т. Ғиниәтуллин*. Буян *(«Башҡорт аты» хикәйәһе буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 110
*Р. Өмөтбаев*. Ғилмишәриф *(«Атлы башҡорт» повесы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116

Теҙмә ҡушма һөйләм . . . 124
*Ғәли Вәлиуллин* . . . 125
*Ғ. Вәлиуллин*. Ҡәлғә хужаһы һәм тотҡон . . . 126
Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр . . . 130
Повесть тураһында төшөнсә . . . 133

## БАЙРАМ, БАЙРАМ...

Байрамдарыбыҙ тарихынан . . . 134
*З. Әминев*. Башҡорт һабантуйы . . . 135
«Теҙмә ҡушма һөйләм» темаһы буйынса эштәр һәм һорауҙар . . 140
Эйәртеүле ҡушма һөйләм . . . 141
*Д. Мәһәҙиев*. Науруз байрамы . . . 143

## УРАЛЫМДА ҮҪКӘН, АЙ, ҠУРАЙЫМ...

*М. Ямалетдинов*. Мираҫ . . . 145
*Ш. Бабич*. Ҡурайҡайға . . . 147
*Ҡ. Аралбай*. Мәшһүр ҡурайсы . . . 148
*Рәшит Солтангәрәев* . . . 152
*Р. Солтангәрәев*. Ишмулла ҡурайсы . . . 152
Эйәрсән һөйләм төрҙәре . . . 157
Азат Айытҡолов . . . 159
Әҙәбиәт ғилеме тураһында төшөнсә . . . 162

## ВАТАНҒА ХЕҘМӘТ – ИЗГЕ БУРЫС

*Р. Мифтахов*. Ҡалҡан . . . 163
*Р. Назаров*. Һалдат . . . 164
*Р. Хисаметдинова*. Армияға китә малайҙар . . . 165
*М. Ямалетдинов*. Һалдат итеге . . . 166
*И. Кинйәбулатов*. Бородино . . . 167
*Ә. Үтәбай*. Һаҡмар аға бит *(«Байыҡ» әҫәре буйынса)* . . . 169
Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар . . . 188
*Нәжиб Асанбаев* . . . 189
*Н. Асанбаев*. Ҡыҙыл паша *(драманан өҙөк)* . . . 189

## АЙҒА ЛА ҒЫНА, КӨНГӘ ТИҢЛӘМӘЙЕМ...

*Ирек Кинйәбулатов* . . . 197
*И. Кинйәбулатов*. Һеҙҙең йәшәү менән . . . 197
*Р. Мифтахов*. Әсә . . . 198
*М. Воловик*. Ерәнсә сәсән ҡатын-ҡыҙ зирәклеге хаҡында *(В. Әхмәҙиев тәржемәһе)* . . . 199

*Р. Кинйәбаев*. Мин ҡайтырмын, әсәй! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 205
*Ә. Еники*. Матурлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 209
Умырзая (*риүәйәт*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 217

## МӘҢГЕЛЕК УТ

*Ә. Моратов*. Тере хәтер . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 218
*Р. Мифтахов*. Боҙло ҡуҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 219
*Назар Нәжми* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 219
*Н. Нәжми*. Ҡайтманығыҙ тыуған ерҙәргә . . . . . . . . . . . . . . . . 220
*М. Йәлил*. Ышанма . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 220
*А. Мәһәҙиев*. Еңеү менән ҡайтҡан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 221
Башҡорт телендә юҡлыҡты белдереү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 222
*Ж. Кейекбаев*. Зөбәй Үтәғолов *(очерктан өҙөк)* . . . . . . . . . . . . 224
*М. Кәрим*. Малайҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 228
*Ш. Янбаев*. Йәнекәй ҡарт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 233
Әҙәби процесс тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 241

## БЕРҘӘМЛЕК – МӘҢГЕ ҺАҠЛАР ХАЗИНА

Башҡортостан халыҡтары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 244
*Н. Нәжми*. «Дан иле, яҙ иле...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 245
*Хәким Ғиләжев* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 245
*Х. Ғиләжев*. Россияға йыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 246
*М. Ямалетдинов*. Думбыра . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 247
Иҫке ҡара урман (*татар халыҡ йыры*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . 248
*Ғ. Вәлиуллин*. Салауат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 249
*Сабир Шәрипов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 252
*С. Шәрипов*. Һалсылар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 252
*Н. Сәлимов*. Аҡ юл һиңә! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 255
Һүҙлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 257

*Учебное издание*

**Хажин** Вакил Исмагилович
**Вильданов** Ахат Ханнанович
**Аккужина** Фаурия Ахтямовна
**Карабаев** Мунир Иделович

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 9 класса
для изучения родного (башкирского) языка и литературы
в общеобразовательных организациях
с русским языком обучения**

*( на башкирском языке )*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Хажин** Вәкил Исмәғил улы
**Вилданов** Әхәт Ханнан улы
**Аҡҡужина** Фәүриә Әхтәм ҡыҙы
**Ҡарабаев** Мөнир Иҙел улы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмаларының
9-сы класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм
әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *А. В. Иҙелбәкова*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *З. М. Камалова, Л. Ф. Саниева*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.06.2017. Форматы 60×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. BTSchoolBook гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 16,75+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 18,25. Иҫәп-нәшер таб. 10,67+0,40 форз. Тиражы 11420 дана. Заказ 1.0145.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



Ә. Лотфуллин. «Көтөү».



В. Шульга. «Фронтҡа оҙатыу».

КИТАП